Рәшиҙә
Ғизәтуллина

ЙӘНШИШМӘ ҠАЙҘАН БАШЛАНА?

Рәшиҙә
Ғизәтуллина

ЙӘНШИШМӘ ҠАЙҘАН БАШЛАНА?

КИТАП
ӨФӨ • 2013

УДК 398
ББК 82
Ғ 31

Рецензенттар:

С. М. Сәлимова, педагогия фәндәре кандидаты, доцент
Н. И. Иванова, педагогия фәндәре кандидаты, доцент

Яуаплы мөхәррире:

П. П. Козлова, педагогия фәндәре докторы, профессор

Ғизәтуллина, Р. Х.

Ғ 31 Йәншишмә ҡайҙан башлана? / Р. Х. Ғизәтуллина. — Өфө: Китап, 2013. — 184 бит.

ISBN 978-5-295-05880-6

Был хеҙмәттә үҙ аллы эҙләнеүсе автор башҡорт мифологияһы, халыҡ ижады, тел ғилеме, кеше исемдәре һәм ер-һыу атамалары, ҡурай феномены тураһында үҙенең яңы фараздары менән уртаҡлаша.

УДК 398
ББК 82

ТП–170/13

ISBN 978-5-295-05880-6

© Ғизәтуллина Р. Х., 2013
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, 2013

АСЫЛА БАРҒАН СЕРҘӘР ДОНЪЯҺЫ

Китаптың «Рух – милләттең йәшәү көсө» тип аталған инеш һүҙ менән башланыуы һис кенә лә юҡҡа түгел. Лингводидактик әҙәбиәттә лә башҡорт тигән халыҡтың рухи булмыш-билдәләрен, донъяға ҡараш-офоҡтарын һ. б. ҡиммәттәрен барлап, күҙаллап сығыу зарурлығы күҙәтелә. Ғәҙәттә, башҡорт халҡының рухи билдәләре итеп түбәндәгеләрҙе күрһәтәләр: тәбиғәт балаһы; сал тарих төпкөлөндәге боронғо халыҡ; моңло халыҡ; тәүгеләрҙән булып тарпанды ҡулға эйәләштергән халыҡ; үҙенсәлекле ғөрөф-ғәҙәте, йола-ырымдары, әҙәп-әхлаҡ ҡанундары булған халыҡ; үҙ милли орнаменттарын ижад иткән халыҡ; мифлы-динле халыҡ; эпослы халыҡ; шәжәрәле халыҡ; үҙ милли символдарына эйә булған халыҡ; милли мәҙәниәте үҫешкән халыҡ; ватансыл халыҡ; энциклопедиялы милләт һ. б. Тимәк, «Йәншишмә ҡайҙан башлана?» тигән һорауға яуапты уҡыусы үҙ халҡының илаһи булмышынан, йәғни менталитетынан, рухи донъяһының ғәжәп киңлегенән, уның офоҡтарының сикһеҙлегенән, аҡыл-зиһен һәм уй-тойғо эшмәкәрлегенең иҫ киткес күп яҡлылығынан һәм тәрәнлелегенән, рухи ҡиммәттәренең кешелек донъяһы кимәлендәге юғарылылығынан эҙләй һәм таба ала. Халҡыбыҙҙың рухи сығанаҡтарын эҙләп табыу һәм килер быуындарға еткереү – һәммәбеҙҙең бурысы. Был юлы уның ҡабатланмаҫ өлгөһөн һәм уникаль тәжрибәһен үҙ аллы тикшеренеүсе автор – Рәшиҙә Хәй ҡыҙы Ғизәтуллина тәҡдим итә.

Танып-белеүҙәге күп төрлө аң формалары һәм уларға ярашлы донъя картиналары: мифология (донъяның мифо-поэтик картинаһы), дин (донъяның дини картинаһы), фәлсәфә (донъяның фәлсәфәүи картинаһы), сәнғәт (донъяның образлы һынландырыу картинаһы), фән-ғилем (донъяның фәнни картинаһы) һ. б. бөтәһе бергә донъяның концептуаль картинаһын

хасил итә. Донъяның концептуаль картинаһы иһә донъяның тел — был осраҡта башҡорт теле картинаһын нигеҙләй. Ғөмүмән, тел мөһабәт когнитив айсбергтың өҫкө, күҙгә күренгән өлөшө генә икән, ә уның аҫҡы, төпкө ҡатламын донъяның тел (тормош-көнкүреш, күҙәтеүсән) картинаһын нигеҙләгән донъяның концептуаль картинаһы аша тасуирлауға өлгәшеп була.

Когнитив лингвистиканың ошо күрһәтмә-концепцияларының иң мөһим өлөштәре «Йәншишмә ҡайҙан башлана?» хеҙмәтендә тикшеренеү объекты итеп алынып, ышандырырлыҡ дәрәжәлә иҫбат ителгән.

Хеҙмәттең үҙегенә донъя мәҙәниәттәре һәм дини-фәлсәфәүи тәғлимәттәренән боронғо һиндтарҙа таралған Будда ҡануниәте һәм мосолман донъяһына хас булған исламиәт һалынған. Әгәр Көньяҡ Уралдан күсеп киткән веда арийҙарының Будда диненә нигеҙ һалырлыҡ йога тәғлимәте кеүек ғилемдәре булған икән, уның эҙемтәләре әле лә бында, уларҙың ҡанҡәрҙәштәре башҡорттарҙа һаҡланмағанмы икән ни? Авторҙың был һорауын риторик һорау тип ҡабул итәбеҙ, ни өсөн тигәндә китаптың тейешле бүлектәрендә уға яуап бар. Автор был осраҡта Будда ҡануниәте, уның нигеҙендә ятҡан йога тәғлимәте, уларҙы ғәмәлләштереүсе санскрит теле хаҡында яҡшы хәбәрҙар. Йога тәғлимәтенең нигеҙен тәшкил иткән тәрән мәғәнәле концепцияға — кармаға ентекләп туҡталыуы ла алда әйткәнгә дәлил. «Йыһанға өлгәштереүсе ете ҡапҡа» бүлегендә, мәҫәлән, йога тәғлимәтенең асылы булған төп ете чакраның санскрит атамалары үҙҙәренең тәү мәғәнәһенән әллә ни тайпылмай һаҡланып, ҡулланылышта йөрөүҙәре асыҡлана һәм ул һис шикһеҙ иғтибарға лайыҡ. Әйткәндәй, йога һәм буддизм терминдарын башҡорт теленең рухи хазинаһынан юллау һәм барлауҙы бөтә хеҙмәттә осратырға була. Бер үк ваҡытта сағыштырыу-оҡшаштырыу өсөн Ҡөрьән Кәримдән уларҙың йөкмәткеһенә ярашлы сүрә һәм аят өлгөләре (уларҙың дөйөм һаны яҡынса етмеш) бирелә бара.

«Урал батыр» эпосында йога тәғлимәте» тип исемләнгән бүлектә йога тәғлимәтенең күтәп алынған конкрет сағылышы тикшерелә. Башҡорт халҡының бөтөн донъяға билдәле атаҡлы эпосының береһе «Урал батыр» хаҡында әҙәбиәт бихисап, әммә әйтеләһе һүҙҙәр алда әле. Әйткәндәй, «Ватандаш» журналының 2013 йылғы 1–5-се һандарында «Оло «Урал

батыр» — «Урал батыр» ҡобайырының тулы, ҙур варианты баҫылып сыҡты, ә был уның буйынса тикшеренеүҙәрҙең тематикаһы ла, проблематикаһы ла тағы ла киңәйәсәк тигәнде аңлата. «Йәншишмә ҡайҙан башлана?» китабындағы «Урал батыр» эпосын йога тәғлимәте күҙлегенән сығып тикшереү, һис шикһеҙ, яңылыҡ булараҡ баһалана.

«Урал батыр» эпосы сюжеттары Ҡөрьән аяттарында» тигән бүлек үҙенән алдағыһының логик дауамы ла һәм йәнәшә үҫтерелеше лә. Хеҙмәттең авторы был юлы халҡыбыҙҙың иң боронғо рухи ҡомартҡыһындағы һүрәтләүҙәрҙе бөтә донъя мәҙәниәте һәм мәғрифәтенә бик ҙур йоғонто яһаған, тиңдәше булмаған әҫәрҙәге сүрә һәм аяттар менән уртаҡлыҡтарын табыу-юллауҙы маҡсат итеп ҡуя һәм шуға ирешә лә. Ғәжәп хәл бит: бер яҡтан, башҡорт халҡының бөтә донъяға билдәле атаҡлы эпосының береһе – «Урал батыр» һәм, икенсе яҡтан, донъялағы өс оло диндең береһенең нигеҙен тәшкил иткән, мосолмандарҙың иң ҡәҙерле, иң Изге китабы — Ҡөрьән Кәрим. Эпосыбыҙҙың кешелек донъяһы өсөн уртаҡ рухи хазина икәнен үҙебеҙ генә танып-белеү етмәй, ә уны башҡаларға танытыу ҙа мөҡәддәс бурыс! Иң боронғоларҙан һаналған даосизм, Будда диненең нигеҙен тәшкил иткән йога тәғлимәте тураһында мәғлүмәт туплаған, башҡа донъяуи диндәрҙең Изге китаптары Әт-Тәүрат, Әз-Зәбур, Әл-Инжил, Ҡөрьән Кәрим китаптарына инерҙәй тасуирлауҙарҙы үҙ эсенә алған «Урал батыр» эпосының, ысынлап та, был йәһәттән дә тамырҙары бик тәрән һәм Ер йөҙөндәге барса халыҡтар өсөн дөйөм һәм уртаҡ.

Хеҙмәттә халыҡ ижадының шулай уҡ боронғоларҙан һаналған төрө — мәҡәл һәм әйтемдәрҙәге (паремия) йөкмәткенең йога тәғлимәтенә ниндәй кимәлдә тап килеү-килмәүе йәһәтенән күҙәтеүҙәр иғтибар үҙәгендә булырлыҡ. Башҡорт халыҡ мәҡәл һәм әйтемдәрен ошо юҫыҡта бер ниндәй ҡыйынлыҡһыҙ һәм ҡаршылыҡһыҙ йога тәғлимәтенең төп принциптарына ярашлы (был яңыса төркөмләү) төркөмсәләп була: «Донъя — алмаш», «Донъя — алдаҡ», «Донъя – ғазап», «Оҡшаш оҡшағанын табыр», «Сәбәбенә күрә — эҙемтәһе».

Хеҙмәттең киң тарихи, этнолингвомәҙәни контекста яҙылған бер бүлеген автор «Ҡурайы юҡтың өнө юҡ, өнө юҡтың көнө юҡ» тип атаған. Рәшит Шәкүр әйтмешләй, «әммә бына нисәмә йөҙ, ә бәлки мең йылдар буйы инде ҡурай беҙҙең

аңыбыҙға ниндәйҙер тростник йәки аканитум экселсис булып түгел, ә мөғжизәле бер моң ҡоралы, кешенең йәнен-йөрәген арбаусы тылсым, уй-тойғоларҙы күктәргә күтәргән, йәйғорҙай балҡытҡан, йәшәүгә, көрәшкә, еңеүгә өндәгән мәңгелек бер ауаз булып яңғырай... Тәбиғәт бөйөк... Таҡыя башлы ҡурай үләнен дә шул тәбиғәт бөйөк оҫталарса, даһиҙарса ижад иткән. Әммә шул ҡурай көпшәһенең донъяны таң ҡалдырырлыҡ үҙенсәлеген асыу үҙе генә лә бер бөйөклөк түгелме ни!» Быныһы бер булһа, бүлектән аңлашыуынса, мөғжизәле тамырҙаш һүҙ-концепттарҙың (бихисап уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәрҙең) үҙәгендә тора ҡурай атамаһы. Ысынлап та, ҡурай — башҡорт халҡының иң боронғо дәүерҙәрҙән килеп еткән моң ҡоралы ғына түгел, уны «Урал батыр» эпосы менән донъя мәҙәниәтенә таныттҡан рухи юлдашы ла булып сыға.

Китап авторы Рәшиҙә Хәй ҡыҙының хөрмәтле милләттәштәренә әйтер һүҙе өмөтлө: «Урал батыр» эпосында Йәншишмә тип кодҡа һалынған уртаҡ рухи байлығыбыҙ булған, тик әлегәсә йәшенеп, быуылып ҡына ятҡан шул инештең саф тере һыуын йырып, ағыҙышып ебәреүҙә, йәғни бөтөн тәғлимәттең әле беҙ аңлап бөтмәгән мәғәнәһенә, асылмаған серҙәренә төшөнөү өсөн, бәләкәй генә өлөшөбөҙҙө индерә алһаҡ, алған белемдәребеҙ, туплаған тормош тәжрибәбеҙ, кеше булып йәшәүебеҙ аҡланыр ине». Боронғо һиндтарҙан шундай һүҙ ҡалған: Anataparam kila uabdauastram. Уның мәғәнәһе — «Тел тураһындағы фәндең иге-сиге юҡ». Башҡорт халҡының рух һәм зиһенен аңларға теләгән уҡыусылары буларак, авторҙың үҙенә лә иге-сиге булмаған башҡорт ғилемендәге яйлап асыла барған мөғжизәле серҙәрҙе артабан да асыуын дауам итеүен теләп ҡалайыҡ.

Ғ. Ғ. Ҡаһарманов, филология фәндәре кандидаты

1. ИНЕШ ҺҮҘ

РУХ – МИЛЛӘТТЕҢ ЙӘШӘҮ КӨСӨ

«Ул бойороғо менән ҡолдарынан теләгән берәүгә фәрештәләр менән рух индерә».

«Ән-Нәхл» («Бал ҡорттары») сүрәһе, 16:2

«Халыҡтың рухы ни тиклем бай, аңы юғары икән, илдең ҡеүәте лә шул тиклем көслөрәк була» тигән аҡыллы фекер менән килешмәй булмай. Ғөмүмән, һуңғы йылдарҙа «рух», «рухлы», «рухи», «рухиәт» тигән һүҙҙәр төрлө даирәләрҙә бик йыш ҡулланыла һәм улар иғтибар үҙәгендә. Ә нимә һуң ул рух? Кем ул рухлы кеше? Ниндәй тәрбиә ул рухи тәрбиә? Ҡайҙа ул рухи донъя тигәндәре? Рух азатлығы нимәлә? Милләттең йәшәү көсө сығанаҡтарын өйрәнеүсе алдынғы ҡарашлы йәмғәт эшмәкәрҙәре, ғалимдарҙан башлап, дин әһелдәре, мәктәп уҡытыусыларына тиклем, был төшөнсәләргә ҡарата үҙҙәренең ҡараштарын матбуғат биттәрендә, зәңгәр экрандарҙа даими белдерә килеүҙәре бик ваҡытлы һәм әһәмиәтле, әлбиттә. «Күмәкләгән яу ҡайтарған» тигән фекерҙән сығып, беҙ ҙә ошо өлкәгә үҙебеҙҙең өлөшөбөҙҙө индерергә ҡыйыулыҡ иттек. Быны өсөн халыҡ ижадының иң боронғоларҙан һаналған төрҙәренә, ер-һыу атамалары тарихына, кеше исемдәренә, ҡурай феноменына башҡа күҙлектән байҡау яһалды, бәлки, сәйерерәк тойолорҙай фекерҙәр тәҡдим ителде.

Башҡорттарҙың исламғаса булған осорҙа, уларҙың әруахтар аша тәңрегә табыныуы билдәле. Иудаизмда «руах» донъяны барлыҡҡа килтереүсе Илаһтың һулышы, тыны мәғәнәһендә ҡулланыла. Христиандарҙың «дух», «воздух», «духовность», «одухотворенность» тигән һүҙҙәр теҙмәһе лә осраҡлы түгел.

Беҙҙең эраға тиклемге осорҙарҙа Көньяҡ Уралдан күсеп китеүсе һинд-иран телле арий ҡәбиләләре тыуҙырған Буддизм динендә лә «прана» – Йыһандан һулаған һауа – аңды уятыусы, күтәреүсе, хәрәкәткә килтереүсе көс һанала. Тимәк, этимология йәһәтенән «рух» – күп халыҡтар мәҙәниәте өсөн уртаҡ берәмек. Кешелек донъяһының барлыҡҡа килгән тәү осоронда дөйөм мәғәнәгә эйә булып, дәүерҙәр үтеү менән, тармаҡланып, фономорфологик үҙгәрештәр генә кисергән һүҙ булып сыға. Шуға күрә лә был һүҙҙең тәүге мәғәнәһе – дини ҡарашса, кеше һәм башҡа йән эйәләрен мәңге тере итә торған үлемһеҙ башланғыс, йәғни кешене юғарыға, бөйөклөккә әйҙәүсе көсҡеүәт.

Фәйләсүфтәрҙең аныҡлауынса, материалистик фәлсәфәлә «рух» – юғары үҫеш кимәлендәге матдәнең үҙенә генә хас сифаты булған аң-фекер.

Идеалистик фәлсәфәлә «рух»ты бөтә нәмәнең, күренештәрҙең нигеҙендә ятҡан матди булмаған башланғыс тип атайҙар. Рух – беренсел, матдә икенсел тигән идеалистик ҡарашты, динде инҡар иткән йәмғиәттә йәшәп, ниндәй көрсөккә килеп терәлгәнебеҙҙе үҙебеҙ ҙә беләбеҙ. Матди һәм рухи байлыҡҡа ынтылыуҙың һөҙөмтәһе тураһында замандашыбыҙ, Һиндостандың аҡыл эйәһе Бхагаван Шри Раджништың бер риүәйәте иҫкә төшә. «Әгәр матди байлыҡ символы – алтын тәңкә ҡулығыҙҙа саҡта, усығыҙҙы аҫҡа ҡаратып асҡан килеш, уны төшөрөп ебәреүҙән, юғалтыуҙан һаҡлай алыр инегеҙме? Шул уҡ тәңкәне тотҡан усығыҙҙы өҫкә ҡарай асһағыҙ, һеҙҙең байлығығыҙға юғарынан берәй көс янаймы?»

Был ябай миҫал нимәгә ишаралай һуң? Донъя малы артынан ҡыуған әҙәмдең теләк-ниәттәре тәмле ашап-эсеү, төҙәнеү-биҙәнеү, кәйеф-сафа ҡороу кеүек ихтыяждарҙы ҡәнәғәтләндереү менән сикләнә бара. Фәҡәт ошо күрһәткестәр буйынса ул башҡаларҙан өҫтөнлөк алырға ынтыла. Байлығынан яҙыу ҡурҡынысы уны тыныcһыҙға, һаранға, уҫалға, ваҡсылға әйләндерә. Нәфсеһе артҡан һайын, кешеләргә ышанмаусанлыҡ сифаты ла үҫеп, йәмғиәттә йәшәп тә «айырымлыҡ, яңғыҙлыҡ» сиренә юлығыр ундай бәндә. Был – бөгөнгө заманға хас күренеш, үкенескә күрә. Замана сетерекле, әлбиттә, әммә ләкин кире йоғонто яһаусы телевидение, радио, гәзит-журналдарҙан туҡтауһыҙ ағып торған «матдилаштырыусы» мәғлүмәт ҡойононан ҡурсаларлыҡ көс нимәлә һуң?

Баяғы алтын тәңкә тотҡан усты өҫкә ҡаратып асыу – аҡыллыға ишара. Матди байлыҡҡа эйә булып та, сама белгән, кешелектең рухи ҡаҙаныштарын үҙләштерергә ынтылған кеше генә үҙендә алсаҡлыҡ, ярҙамсыллыҡ, мәрхәмәтлелек, шәфҡәтлелек, киң күңеллелек кеүек сифаттарҙы үҫтерә ала. Заманалар күпме генә алмашынһа ла, ундай кешеләр булған һәм бар.

Рух һүҙенең киләһе мәғәнәһе: ул – кешенең эске донъяһы, уй-тойғоһо. Был йәһәттән беҙ психология тигән өлкәгә яҡынаябыҙ, буғай. Кешенең эске донъяһы, тойғо-хыялдары – бөтмәҫ-төкәнмәҫ киң һәм серле донъя, һәм ул – һәр кемдең үҙе генә хужа булыр берҙән-бер урын. Кешенең аң кимәле, әхлағы, һәләтенә ҡарап, ул да, Йыһандың үҙе кеүек, сикһеҙ һәм бай – шиғриәт, сағыу төҫтәр, йыр-моң, ғилем тыуҙыра торған ижад донъяһы булыуы мөмкин. Бындай байлыҡҡа эйә булғандар уны үҙенең эске донъяһында йәшереп, бикләп тота алмай, киреһенсә, кешелек, халыҡ өсөн әҫәрҙәр тыуҙырып, донъя мәҙәниәтен байыта.

Бөтә кеше лә бөйөк булып бөтмәй, ләкин һәр кемдең күңел донъяһы иғтибарға лайыҡ, ҡурсалауға мохтаж. Уны кәмһетеү, һаҡһыҙ һәм тупаҫ ҡағылыу, баҫым яһау – әҙәпһеҙлек, әхлаҡһыҙлыҡ ҡына түгел, вәхшилек тә.

Фекер иреклеге, выждан азатлығы өсөн эҙәрлекләү халыҡ-ара кимәлдә ҡабул ителгән кеше һәм граждандлыҡ хоҡуҡтарын яҡлаусы килешеү һәм декларацияларҙа тыйылған күренеш. Хоҡуҡи дәүләт булараҡ, Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһы Конституцияларында ла рух азатлығы яҡлау тапҡан. Был – заман талабы.

Хәҙер инде аңлатмалы һүҙлектән сығып, рух төшөнсәһенең тағы бер үҙенсәлеген асыҡлайыҡ. Рух – кешенең эске хәле, күңел күтәренкелеген биреүсе дәрт, көс. Камиллыҡҡа ынтылған шәхескә был йәһәттән бер ниндәй ҙә сикләү, тыйыу юҡ. Халҡыбыҙҙың рухи сығанаҡтарын эҙләп табыу, тергеҙеү, киләсәк быуындарға еткереүҙә барыбыҙға ла эш етерлек. Был көс-ҡеүәтте, әлбиттә, беҙ үҙ тамырҙарыбыҙ – халҡыбыҙ меңәр йылдар туплаған аҡыл-хазина һандығы булған туған тел, йыр-моңдарыбыҙ, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ аша алабыҙ, быуындан быуынға тапшырабыҙ. XXI быуат башҡортон һәр яҡлап үҫешкән, юғары рухлы итеп тәрбиәләүҙә Хөкүмәт, Мәғариф министрлығы, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы, алдынғы ҡарашлы шәхестәребеҙ тәҡдим иткән күп саралар араһында был хеҙмәт тә бер урын алһа ине.

2. ТӨП ӨЛӨШ

2.1. БУЙ ЕТМӘГӘН ЕРГӘ – УЙ, ҠОРАЛ ЕТМӘГӘН ЕРГӘ ХЫЯЛ ЕТӘ

XX быуаттың 90-сы йылдар аҙағында башҡорт теленә дәүләт теле статусы бирелгәс, беҙҙең алдыбыҙға башҡорт теленең ҡулланыу даирәһен киңәйтеү бурысы килеп баҫты. «Әле үҙебеҙҙең туған телебеҙҙе тулыһынса белеп файҙаланмайбыҙ, уның сикһеҙ бай һүҙлек запасы һандыҡ төбөндә ятҡан хазинаны хәтерләтә. Алтын-көмөш йәки аҫылташ һандыҡ төбөндә быуаттар буйы ятһа ла, тутыҡмай ҙа, иҫкермәй ҙә. Ҡулланылмаған тел байлығы иһә, ҡиммәтле булыуы менән хазинаға оҡшаһа ла, икенсе бер үҙенсәлеге менән унан ныҡ айырыла. Һандыҡта ятҡан алтын-көмөш оҙаҡ йылдар буйына үҙенең төп сифаттарын юғалтмаһа, ҡиммәтен һаҡлаһа, ижтимағи тормошта, көндәлек һөйләштә киң ҡулланыу тапмаған тел үҫешә, камиллаша һәм байый алмай, киреһенсә, ярлылана, ҡатып ҡала, уның ҡулланылыш даирәһе тарая. Бындай телдең, әгәр уға артабан үҫеү, байытыу өсөн шарттар булдырылмаһа һәм дәүләт яҡлауына алынмаһа, аҡрынлап бөтөүгә табан юл алыуы, үҙенең төп ролен – кешеләрҙең аңлашыу ҡоралы булыу ролен юғалтыуы ихтимал», – тип яҙып сыҡты был турала БР-ҙың Хөкүмәт ҡарамағындағы Терминология комиссияһы ағзаһы Абдулла Исмәғилев[1].

Һуңғы йылдарҙа республикабыҙҙың төрлө районедарында алып барылған археологик эҙләнеүҙәр нигеҙендә Көньяҡ Уралда бик боронғо дәүерҙәрҙә һинд-герман телдәр ғаиләһенә ҡараған иран-арий ҡәбиләләре йәшәүе иҫбат ителде. Был ҡәбиләләрҙең йәшәү рәүеше, йолалары һәм ғөрөф-ғәҙәттәренең үтәлеше, боронғо Һиндостанда дини-фәлсәфәүи ихтыяждарға хеҙмәт итеүсе әҙәби тел – **санскрит** теленең башҡорт теле менән уртаҡлыҡтары булыуы тураһында фәнни мәғлүмәттәр көн битенә сыҡты. Бигерәк тә үҙенең ғилми хеҙмәттәре менән тарихсы-ғалим һәм күп телдәр белгесе Салауат Ғәләмов ошо өлкәгә кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр менән асыҡлыҡ индерҙе. Уның китаптары йәмғиәттең төрлө ҡатламдары араһында ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра һәм өйрәнелә.

---

[1] Башҡортостан. 2006. № 171.

Донъя мәҙәниәте, диндәр тарихынан билдәле булыуынса, Һиндостанға Куру тип йөрөтөлгән төньяҡ континенттан күсеп барған арийҙар үҙҙәренең йога тигән тәғлимәтен дә алып килгән. Ҡояшҡа, утҡа табыныусы был ҡәбиләләр араһынан саҡтар ырыуы ла унда юғары мәҙәниәтле үҙ дәүләтен булдыра. Ошо ырыуҙың халҡын бик яратып хәстәрләгән һәм үҫтергән, улар тарафынан үҙе лә ҙур ихтирам яулаған Шуддходана батшаның ғаиләһендә тыумыштан иҫ китмәле һәләтле Сиддхартха Гаутама тигән аҡыл эйәһе үҫә. Ул арий ата-бабаларының дине – юғары кимәлдә ҡатмарлы булған **йога тәғлимәтен** урындағы ҡәбиләләргә, күп ҡатлам кешеләренә аңлайышлы булһын өсөн, **пали** теленә тәржемә итә, яраҡлаштыра. Ул атаһының сикһеҙ күп матди байлыҡтарынан, батшалыҡ итеүҙән, фани донъяның башҡа шатлыҡтарынан баш тартып, рухи байлыҡҡа өлгәшеүҙе генә маҡсат итеп ҡуя. Ошоноң менән саҡтар ырыуының вариҫы Сиддхартха Гаутама яңы донъяуи дин – буддизмға нигеҙ һала. Ә арийҙарҙың теле, саҡтар дәүләте ҡыйратылыу сәбәпле, яйлап был тарафтарҙа онотола, латин менән бергә үле телдәр иҫәбенә керә.

Әгәр Уралдан күсеп китеүсе веда арийҙарының Буддизм диненә нигеҙ һалырлыҡ йога тәғлимәте булған икән, уның ярсыҡтары әле лә бында, уларҙың ҡан туғандары башҡорттарҙа, һаҡланмағанмы икән ни? Улай булғас, һандыҡта ятҡан алтын-көмөш оҙаҡ йылдар буйына үҙенең төп сифаттарын юғалтмай, ҡиммәтен һаҡлаған кеүек, тел төбөндә ниҙәр ятҡанын тикшереп ҡарайыҡ.

Башҡорт теленең һүҙлегендә ошондай аңлатма бирелә: **йога**[2] (рус / санскрит) – үҙ-үҙеңде рухи, психик һәм физик яҡтан тота белеү ысулдары, юлдары тураһында боронғо һиндтарҙа таралған дини-фәлсәфәүи тәғлимәт. Билдәле булыуынса, йогтарҙың төп маҡсаты – йәшәүҙең нигеҙе, шарты булған йән,

---

[2] Санскрит: yoga — 1) упряжка лошадей; 2) сбруя; 3) применение; 4) средство, прием (уловка); 5) волшебство; 6) дело, предприятие; 7) связь, взаимообусловленность с чем-л.; 8) приобретение, выигрыш; 9) работа, усердие, прилежание; 10) сосредоточение мыслей, глубокое размышление, созерцание; 11) *грам.* согласование, управление; 12) название одной из шести ортодоксальных систем индийской философии, основанной Патанджали во II в. до н. э. йога считается представительницей индийского мистицизма, так как все внимание сосредотачивает на различных действиях и упражнениях, посредством которых будто бы приобретаются сверхъестественные силы и способности для слияния с божеством или высшим духом. Система йоги считается родственницей санкхья, чьи теоретические положения она принимает; 13) *астр.* созвездие; 14) *мат.* сумма, сложение.

энергия ҡеүәтен уятып, бер нөктәгә туплап, ҡоймостан (ҡуҙ һөйәге) алып, ете рухи үҙәк – чакраларҙы таҙартыу юлы аша, баш түбәһенә – мейегә тиклем күтәреү һәм Йыһан энергияһына тоташтырып, байытыу, шул энергия иҫәбенә рухыңды күтәренке тотоу. Беҙҙең телебеҙҙәге «йоғоу», «йоғонто», «йоғонос» кеүек тамырҙаш һүҙҙәрҙең бар мәғәнәһе лә ошоға тап килеп тора: «аңға һеңеү», «күңелгә ятыу», «файҙалы булып, үҙләшеү», «тәьҫирле булыу» һ. б., йәғни кеше аңының абсолют аңға тоташыуы.

Йоганың төп маҡсаты – кешенең рухи кимәлен, аңын үҫтереү булһа, йөкмәткеһе – бөтә ҡылған эштәрең өсөн Йыһан алдында **карма законы** буйынса яуап тотоп, хөкөм ителеүеңде белергә өйрәтеү. Ябайлаштырып әйткәндә: «ниндәй сәбәп ҡылғанһың, шуның һөҙөмтәһен күрерһең». Тереклек донъяһында көн күреүселәрҙән бер генә йән эйәһе лә был ҡанундан азат түгел. Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадынан бик күп әйтемдәр һәм мәҡәлдәрҙең мәғәнәһе ошо ҡанунға тап килеүе иғтибарға лайыҡ: «Ни сәсһәң – шуны урырһың», «Арпа сәсеп, бойҙай үҫмәҫ», «Орлоғона күрә емеше», «Ел иҫмәй, япраҡ һелкенмәй», «Утһыҙ төтөн булмай», «Кешегә соҡор ҡаҙыма – үҙең төшәрһең» һ. б. Үҙ телебеҙҙәге **«ҡармаҡ»**, **«ҡармау»** һүҙҙәренең дә кемдеңдер, аңһыҙлығы сәбәпле, йә уҫал ниәттән ҡылған ҡылығы өсөн кире ысҡынмаҫлыҡ булып ауға эләгеп, язаға тарыу осрағы менән бәйле: мәҫәлән, балыҡ, аҙыҡҡа ымһынып, ҡармаҡҡа эләгә. Кешенең үҙен дә бындай хәлдәр тормошта һағалап ҡына тора:

Боғаҙаҡҡай күлгә ҡармаҡ һалдым,
Ҡармағыма сабаҡ ҡапманы.
Сабаҡ ҡына кеүек килеп ҡаптым,
Ҡотолоу юлҡайҙарын тапманым.

Башҡорт халыҡ йыры

Шулай булғас, ошо ябай миҫалдар аша ата-бабаларыбыҙҙың исламғаса дини-фәлсәфәүи белемдәре, этик нормалары тураһында күҙаллау бер ҙә ҡатмарлылыҡ тыуҙырмай: ул йога тәғлимәте булып сыға!

Хәҙер Көньяҡ Уралды төйәк иткән *арий телле куру ҡәбиләләренең* рухи мираҫы – йога тәғлимәте нигеҙендә барлыҡҡа килгән Буддизм диненең нигеҙендә ятыусы тәрән мәғәнәле

концепция – **кармаға** ентекләберәк туҡталайыҡ. Шул уҡ ваҡытта йога һәм буддизмдың терминдарын башҡорт теленең һүҙ байлығынан эҙләүҙе дауам итәйек.

Карма түбәндәге ҡанундарҙы үҙ эсенә ала:

– йән **сансарала** (алты өлөштән торған матди донъя тәгәрмәсе) күп тапҡырҙар, бер туҡтауһыҙ яңынан-яңы рәүештә тыуа килә (реинкарнация), һәм был тыуымдарҙың тәртибе карма аша хәл ителә;

– ниндәй генә эш-хәл ҡылһаң да, һөҙөмтәһе бары тик үҙеңә кире әйләнеп ҡайта;

– карманды юҡҡа сығарыуға, унан ирекле булыуға тик изге ғәмәлдәр ҡылыуға нигеҙләнгән эволюция юлы менән килергә мөмкин. Был осраҡта йән юғары аң тыуҙырған донъяла камил, ысын, тулы азатлыҡ, бәхет һәм шатлыҡҡа өлгәшә.

Шулай итеп, карма законынан азат булыуҙы үҙмаҡсат итеп ҡуйған йога тәғлимәте һәм уның нигеҙендә барлыҡҡа килгән буддизм йәнде фани донъяның алты ҡаттан торған ҡуласаһынан, йәғни **сансаранан**[3], ысҡынырға әҙерләй. Иғтибар итегеҙ: һүҙҙең беренсе өлөшө **«сан»** — башҡорт телендә **«ысын, сын»** һүҙе менән тамырҙаш, ә **«сар»** — әйләндереп, балта, бысаҡ үткерләй торған түңәрәк ҡайраҡташ. **«Сарлау»** — ҡаты, тупаҫ әйберҙәрҙе үткерләү, ҡырлау, шымартыу, ялтыратыу, таҙартыу.

Үҙ гонаһтары, ҡылған хаталары өсөн ысынбарлыҡта, йәки сансарала, ҡат-ҡат тыуып, уның ғазаптары, михнәттәре аша үтеп, тәүбәгә килгән йән таҙарына, тормош тәжрибәһенән арынып, үҙенең тәүбулмышына – азатлыҡҡа, бөйөклөккә ынтыла. Йогала бер сәбәптең ниндәй әҙемтәгә илтеүе киләһе хәл-ваҡиғаға сәбәп тыуҙыра, һәм был өҙөлмәҫ сылбыр сансара тигән матди донъя ҡуласаһын барлыҡҡа килтерә. Беҙҙең халыҡта был турала «Донъя – ҡуласа, әйләнә лә бер баҫа» тигән әйтем бар.

Түңәрәктең үҙ радиусы ярҙамында алты өлөшкә бүленеүе, һыу парҙарының туңған саҡта алты саталы ҡар бөртөктәренә әйләнеүе, бал ҡортоноң төҙөк алты мөйөшлө ояларҙан торған кәрәҙ ҡойоуы ысынбарлыҡтың, йәғни сансараның моделе түгелме ни? Ни өсөн башҡорт халҡының ете һанын изгеләштереүен тойомларға була был миҫалдарҙан: «Донъя – ҡуласа, әйләнә лә бер баҫа» тәртибенә буйһонған фани донъяның сынйырлы ирекһеҙлегенән, йәғни алты ҡатлы сансаранан ысҡынып, күктең етенсе ҡатына, яҡтылыҡ, азатлыҡ, камиллыҡ донъяһы – юғары аңға тоташыуҙы күҙ уңында тотоу был. Аҫалы балаҫтарҙа, таҫтамалдарҙа, шаршауҙарҙа ҡулланылған алты мөйөшлө төҙөк биҙәктәр ҙә – фани донъяның моделе. Шуға күрә лә улар быуындан быуынға үҙгәртеүһеҙ күсерелә, тапшырыла килгән.

---

[3] Санскрит: sancara — 1) странствующий; 2) движение.

2.2. ЙЫҺАНҒА ӨЛГӘШТЕРЕҮСЕ ЕТЕ ҠАПҠА

«Беҙ һеҙҙең өҫтөгөҙҙә ете юл барлыҡҡа килтерҙек».

«Эл-Мөьминүүн» («Мөьминдәр») сүрәһе, 23:17

Йога тәғлимәтенең асылы булған төп ете чакраның санскрит атамалары башҡорт телендә әлегәсә үҙҙәренең тәү мәғәнәһенән әллә ни тайпылмай һаҡланып һәм ҡулланылып йөрөүҙәре иғтибарға лайыҡ! Әйҙәгеҙ, беҙ уларҙы юллап ҡарайыҡ. Бер үк ваҡытта сағыштырыу өсөн Ҡөрьән Кәримдән уларҙың мәғәнәһенә ярашлы аяттар килтерәбеҙ.



Муладһара

«Ул һеҙҙе тупраҡтан барлыҡҡа килтерҙе, шунан һеҙ, кеше булғас, таралыштығыҙ».

«Рум» сүрәһе, 30:20

Муладһара[4] – йән эйәләренең һөйәктәрен, ит-мускулдарын, кимерсәк, тарамыштарын барлыҡҡа килтереүсе, умыртҡа

[4] Санскрит: **mula** – корень, основание, происхождение, ценность, наследственное имущество; башҡорт телендә «байлыҡ-муллыҡ» төшөнсәһенә тап килә; **hari** – желтый; башҡорт телендә «һары» – төҫ; hara – берущий, лишающий, уничтожающий, разрушающий; башҡорт телендә «һарыу ҡайнау» мәғәнәһенә тап килә.

бағанаһының төбө – ҡоймоста урынлашҡан көс-ҡеүәт үҙәге. Тәбиғәтте барлыҡҡа килтереүҙә ҡатнашҡан 5 тәүэлементтың беренсеһе ер элементына тап килә. Йән әйәләре үлгәс тә, тән сереп, киренән тупраҡҡа (прах), балсыҡҡа әүерелә. Был чакра физик тәндең үҫеше, сәләмәтлеге өсөн яуаплы. Еҫ һиҙеү һәләте лә уның менән бәйле. Муладһара әүҙемләшкәндә, тән температураһы күтәрелеп, төрлө сир барлыҡҡа килтереүсе вирустар менән көрәшә, ошоноң менән был чакра сәләмәтлек өсөн ҙур әһәмиәткә эйә. Шулай уҡ уның ярҙамында йоҡоноң ваҡытын ҡыҫҡартыуға өлгәшәләр. Кешенең аңы ошо чакрала ғына тупланһа, ул физик яҡтан көслө, баһадир ҡиәфәткә эйә була ала. Дошманын ботарлап ташлау уға бер ни түгел. «Асыуҙан һарыуы ҡайнай» тигән төшөнсә улар тураһында. Ошо үҙәк аша ғына көс-кәрҙе сарыф итеүҙән тыйыу өсөн *йоғаның беренсе тыйыу-киҫәтеүе* үтәлергә тейеш тә инде: ***«Үлтермә»***. Был тыйыуҙы «йән эйәләренең йәнен ҡыйма» тигән киң мәғәнәһендә аңларға кәрәк. «Йәнлектең йәнен алған – йәлсемәгән, кейек аулаған – кинәнеп йәшәмәгән», – тигән боронғолар. Хатта ошоға бәйле донъяуи ҡарашын йырға ла һалып ҡалдырған тәбиғәт йәнле халҡыбыҙ:

Бүртә аттар менеп бүр(е) тун кейеп,
Бүре ҡыуа башҡорттар балаһы.
Арт яғыҡайҙарына боролоп ҡарап,
Үк(е)реп илай бүренең анаһы.

«Һунар көйө»

Аңы муладһара кимәлендә туҡтағандарҙың унан өҫтәге чакралары ябыҡ була, һәм, әлбиттә, өҫтәгеләрҙең тормошо, уларҙың һәләтенә хас хәл-торош был кимәл кешеһе өсөн түгел. Халыҡ ижадында был кимәлдәге кешенең холоҡ-фиғелен сағылдырған мәҡәл-әйтемдәр, киҫәтеүҙәр күп кенә:

Асыу – ағыу, йотһаң – дарыу;
Асыу – бысаҡ, аҡыл – таяҡ;
Асыу – алдан, аҡыл – арттан;
Асыуың айғыр булһа, аҡылыңды теҙген ит;
Аҡайған күҙҙә аҡыл аҙ;
Артҡы аҡылға кем дә бай;
Беләкле берҙе йығыр, йөрәкле меңде йығыр;
Буй үҫтермә, аҡыл үҫтер;

Ҡыҙыу кеше тиҙ ҡартайыр;
Тиле асыуы – яман асыу;
Тиле тилерһә, тирәк йыҡҡан.

Кеше-ара мөнәсәбәттәрҙе көйләү маҡсатынан Ислам ҡанундары аша ла ошондай уҡ йөкмәткеле аяттар керәсәк: *«Бер кешенән үс алырға теләгән саҡтарҙа ла насарлыҡты ул кеше үҙе эшләгән тиклем генә эшләгеҙ, бер һуҡҡанға ике тапҡыр һуҡмағыҙ. Әгәр инде сабырлыҡ күрһәтеп, үс алмай ҡалһағыҙ, был бигерәк тә яҡшы»* [«Эн-Нәхл» («Бал ҡорттары» сүрәһе), 16:126].

Свадистана

«Беҙ күктән кәрәк миҡдарҙа һыу төшөрҙөк һәм уны Ерҙә урынлаштырҙыҡ, һәм уны юҡ итергә лә көсөбөҙҙән килә».

«Әл-Мөьминүүн» («Мөьминдәр») сүрәһе, 23:18

2. **Свадистана**[5] – икенсе тәүэлемент – **һыу** элементы менән бәйле. Тәм тойоу, түллек ағзаларының, һейҙек ҡыуығы, бөйөрҙәр эшмәкәрлегендә ҡан, шайыҡ, төкөрөк, сперма, лайла кеүек шыйыҡсаларҙы барлыҡҡа килтереүҙә ҡатнашыусы ҡеүәт үҙәге. Изге китаптан аяттар менән дә раҫлайыҡ әле был мәғлүмәтте: *«Беҙ кешене шыйыҡ балсыҡтың асылынан яралттыҡ. Унан һуң Беҙ уны тамсы итеп ышаныслы урынға килтерҙек»* [«Әл-Мөьминүүн» («Мөьминдәр») сүрәһе, 23:12, 13]. Тәм тойоу һәләтен дә ул тәьмин итә. Енси яҡтан өлгөрөү осоронда аң ошо чакрала туплана, ҡапма-ҡаршы енескә тартылыу, шулай уҡ уны үҙенә ылыҡтырыу һәләте тап уның менән бәйле. Ошо хискә генә һуғарылған ғашиҡлыҡ нигеҙендә күптәрҙә шиғриәткә, йыр-моңға һәләтлелек асыла. Араҡы, һыра кеүек эсемлектәрҙе (һыу элементы) ҡулланыу был тойғоларҙы ҡуҙғыта, енси теләктәрҙе көсәйтә. Дәрт-дармандың артыуы, көнделек

[5] Санскрит: **svadisthana** – вкусный, сладкий, милый; **sva** – «суа» – «һыу», **vadi** – «вода», **sthan** – тупланыу урыны, урынлашыу ере: гөлөстан, Башҡортостан һ. б., **syanda** – течение, стекание, сок; **asyandista** – течь, **stan** (һинд-иран) – аҫтан, аҫ яҡ.

ашҡыныуы йылдың ҡайһы мәленә тап килеүен иҫләйһегеҙҙер? Әлбиттә, ташҡын һыу даръяға әйләнгән саҡта! Әгәр был чакрала тупланған ҡеүәтеңде енси теләкте һуғарыуға ғына ҡулланһаң, ошо кимәлдә үҫеш тотҡарлана, артабан юғарыраҡ кимәлдәге ижадҡа юл ябыла, сөнки был кимәлдә ер йөҙөндәге барлыҡ йән эйәләре үҙенән һуң нәҫел ҡалдырыу, үрсеү маҡсатында ҡуллана. Аңы ошо кимәлдә тупланып, артабан үҫешкә ынтылмағандар хайуандар донъяһына хас булған үҙеңдән көслөрәктән ҡурҡыу сифатына ла эйә. Йәшәү рәүешеңде үҙгәртеү, интеллект кимәлеңде күтәреү өсөн свадистана тәьҫирендәге аң томаналығынан арынып, енси энергияңды киләһе чакраға – манипураға йүнәлтеүгә өлгәшергә кәрәк. ***Ғишыҡлыҡтан арыныу – йоганың икенсе талабы, сөнки был ғәҙәт бәндәне уйнашсыға әйләндереп, түбән тәгәрәтә.***

Был кимәлдең ыңғай һәм кире яҡтарын асып биреүсе түбәндәге тапҡыр һүҙҙәрҙән һәр кем үҙенә файҙалы һығымта яһай алыр:

Алтынды тут алмаҫ, һыуҙы ут алмаҫ;
Бар иткәнде пар иткән;
Белеп һөйһәң – йәр, белмәй һөйһәң – ҡар;
Бейә кешнәмәй – айғыр тешләмәй;
Буй менән һыу буйламайҙар;
Ғазапһыҙ ғишыҡ юҡ;
Ғашиҡ булған күҙһеҙ;
Ғишыҡ кешене диуана итер;
Ғашиҡтың күңеле тыныс булмаҫ;
Димсе диңгеҙ кистерер, илтеп ярҙан осорор;
Донъя күрке йәр менән;
Дәртле күҙҙе йоҡо алмаҫ, дәртһеҙ егет йәр тапмаҫ;
Ер – һыуға, ут – утынға туймаҫ;
Егермелә етлекмәгән иллеһендә өйләнмәҫ;
Егет егәр, ҡыҙ сибәр булһын;
Егет күңеле йүләрҙә, ҡыҙ күңеле көләрҙә;
Елһеҙ тирәк һелкенмәҫ, йүнһеҙ йөрәк елкенмәҫ;
Еткән ҡыҙ кейәүҙән ҡурҡмаҫ;
Еткән ҡыҙҙы мыйығың менән ҡурҡыта алмаҫһың;
Етен башын ел киҫә, егет башын ҡыҙ киҫә;
Ике һыңар – бер пар;
Инә ҡаҙ ҡаңғылдамаһа, ата ҡаҙ бармай;
Иҙел кисһәң, иҫ керә;

Изге кеше иҙел кисә;
Йәнле тәндә дәрт була;
Йәр бирмәк – йән бирмәк;
Күңел төшмәһә, күҙ төшмәй;
Ҡыҙҙар исеме – ҡылдан нескә;
Ҡыҙҙың күҙе ҡыҙылда;
Ҡырҡта булһа ла, ҡыҙ булһын;
Ҡысыған ерҙән ҡул китмәй, һөйгән йәрҙән күҙ китмәй;
Сәскәне ваҡытында өҙ;
Тиҙ бешкән емеш тиҙ серей;
Тиҙ янған тиҙ һүнер;
Тәнен һатҡан гәрен һатыр;
Уйнап үбешкән, ысынлап илаған;
Уйнаш кергән йорт ҡорой;
Уйнаш кергән йортҡа ҡот ҡунмай;
Уйнашҡа ышанған ирһеҙ ҡалыр;
Уйнаштан уймаҡ сыға;
Уйнаштың башы уйын, ахыры – ҡыйын;
Үпкән-ҡосҡан – елгә осҡан;
Үтә ҡыҙыл тиҙ уңа;
Ут ғәйрәтен һыу баҫыр;
Ултырған ҡыҙ урынын табыр, ашыҡҡан ҡыҙ ирһеҙ ҡалыр;
Урман ауыҙы тар булыр, ҡыҙҙар ауыҙы бал булыр;
Үбешкән дә көлөшкән, һуңынан башына уй төшкән;
Үгеҙҙең аҙғыны быҙау араһында;
Һалам ялҡыны тиҙ һүнер;
Һылыу күңелде аҙҙырыр, алтын юлдан яҙҙырыр;
Һыу яр емерер;
Һыу түбәнгә ағыр, әҙәм – үргә;
Һыу һыуға ҡойор, һыу даръяға ҡойор;
Һыу ҡыуған бәләгә, юл ҡыуған ҡазаға;
Эҙләмә матурҙы, эҙлә күңелгә ятырҙы.

Ошо ике үҙәкте таҙа тотоуға, кәрәкле маҡсатҡа йүнәлтеүгә ишараны тойоп булыр түбәндәге йыр һүҙҙәренән:

Егет үк булһаң, ер кеүек бул,
Ер ниндәйен ауырлыҡтарҙы күтәрә.
Пак булайым тиһәң, һыу кеүек бул,
Һыу ниндәйен нәжестәрҙе китерә.

«Урал»

Ә хәҙер был тыйыу-иҫкәртеүҙәргә өҫтәп, Изге китаптан тағы ла бер аят килтерәйек:

«Үҙегеҙ аҙғынлыҡ ҡылмағыҙ, йәшерен дуҫ ҡатын тотмаған булып, әжерен түләһәгеҙ, һеҙгә ғиффәтле мөьминәләр һәм һеҙҙән алда китап бирелгән кешеләрҙең ғиффәтле ҡыҙҙары хәләл. Кем дә кем имандан ситкә тайһа — уның эштәре юҡҡа сығыр, Ахирәттә улар онотолор» [«Әл-Маидә» («Аш табыны») сүрәһе, 5:5]

Манипура

«Иман килтермәгән кешеләргә уттан кейем киҫелгән... Бынан уларҙың эстәрендәге нәмәләре лә, тиреләре лә ирей».

«Әл-Хадж (Хаж)» сүрәһе, 22:19–20

Манипура[6] тәндең йылылығын тәьмин итеүсе ут элементы менән бәйле. Ҡабул ителгән аҙыҡты эшкәртеүсе ут ҡыуығы, ашҡаҙан, эсәктәр эшмәкәрлеген көйләүсе, матдәләр алмашыныу процесын яйлаусы ҡеүәт үҙәге ул. Будда динен тотоусылар иҫәпләүенсә, кеше үлгәндә уның йәне ошо үҙәктән сыҡһа, ул преттар (йәғни мәңге ас йәндәр – ендәр) донъяһында тыуа, ти. Ҡөрьән Кәримдә был ҡарашты раҫлаусы аят бар: *«Ул кешене сүлмәк һымаҡ яһай торған балсыҡ кеүек яңғырауыҡлы мәтенән яралтты һәм ендәрҙе саф ут ялҡынынан яралтты»* [«Әр-Рәхман» («Шәфҡәтле») сүрәһе, 55:14–15].

Аңды манипура кимәленә тиклем күтәрә алыу һәләте йән эйәләре араһында тик кешегә генә бирелгән[7]. Эш, һүҙ мәғәнә-

---

[6] Санскрит: **man** — знать, думать, считать, полагать, рассматривать; **manas** — дух, душа, ум, разум, замысел, желание, намерение; **manu** — мудрый, родоначальник рода человеческого, человек; **manu ja** — потомок Ману, человек; **pura** — крепость, башҡортса: **бура** — бүрәнә ҡоролма, ҡәлғә.

Анна Маршалл: в Океании и в некоторых других обществах «мана» является духовной, или жизненной силой, как полагают, пронизывает Вселенную. По происхождению это меланезийское слово, антропологи применяют его теперь для обозначения духовной силы в первоначальных религиях. Мана — это не дух, она не имеет воли и цели, она обезличена и свободно перетекает от одной вещи к другой, и ею можно управлять для решения определенных задач. Эту силу содержат талисманы, амулеты и лекарства, которые действуют на благо их владельцев и пользователей.

[7] Санскрит: **atman** — дыхание, жизнь, существование, сущность, природа; собственное «я», сам; тело, ум, интеллект; *филос.* мировая душа, высший дух.

һен аңлаған, әҙәп һаҡлай белгәнде **мәнле, мәнеле, мәне** белгән тип ҡылыҡһырлау һәм, киреһенсә, эш, һүҙ айышын аңламаған, әҙәп һаҡламаған әҙәмде мәнеһеҙ, мәне белмәгән тигән һүҙ бар беҙҙең телебеҙҙә.

Сағыштырыу өсөн инглиз телендәге man – ***кеше***, санскритта: **manu** – *тәүкеше, аҡыл эйәһе;* **manu ja** – *тәүкешенең нәҫелдәре, дауамы* тигән һүҙҙәрҙе иҫәпкә алһаҡ, ғәрәп телендә лә **мән?** ***(кем?)*** һорауының, беҙҙең телдәгесә, тик аң эйәһе кешегә ҡарата ғына ҡулланылыуы ҡыҙыҡлы. Беҙҙең телдә лә **ман/мән** өлөшсәләренең фәҡәт **кеше булыу, кешесә** мәғәнәләренә тап килеүе тураһында бик ҡыҙыҡлы табыштарға юлығаһың:

мандыу, мандығыу, мандуғыу (төньяҡ-көнбайыш) – һауығыу (тимәк, яңынан кеше булыу);

манит (ҡариҙел), **маншик** (арғаяш) – ҡарасҡы;

мантығыу (арғаяш) – ҡаушау; (мейәс) – ҡабаланыу;

мантымау (урта) – ырамау, уңмау;

мантыуһыҙ (арғаяш) – мөсһөҙ, көсһөҙ, хәлһеҙ;

маң булыу – 1) бер шөғөлгә онотолоп китеп, ныҡ бирелеү; 2) дусар булыу;

мәндә (һаҡмар) – бәндә;

мәне (көнсығыш, төньяҡ-көнбайыш, урта, ырғыҙ, эйекһаҡмар) – әҙәп, мәғәнә, рәт;

мәней – аталыҡ орлоғо һәм шул орлоҡтарҙан торған шыйыҡса; сперма;

мәнжүн (әй) – мәжнүн, иҫен-аҡылын юғалтҡан кеше;

мәнтерәү (арғаяш) – бәлтерәү;

мәңгерәү (мейәс) – миңрәүләнеү;

мәңрәү (арғаяш, салйоғот, һаҡмар) – миңрәү, туң.

Башҡорт телендә **ман/мән** ҡушымсалы һүҙҙәрҙең мәғәнәһе, үҙләштерелгән һүҙҙәр менән бер рәттән, кешенең ниндәйҙер сифатҡа эйә булыуын күрһәтә:

милләт: алман, ҡоман, манси, төрөкмән, әрмән;

дәрәжә: атаман, ғоман (ҡарындағы бала), дошман, иләймән, көйәрмән, мосолман, төмән, уҙаман, аламан;

һөнәр: ашмансы (ашнаҡсы[8]), сабарман, сәйәсмән, тәржемән, һөнәрмән, шаман, эҙәрмән;

---

[8] Санскрит: **adman** – пища – аҙыҡ.

сифат: алабарман, байман, бөжмән (ҡурҡаҡ), еңәрмән, ҡарасман, маңҡорт, тиҙәмән, үҫәрмән, әүермән.

Бындай һүҙҙәрҙә **ман/мән** ҡушымсаларын яһаусы ялғау тип ҡарау урынлымы? Ике тамырлы ҡушма һүҙҙәр бит улар!

Сит телдән килеп кергән *гуманизм, супермен, бизнесмен, боцман, мичман, флагман, штурман, норманн, герман, роман, манекен, наркоман, меломан, полисмен* һ. б. һүҙҙәр ошондай уҡ һүҙьяһалыш тәртибенә буйһонған.

Айман, Ҡорҙашман, Ҡорман, Мәндей, Сермән, Манайлы, Манайһыу, Манайылға, Маныштты, Маназы шишмәһе, Манаш, Манъяра (тауы, яланы, йылғаһы), Мәнеү йылғаһы, Манғаштаҡ, Туғажман, Манатау, Сытырман, Мәндем һ. б. топонимдарҙың булыуы **ман/мән** компоненттарына иғтибарҙы йүнәлтеүҙе һорай. Ҡайһы бер авторҙар тәҡдим иткәнсә, гидронимдарҙа осраған **ман/мән** өлөшсәләрен «маныу» (һыуға төшөрөп алыу, һыулау) мәғәнәһе менән бәйләһәк, тау-ҡалҡыулыҡ исемдәренә булғандарын нисек аңлатырға булыр?

Ҡорман йылғаһының һыуҙарында
Йөҙә микән алтын балыҡтар?
Ҡорман ауылынан күсмәҫ өсөн,
Зар илаша бөтә халыҡтар.
Иҫке *Ҡорманҡайҙың* ҡарт тирәге
Беҙҙе оҙатып ҡалды талпынып.
Ә беҙ киттек ҡола ялан ергә
Тыуған еркәйҙәрҙе ҡалдырып.

«Ҡорман»

Был өлөшсәләрҙең беҙҙең телдә *кеше исемдәрендә* лә күп осрауы – иғтибарға лайыҡлы күренеш. Үкенескә ҡаршы, ошо өлкәлә яҙылған фәнни хеҙмәттәрҙә уларҙың мәғәнәһен ентекләп аңлатыу етешмәй, йә булмаһа, – сит телдән үҙләштерелгән исемдәр тип кенә бирелә. Ә уларҙың мәғәнәһе тәржемәһеҙ ҙә ярылып ята бит:

Айман – ай кешеһе, Аҡман – аҡ кеше, ҡыш бабай; Балҡаман – исеме балҡыр, танылыр кеше; Баһуман[9] – бөйөк, баһалы, абруйлы, хөрмәтле кеше; Усман, Усманғәли – (төрки телд.:

[9] Санскрит: **bahu mana** – высокое мнение, глубокое уважение к кому-либо.

Ус – аҡыл, аң, уйсанлыҡ, тәрбиәлелек, зирәклек) аңлы кеше; Дәрдеман[10] – дәртле, ҡеүәтле, көслө кеше; Иман, Иманай, Иманбай, Иманғол – (төрки телд.: ий, ийи – эйә, хаҡ) хаҡ, юлдағы, дөрөҫ, ыңғай кеше; Ираман, Ирәмән – ир кеше; Ҡорман, Ҡораман, Ҡорманай, Ҡорманбай, Ҡорманғол, Ҡорманғәли – (*ҡор, ҡур:* ҡеүәт) ҡурлы, үрсемле кеше, нәҫел башлаусы; Ҡарман, Ҡарманай – ҡар (төньяҡ) кешеһе, боронғо, тәү кеше; Ҡалҡаман – ҡалҡанлы, һуғышсан, яугир кеше; Ҡараман – ҡара (боронғо), тәү кеше; Манап – 1) ап – арт. дәрәжәһе; 2) апа (диал. һәм бор. төрки тел.) – бабай. Оло, абруйлы кеше; Манат – кеше+ат (кентавр); Мансаф – саф, аңлы кеше; Мәнгол – ҡол кеше, хеҙмәтсе; Ҡалмансура, Мансур, Сураман[11] – Алла кешеһе; Нағман, Ноғман, Ноғаман[12] – аждаһа-кеше, күк батшаһы; Маннур, Нариман, Нуриман – иманлы, нурлы кеше; Лоҡман[13] – ил кешеһе, йыһан кешеһе; Райман – (Ра/Рә – ҡояш) белемле, мәҙәниәтле кеше; Сағман – саҡ (теүәл, бөтөн, тулы, камил) кеше; Сөләймән, Һөләймән[14] – Алланың ризалығынан; Сәлмән – сәлләле (дәрәжәле), сәләмәт, сал (оло) кеше; Сарыман, Сарман, Сәрмән – 1) һары кеше (милләте), 2) был донъя кешеһе **(сар-«сансара» – «донъя тәгәрмәсе»)**; Урман, Урманай, Урмансы, Урмантай – (төрк. телд.: Ур – барлыҡҡа килтереүсе, нәҫел таратыусы, орлоҡ сәсеүсе; Һәмән, Сәмән[15] – бай, йомарт); Шаҡман, Шахман – дәрәжәле кеше, шаһ; Юламан – юл кешеһе.

«Ҡәмән менән Сәмән, картуф сәскән Сәлмән» әкиәтендәге, «Аҡман менән Тоҡман»[16] риүәйәтендәге башҡорт исемдәре боронғолоҡҡа ишара. Тағы ла шул күҙгә ташлана: ни өсөн был исемдәр – тик ир-аттыҡы?! Сөнки, донъяуи диндәрҙә ҡабул ителгән ҡараш буйынса, Аллаһы Тәғәлә тарафынан ерҙәге тәүге кеше ир затынан яратылған. Шулай итеп, миҫалға килтерелгән *башҡорт – ғәрәп – фарсы – инглиз – санскрит* сығышлы

---

[10] Санскрит: **dhrtatman** – сильный духом; с твердым характером.

[11] Санскрит: **sura** – бог.

[12] Санскрит: **naga** – змей; **Наг** – күктә һауа торошон көйләүсе аждаһа.

[13] Санскрит: **loka** – 1) место; 2) край, страна; 3) простор; 4) мир, Вселенная; 5) земля; 6) жизнь; 7) народ; 8) человечество; 9) сборище, скопление чего-либо.

[14] Санскрит: **saloman** – согласованный.

[15] Санскрит: çaman – 1. 1) достижение; 2) богатство, изобилие (башҡ. саманан күп); 2. мягкость, доброта.

[16] Санскрит: **toka** – 1) ребенок; 2) потомство; 3) род; 4) раса; **tokma, tokman** — молодой побег, росток.

барлыҡ һүҙҙәрҙең дә дөйөм мәғәнәһе, уртаҡлығы барлығын тояһың.

Көс-ҡеүәте, аңы манипура кимәлендә тупланыуға өлгәшеүселәр – фән-ғилем өлкәләрендә уңыш яулаусылар. Сөнки уның эшмәкәрлеге көйлө булған осраҡта ҡабул ителгән ризыҡты эшкәртеү яҡшы бара һәм бының менән бергә мейе туҡланыуҙан уйлау һәләтлеге көсәйә, хәтер яҡшыра. Төҫтәрҙе айырыу, таныу ҙа – манипураның ҡатнашлығында. Күҙлек кейеүселәр кемдәр араһында күберәк? Күреү һәләтенең кәмеүе – был чакраның зарарланыуы, артыҡ көсөргәнеш кисереүҙән көйһеҙләнеүенән. Был кимәлдә тик ашау-эсеү, матди байлыҡ туплау кеүек фани донъяның алдатҡыс мәшәҡәттәре менән артыҡ мауығып китеп, манипураның кире йоғонтоһо аҫтында ҡалыусылар – рухи яҡтан артабан үҫеүҙән туҡталыусылар. Уларҙың холҡонда ҡомһоҙлоҡ, һаранлыҡ кеүек сифаттар өҫтөнлөк итә башлай. *«Кеше күңелендә һәр ваҡыт һаранлыҡ була. Әгәр һеҙ изгелекле, тәҡүәле булһағыҙ, ысынлап та, Алла һеҙҙең ни эшләгәнегеҙҙе белә»,* – тип аңлата был тәбиғи хәл-булмышты «Ән-Ниса» сүрәһе, [4:128]. Был осраҡта йоганың ***«Урлашма!» тигән өсөнсө талабын*** үтәү мотлаҡ. Халҡыбыҙҙың аҡыл эйәләре был турала ни тигән?

Ашар өсөн йәшәмә, йәшәр өсөн аша;
Ашағанда аҙ яҡшы, эшләгәндә күп яҡшы;
Ашҡа ла бар бер сама;
Батыр ут булыр, ҡурҡаҡ юҡ булыр;
Иртәнге ашты ташлама, кискеһен башлама;
Күп ашап күбенгәнсе, аҙ ашап буйыңа һеңдер;
Күп ашаһаң, бал да әсе була;
Ҡомһоҙ ҡомғанға тығылыр;
Ҡомһоҙҙоң үҙе туйыр, күҙе туймаҫ;
Тамаҡ тамуҡҡа төшөрөр;
Урлыҡ – хурлыҡ;
Ут – мут;
Уттың ялы ла, ҡойроғо ла юҡ;
Уттан алды, һыуға һалды;
Тапҡанды тота бел, ҡапҡанды йота бел;
Һау булайым тип туя ашама, ҡуя аша.

Әлбиттә, ҡомһоҙлоҡ, һаранлыҡ, фани донъя малына үтә бирелгәнлек кеүек кире сифаттар донъяуи диндәр тарафынан да һис тә хупланмай. *«Алланың рәхмәте менән бирелгән*

нәмәгә һаранланған кешеләр шуны үҙҙәренә яҡшы тип уйламаһын. Юҡ, был уларға яман. Ҡыҙғанған нәмәләре ҡиәмәт көнөндә уларға сынйыр булып уралыр. Күк менән Ерҙең мираҫына Алла ғына хужа. Һеҙҙең ни эшләгәнегеҙҙе Алла белеп тора», – тип иҫкәртәсәк был турала Ислам ҡанундары [«Әл-Ғимран» сүрәһе, 3:180].

Анахата

«Алла елдәрҙе ебәреп, болот сығарта. Уларҙы үҙе теләгәнсә күк йөҙөнә таратып, киҫәк-киҫәккә бүлгеләй. Шунан һин болот araһынан ямғыр яуғанын күрәһең. Шул ямғырҙы Үҙе теләгән ҡолдарына ебәргәндә, улар шатлана, ямғыр яумаҫ элек нык ҡайғырып торған булһалар ҙа. Алла рәхмәтенең эҙҙәрен үлгән ерҙең терелеп киткәнендә күр. Ысынлап та, Ул үлгәнде терелтә. Ул һәр нәмәгә ҡөҙрәтле!»

«Сүүрату-Рум» («Әр-Рум») сүрәһе, 30:48–50

Анахата[16] – **һауа,** ел элементынан тороусы ҡеүәт үҙәге. Күкрәк тәңгәлендә урынлашҡанлыҡтан, һулыш ағзалары (үпкә, йөрәк, ҡан тамырҙары) өсөн яуаплы. Бармаҡ остары менән ҡағылыу, тире аша һиҙеү һәләте анахата ярҙамында бирелә. Һауа, тын – еңел элемент: «еңеллек» һүҙенең синонимы «анһат» һүҙе бына ҡайҙан килеп сыҡҡан! Аңы, энергияһы анахата кимәлендәгеләр кисергән **мөхәббәт**[17] свадистана кимәлендәгеләрҙекенә ҡарағанда юғарыраҡ, бөйөгөрәк. Уларҙа дөйөм кешелек, тәбиғәт, йыһан алдында яуаплылыҡ тойғоһо үҫешкән.

---

[16] Санскрит: **an** – дышать, **ana** – дыхание, **hatta** – рынок, базар; хата (рус) – йорт, ихата; **anah** – привязывать; «Ана күңеле балала, баланыҡы – далала», «Ана һөтө менән кермәһә, тана һөтө менән кермәҫ» тигән мәҡәлдәрҙән «ана» – баланы фани донъяға тыуҙырыусы, «кендеген ергә бәйләүсе» – «әсә» мәғәнәһендә уның боронғораҡ варианты.

[17] **Санскрит: maxabhuta** – четыре великих, или универсальных, первоэлемента (земля, вода, огонь, ветер). Maxabutly – четыре великих первоэлемента, различных каждый по-своему, хотя они находятся на одном месте.

нәмәгә һаранланған кешеләр шуны үҙҙәренә яҡшы тип уйламаһын. Юҡ, был уларға яман. Ҡыҙғанған нәмәләре ҡиәмәт көнөндә уларға сынйыр булып уралыр. Күк менән Ерҙең мираҫына Алла ғына хужа. Һеҙҙең ни эшләгәнегеҙҙе Алла белеп тора», – тип иҫкәртәсәк был турала Ислам ҡанундары [«Әл-Ғимран» сүрәһе, 3:180].

Анахата

«Алла елдәрҙе ебәреп, болот сығарта. Уларҙы үҙе теләгәнсә күк йөҙөнә таратып, киҫәк-киҫәккә бүлгеләй. Шунан һин болот араһынан ямғыр яуғанын күрәһең. Шул ямғырҙы Үҙе теләгән ҡолдарына ебәргәндә, улар шатлана, ямғыр яумаҫ элек нык ҡайғырып торған булһалар ҙа. Алла рәхмәтенең эҙҙәрен үлгән ерҙең терелеп киткәнендә күр. Ысынлап та, Ул үлгәнде терелтә. Ул һәр нәмәгә ҡөҙрәтле!»

«Сүүратү-Рум» («Әр-Рум») сүрәһе, 30:48–50

Анахата[16] – **һауа**, ел элементынан тороусы ҡеүәт үҙәге. Күкрәк тәңгәлендә урынлашҡанлыҡтан, һулыш ағзалары (үпкә, йөрәк, ҡан тамырҙары) өсөн яуаплы. Бармаҡ остары менән ҡағылыу, тире аша һиҙеү һәләте анахата ярҙамында бирелә. Һауа, тын – еңел элемент: «еңеллек» һүҙенең синонимы «анһат» һүҙе бына ҡайҙан килеп сыҡҡан! Аңы, энергияһы анахата кимәлендәгеләр кисергән **мөхәббәт**[17] свадистана кимәлендәгеләрҙекенә ҡарағанда юғарыраҡ, бөйөгөрәк. Уларҙа дөйөм кешелек, тәбиғәт, йыһан алдында яуаплылыҡ тойғоһо үҫешкән.

---

[16] Санскрит: **an** – дышать, **ana** – дыхание, **hatta** – рынок, базар; хата (рус) – йорт, ихата; **anah** – привязывать; «Ана күңеле балала, баланыҡы – далала», «Ана һөтө менән кермәһә, тана һөтө менән кермәҫ» тигән мәҡәлдәрҙән «ана» – баланы фани донъяға тыуҙырыусы, «кендеген ергә бәйләүсе» – «әсә» мәғәнәһендә уның боронғораҡ варианты.

[17] **Санскрит: maxabhuta** – четыре великих, или универсальных, первоэлемента (земля, вода, огонь, ветер). Maxabutly – четыре великих первоэлемента, различных каждый по-своему, хотя они находятся на одном месте.

Был кимәлдең ыңғай йоғонтоһо тәьҫирендә, төрлө һәләттәре үҫешеп, кеше ***абруй һәм дан*** ҡаҙаныуға өлгәшә. Таланттың юғары маҡсаттарҙа кешелеккә хеҙмәт итеү өсөн бирелгәнлеген онотоп, анахатаның кире йоғонтоһона эләккәндәрҙең *маһайыусанлыҡ, һауаланыу, эреләнеү, дан көҫәү, нимәгәлер йә кемгәлер ҡарата үтә эҫенеү* кеүек кире сифаттары был рухи үҙәктең ябылыуына килтерә. Был турала башҡорт халыҡ йырҙарында ла киҫәтеүҙәр етерлек:

Төйәләҫкәй буйының туғайы,
Туғайында уның талдары.
Арыҫланҡай кеүек ир-егетте
Алдай алмаҫ донъя малдары.

«Төйәләҫ»

Ағиҙелкәйҙәрҙең ай буйында
Һандуғастар һайрай муйылда.
Иҙел һыуын эскән ир-егеттәр
Яман теләк йөрөтмәҫ уйында.

«Йәмле Иҙел буйында»

Шулай итеп, кемгәлер йә нимәгәлер ҡарата мөнәсәбәттә үтә эҫенеү, ниндәйҙер идеяға үтә бәйләнеү, бер урынға ерегеү – был кимәлдән өҫкө чакраларға юлды яба, сөнки көс-кәр ошо маҡсаттарға ярашлы түгелә. *«Яратҡан нәмәгеҙҙе сарыф итмәй тороп, һеҙ изгелеккә өлгәшә алмаҫһығыҙ. Ни генә сарыф итһәгеҙ ҙә, Алла белеп тора!»* – тиер был турала Ҡөрьән [«Әлү-Ғимран» сүрәһе, 3:92]. Йән теге донъяға киткәндә ошо чакра аша сыҡһа, ҡайтанан кеше булып тыуыу мөмкинселегенә эйә була, тиҙәр. Шуға күрә кешелек донъяһына хас барса мөнәсәбәттәрҙә лә даими рәүештә теүәл һәм яуаплы булырға өйрәтә йога тәғлимәте: ата-әсә һәм бала, ир-ҡатын, туған-зат, дуҫ-иш кимәлендә генә түгел, ә шулай уҡ милләтеңә, туған телеңә, Тыуған илеңә тоғролоҡ һаҡлай белеү – былар барыһы ла анахата мәсьәләләре. *Кешеләр араһын бутау, дошманлашыу, үс һаҡлау, кенә ҡыуыу* кеүек хата-гонаһтарҙан арынып ҡына, анахата кимәлендә ҡалып була әҙәм балаһына. Был турала түбәндәге мәҡәл-әйтемдәр асыҡ әйтеп бирә:

Ат етмәҫ ергә дан етер;
Ат матуры арҡанда, ҡыҙ матуры тарханда;

Аттың аҫылына атлан;
Ата – алтын һаҙаҡ, аңа – алтын ҡанат;
Атаң барҙа ир таный, затың барҙа ил таный;
Ата байлығы улға йоҡмаҫ, әсә байлығы ҡыҙға йоҡмаҫ;
Ата һағышын күк күтәрмәҫ, әсә һағышын ер күтәрмәҫ;
Ата-бабам баҡҡан ер – кендек ҡаным аҡҡан ер;
Ата-инә алғышы утҡа-һыуға батырмаҫ;
Ата-инәгә изгелек күрһәтмәгән үҙе лә изгелек күрмәҫ;
Ата үлеү – арҡа һыныу, инә үлеү – бәғер итең һулыу;
Ата үлеп, бала ҡалһа – моратына еткәне, бала үлеп, ата ҡалһа – бөкрәйеп үлеп киткәне;
Бала – уңһа ғына бала, уңмаһа – бәлә;
Бала шатлығы – ана шатлығы;
Бер табышһыҙ ҡайтһаң да, донъя күреүең үҙе табыш;
Бишек – киң донъяға ишек;
Булыр илдең балаһы бер-береһен – батыр, ти, бөлөр илдең балаһы бер-береһен – бахыр, ти;
Дуҫынан айырылған ете йыл илар, иленән айырылған илле йыл илар;
Дуҫты дошмандан айыра бел;
Дуҫтың дуҫлығы ҡара көндә беленер;
Дуҫың янында булмаһа, донъяның йәме юҡ;
Дуҫты һынарға теләһәң, көтөргә бир;
Дуҫың ниндәй – ҡәҙерең шундай;
Елгән ел күргән, йөрөгән ил күргән;
Елгә ут һимерер;
Елгә шаршау ҡормайҙар;
Иҙел даны менән боҙ китә, ата даны менән ҡыҙ китә;
Иләҫ илдән китер;
Иле кеше иленән китмәҫ;
Иплегә иптәш күп;
Йөрөгән йөрәкле булыр;
Мөхәббәткә үлем юҡ;
Мөхәббәт өсөн йән фиҙа;
Мөхәббәт таш ярҙырта;
Мөхәббәт уты тамуҡ утынан ете өлөш артыҡ булыр, ти;
Мөхәббәт уты майһыҙ ҙа яныр;
Нык һөйә, тип һөйөнмә, уртаса һөйә, тип көйөнмә;
Сағылған таш ут сәсер;
Сибәр берҙе, аҡыллы менде эйәртер;

Сит ерҙең гөлөнән үҙ ереңдең дегәнәге артыҡ;
Ситкә китһәң дә, ситәнгә элеп кит;
Ситтә йөрөгән тарығыр, Тыуған илен һағыныр;
Сәскә яҙ менән, мөхәббәт наҙ менән;
Тыуған илдән туйған юҡ;
Үҙәккә үткән ел яман, илен һатҡан ир яман;
Халыҡ йорто – Тыуған ил;
Халыҡты хан да еңмәҫ;
Халыҡ әйтһә, хата әйтмәҫ, хаҡ әйтер;
Халыҡ көсө таш яра;
Халыҡ аҡылы – ҡойон, ҡаршы тороуы ҡыйын;
Халыҡ барҙа хаҡлыҡ бар;
Халыҡ бар ерҙә батыр бар;
Һылыу – һыйпағанерендә, ир – тыуған ерендә;
Өйҙә ятып ни белерһең? Илгә сыҡһаң, ғибрәт күрерһең.

Сәләмәт йөрәккә эйә булыу – кешенең Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында уңышҡа ирешеүселәрҙән булыуынан. *«...байлыҡ та, балалар ҙа файҙа килтермәгән ул көндә (Ҡиәмәт көнөндә) Аллаһ янына сәләмәт йөрәк менән килеүсе генә ҡотоласаҡ»* [«Шағирҙар» сүрәһе, 26:88–89]. Ибн Рәжәб әйткән: *«Ауырыуҙарҙан һәм боҙоҡлоҡтарҙан азат булған йөрәк кенә сәләмәт һанала. Ындай йөрәктә Аллаһҡа мөхәббәттән, Унан ҡурҡыуҙан һәм Унан йыраҡлайтыусы нәмәләрҙән ҡурҡыуҙан башҡа бер нәмә лә юҡ».*

Вишудда

«Алланың миҫал итеп яҡшы һүҙ килтергәнен күрмәнеңме ни? Ул һүҙ яҡшы ағас һымаҡ: тамырҙары нык, ботаҡтары күккә олғашҡан... Раббының рөхсәте менән ул һәр ваҡыт емеш биреп тора. Бәлки, аҡылға килерҙәр, тип Алла кешегә миҫал килтерә. Ә насар һүҙ хаҡындағы миҫал ерҙән йолҡолған ағас кеүек: уның ныҡлығы юҡ. Иман килтергән кешеләрҙе Алла тоғро һүҙ менән донъялыҡта ла, Ахирәттә лә нығыта, ә залимдарҙы юл-

дан яҙҙыра. Алла Үҙе ни теләһә, шуны эшләй».

«Ибраһим» сүрәһе, 14:24–27

Вишудда[18] – бишенсе элемент, «бушлыҡ». *Биш, буш, баш, бош*[19] – бер һүҙҙең төрлө варианттары.

Физик тәндең буш, ҡыуыш ағзалары (ауыҙ, танау, ҡолаҡ ҡыуышлыҡтары) ярҙамында тауыш-өн сығарыу, һөйләү, ишетеү һәләттәре вишудда менән бәйле. Көнсөллөк сәме нигеҙендә башҡалар менән ярышыу, уҙышыу, айҡашыу тойғолары менән һуғарылмаһа, аң ҡеүәте ошо үҙәктә тупланғандарға был чакра «батшалыҡ» бурысын еңел башҡарыуға булышлыҡ итә. Йә булмаһа, тыумыштан матур тауышың ярҙамында киң танылған йырсы, тәбиғәттән бирелгән ишетеү һәләтең нигеҙендә бөйөк композитор, телмәр оҫталығың ярҙамында абруйлы сәйәсмән булыуға өлгәшергә мөмкин. Ләкин «бөйөклөктөң», «донъяға хужа булыуҙың» түбән тойоп, уны тик кире сифатта үҙ маҡсаттарында ғына файҙаланыу вишудда чакраһын бысратыуға, тонсоғоуға килтерә, кешенең үҙен, шәхес булараҡ, емереүгә, кирегә тәгәрәүгә этәрә, сөнки был мөмкинселек кешелеккә, халыҡҡа юғары маҡсаттан сығып хеҙмәт итеүгә, уның рухи кимәлен күтәреүгә булышлыҡ итеү өсөн бирелә.

Аҡыл эйәләренең фекеренсә, ике төрлө эш кешене һәләк итергә мөмкин: сикһеҙ байлыҡҡа ынтылыу һәм артыҡ һүҙсәнлек.

Кеше үҙенең теле арҡаһында ожмах менән бүләкләнеүе һәм тамуҡ менән язаланыуы мөмкин, ти Ислам әҙәбе. Халҡыбыҙҙың тарих дауамдары буйына туплаған тормош тәжрибәһен сағылдырған һәм йога талаптарына тап килгән телдең, телмәр тотоу өлкәһенә ҡағылышлы әйтем-киҫәтеүҙәре бихисап. Уларҙан белеүебеҙсә, кешенең яҙмышы һәм ни дәрәжәлә булыуы уның теле менән туранан-тура бәйле:

---

[18] **Санскрит: vish** – пространство, (башҡ.: буш, бушлыҡ); **vicuddhi** – полное очищение (рел.), чистота, святость, совершенное знание, удаление сомнений; **vasu** – 1) добрый, благосклонный; 2) добро, клад, богатство; vasu-da – ниспосылающий богатства; **vasu-dha** – 1) содержащий сокровища, щедрый; 2) земля, страна, государство; **vasu-dhara** – держащий землю, царь, батша); **yacoda** — приносящий славу, прославленность, известность.

[19] **Бошман** – 1. *с. диал.* бошонҡо (күңеле буш); 2. Бушлыҡта, йәғни далала йәшәүсе бер башҡорт ырыуының исеме.

Аҡыллы алтыла ла баш була, аҡылһыҙ алтмышта ла йәш була;
Аҡыллыға аҡыл бирһәң, күпте белер,
Аҡылһыҙға аҡыл бирһәң, ҡысҡырып көлөр;
Аҡыл эҙләгән аҡыл табыр, мал эҙләгән мал табыр;
Аҡыл ҡәҙере әҙәп менән;
Аҡылһыҙ башҡа дан ҡунмаҫ, ҡунһа ла, оҙаҡ тормаҫ;
Аҡ туныңды яманлап, атлас ҡайҙан табырһың,
Түрәләрҙе яманлап, ғәҙел ҡайҙан табырһың? *(М. Аҡмулла)*;
Аламаға дәрәжә килешмәй;
Ауыҙҙан сыҡҡан һүҙ – осҡан ҡош;
Ауыҙың ни һөйләгәнде ҡолағың ишетһен;
Ауыҙҙағы һүҙгә һин эйә, ауыҙҙан сыҡҡан һүҙ һиңә эйә;
Ауыҙ – ҡапҡа, һүҙ – ел;
Ауыҙ – йоҙаҡ, тел – тоҙаҡ;
Ауыҙ – бер, ҡолаҡ – ике;
Берҙе һөйләгәндә биште уйла;
Балыҡ башынан серер;
Бай менән талашма, түрә менән әрләшмә;
Башлыҡ булһаң, башлы бул, йыйырылмаҫ ҡашлы бул;
Башлыҡ аҡылға бай, халыҡ күңелгә бай;
Башың үҙеңә баш булһын;
Башҡа бәлә телдән;
Батша залим булһа – йорт туҙыр, ғалим булһа – йорт уҙыр;
Батшаң һуҡыр булһа, бер күҙеңде ҡыҫып үт;
Булмаҫ тайға тел әрәм;
Кешене хур иткән үҙе ҙур булмаҫ;
Көнсөл кеше көн күрмәҫ;
Көс кемдеке – әмер шуныҡы;
Көтөү аҙашмай, көтөүсе аҙаштыра;
Күп һүҙҙең йәме юҡ;
Күп өргән эт тешләмәҫ, күп ҡысҡырған эшләмәҫ;
Ҡыҫҡалыҡта – оҫталыҡ;
Нәфсе – шайтан, аҡыл – иман;
Нәфсеһенә эйәргән малынан да, аҡылынан да яҙыр;
Өндәшкән бер отҡан, өндәшмәгән ике отҡан;
Түрә барҙа түргә уҙма;
Түрә түрәне яҡлар;
Түрә түрен бирмәҫ;
Түрә ҡуштанды һөймәҫ, шунһыҙ көн күрмәҫ;

Түрә күп булһа, дау күп булыр;
Түрәнең һүҙе һүҙ, ни әйтһә, шул төҙ;
Түрә булһаң, түҙем бул, телгә татлы йөҙөм бул;
Түрә булһаң, сабатаңды түргә элмә;
Телеңдән килгән ҡулыңдан ҡилһен;
Сабырһыҙға дәүләт ҡунмай;
Үкереп – үгеҙ, екереп түрә булмаҫһың;
Үҙен ҙур тотҡан түрәнең һуңғы көнө хур булыр;
Халыҡҡа таянған таймаҫ;
Эйелгән илгә яраған;
Яҡшы түрә әҙәмгә юл асыр, яман түрә әҙәмдең юлын быуыр.

Аджня

«Иманлы кешеләрҙе һәм ғилеме булғандарҙы Аллаһ төрлө дәрәжәләргә күтәрә».

«Әл-Мужәдәлә» («Һүҙ көрәштереү») сүрәһе, 58:11

Аджняны[20] – ике ҡаш араһында, гипофиз өлкәһендә урынлашҡанға күрә, уны «өсөнсө күҙ» тип тә атайҙар. Был чакра бик ҙур һәләттәр өсөн яуаплы, уның ярҙамында бөтә теләктәр тормошҡа ашырыла. Аңын, көс-ҡеүәтен был тәңгәлгә күтәреп туплай алыусылар өлөшөнә сикһеҙ мөмкинлектәр асыла; ғәҙәттән тыш һәләттәре менән башҡаларҙы хайран итер әүлиәләр – ошо кимәл шәхестәре. Улар «өсөнсө күҙ» ярҙамында кешенең уйын, ара йыраҡлығына ҡарамай, уҡый, бөтә йәнле һәм йәнһеҙ нәмәләрҙе, кешеләрҙе үтәнән-үтә күрә, үткәнде һәм киләсәкте асыҡтан-асыҡ күҙаллай. Дауалау һәләтенә эйә булалар. Ғүмерҙәренең оҙонлоғон үҙ теләктәре менән үҙҙәре хәл итәләр. Был чакраға тап килгән тәбиғи элемент юҡ. Шуға күрә фәҡәт ошо кимәлдә аң ысын азатлыҡҡа өлгәшә, йәғни сансараның ҡуласаһынан, карма законынан ундай бөйөк кешеләр ирекле. Юғары аң менән тоташып, күктең етенсе ҡатына һәм унан да юғарыраҡ донъяларға күтәрелеү лайыҡ бындай йәндәргә.

[20] Санскрит: **ajana** – 1) одинокий, 2) безлюдный; **ajanana** – понимание, осознание; башҡорт телендә «аң» һүҙенә тура килә.

Тәбиғи рәүештә аджнаның да кире тәьҫиренә эләгеү ҡурҡынысы бар. Ҡатып ҡалған идеяларҙа тапаныуҙан, үҙ-үҙеңдән ҡәнәғәтләнеү тойғоһона бирелеүҙән, үҙ фекереңде генә әһәмиәтле һанап, башҡаларҙан өҫтөнлөк итеүгә юл ҡуйһаң, был өлкәләге нескә ҡыл-каналдар тығыла, исрафлана. Йога тәҡдим иткән эволюцияның иң юғары маҡсатына өлгәшеүгә, шулай итеп, юл ябыла. *«Улар һуҡыр һәм телһеҙ, һаңғырауҙар. Шуға күрә улар тура юлға әйләнеп ҡайта алмай»,* – ти ундайҙар тураһында Ҡөрьән Кәрим [«Әл-Бәҡара» («Һыйыр») сүрәһе, 2:18].

Был ҡапҡанға эләгеүҙән уның тағы ла ҡатмарлыраҡ тыйыу-талаптары ҡотҡарыр: аҡыл, аң кимәлендә ҡомһоҙланма, нәфрәтләнмә, хаҡты, хәҡиҡәтте инҡар итмә. Был турала тапҡыр һүҙҙәр ни ти?

Аң-белем – мәңгелек ғилем;
Аҡыл төбө – тәжрибә;
Аҡыл ҡәҙере әҙәп менән;
Аҡылыңды ҡаш араңа маяҡ ит;
Аҡыллының йөҙө әйтер, йөҙө әйтмәһә, һүҙе әйтер;
Аҡыллының уйында, тиленең телендә;
Аҡыллы ир – ил ағаһы, аҡылһыҙ – ил бәләһе;
Аҡыллы алға барыр, артҡа ҡарар;
Алтындан аҡыл ҡиммәт;
Белемле үлмәҫ, белемһеҙ көлмәҫ;
Ғалим булһаң, ғаләм һинеке;
Ғәҙәтте һәләт еңә;
Һөнәр алды – аҡыл;
Хәйлә – алты, аҡыл – ете.

Сахасрара

«Эй һеҙ, китап әһелдәре! Китаптағы һеҙ йәшергән йәки ситләтеп үткән күп нәмәне аңлатыр өсөн, Беҙҙән һеҙгә рәсүл барҙы. Алланан һеҙгә нур һәм асыҡ китап барҙы. Шуның менән Алла Уның ризалығын алырға теләгән кешеләрҙе тыныслыҡ юлынан алып барып, Үҙ рөхсәте менән ҡараңғынан яҡтыға алып сығара, хаҡ юлға төшөрә».

«Әл-Маидә» («Аш табыны») сүрәһе, 5:15,16

Сахасрара[21] – сәхрәгә сығыу – иркенгә сығыу, тәбиғәт менән ҡушылыу мәғәнәһендә етенсе чакра аша Йыһанға тоташыуға бәрәбәр. Башҡорт – тәбиғәт балаһы. Был чакра баш мейеһе үҙәгендә урынлашҡан. Йога тәғлимәте өйрәткәнсә, аңын, көсҡеүәтен ошонда туплауға өлгәшеүселәр – пәйғәмбәрҙәр кимәлендәге ер кешеләре – кешелекте, иманһыҙлыҡтың иң түбән дәрәжәһенә етеп, юҡҡа сығыу кимәленә еткән осраҡтарҙа ҡотҡарыу, тәүбәгә килтереү өсөн был донъяға үҙ теләктәре менән тыуалар. Улар ярҙамында донъяуи диндәр барлыҡҡа килгән. Сахасрара аша кеше аңы юғары аңға тоташа – был йоганың иң бейек баҫҡысы. Был – рухи ғәмәлдең һуңғы өлөшө, Йыһан ҡапҡаһы.

Йәнен ошо чакра аша сығара алыусылар Нирванаға[22] өлгәшә. Йога тәғлимәте һәм Буддизм дине буйынса, **Нирвана** – тик яҡтылыҡ, нурҙан ғына яралған бушлыҡ, юғары мәғлүмәт донъяһы. Шулай итеп, бында ла ике ят һүҙ тамырҙаш килеп сыға. Был серле чакраны баш түбәһендә көмөштәй аҡҡа зәңгәрһыу төҫ ҡушылған ай – шар рәүешле һүрәтләйҙәр. Был кимәлдең асылына тап килгән әйтемдәр ҙә бар:

Айға үрелгән – нурға күмелгән;
Хәйлә – алты, аҡыл – ете;
Кемдең кем икәнен, ете көнлөк юлға сыҡҡас, белерһең;
Етегән һүҙен ете ҡабат әйтһәң, сауап булыр.

Изге Ҡөрьән был турала түбәндәге аят менән иҫкәртер: *«Эй һеҙ, кешеләр! Һеҙгә Раббығыҙҙан иҫбат (дәлил) килде. Беҙ һеҙгә яҡты нур ебәрҙек»* [«Ән-Ниса» сүрәһе, 4:174].

---

[21] Санскрит: **sahasra** – 1) тысяча; 2) большое количество; «Төрлө тарафҡа таралыу, һибелеүҙе» аңлатҡан «сәсрәү» һүҙе лә бар бит әле; **sahasraka** – тысячеголовый; **sahasrakara** – солнце, тысячелучистый; **saha** – сильный; **«Сохатый»** (рус.) – 1) имеющий развилину, раздвоение; 2) рогатый, с ветвистыми рогами; 3) лось; (ҡариҙел һөйләшендә был һүҙ «болан» мәғәнәһендә ҡулланылыусы **«сәхат»** рәүешендә һаҡланған). Башҡорт телендә **«сата»** – бер төптән сыҡҡан, йәки барыһы бер тиң булған тармаҡ; **«сатыр»** – 1) сәскәһе һабаҡ осонан нур һымаҡ төрлө яҡҡа таралған үҫемлек, сәскәле үҫемлектәр ғаиләһе атамаһы; 2) ағастың ҡояштан ышыҡ яһап торған ботағы, япраҡтары; **sata** (санскрит) – коса, грива, множество, стая, рой; башҡорт телендә «сәс саталаныу», «сәсте саталы итеп үреү» тигән һүҙбәйләнештәр бар; сатҡы – осҡон, ут, яҡтылыҡ, нур; **sattva** (санскрит) – свет, луч; башҡортса «ут, утын сатырлап яна» тип әйтәбеҙ бит.

[22] Санскрит: **nirvana** – 1. 1) исчезнувший; 2) умерший; 3) прекратившийся; 2. 1) исчезновение; 2) конец, прекращение; 3) Нирвана (спасение от перерождений); 4) удовлетворение, ублаготворение; 5) блаженство, вечный покой.

Тимәк, ошо миҫалдарҙан күҙәтеүебеҙсә, башҡорт әҙәби теленең ҡулланыу даирәһен киңәйтеү, уны сәхнә теле, матбуғат теле, көнкүреш һөйләү теле генә булып ҡалыуҙан һаҡлап алып ҡалып, уға йән өрөү, тулы ҡеүәтенә эшкә ҡушыу заруратьтыуғанда, төрлө дәүерҙәрҙә төрлө сәбәптәр арҡаһында ҡулланылыштан сыҡҡан һүҙҙәрҙең тәү мәғәнәләрен киренән тергеҙеү – тарих һандығының төбөндә һаҡланған ынйы-мәрйендәребеҙҙе, йәғни һүҙ байлығыбыҙҙы ҡулланылышҡа сығарып телебеҙҙе байытыу сараһы.

2.3. ДОНЪЯ – ЙОҘАҠ, АСҠЫСЫ – БЕЛЕМ

Махсус әҙәбиәттән билдәле булыуынса, йоганың төп маҡсаты – кундалини ҡеүәтен уятыу, артабан шул сихри көс ярҙамында ғәҙәти булмаған һәләттәренде асыу һәм үҫтереүөсөн, уның төрлө кимәлдәре үҙләштерелергә тейеш. «Йога сутра»ла Махариши Патанджали был тәғлимәттең 8 баҫҡысын һүрәтләй:

1. **Яма** – аңынды алама ҡылыҡтар ҡылмауға йүнәлтеү һәм яман ғәҙәттәрҙән бөтөнләй арыныуға ынтылыу;

2. **Нияма** – бөтә булмышың менән тик яҡшылыҡтар ҡылыуға өлгәшеү, көс-кәреңде изге ғәмәлдәргә сарыф итеү;

3. **Асана** күнегеүҙәре аша кәүҙәңде ҡатып ҡалған рәүешкә күндереп, хәрәкәттәрҙән азат тотороҡло хәлгә кереү;

4. **Пранаяма** – махсус күнегеүҙәр ярҙамында һулышыңды көйләү һәм шул рәүешле эске донъяң менән идара итеү;

5. Һиҙеү ағзаларының эшмәкәрлеген ваҡытлыса туҡтатыуға өлгәшеү һәм, хис-тойғоларҙан арынып, тышҡы донъяны ҡабул итеүҙән алыҫлашыу;

6. **Концентрация** – аңды тәрән туплауға өлгәшеү;

7. **Медитация;**

8. **Самад(х)и** – күҙәтеүсенең аңы күҙәтеүгә дусар булған йәнле йә йәнһеҙ предмет менән бер бөтөнгә әүерелеүе, эске һәм тышҡы донъяның ҡушылыуы.

Күреүебеҙсә, йоганың ҡатмарлы тойолған юғары кимәлдәренә өлгәшеүҙән элек, кеше тәүҙә уның нигеҙ ташын тәшкил иткән Яма һәм Ниямала камиллашырға бурыслы, йәғни яҡшыны ямандан айырырға тейеш. Уның өсөн билдәле бер йола ҡағиҙәләренә буйһоноу, әҙәплелек талаптарын теүәл үтәү, әхлаҡилыҡ сифаттарын тәрән үҙләштереү һәм йәшәү рәүешеңде

мөмкин тиклем ябайлаштырыу мотлаҡ. Ошо юл аша тән һәм күңел таҙалығына өлгәшеүселәргә генә йоганың киләһе баҫҡыстарына күтәрелеү мөмкинселеген биреүсе алымдарҙың серен оҫталар телдән телгә тапшыра килгән.

Ауыҙ-тел ижадының бик боронғо төрөнә ҡараған ҡобайырҙарҙың байтағы әҙәп-әхлаҡ, тәрбиә мәсьәләләренә бағышлана. Әгәр санскрит телендә ҡорау[23] – ***асыуландырыу, тетрәндереү, хәрәкәткә килтереү, ҡыбырлатыу, тулҡынландырыу*** мәғәнәһен бирә икән, тимәк, халыҡ ижадының был төрө халыҡтың аңын уятыуға, иҫен йыйнауға, күңелен тетрәндереүгә, аҡылын һиҫкәндереүгә, тәьҫирләнеүгә булышлыҡ итергә тейеш булып сыға түгелме? Донъя малына әүрәп, рухиәттән алыҫлашҡан халыҡты ғәмһеҙлектән арындырыу, битарафлыҡтан сығарыу – ҡобайырсының маҡсаты!

Ҡоба һүҙенең мәғәнәһен эҙләп, телебеҙҙең һүҙ ҡаҙнаһына юлланһаҡ, уны түбәндәге һүҙбәйләнештәрҙә осратырбыҙ: *ҡоба мал, ҡоба ҡош* – аҡһыл, көлһыу төҫтәге мал, ҡош. Аллаһы Тәғәлә өсөн ҡорбанға килтерер малдың йышыраҡ ошондай төҫләһен һайлағандар. «Аҡ ҡорбан салыу» һүҙбәйләнешен иҫкә алайыҡ, ә бит эре малдың төҫө ап-аҡ булыуы – бик һирәк күренеш;

Ҡобағош – Учалы районында күбәләк ырыуына ҡараусы ауыл исеме. «Аҡмырҙа менән Ҡобағош сәсәндең әйтеше» ҡобайырындағы сәсән исеменән ҡушылған[24]. Аҡ күңелле, бөйөк рухлы, изге кеше булараҡ, лайыҡ булғандыр сәсән был исемгә, тип фаразларға ҡала;

Ҡобатау – Өфө ҡалаһында хәҙерге көндә телебашня урынлашҡан ҡалҡыулыҡ. Ташының төҫөнә генә ҡарап исем бирелгәнме, әллә боронғо замандарҙа ниндәйҙер бик әһәмиәтле ваҡиға мәлендә халыҡты йыйнау, туплау өсөн тәғәйенләнгән изге урын булғанғамы?

ҡоба дала – аҡ ҡылғаны елгә бәүелеп, тулҡынланып ятыусы һил дала;

ҡобара осоу – ағарыныу, тетрәнеү, ҡурҡыу.

Урал тауҙарының тамамланған урынында, башҡорттарҙы тышҡы донъя менән бәйләүсе киң билдәле Ҡәнифә, Ҡуңыр

---

[23] Санскрит: **ҡорау** – 1) вызвать гнев, разгневать; 2) приводить в движение; 3) волновать, колебать; 4) потрясать.

[24] *Ишмөхәмәт Шәрәпов.* Кем һин, Ҡобағош? // Башҡортостан. 2005. № 103.

буға юлдары кеүек үк әһәмиәтле, күктәге Ҡош юлы йүнәлешендәге һәм хажға илтеүсе юлды *Ҡоба юл* тип йөрөткәндәр. Был юл Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районы Медногорск ҡалаһы аша үтә.

Хажға барыусыларҙан ишетеүебеҙсә, Мөхәммәт пәйғәмбәр Мәҙинәнән алыҫ түгел ерҙә төҙөткән тәүге мосолман мәсете *Ҡоба мәсете* тип атала.

Ошоларҙан сығып, *ҡоба* – аҡ, изге мәғәнәләренә тап килә, тимәк, *ҡобайыр* – йәнебеҙҙе имләүсе бер сара, *изге һүҙ*, «тарихи боролош мәлдәрендә, яу-ғәскәрҙәр килгәндә, «аҡһаҡал да аҙашыр, күрәҙә лә яңылышыр» бола ваҡыттарында бәндә зиһенен асып, аҡты ҡаранан, хаҡты нахаҡтан айырып әйтеүсе мәшһүр һүҙ, ҡылыстан үткер ҡорал»[25].

Иң боронғоларҙан һаналған **«Ни яман?»** ҡобайырының исеме үҙе генә лә йоганың **Яма, Нияма** кимәлдәренең атамаларына тап килеп тора. Йоганың ошо баҫҡыстары өсөн тәғәйенләнгән талаптарын, бурыстарын, киҫәтеүҙәрен, тыйыуҙарын үҙләштереү маҡсатына көйләнгән был һорау ни өсөн күп тапҡыр ҡабатлана һуң? Сөнки төпкө аң тик күп тапҡыр ҡабатлаған мәғлүмәтте генә үҙләштерә, йәғни йота, һәм ошо мәғлүмәт нигеҙендә өҫкө аң (аҡыл) аша кешенең ҡылыҡтарында, тәртибендә сағыла башлай.

Бер тигәс тә, ни яман?
Беҙҙең өсөн бей яман.
Ике тигәс тә, ни яман?
Илһеҙ ҡалған ил яман.
Өс тигәс тә, ни яман?
Өлгөһөҙ бескән тун яман.
Дүрт тигәс тә, ни яман?
Дәртһеҙ булһаң – шул яман.
Биш тигәс тә, ни яман?
Бишектәге балаң илап ҡалһа – шул яман.
Алты тигәс тә, ни яман?
Атылып барған атың абынһа – шул яман.
Ете тигәс тә, ни яман?
Етем ҡалһаң – шул яман.

---

[25] *Солтангәрәева Р. Ә.* Хәтер көйө. Өфө: Полиграфия комбинаты, 2003. 92 бит, ил.

Һигеҙ тигәс тә, ни яман?
Һикһән йәшлек ҡарт әсәң,
Һуҡыр күҙен секрәйтеп,
Ҡатҡан билен бөкрәйтеп,
Һыу ташыһа – шул яман.
Туғыҙ тигәс тә, ни яман?
Туҡһан йәшлек ҡарт атаң,
Тумырткалай туҡылдап,
Ябалаҡтай ухылдап,
Утын ҡырҡһа – шул яман.
Ун тигәс тә, ни яман?
Ун бармағы ҡамыштай,
Утыҙ теше көмөштәй,
Уң бите айҙай балҡыған,
Һул бите ҡояштай яҡтырған,
Уңған булған һылыуың
Илап ҡалһа – шул яман.
Ун бер тигәс тә, ни яман?
Уҡ-һаҙаҡлы батыр ир,
Уҡталған аттан йығылып,
Аяҡ-ҡулы ҡаймығып,
Яуҙан ҡалһа – шул яман.
Ун ике тигәс тә, ни яман?
Уттан-һыуҙан ҡурҡҡан ир яман.
Ун өс тигәс тә, ни яман?
Урынһыҙ әйткән һүҙ яман.
Ун дүрт тигәс тә, ни яман?
Ун дүрт йәшлек һылыуҙы -
Ҡартҡа бирһәң – шул яман.

«Ололар һүҙе», «Бейек тауҙың үлгәне», «Ил тигәндең кеме юҡ» тип аталған ҡобайырҙар ҙа нәҡ ана шул әҙәп-əхлаҡ хаҡында. Улар яҡшылыҡ менән яманлыҡты, әҙәп менән әҙәпһеҙлекте айыра белергә өйрәтә, кешеләр араһында итәғәтле, кеселекле булырға өндәй, ил-халыҡ мәнфәғәте өсөн янып йәшәүҙе хуплай. Ритм, рифмаға һалынғанлығы өсөн көйләп уҡыу мөмкинселеге биргән был өгөт-нәсихәттәр күп ҡабатланыуҙан ялҡытмай, киреһенсә, төпкө аңға үтеп, иҫтә ҡала, уй-фекер, йәшәү рәүешенә әйләнә. Шуның менән аң кимәлдәре бик юғары булған шәхестәр – аҡһаҡалдар, сәсәндәр, бындай ҡобайырҙарҙы төрлө йыйындарҙа башҡарып, ябай халыҡҡа рухи

ярҙам күрһәтеү, әхлаҡи тәрбиә биреү маҡсатында Яма-Нияманың бурыстарын үтәгәндәр. Шулай итеп, беҙ башҡорт халҡының иң боронғо сәсмә тел төрҙәренән һаналған ҡобайырҙар, мәҡәлдәр, әйтемдәр нигеҙендә уның әхлаҡ нормаларының боронғо донъяуи дин – йога тәғлимәтенең нигеҙе булған Яма-Ниямаға тап килгәнен асыҡланыҡ. Был дәлилләүҙәр аша тағы ла бер тапҡыр боронғо рухи ҡиммәттәребеҙҙең тәғәйенләнешен билдәләнек. Йога – ул кешенең аңын күтәреү, үҫтереү юлы; әхлаҡи тәрбиә биреү мәктәбе. Ә ул мәктәптә төп вазифаны башҡарыусылар – йоганың иң юғары баҫҡыстарына күтәрелгән аҡыл эйәләре, аң үҫеше буйынса юғары шәхестәр – **сәсәндәр**[26].

Мәғәнәле һәм тәрән йөкмәткеле әйтемдәр, тетрәндергес ҡобайырҙар аша сәсәндәр **һүҙ ярҙамында** тарҡау халыҡты туплаңырға, бер бөтөнгә ойошорға өндәгән:

Ил тигәндең кеме юҡ?!

Ил тигәндең кеме юҡ,
Кеме юҡ та ние юҡ;
Ҡарты ла бар был илдең,
Йәше лә бар был илдең,
Туғы ла бар был илдең,
Асы ла бар был илдең,
«Бир»ҙән бүтәнде белмәгән
Бейе ле бар был илдең,
Кешенең зарын ағыҙған
Йыры ла бар был илдең,
Көйө лә бар был илдең,
Ҡыҙы ла бар был илдең,
Наҙы ла бар был илдең,
Ҡыҙ алам тип, туҡмалған
Таҙы ла бар был илдең,
Барымтаға килеүсегә
Үсе лә бар был илдең,
Урманы күп, тауы күп,
Ере алтын был илдең,

[26] Санскрит: sasni – 1) дающий, жертвующий; 2) добывающий, достающий.

Йылғаһы күп, күле күп,
Һыуы һалҡын был илдең.
Һылыуы бар был илдең,
Матуры бар был илдең,
Йылғаһында һыулаған,
Тупрағында аунаған,
Урал буйын буйлаған,
Ат өҫтөндә уйнаған,
Ҡаяла башаҡ ҡайраған,
Ҡыҙҙарҙың һылыуын һайлаған,
Тыуған ерен һаҡлаған,
Ир намыҫын һатмаған
Батыры бар был илдең!

Бына ошондай күп төҫлө ҡораманан түшәк-юрған ҡораған оҫта кеүек, төрлө кимәлдәге халыҡ ҡатламдарын берләшеүгә өндәүсе **сәсәндәр** генә түгел, ә уларҙың именлеген, бөтөнлөгөн тәьмин итер **батырҙар** ҙа – аң кимәле буйынса анахатанан юғарыраҡ күтәрелгәндәр булып сыға. Был кимәлгә етеү өсөн, үҙеңдә бик күп һәләттәреңде асыу, үҫтереү генә етмәй, ә бөтә булмышыңды ана шул аҫта ҡалғандарҙың аң кимәлен күтәрешер, халыҡты хәстәрләр шәхес булырға кәрәк.

Фольклор – халыҡ тарафынан ижад ителеп, быуындан быуынға тапшырыла килгән рухи мираҫ. Халыҡтың тормош-көнкүрешен, уй-теләктәрен сағылдырған тел хазинаһы, аң-кимәле юғары булған аҡыл эйәләре тарафынан борон-борондан түкмәй-сәсмәй телдән телгә изге аманат итеп тапшырыла килгән. Уның аша һәр бер быуын ата-бабаларҙан күсә килгән тормош тәжрибәһен, әхлаҡ нормаларын үҙләштергән. «Борон аҡһаҡалдар һүҙен тыңлау, сәсәндәр телен өйрәнеү, йолалар үҙләштереү яҙылмаған ҡанундар кимәлендә булған», – тип яҙған ине фольклорсы-ғалим Салауат Галин.

Тимәк, боронғо динебеҙ булараҡ, йоганың тәртип ҡанундары халыҡтың ауыҙ-тел ижадында сағылырға тейеш булып сыға. Ошо фараздан сығып, хеҙмәтебеҙҙең был өлөшөн халыҡ ижадының иң боронғо һаналған төрҙәре – мәҡәл-әйтемдәрҙәге фекерҙең йога тәғлимәтенең йөкмәткеһенә тап килеү-килмәүен күҙәтергә ине.

Халыҡтың борон-борондан килгән тәрән мәғәнәле һәм киң йөкмәткеле рухи тәжрибәһен, фәлсәфәүи һәм әхлаҡи ҡараш-

тарын йыйнаҡ һәм ныҡлы ойошҡан бәхәсһеҙ хәҡиҡәт рәүешендә биргән **мәҡәлдәр һәм әйтемдәр** ҙә ошо ихтыяждан барлыҡҡа килгән. Улар өгөт-нәсихәткә ҡоролған һөйләшеүгә һығымта яһаған ваҡытта фекерҙе нығытыу, ҡеүәтләү өсөн ҡулланылып, тапҡыр һүҙ булып, төпкә аңға, мәргән атылған уҡ кеүек, үтеп инә, шуның менән хәтерҙә һаҡлана, кәрәкле осраҡта аҡыл-кәңәш рәүешендә иҫкә төшә, холоҡ-ҡылығында сағыла, үҙенде үҙең тәрбиәләү, ауыҙлыҡлау алымына әйләнә. Ошоноң менән йога тәғлимәте үҫешкән аң нигеҙендә эске мәҙәниәтле, әҙәпле кеше тәрбиәләүгә өлгәшкән. Шуға күрә башҡорт халыҡ мәҡәл-әйтемдәрен бер ниндәй ауырлыҡһыҙ йога тәғлимәтенең төп ҡанундарына ярашлы төркөмләп була.

Донъя алмаш килә[27]

«Һис шикһеҙ һеҙ бер хәлдән икенсе хәлгә күсәһегеҙ!»

«Әл-Иншиҡаҡ сүрәһе», 84:19

Бөтә замандарҙа ла аҡыл эйәләре был донъяның мәңгелек түгел, ә үҙгәреүсән икәнлеген, тормошта хәл-ваҡиғаларҙың ваҡыт һәм арауыҡ эсендә бер-береһен алмаштырып, сиратлашып килеүен төшөндөрөүҙе алға ҡуйған. Ошоноң нигеҙендә йога, бер яҡтан, ҡырыҫ, ярлы, ыҙа-яфалы тормош кисереүсене ауырлыҡтар алдында бөгөлөп төшмәҫкә, аҙмышына зарланмаҫҡа, алдағы көнгә өмөтөн өҙмәҫкә көйләй. Икенсе яҡтан, байманлыҡта рәхәт йәшәүҙең һәм вайымһыҙ ғүмер һөрөүҙең мотлаҡ буш ләззәттән ялҡыуға килтерәсәге тураһында ла иҫкәртә. Донъялыҡтың ошо ҡанунға ярашлы ҡоролғанын халҡыбыҙ түбәндәге мәҡәл-әйтемдәр аша әйтеп биргән:

---

[27] «Все есть непостоянство».

Ай бирҙе, ҡояш алды;
Алды болот булһа, арты аяҙ;
Аҙҙан күп була, күптән юҡ була;
Ала белһәң – бирә бел;
Алғандың бирәһе бар;
Алы булһа, гөлө лә булыр;
Аласаҡ менән бирәсәк бөтмәй;
Аттан ала ла, ҡола ла тыуа;
Атаң яҡшы, инәң яҡшы – һин кемгә оҡшап шаҡшы?
Аҫраған быҙау осаға тибә;
Аҡ аҡса ҡара көн өсөн;
Аҡса бөткәс, аҡыл керә;
Аҡса кешене кешегә ят итә;
Ас сағыңда ни ашағаныңды туҡ сағыңда онотма;
Аш ҡәҙерен белмәһәң, аслыҡ язаһын бирер;
Ашап туймағанды ялап туймаҫһың;
Аҙ булһа ла, күптәй күр;
Ағас күрке япраҡ – ҡырау төшһә, һарғайыр,
Кеше күрке сепрәк – баҫып кейһәң, таушалыр;
Ағас ҡырҡһаң, оҙон ҡырҡ – ҡырҡа-ҡырҡа ҡыҫҡарыр,
Тимер ҡырҡһаң, ҡыҫҡа ҡырҡ – һуға-һуға оҙайыр;
Алданым, тип маҡтанма, үҙеңде лә алдарҙар;
Аусы ла ҡапҡанға эләгер;
Алманың аҫылын ҡорт ашай;
Аяҡҡа тартһаң – башҡа юҡ, башҡа тартһаң – аяҡҡа юҡ;
Байлыҡ бөгөн миндә, иртәгә һиндә;
Балын яратһаң, ҡортон да ярат;
Бар ҡәҙере юҡта беленер;
Бар сағында бал да май, юҡ сағында ҡаты ла мыты;
Башыңа төшһә, башмаҡ булырһың;
Бер рәхәте, бер михнәте;
Бер әсеһе, бер сөсөһө;
Бер олоно, бер кесене тыңла;
Бер яҡшыға бер яман, бер яманға бер яҡшы;
Бер йыл тартай һимерһә, бер йыл бүҙәнә һимерер;
Бер ҡулы менән бирә, икенсеһе менән ала;
Берәүгә көн дә байрам, көн дә туй,
Берәүгә көн дә һағыш, көн дә уй;
Берәү түрә, берәү түрә янында көн күрә;

Берәүҙә аш, берәүҙә таш ҡайғыһы;
Берәүҙең бәхетенән берәү төшә тәхетенән;
Берәү үлмәй, берәү көн күрмәй;
Бешеүе килһә, төшөүе килер;
Бишектәге бала бишкә төрләнә;
Был да балам балаһы – балдан татлы анаһы,
Был да балам балаһы – ҡара йылан анаһы;
Болотло көндөң бер аяҙы була;
Бөгөнгөнөң иртәгәһе бар;
Гонаһ ҡылһаң, тәүбә итә бел;
Ғүмер уҙа – күлдәк туҙа;
Донъя ҡуласа, әйләнә лә бер баҫа;
Донъя бөтөр, эш бөтмәҫ;
Донъя бер гөл итеп, бер көл итеп ярата;
Донъя бер алдын, бер артын күрһәтә;
Дуҫың кем? – Ирем. Дошманың кем? – Ирем;
Дөйәләй биреп, төймәләй алдым;
Ерле боланды тирле ҡолан ҡыуалаған;
Көлкө көлә китер, артынан ҡыуа етер;
Көл булмайса, гөл булып булмай;
Көн оҙаймай, төн ҡыҫҡармаҫ;
Көн көнгә оҡшамаҫ;
Көн һайын ҡояш булмаҫ;
Кешенән көлмә, үҙең көлкөгә ҡалырһың;
Кешегә соҡор ҡаҙыма, үҙең төшөрһөң;
Кешене ҡарғама, үҙеңә төшөр;
Кире инер ишегеңде ҡаты япма;
Кәмәне ҡоро ерҙә ҡырҡ кеше күтәрә;
Кәләш алһаң, төн ҡыҫҡара;
Күп көлгән күп илар;
Ҡапҡан һайын ҡалъя булмай;
Ҡара тауыҡ та аҡ күкәй һала;
Ҡара һыйырҙан да аҡ быҙау тыуған;
Ҡара кейем ҡасырмаҫ, аҡ кейем батырмаҫ;
Ҡайғы менән шатлыҡ бергә йөрөрҙәр;
Ҡыш – ас, йәй – яланғас;
Ҡыш аҙығын йәй йыйна;
Ҡулдан киткән ҡулға кермәй;
Ҡулың менән бир – аяғың менән йөрө;
Ҡурың бөтһә, кеше ҡәҙерен белерһең;

Ҡоҙоҡҡа төкөрмә, һыуын үҙең эсерһең;
Ирем китте ҡалаға, үҙем киттем далаға;
Ире сығыр ишектән, ҡатыны сығыр тишектән;
Ирем илгә сыҡһа – мирҙыҡы, ҡайтып керһә – минеке;
Иҫкеһеҙ яңы булмай, яманһыҙ яҡшы булмай;
Ит изгелек – көт яуызлыҡ;
Йомшаҡ йәйеп, ҡатыға ултырта;
Йыл йылға оҡшамай;
Йылан ағыу тапҡан сәскәнән бал ҡорто бал табыр;
Йыраҡ һал – яҡындан алырһың;
Йыуаштан йыуан сыҡҡан;
Йәйен аҡтан, ҡышын ҡаранан кейен;
Йәйгә сыҡһаң, ҡышты уйла, ҡышҡа керһәң, йәйҙе уйла;
Йәйе барҙың ҡышы бар;
Михнәт күрмәгән рәхәт күрмәгән;
Михнәт көйрәтә, аҡылға өйрәтә;
Саҡырған ергә бар, ҡыуған ерҙән кит;
Ситлеккә ябылғас, йыртҡыс та йыуашланған;
Һандуғас юҡ йылды ҡарға дан тотор;
Һыу тулҡынланмай тормай;
Һылыу күңел аҙҙырыр, алтын юлдан яҙҙырыр;
Хикмәт бар ерҙә михнәт бар;
Хәйерсе байыһа, хәйер бирмәҫ;
Шатлыҡ килмәй ҡайғы китмәй;
Тамсы тама-тама таш тишә;
Тамсынан диңгеҙ йыйыла;
Таш менән атҡанға аш менән ат;
Ут менән һыу уйнамаҫ;
Уттан алды, һыуға һалды;
Уң ҡулым, һул ҡулым – барыһы ла үҙ ҡулым;
Уңы барҙың һулы бар;
Үлем илауһыҙ, туй үпкәһеҙ, ер ташһыҙ, ил яуһыҙ булмаҫ;
Әсеһеҙ сөсө булмаҫ;
Әсене татымаһаң, тәмлене танымаҫһың;
Әүәл яфа күрмәй, һуңынан вафа килмәй;
Әүәлгенең михнәте – ахырғының шатлығы,
Әүәлгенең шатлығы – ахырғының михнәте;
Эсе барҙың тышы бар, тышы барҙың эсе бар;
Юҡты юҡ итһәң, бар булыр;
Юҡтан бар булған, барҙан юҡ булған;

Юҡтан бар булған – Тәңре менән тиң,
Барҙан юҡ булған – үлем менән тиң;
Яҡшы көндө өмөт иткән – яман көнгә түҙәр;
Яфа тартмай, вафа[28] юҡ;
Яңы ҡаза килгәс, иҫке ҡаза ишек төбөндә ултыра;
Яҙ – игенсе, ҡыш – теләнсе;
Яҙ сәсеүен ҡыштан ал;
Ярлы бай булырға, сирле һау булырға тырышыр;
Ябаға тайҙы хурлама: яҙға сыҡһа, ат булыр,
Йәш егетте хурлама: уҡыһа, илгә баш булыр.

Шулай итеп, был мәҡәл-әйтемдәр тормоштоң төрлө осраҡтарына ярашлы рәүештә күп һәм төрлө йөкмәткеле булһалар ҙа, уларҙың мәғәнәһе бер үк киҫәтеүгә тап килә – *донъя алмаш килә.* Донъяның бер көйө генә тормауы тураһында фәлсәфә итеү башҡорт халыҡ йырҙарында ла таралған:

Эй, алмағасҡайҙары ғына ботағынан
Тамсы ғына тамсы ла бал тама.
Бөткән малдар өсөн ҡайғырмайыҡ,
Башҡай иҫән булһа, мал таба.

«Алмағас»

Таналыҡай күлдең ҡамышынан
Ҡиблаларҙан үткән ел үтмәй.
Эсер һыу ҙа ризыҡ бөттөниһә,
Тыуған илен ташлап кем китмәй.

«Хажиәхмәт»

Ғәйшә һылыу, ас тәҙрәңде,
Буҙ арҡаһын күреп үк ятайым.
Әпкилегеҙ мулла, уҡыһын ясин,
Асылыма инде ҡайтайым.

«Ғүмәров»

---

[28] Вафа – ғәр.: 1. Тоғролоҡ, ышаныс; 2. Ир-ат исеме.

Сабындарға сыҡһаң, сыҡ сағылға,
Сағылдарҙан бүреләр күренә.
Иҫән саҡта ирҙәрҙең беләйек ҡәҙерен,
Үлгәс ҡәҙерҙәре бит беленә.

«Тәфтиләү»

Был ҡанундан бер кем дә, бер ҡасан да азат түгел. Уны беҙ башҡорт халыҡ эпосы «Урал батыр»ҙа Урал менән Шүлгәндең өлгәһендә лә күҙәтәбеҙ.

Уралдың Шүлгәнгә әйткәне:

Кешенең ҡара төнөндә
Айы ҡалҡыр тимәнең,
Айы батһа, таң атып,
Көн балҡырын белмәнең,
Инде күрҙек күҙ менән
Кешегә көн килгәнен,
Дейеүең менән үҙеңә
Ҡара төндөң килгәнен;
Дейеү йөҙгән диңгеҙҙең
Ергә әйләнеп ҡалғанын,
Әзрәҡә тигән батшаңдың
Ҡаялы тау булғанын;
Уҫал да менән аҡ ҡыҙҙан
Һаҡмар батыр тыуғанын;
Йылан ейгән ирҙәрҙең,
Унда бикле ҡыҙҙарҙың
Көләс йөҙлө булғанын,
Алдыңа килеп тыуғанын
Инде күреп, ышанһаң;
Кешегә ҡаршы сайҡашып,
Яуызлыҡтан яу асып,
Мәңге еңәлмәҫеңде,
Бер туҡталып уйлаһаң,
Уҫаллығыңа баш булып,
Кешелекте һайлаһаң,
Үҙ арыҫланың һүҙенән
Өлгө алырлыҡ булһаң, —
Мин дә бер юл ҡуяйым,
Һинән яҡшылыҡ көтәйем.

Күреүебеҙсә, Уралдың был мөрәжәғәтендә ошо ике ҡапма-ҡаршылыҡтың көрәшендә изгелектең яуызлыҡтан өҫтөнлөк алырына өмөтө бағланған.

Оҡшаш оҡшағанын табыр[29]

Ашына күрә табағы, балына күрә ҡалағы.

Башҡорт халыҡ мәҡәле

Ғүмер юлын үтә барған һайын, бәндә был тормоштоң күргәҙмәле һәм ғибрәтле һабаҡ икәненә тәрәнерәк төшөнә бара. Уның яҙмышына тәғәйен ата-әсә, туғандар, дуҫ-иш, икенсе яртыһының кем булыры – барыһы ла **карма** законы аша хәл ителгән, йәғни бәндә үҙенә тейешле ҡуласа менән ҡармап алынған булыр:

Һандуғасҡай меҫкен, һай, ҙур түгел,
Ултырғанҡай ере киң түгел.
Әҙәмдәрҙән әҙәм, ай, кәм түгел,
Тик бәхеткәйҙәре тиң түгел.

«Барашов»

Үҙеңде уратып алған мөхит, эргә-тирәңдең хәл-торошо – барыһы ла эске донъяңдың, ниәттәреңдең тышҡы сағылышы, ти йога. Психотерапевтар кемуҙарҙан асыш яһап, беҙгә өйрәткән аҡыл-кәңәштәре – беҙҙең ата-бабаларға күптән инде таныш булған хәҡиҡәт! Түбәндәге мәҡәл-әйтемдәр ошо йәһәттән бик фәһемле:

Аҡсаны аҡса таба;
Айныҡ башта – айныҡ аҡыл;
Аптыраш менән йөҙәш икәүһе кергән өйҙәш;
Ас теләнсене туҡ теләнсе ҡыҫтаған;
Астың хәлен ас белер, туҡ белмәҫ;
Атаһы юҡ ул – ҡуштан, инәһе юҡ ҡыҙ – инмәй тыштан;
Атаһы башҡа менән ҡуян аулама,
Заты башҡа менән болан аулама;

---

[29] «Подобное притягивается подобным».

Ат ат эҙенән йөрөр;
Аттың үҙе ниндәй – йөгө шундай;
Атты ат һаҡлай;
Аты барҙың дуҫы бар;
Аты барҙың ҡанаты бар;
Ат аҙғыны тайға, ир аҙғыны байға эйәрер;
Ауан ауға сыҡһа, ауҙа ғауға сыға;
Ашына күрә табағы, балына күрә ҡалағы;
Бал себенде, яҡшы һүҙ етемде эйәләштерә;
Бар өҫтөнә бар, май өҫтөнә бал;
Бар янына бар һыя;
Бай бай өсөн тырыша, ярлы ярлыға булыша;
Бай балаһы байға, бей балаһы бейгә оҡшар;
Бай менән бай туған;
Байға ярлы дуҫ булмаҫ;
Бай байҙы оҙатыр ҡоламаһын тип, ярлыны оҙатыр урламаһын тип;
Байҙы мал баҫыр, ярлыны бала баҫыр;
Байҙың аласағы, ярлының бирәсәге күп булыр;
Байҙың ишеге байға асылыр;
Байҙың күңеле малда;
Батҡан тайғандан, йығылған һөрөнгәндән, йыртыҡ тишектән көлгән;
Бер алдар гел алдар;
Бер бәләгә тарыһаң, башың бәләнән сыҡмаҫ;
Бер кирегә китһә, гел кирегә китә;
Берәүҙең быҙауы үлһен тиһәң, үҙеңдең үгеҙең үлер;
Булмаҫ иргә – бөкрө ҡатын;
Бәлә яңғыҙ килмәй, бәләһе артынан ҡазаһы йөрөй;
Бүре ҡуйға дуҫ булмаҫ;
Дуғаңа ҡарап, ҡыңғырау таҡ;
Егет һүҙен егет йыҡмаҫ;
Егет – егеттең көҙгөһө;
Егетте дуҫынан таны;
Елгә ут һимерер;
Еләк еләккә ҡарап бешә;
Инәһе ниндәй – ҡыҙы шундай;
Иплегә иптәш күп;
Ир-егет өйҙән сыҡһа, өйөрөн табыр;
Ир ҡәҙерен ил белер;

Ишәй ишен Бохаранан барып тапҡан;
Ишәй ишен, ҡушай ҡушын тапҡан;
Ишәк түшәк ҡәҙерен белмәҫ;
Йылыға йылан да эйәләр;
Йәмһеҙҙең көҙгөһө насар, булдыҡһыҙҙың көрәге алама;
Йорт һатып алма, күрше һатып ал;
Кемдең арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырлайһың;
Керменә күрә сығымы;
Кесегә – мәрхәмәт, олоға итәғәт күрһәт;
Кесегә шәфҡәт менән юл бир, олоға хөрмәт менән ҡул бир;
Кәкре менән бөкрө бер туған;
Кәкрегә бөкрө;
Көрәге булһа, сүбе табыла;
Көнөн – ҡайғы, төнөн – хәсрәт;
Күл күлгә ҡойор;
Күңелдә юҡты күҙ күрмәҫ;
Ҡаҙ ҡаҙ менән, өйрәк өйрәк менән осор;
Ҡаҙ ҡаҙ менән, таҙ таҙ менән;
Ҡунаҡ ҡәҙерле булһа, ҡаҙан тиҙ ҡайнай;
Ҡунағына күрә хөрмәте;
Ҡар башына ҡар етер, хан башына хан етер;
Ҡараҡ ҡараҡты бүркенән таный;
Ҡарға ҡарға менән осор;
Ҡарға ҡарғаны маҡтар;
Ҡарлуғас балаһын осорға айыу өйрәтмәҫ;
Ҡара болотто ҡара урман тарта;
Ҡатыны яман ир аҙыр;
Ҡот киткән өйҙән йот китә;
Ҡош ҡош менән аулана;
Мал эйәһенә оҡшай;
Салышҡа – ҡыйыш;
Силәгенә күрә ҡапҡасы;
Сүп өҫтөнә сүмәлә;
Һөймәгәнгә һөйкәлмә;
Һабаһына күрә бешкәге;
Тайға тай, байға бай эйәрер;
Тауығына күрә төлкөһө;
Тиңең менән тибешһәң дә килешә;
Тиң тиңе менән, йүнле йүне менән;
Тиң тиңе менән, тинтәк тиле менән;

Тиң тиңде, бизмән герҙе тарта;
Тиң-тош килмәй күңел иремәй;
Туған туғандың маллыһын ярата;
Ут менән һыу ҡауышмаҫ;
Шатлығыңды шатланышырлыҡ кешегә, ҡайғыңды ҡайғырышырлыҡ кешегә һөйлә;
Хәйерсене хәйерсе күрә алмаҫ;
Юрғалыға юлдаш булма;
Эйәһенә күрә бейәһе;
Эт аяғына эт баҫмаҫ;
Эт менән эт, иҫерек менән иҫерек дуҫ;
Ялҡауҙың аты ла аҙымһыҙ булыр;
Ярлыны хәйерсе талай;
Ярлы кешенең аҡсаһын яман тауар бөтөрөр;
Ярлы булыр кешегә ҡазалы мал тап булыр;
Ярлы малы ярҙан осор;
Яҡшы мал эйәһен табыр;
Яҡшынан яҡшы тыуыуы – ғәҙәт, яҡшынан яман тыуыуы – ғәжәп;
Ярлы булыр егеткә ҡазалы мал тап булыр,
Яңғыҙ булыр егеткә ҡыҫыр ҡатын тап булыр.

Донъя – алдаҡ[30]

Улай тиеп кем әйтә,
Былай тиеп кем әйтә?
Ышанмағыҙ был донъяға –
Был донъялар һемәйтә.

Халыҡ йыры

Йога аңлатыуынса, һәр беребеҙ, хис-тойғоноң алдауы нигеҙендә, ысынбарлыҡты боҙоп күҙ алдына килтерә. Шуға күрә һәр бер быуын, ололарҙың киҫәтеүенә ҡарамай, һанап бөтөргөһөҙ күп хаталар ҡыла. Абынғас-һөрөнгәс, арҡаға туҡмаҡтар, башҡа бәләләр төшкәс, йәки, көс-кәр китеп, түшәккә йығылғас ҡына, һиҫкәнә әҙәм балаһы – һәм был бөтә кешелек

[30] «Все есть иллюзия».

тарихына хас. Халыҡ был әсе хәҡиҡәтте ябай ғына итеп йырға ла һалып әйтә:

Урал ғына тауҙың көн битендә
Турсанай ҙа аттың саңдауы.
Улай ҙа тиеп, былай тиеп,
Ах, шул донъяларҙың алдауы.

«Турсанай»

Ошондай уҡ киҫәтеү-иҫкәртеүҙәрҙе башҡорт халыҡ йырҙарында тағы ла осратып булыр:

Ағиҙелкәйҙәрҙе үрләп бара
Аҡ сабаҡкай менән күк бәрҙе.
Хайран ғына булам был донъяға:
Һемәйтә бит донъя күптәрҙе.

«Ир-егет»

Халыҡ йырҙарының ҡайһы берҙәрендә донъяның алдаҡлығына туранан-тура күрһәтмә булмаһа ла, ул күсмә мәғәнәле төрлө сағыштырыуҙар аша (мәҫәлән, эстә ут яныу, тонош һыуҙағы шәүлә, томан, күҙ алдына килеү һ.б.) төҫмөрләнә:

Һауала ғына осҡан, ай, аҫыл ҡош,
Ыласын ғына тиһәм дә, биле ала.
Эскенәйем тулып, ай, ут яна,
Һүнһен генә тиһәм, бүтән ни ҡала?

«Шәүрә»

Таштуғайҡай, һинең йылғаҡайың
Тоноп ҡына аҡҡан һыу икән.
Тоноҡ ҡына һыуҙа шәүлә сағыла,
Байғүбәгем иҫән-һау микән?

«Таштуғай»

Иртә лә генә томан, кис тә томан,
Был томанҡайҙарға ни булған?

Тауға ла менеп, ташҡа баҫып,
Һин ҡарарһың, йәнем, мин булмам.

«Томан»

Ирәндеккәй тауы, ай, зәңгәр күк,
Ҡырҡты ла ғына тауы тома күк, бөйрәкәй.
Күҙ күрмәгән ерҙә йөрөһә лә,
Күҙ алдымда баҫып тора күк, бөйрәкәй.

«Бөйрәкәй»

Ағиҙелкәйҙәге, ай, ҡамыштар
Шаулашалар, ғүмер үтә, тип.
Күңелкәйем йәшәй өмөт менән,
Алда рәхәт ғүмер көтә, тип.

«Һыу өҫтө»

Донъяның күҙгә күренгән, ҡолаҡҡа ишетелгән, тәме тойолған ләззәттәре менән үтә мауығыу йән талап итер рухи ҡиммәттәрҙән буш ҡалдырып, үкенес кисертәсәк. Түбәндә килтерелгән өгөт-нәсихәттәр, буш шалтырауыҡ-ялтырауыҡтарға ымһынып, яңынан-яңы **ҡармаҡҡа** эләкмәҫкә өйрәтә, эшкә ашмаҫ хыялдарҙан арынып, донъяға айыҡ ҡараштағы булырға саҡыра:

Айыуҙан ҡастым, бүрегә юлыҡтым;
Алланан ҡасҡан муллаға барып тотолған;
Аллаға ышан, үҙең ҡымшан;
Аллаға тапшырған атһыҙ ҡалған;
Алтын тотҡан алтынды таныр, күрмәй күргән еҙҙе лә алтын тиер;
Алтын йүгән атты яҡшыртмаҫ;
Алыҫтағы ҡояш нығыраҡ йылыта;
Арыҫландың, айға менәм тип, биле биртенгән;
Аслыҡ ҡапсыҡ аҫтырыр, иманыңды һаттырыр;
Асҡа кәңәш биргәнсе, күмәс бир;
Ат бар – арба юҡ, ҡаҙан ҡайнай – ярма юҡ;
Аты юҡ, кәртә төҙәткән;
Атын алдырғас, ҡапҡаһын йүнәткән;
Аҙбары бар, аты юҡ;
Аты булһа, ҡамыты булмай;

Ата алмаған атаһына үпкәләр;
Атай үлде – иркен ҡалды, ҡыҙыл тышлы туны ҡалды;
Атҡа менгәс, атаһын танымаған;
Ауыҙ ашай, күҙ ояла;
Байға ялланма, юҡҡа алданма;
Байҙың «юҡмын» тигәненә, ярлының «туҡмын» тигәненә ышанма;
Байҙар күк ат егә тип, мин дә ектем күк бейә;
Байлыҡ боҙға яҙған;
Бармаған ерҙә баҡыр бар,
Күрмәгән ерҙә көмөш бар,
Алмаған ерҙә алтын бар,
Барһаң, тимер табылмаҫ;
Беләгенә ҡарама, йөрәгенә ҡара;
Бер юл бар – алыҫ, алыҫта булһа – яҡын, бер юл бар – яҡын, яҡында булһа – алыҫ;
Бер йыландан ҡасып, икенсе йыланға һырынма;
Бөтә донъяны һыу баҫыуҙан өйрәккә ни ҡайғы;
Булмағанға ышанма;
Бүренән бүрек ташлап ҡотолоп булмай;
Булмаҫ ир буйраҡ һыуҙа балыҡ тота;
Бәхетте сепрәккә төрөп йөрөтмәйҙәр;
Бәхет ҡош түгел, бер ысҡынһа, тотоп булмай;
Диңгеҙ һыуы бик күп тә – эсергә ярамай;
Диңгеҙ төбөндәге ынйынан тау башындағы таш артыҡ;
Донъя рәхәте сабый саҡта;
Дошман ни тимәҫ, төшкә ни кермәҫ;
Дуҫ битлеген кейгән дошман хәтәр;
Дуҫтан дошманды айыра бел;
Дуҫың күбәйһә, шуны бел: аранан бере дошмандыр;
Гөләнә ҡарама, төбөнә ҡара;
Ел сәсһәң, дауыл урырһың;
Ҙурҙы уйлап, әҙҙән ҡалма;
Кеше елкәһе ауыртмай;
Кеше иренә ышанып, түшәк йәймә;
Кеше ауыҙындағы һөйәк ҙур булып күренә;
Кис ҡурҡҡан көндөҙ сыра яндырыр;
Күҙгә күренде, ҡулға кермәне;
Күҙ күрмәһә, көйөнөсө юҡ;
Күктән көткән – ерҙә табылған;
Күптең һанын биргәнсе, аҙҙың бәрәкәтен бирһен;

Күпте теләгән – берҙән ҡоро ҡалған;
Күрше тауығы ҡаҙ булып күренер;
Күршенеке күрекле күренә;
Көн күгендә ҡояш ялтырай, ул да миңә булһасы;
Кәзә – тоҙ, ирҙәр ҡыҙ тип ҡартайыр;
Ҡабул булмаҫ доғаға амин тотма;
Ҡаҙанға һалмағанды ҡашыҡ менән эҙләмә;
Ҡатындың һүҙенә алданма, йүгерек атыңа таянма;
Ҡолағын яткырған аттан һаҡлан;
Ҡошто ем менән алдайҙар;
Ҡурҡканға ҡуш күренгән;
Ҡыҙ тип, ҡыҙыҡма, ҡәйнә ҡыҙҙан ярала;
Ҡыҙҙың күҙе ҡыҙылда;
Ҡыҙыл алмаға алданма;
Ҡыҫыр ҡатындан бала таптырма;
Ҡышҡы көндөң йылыныуына, дошмандың йылмайыуына ышанма;
Иҙел менән боҙға таянма;
Ике кәмә ҡойроғон тотҡан – һыуға батыр;
Иҫке өйҙө һүткәнсе, яңыһын һал;
Иҫәпһеҙҙең ҡуйы теүәл;
Йүгерек атҡа менгән тәңреһен онотҡан;
Йоҡлаған йыландың ҡойроғона баҫма;
Йөҙө аҡ тип, алданма, эсе ҡара булмаһын;
Йәйҙең өйө киң;
Йәмһеҙ булһа ла – бай ҡыҙы матур, ярлы ҡыҙы матур булһа ла – йәмһеҙ;
Матур матур түгел, һөйгән матур күренер;
Себенгә суҡмар күтәрмә;
Селләлә берәү өшөп үлгән, байрамда берәү асығып үлгән;
Ситкә ышанған илһеҙ, дошманға ышанған ҡулһыҙ,
Байға ышанған – аш-һыуһыҙ, ҡолға ышанған атһыҙ ҡалған;
Сәскәһенә ҡыҙығып, сәнскеһенә ҡаҙалма;
Һалам ялҡыны тиҙ һүнер;
Һауалағы торна тип, ҡулыңдағы турғайҙы осорма;
Һауанан балыҡ эҙләмәйҙәр;
Һыуға таянма, дуҫҡа инанма;
Һәр һаҡаллы олатайың булмаҫ;
Һәр ялтыраған алтын түгел;
Табағыңда ашың күп булһа, дуҫ-ишең күп була;

Тайға эйәрмә, атҡа эйәр;
Тауға ҡарап, тау булма;
Тауыҡҡа күҙ һалып, һарыҡтан ҡолаҡ ҡаҡма;
Теләк ҡоторта, оят тыя;
Тилегә диңгеҙ тубыҡтан;
Туй ашы менән дуҫ табылмай;
Туйға барһаң, туйып бар;
Туйғас, бал да әсе тойола;
Төлкө тотам тип, ҡуяндан ҡоро ҡалма;
Төлкө артынан йөрөп, көлкөгә ҡалма;
Төлкө төшөнә – тауыҡ, тауыҡ төшөнә тары керә;
Төтөндән ҡурҡҡан утта янған;
Ун икенең бере юҡ;
Үҙ елкәмде күрмәйем, ҡәйнәмдеке – ҡап-ҡара;
Үҙе юҡтың күҙе юҡ;
Уңмағанды ҡыума;
Үлгән һарыҡ бүренән ҡурҡмаҫ;
Үлгән ағайға – юғалған тай;
Ышанған ояла ҡош юҡ, ышанған тауҙа кейек юҡ;
Әсе менән сөсөнө татыған белер, алыҫ менән яҡынды юртҡан белер;
Әҙәмдең күҙе туймай;
Эсе менән тышы булһа, тун тегер инем, энә менән еп кенә юҡ;
Эшсән бәхетте эштән, ялҡау ситтән эҙләр;
Юғалған ҡуйҙың ҡойроғо ҙур булыр, үлгән һыйыр һөтлө булыр;
Юҡ аҡсаға ҡапсыҡ текмәйҙәр;
Юҡҡа алданып, барҙан буш ҡалма;
Ямғырҙан ҡасып, буранға эләкмә;
Ямғырҙан ҡасып, даръяға эләкмә;
Яҡшы көндәр күп булһа ла, аҙ күренер, яман көндәр аҙ булһа ла, күп күренер.

Шулай итеп, халыҡ ижадының был төрөндә донъяның хәл-ваҡиғаларын айыҡ аҡыл, һиҙгер йөрәк менән ҡабул итергә һәм хис-тойғоларға алданмаҫҡа өйрәтеүҙәр һалынғаны асыҡтан-асыҡ сағыла. Хискә бирелеп, телеңде лә, ҡылыҡ-фиғелеңде лә бәйҙән ысҡындырып ебәрһәң, гонаһтарға батып китеүгә киң юл асыла.

Донъя — ғазап[31]

Иртә лә генә томан, кис тә томан,
Ел өрмәй ҙә томан асылмай.
Иртә лә генә хәсрәт, кисен ҡайғы,
Бер йырламай йөрәгем баҫылмай.

«Ҡалды»

Был донъяға килгән йән эйәләре кисерер ыҙа-яфаларҙың бөтәһенә лә тигеҙ тейерҙәре бар: тыуым, сир, ҡартлыҡ, үлем. Унан башҡа ярлылыҡ, ҡоллоҡ, аслыҡ, етемлек, яңғыҙлыҡ, дошманлыҡ, гәҙелһеҙлек, айырылышыу, төрлө юғалтыуҙар кеүектәре лә һағалай әҙәм балаһын. Был турала Ризаитдин Фәхретдин: «Донъя наҙандарҙы алдай, уҡымышлыларҙы ла рәхәтләндермәй. Уға әҙәм балалары илап килеп керһәләр, олоғайып, михнәт күреп, яфа-ғазап сигеп, зарланып үләләр», – тигән. Башҡорт халыҡ йырҙарынан миҫалдарҙа ла ошо фекерҙе күҙәтеп була:

Йүгереп тә барып һыуҙар эстем,
Ниңә генә кистем, ниңә эстем?
Был донъяҡайҙарҙы күрер өсөн
Ниңә генә тыуҙым, ниңә генә үҫтем?

«Урал»

Һикереп тә генә төштөм гөл баҡсаға,
Гөл мамыҡҡайына ла уралдым.
Ни булыр ҙа икән был башыма,
Йоҡоларымдан илап уяндым?

«Сәфәр көйө»

Ҡараңғы ла урман, ҡараңғы төн,
Яҡшы аттар кәрәк бит үтергә.
Заманалар ауыр, михнәттәр күп,
Дуҫ-иш кәрәк донъялар көтөргә.

«Ҡара урман»

Соран да ғына буйы, эй, ҡылғанлыҡ,
Бүҙәнәләр йүгерә төбөндә.

---

[31] «Святая Абсолютная Истина Страдания».

Фәҡир ҙә генә булып, етем ҡалһаң,
Башҡынайың тормай илеңдә.

«Соран буйы»

Эй, арлы ғына бирле көй көйләйем
Аҡ күрнисәләрҙең эсендә.
Эй, һин белмәйһең, янышым, хәлгенәмде,
Уттар яна минең эсемдә.

«Юныс»

Үтер микән ғүмерем был зинданда,
Һүнер микән йөрәк ялҡыны?
Ялҡындары һүнмәй гүргә керһәм,
Баҫыр микән ҡәберем һалҡыны?

«Яуымбай»

Ошондай ыҙа-яфаларҙың йән эйәһенә хата, гонаһтарҙан үкенес кисереп, тәүбәгә килеү, рухи таҙарыныу өсөн бирелгәнен тойғанда ғына кеше һынып-бөгөлөп төшмәй, киреһенсә, минминлеге менән көрәшеп, үҙ етешһеҙлектәренән арына, кәмселектәрен еңеп сыға. Тормош, шулай, битараф булған бәндәне өгөтнәсихәткә үҙе өйрәтер:

Башҡа бәлә килде тип, башты ташҡа ормайҙар;
Бурыс ашағансы, борос аша;
Бурысһыҙ ярлылыҡ – үҙе байлыҡ;
Бәндә һағышлай, Хоҙай бағышлай;
Бәлә ағас башынан түгел, әҙәм башынан йөрөр;
Бәлә аяҡ аҫтында;
Бәләне һатып, йә атып алалар;
Етем илаһа, донъя илар;
Ирҙе михнәт еңә алмаҫ;
Ирһеҙ бер илар, ирле мең илар;
Ир ҡайғыһы итәктә, бала ҡайғыһы йөрәктә;
Кешене эш түгел, ҡайғы бөтөрөр;
Килер ҡаза ирҙән аҡыл таптырмаҫ;
Күҙ йәшенә быуа юҡ;
Күл ҡамышһыҙ, бәндә һағышһыҙ булмаҫ;
Күрәсәкте күрмәй, гүргә кереп булмай;
Ҡайғы ҡайғыны баҫа;
Ҡайғы юҡта, ҡайғы иттем ҡайным ҡарттың үлемен;
Михнәтһеҙ тапҡан мал иҫәпһеҙ китер;

Нужна күрмәй, ир булмай;
Нужна ҡалас ашата;
Сабыр иткән мораҙына еткән;
Сирлегә үлем күрше;
Һәр башҡа бер үлем, яман ҡатын алғанға ике үлем;
Түҙгән – тимер өҙгән;
Тән ҡартая, йән ҡартаймай;
Үлемдән оят көслө;
Әжәл менән бурыстан ҡотола алмаҫһың;
Юл аҙабы – гүр ғазабы;
Яҡшы килен – килем, яман килен – үлем.

Йәшәйештең фәлсәфәһе тип аталасаҡ Будда тәғлимәтенең нигеҙ ташы «Абсолют Хәҡиҡәттең Дүртәүһе»[32] тигәне лә шул турала булыр:

1. Тормош – ул, асылда, ғазап;

2. Был ғазаптарҙың сәбәбе – ыҙалы тормоштоң алдаҡтарына, нәфселәнеп, йәбешеп ятыуҙан;

3. Шул нәфсе-теләктәрҙе тыйыу – ыҙа-яфаларҙан арыныуҙың башы;

4. Ҡотолор өсөн урта юл яҡшы; ул юлды үтеү түбәндәгеләрҙән ғибәрәт: «Донъяға ысын ҡараштан бағыу», «Зиһенде зирәк итеү», «Дөрөҫ телмәр тотоу», «Әҙәпле ҡылыҡтар ҡылыу», «Хаҡ йәшәү», «Хаҡлыҡта ныҡышмалылыҡҡа өлгәшеү», «Хәтерҙе үҫтереү», «Нәфсе-теләктәрҙе һүндереү».

Сәбәбенә күрә — эҙемтәһе

«Берәү тура юлдан барһа, үҙе өсөн бара, берәү аҙашһа, үҙенә зарарға аҙаша, һис бер йөк күтәреүсе икенсе йәндең йөгөн күтәрмәҫ».

«Әл-Исра» («Төндә күсереү»)
сүрәһе, 17:15

Карма тураһындағы тәғлимәт буларак, йога кешенең был тормоштағы хәл-торошон элекке ҡылған ҡылыҡтарына бәйләп

---

[32] *Татхагата Абидамма.* Абсолютный Всепобеждающий Закон Победителей в Истине. Книга 4. «Соответствующее Истине САЧЧА-САНЬЮТТА (Сутра, имеющая связь с Абсолютной Истиной)». М., 1999.

аңлата. Йәғни сауабы ла, язаһы ла һәр кемдең үҙенеке – үҙенә. Был хәҡиҡәт бераүҙәрҙе тормош һынауҙарын аңлы рәүештә күндәм ҡабул итергә, сабыр булырға, башҡаның уңышына көнләшмәҫкә, кеше бәхетенә ымһынмаҫҡа өйрәтә. Икенселәре иһә, уңышҡа өлгәшеп, рәхәтлектә йәшәгәндә тәкәбберлек, һаранлыҡ, ҡомһоҙлоҡ кеүек кире сифаттар булдырмауға ынтылырға тейеш. Шул уҡ ваҡытта әлеге бөтә булмышың менән киләсәк өсөн сәбәп тыуҙырыуыңды белеү, үҙ сиратында, маҡсаттарыңды үргә йүнәлтә, йәшәү рәүешең өсөн яуаплылыҡты арттыра. Ошондай идеяны беҙ башҡорт халыҡ йыры «Тәфтиләү»ҙә күҙәтәбеҙ:

Иртәнсәккәй томан төшкән саҡта,
Йылҡылар ҙа юшап төшә ул.
Тәфтиләүҙең үҙе күрмәһә лә,
Тоҡомона күҙ-йәш төшөр ул.

Йыһандың берҙән-бер һәм ғәҙел карма ҡанунына нигеҙләнгән донъяуи ҡарашы, шулай итеп, башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадында киң сағыла. Халыҡ йырҙарында тормоштоң төрлө хәл-ваҡиғаларына, осраҡтарына тап килеүсе был күренеш фәлсәфә кимәлендә дөйөмләштерелә:

Иртә менән тороп, эшкә лә барҙым,
Ҡулым тотмай ушатты алырға.
Хаҡ Тәғәлә беҙгә лә ҡушҡан икән
Тәрән шахталарҙа ҡалырға.

«Шәйхетдин шахтер»

Ашамай ҙа атым ҡыр үләнен,
Ашай атым күлдең күрәнен.
Былай ғына булып йөрөүемде мин
Бәхеткәйем юҡтан күрәмен.

«Татыу йәшәүҙәр»

Атай-инәй мине эҙләй микән,
Эсем янып, тышым көйгәнем?
Тәҡдиремдә шулай ҡушҡан микән –
Ят ҡулында ҡалды һөйгәнем.

«Ят ҡулына ҡалды һөйгәнем»

Әҙәм балаһын үҙенә тыумыштан буйһондорор был *ҡармауҙы* төрлөсә атау тәбиғи хәл. Ундай төшөнсәләрҙең төп башҡорт теленә ҡарағандары ла бар: *яҙмышыңа яҙылғанды күреү, яҙмышҡа күнеү.* Халҡыбыҙҙың Ислам динен ҡабул итеү осоронда яңы терминдар үҙләштерелгәнен дә күҙәтеп була халыҡ йырҙарында: *хаҡ Тәғәлә ҡушҡанды үтәү, тәҡдиргә буйһоноу, бәхеттең тиң түгеллеген ҡабул итеү* һ. б.

Һандуғасҡай меҫкен, һай, ҙур түгел,
Ултырғанҡай ере киң түгел.
Әҙәмдәрҙән әҙәм, ай, кәм түгел,
Тик бәхеткәйҙәре тиң түгел.

«Барашов»

Ялан ғына ерҙең дә, әй, үләнен,
Усҡайыма алдым да күрәнен.
Ауырыма ла, башым, түгелмә, йәшем,
Хаҡтың яҙмыштарын да күрерһең.

«Ялан Йәркәй»

Артабанғы мәҡәл-әйтемдәр был дөрөҫлөктө ябай һәм асыҡ итеп ярып һала:

Ағас – емеше менән, кеше эше менән матур;
Ағас тамырына ҡарап үҫә;
Айғыр ҡалдырһаң – йүнлеһен, ҡусҡар ҡалдырһаң – йөнлөһөн ҡалдыр;
Алдын бер уйла, артын биш уйла;
Алдыңа килгән ашты йота бел;
Алтылағы – алтмышта;
Арпа сәсеп, бойҙай үҫмәҫ;
Ат – менгәндеке, тун – кейгәндеке;
Атаһын күр ҙә, улын ҡос, әсәһен күр ҙә, ҡыҙын ҡос;
Атаңа ни ҡылһаң, алдыңа шул килер;
Аттың үҙе ниндәй, йөгө шундай;
Аты барҙың – ҡанаты, һыйыры барҙың һыйы бар;
Ауыр күтәргән – билен һындырған;
Ауыҙы бешкән өрөп ҡабыр;
Ауыҙың ҡыйыш булһа, көҙгөгә үпкәләмә;
Ашаған табағыңа төкөрмә;

Ашланған ер аш бирер;
Баҡырҙы күпме ағартһаң да, көмөш булмаç;
Балта оçтаһы балтаһынан билдәле;
Балыҡты йөҙөргә, үгеҙҙе һөҙөргә өйрәтмәйҙәр;
Башыңа төшһә, башлыҡ булырһың;
Бер кеше бәхете икенсегә булмаç;
Биш уйла, бер эшлә;
Бирмәçтең ашы бешмәç;
Бирһәң – алырһың, сәсһәң – урырһың;
Буйына күрә күләгәһе;
Булыр бала биләүҙән;
Булырҙың быуынынан билгеле;
Булыр ҡолон бәйҙә уйнар;
Булмаç ҡатындан бөкрө тыуыр;
Бур булдың – хур булдың;
Бүре балаһын бүреккә һалһаң да, урманға ҡарай;
Бүре балаһын тоторға өйрәтһә, һарыҡ бәрәсен ҡасырға өйрәтер;
Бүре бәйләүгә, дуңғыҙ әйҙәүгә күнмәç;
Бүрәнәнең йыуан башы кем елкәһендә – шуға ауыр;
Бәйел аҙмай башҡа бәлә килмәй;
Бәхет башы – тәүфиҡ, бәхетһеҙлек башы – ялҡаулыҡ;
Бәхет ерҙән түгел, тирҙән сыға;
Гонаһына күрә язаһы;
Дошманың күп булһа, үҙеңә үпкәлә;
Дуңғыҙға эйәргән батҡаҡта аунар;
Ел иçмәй, япраҡ һелкенмәй;
Елдән килгән – ергә киткән;
Емеш ашағың килһә, сәскәһен өҙмә;
Егет үлһә – аты, үгеҙ үлһә – ите ҡалыр;
Егеттең үҙе үлһә лә, һүҙе үлмәç;
Етеһендә ни булһа, етмешендә шул булыр;
Иген келәттә, кеше хеҙмәттә күренә;
Иҙел күрмәй, итек сисмәйҙәр;
Илар бала атаһының һаҡалы менән булышыр;
Инә ҡаҙ ҡаңҡылдамаһа, ата ҡаҙ бармай;
Ип-яй булһа, ит-май булыр;
Иртә барһаң – ит бешә, һуңға ҡалһаң – бит бешә;
Иртә ҡысҡырған кәкүктең башы ауырта;

Исеменә ҡарап – есеме;
Ишәк маҡтанып толпар булмаҫ;
Ишәккә алтын эйәр һалһаң да, һаман ишәк;
Йоҙағын эшләгән асҡысын да эшләр;
Йөҙөң ниндәй – көҙгө шулай күрһәтер;
Йөрөгән таш шымарыр, ятҡан таш мүкләнер;
Йүнһеҙ бала ата йортон хурлар;
Йүнһеҙҙән йүнһеҙ тыуыр;
Йыланды ҡотҡарһаң, тәүҙә үҙеңде сағыр;
Йыландың балаһы ла йылан;
Йыланға юлдаш булһаң, ҡулың сағыр;
Йәйең рәтле булһа, сәйең шәрбәтле булыр;
Йәрәбә һалынған – яҙмышҡа һалынған;
Кем эшләмәй, шул ашамай;
Керемενә күрә сығымы;
Кеше ҡапҡаһын асһаң аяҡ менән, үҙеңдекен ҡағырҙар таяҡ менән;
Кешеһенә ҡарап, кейемен бес;
Кешенән кеше кәм түгел, тик бәхеткәйҙәре тиң түгел;
Киндер сәсһәң, күлдәк кейерһең;
Күрекле тыума, бәхетле тыу;
Күрәсәкте күрмәй, гүргә кереп булмай;
Ҡабат эшләгән эш һабаҡ булыр;
Ҡаҙан хәлен сүместән һора;
Ҡаҙанда ни булһа, сүместә шул сығыр;
Ҡайҙа барһаң да, ҡара һаҡалың артыңдан ҡалмаҫ;
Ҡанға һеңгәнде йыуып та, юнып та бөтөрөп булмай;
Ҡатын ауырыһа, өйҙөң йәме китер;
Ҡолон аҫраһаң, ат менерһең;
Ҡулың эшләһә, ауыҙың тешләр;
Ҡумыҙ бейетмәй, моңо бейетә;
Ҡурайы юҡтың өнө юҡ, өнө юҡтың көнө юҡ;
Ҡыҙ ҙа булһын, быуаҙ ҙа булһын;
Ҡыҙыл телемде тыйманым, ҡыҙым өйөнә һыйманым;
Ҡылыс алғанда ҡулың ҡалтыраһа, башың ерҙә булыр;
Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленер;
Май сүлмәге тышынан билдәле;
Мал аҫраған – май сәйнәгән;
Мал көрлөгө көтөүсенән;
Мая башы – бер күкәй;

Ни сәсһәң, шуны урырһың;
Ни ҡысҡырһаң, шуны ишетерһең;
Оло ат менән уйнаған тайҙың аяғы аҡһаған;
Орлоғона күрә емеше;
Осҡондан ялҡын ҡабыныр;
Өйө барҙың көйө бар;
Өлөшөңә төшкән көмөшөң;
Сабыр иткән — моратына еткән;
Себеште көҙ һанайҙар;
Сиңерткәнән ҡурҡҡан иген икмәҫ;
Соҡорға төшкәнсе, сығырыңды уйла, тауға менгәндә, төшөрөңдә уйла;
Сәсмәгән – урмаҫ;
Сәскән йыйыр, сәсмәгән илар;
Һабанда һайрашмаһаң, ырҙында ыңғырашырһың;
Таштан йүкә һуйылмай;
Тик торған отторған, тик тормаған туҡ торған;
Тиреҥ кипмәһә, байлығың китмәҫ;
Тиреҫ сығарһаң ереңә, ташып бөтөрә алмаҫһың өйөңә;
Туйға тип, йыр һаҡлаған, туйға килһә, йыр тапмаған;
Тырышҡан ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан;
Һыу бешеү менән май төшмәҫ;
Уйындан уймаҡ сығыр;
Улай итмәй, былай булмай;
Утһыҙ төтөн булмай;
Уттың, сирҙең әҙен ҡалдырма;
Үҙ гәйебеңдең ниҙә икәнен, балаң үҫкәс, белерһең;
Үҙ ҡылғаның үҙеңә ҡайта;
Үҙең ҡарға булһаң, балаң һандуғас булмаҫ;
Үҙең яҡшы булһаң, кеше лә яҡшы;
Ырыҫ арыҫландың ауыҙында, төрөкмәндең түрендә;
Хеҙмәт ҡаты – емеше татлы;
Хеҙмәтенә күрә хөрмәте;
Һәр кем үҙенсә табына, үҙенсә абына;
Эҙләмәйенсә, энә лә табылмай;
Энә үткән ерҙән еп тә үтер;
Этенән күреп, көсөгө өрөр;
Эттән эт тыуа, ҡоштан ҡош тыуа;
Эшенә күрә ашы;
Эш яратҡан уңған, яратмаған туңған;

Әсәһе тирәккә менһә, ҡыҙы ботаҡҡа менер;
Әсәһе юрға булһа, ҡыҙы йөрөшлө була;
Әсәнән күргән тун бескән, атанан күргән уҡ юнған;
Юнышҡан ерҙә юнышҡы ҡалыр;
Яҡшы ҡарсыҡ – өй ҡаҙнаһы;
Яман ҡатын түшәгенән билдәле;
Ярлы булыр егет бейәһен атҡа һатыр,
Яңғыҙ булыр егет ағай-энеһен ятҡа һатыр;
Яуыз бала атаһының ауыҙын ябыр;
Ярыҡ ҡурай уйнамаҫ.

2.4. Ҡурайы юҡтың өнө юҡ, өнө юҡтың көнө юҡ

Көньяҡ Уралдан 3–4 мең йылдар элек күсеп киткән һинд-иран телле арийҙарҙың ырыу башында тәүбабалары Ҡурыу[33] батша торған. Тарихсы һәм телсе ғалим Салауат Ғәләмов үҙе-нең хеҙмәттәрендә Ҡурыу арийҙарының күсеп киткән бер өлөшө боронғо Месопотамия ерҙәрендә Ҡурдистан илен барлыҡҡа килтергән, ә бөгөнгө көндә улар – Төркиә, Сирия, Иран, Ираҡта бүленеп ҡалған ҡурдтар икәнлеген раҫлай. Уларҙың тәүтөйәге Уралда ҡалып, әлегәсә шул ерҙә көн иткән төркөмөн **баш ҡурт** (-т – күплек ялғауы) тип атау, **башҡорт** этнонимының килеп сығышын аңлатыуҙа дөрөҫлөккә тап килә. Ә улары иһә, көнсығыштан, Урта Азия, Алтай тарафтарынан күсеп килгән төрки ҡәбиләләр ҡыҫымында ҡалып, шулай уҡ боронғо туған иран-арий теленән алыҫлашҡан. Әммә ләкин донъяла бер нәмә лә эҙһеҙ юғалмауы һәммәбеҙгә лә мәғлүм. Туған телебеҙҙә **«ҡур»** тамырлы һүҙҙәрҙең бик күп һаҡланыуы – ошоға миҫал.

Башҡорт теленең һүҙлегендә «ҡур» һүҙе түбәндәгесә аңлатыла:

1) ҡымыҙ, бал, ҡатыҡ, ҡамыр әсеткеһе, ҡурбаш;

2) башланғыс, нигеҙ булған мал-мөлкәт; мая. Мәҫәлән: ҡур аҡса, ҡур мал.

Тимәк, был осраҡта «ҡур» – «башлап ебәреүсе», «тоҡом башлаусы», «нигеҙ һалыусы», «барлыҡҡа килтереүсе», «күбә-

---

[33] Санскрит: **Kuru** – 1) древний царь, основоположник рода Куру-героев «Махабхараты»; 2) род куру, потомки Куру, кауравы.

йеүгә, таралыуға сәбәп булдырыусы» тигән мәғәнәлә ҡулланыла. Был һүҙҙең мәғәнәһе Көньяҡ Уралда йәшәгән боронғо арийҙарҙың дини ҡараштарына тап килгән йога тәғлимәтендәге **сәбәп-эҙемтә**[34] бәйләнешенә ишаралай. Фекерҙе раҫлау өсөн ҡур тамырлы һүҙҙәр теҙмәһен килтереү етә:

Ҡураҙ (фарсы) – 1) әтәс, 2) ирҙәрҙең енси ағзаһы;

Ҡурбаш (диал.) – ҡамыр әсеткеһе, икмәк башы;

Ҡураҡ – ҡурға ҡалдырылған тоҡом айғыры. Беҙҙең аймаҡты ғына алайыҡ: Һөйәрембикәләр бер ҡураҡтарына терәлеп ҡалды, Яҡшыбикә менән Мәрғүбәнең атлыҡсалары буш *(М.Ямалетдин)*;

Ҡурлы – мал-мөлкәтле, бай, бәрәкәтле, үрсемле; (димҡариҙел һөйл.) – хәлле;

Ҡурпы – сабылған ергә яңынан үҫкән йомшаҡ үлән йәки йәш иген;

Ҡурсаҡ[35] – үҫеш осороноң бер мәлендә ашамай, ҡуҙғалмай көпкә төрөнөп ятҡан бөжәк, йәғни үҫештең яралыу этабы, башы;

Ҡурҙау (арғаяш һөйл.) – беренсе көбөлә әсегән ҡымыҙ;

Ҡуржын (мейәс һөйл.), **ҡурйын** (әй һөйл.) – түпрә, сүпрә, ойотҡос;

Ҡурпытеш – һөт теше;

Ҡурпып сығыу (һаҡмар һөйл.) – шытып сығыу;

Ҡурҙы (мейәс һөйл.) – үрсемле;

Ҡур һөйәге[36] (һаҡмар һөйл.) – ҡоймос; (йогала: йоҡо хәлендәге кундалини энергияһы, йәғни йән эйәһенең көс-кәр, ҡеүәт үҙәге).

---

[34] Санскрит: **karya** – работа, обязанность, намерение, цель, результат; **karya-karana** – особая причина, причина-следствие, **karu** – поэт, певец, ремесленник, мастер, профессионал; **kar** – 1) делать, совершить, изготавливать, обработать, применять; башҡортса «эшләп ҡарау», «тәмләп ҡарау» һ. б. һүҙбәйләнештәрҙә күренә; 2) сыпать, высыпать, бросать; сағыштыр: башҡортса **ҡар** «снег» һүҙенең мәғәнәһенә тап килә. **kratu** – сила, мощь, способность, разум, желание, стремление. Беҙҙең телдә **«ҡарыуы ҡайтҡан»**, **«ҡарыу китеү»**, **«кәре китеү»** кеүек төшөнсәләр бар. Тимәк, кәр/ҡар, күр/ҡур, көр/ҡор – бер һүҙҙең төрлө формалары.

[35] Санскрит: **kurca** – связка, пучок, охапка, вязанка; **kurcaka** – щетка, кисть. Бер тотам йүкә һалабашын төйөнгә бәйләп, суҡлап эшләнгән бәләкәй кеше ҡиәфәтендәге уйынсыҡ ҡурсаҡ.

[36] Грек теленде: **сакрум**

Был тамырҙаш һүҙҙәрҙең барыһына ла бер мәғәнәүи уртаҡлыҡ хас: «барлыҡҡа килтереү, үрсетеү һәләтенә эйә», «башлаусы, этәргес көс-ҡеүәт менән тәьмин итеүсе».

Ә хәҙер **«ҡур»** һүҙенең икенсе аңлатмаһына туҡталайыҡ:

Ҡур – ниндәйҙер эш-хәлдән ҡалған эҙемтә; шауҡым. Ҡыйшыҡ уҡ атҡан менән тура китмәҫ, күңелдән яман һүҙҙең ҡуры китмәҫ *(М.Акмулла).*

Артабанғы һүҙҙәр теҙмәһе ошо мәғәнәгә ҡоролған:

Ҡурған – бейек итеп өйөлгән боронғо ҡәбер. Кешенең ғүмере аҙағына еткәс, уның физик тәне, йәненән айырылып, ер менән ҡатыша. Боронғо арийҙар кешене был тормош өсөн кәрәк булған бөтә матди байлығы менән бергә күмеүгә лә ҙур әһәмиәт биргән: тән – ваҡытлыса, ерҙә ҡалыусы, тупраҡҡа кире әйләнеүсе; йән – мәңгелек.

Ҡуржа, ҡуржын (диал.) – юшҡын;

Ҡура – тапанды ер, ишек алды, ихата;

Ҡурйыу – үтә ныҡ әсеү; ҡырҡыуланыу, артау (бал, буҙа, ҡымыҙ тураһында әйтелә).

Был миҫалдарҙан күреүебеҙсә, **«ҡур»** – күҙгә күренмәгән, ләкин уның барлығына эске тойомлау аша ышанырлыҡ ниндәйҙер бер **ҡеүәт**. Уның булыу-булмауын иҫәпкә алһаҡ, артабанғы тамырҙаш һүҙҙәрҙе лә, мәғәнәләре буйынса, ҡапма-ҡаршы ике төркөмгә бүлеп була:

<u>1-се төркөм</u>:

Ҡурый (минзәлә һөйл.) – дәртле;

Ҡурсалау, ҡурсыу – хәстәрлек тойғоһо менән тел-тештән, хәүеф-хәтәрҙән кәртәләү, аяу, яҡлау;

Ҡурғау – яуҙан, бәлә-ҡазанан һаҡлау;

Ҡурғауыл – яуға, һөжүмгә ҡаршы ҡуйылған һаҡ, нығытма;

Был һүҙҙәрҙең мәғәнәһенән аңлашылыуынса, «ҡур» ыңғай сифатҡа эйә булған «ҡот» төшөнсәһенә тап килә.

<u>2-се төркөм</u>:

Ҡурҡыу – йән өсөн шомға төшөү, шөрләү тойғоһо кисереү; билдәле бер шартҡа түҙмәй бирешеү, сигенеү;

Ҡурҡыныс[37] – күңелгә шом, ҡурҡыу хисе һалған; кешене ауыр кисерештәргә, ҡыйын, хәүефле шартҡа ҡуйған хәүеф-хәтәр;

---

[37] Санскрит менән сағыштырайыҡ: **kurupa** – плохого вида, некрасивый.

Ҡураныс (ырғыҙ һөйл.) – ҡыҫаныс, әҙ, етерлек түгел;

Ҡур итеү (һаҡмар һөйл.) – хур итеү;

Ҡурҡҡы (дим һөйл.) – ҡарасҡы;

Ҡурмыш (урта һөйл.) – һаран;

Ҡурылмау (ҡыҙыл һөйл.) – ыжламау;

Ҡурылыу (урта, һаҡмар, ырғыҙ һөйл.) – һаранланыу; (салйоғот һөйл.) – сикәнеү;

Ҡурыу (көнсығыш диал.) – ҡыҫыу, тетеү; (гәйнә һөйл.) – һыҙлатыу; (урта Урал һөйл.) – өшөтөү;

Ҡур ҡуйыу – яҙғы буръяҡ йылғаның кире ағымына балыҡ аулай торған оҙон тотҡалы ҙур сүмес ау ҡуйыу;

Ҡур һалыу, ҡур түләү – һалым, яһаҡ түләтеү;

Эллин (грек) телендә лә бар был мәғәнәгә эйә һүҙҙәр: **курастика** – арыным, **куразменос** – арыған ир кеше, **куразмени** – арыған ҡатын-ҡыҙ (ҡурһыҙ, хәлһеҙ ҡалған).

Был осраҡта «ҡурһыҙ» булыу – көс-ҡеүәтһеҙ, ҡотһоҙ, яҡлауһыҙ ҡалыуға тиң.

Миҫалдарҙан аңлашылыуынса, **«ҡур»** – йәндең тереклек итеүенә булышлыҡ итеүсе һәм тик нескә кимәлдә тойолоусы бер көс, тәнде йәшәү сығанағы булған **йылылыҡ** менән тәьмин итеүсе ҡеүәт тип аңлап була. Ошо күҙлектән сығып ҡараһаң, **«ҡур»** һүҙенең **«ҡуҙ, ҡыҙыу»**, йәки **«утта тотоу»** мәғәнәһенә тап килеүен күҙәтергә мөмкин:

Ҡурау – ҡояшта үтә ныҡ кибеү, ҡороу;

Ҡурылыу – кибеп ҡорошоу;

Ҡурыу – ҡорола, йәки майға ҡыҙҙырыу;

Ҡурҙаҡ – утта ҡурылған ит;

Ҡурғы – бойҙай, борсаҡ һ. б. ҡыҙҙыра торған йәйпәк ҡаҙан;

Ҡурғаҙан – бешеренеү өсөн тәғәйен оло ҡаҙан;

Ҡурмас – бөтәүләй ашау өсөн ҡыҙҙырылған бойҙай. Боронғо дин йолаһы буйынса, 21 мартта, көн менән төн тигеҙләшкән ваҡытта, Науруз байрамында әҙерләнә торған төп ризыҡ. «Бойҙай уңһа – аш булыр, уңмаһа – таш булыр», – тип теләктәр теләгән тереклектең йәшәү сығанағы – ут-ҡояшҡа табыныусы ата-бабаларыбыҙ. Был йола орлоҡ культы менән бәйле, сөнки ул (бойҙай, ҡурмас) – буласаҡ уңыштың башы. Был миҫалдан ата-бабаларыбыҙҙың боронғо замандарҙа уҡ иген үҫтереү менән шөғөлләнгәнен тоябыҙ[38].

---

[38] Санскрит: «sasya» – посев, всход, урожай зерна, злаков; башҡортса шулай уҡ һаҡланған: «сәсеү».

Ҡурғаш – утта тиҙ иреүсән, еңел сүкелә торған металл. Тарихтан билдәле булыуынса, арийҙар – металл эшләү серҙәрен тәүгеләрҙән асҡан халыҡ.

Ҡурай – сатыр сәскәле үләндең кибеп, ҡороған көпшәһенән эшләнгән уйын ҡоралы.

Үрҙә һанап үткән «ҡур» тамырлы һүҙҙәрҙең барыһының да ҡояшҡа, утҡа ҡағылышлы нәмәләрҙең атамаһы булыуы – уларҙың башҡорттарҙың боронғо диненә бәйле терминдар икәнлегенә дәлил.

Тимәк, исемдәрҙә һәм **топонимдарҙа** ла осрарға тейеш булып сыға һүҙҙең был тамыры? Миҫал итеп боронғо башҡорт исемдәренән яһалған фамилияларҙы килтерергә мөмкин: Ҡурамшин, Ҡормашев, Ҡурбатов, Ҡурсаев, Ҡорманов, Ҡормаҡаев, Ҡоррәтов һ. б.

Бөрйән районындағы **Ҡурыуҙы** тауының атамаһы легенда буйынса түбәндәгесә аңлатыла: дошманы Ҡараҡөлөмбәт тарафынан үлтерелгән Ҡыпсаҡ ырыуы батыры Бабсаҡ бейҙең ҡатыны ауырындағы балаһы менән уның ҡулында ҡала. Ошо бала тыуып, үҫеп, буй еткергәндән һуң, дөрөҫлөктө белә һәм атаһы тип йөрөгән Ҡараҡөлөмбәттән үс алыуҙы уны тау башына мендереп, тереләй утта **ҡурыу** аша башҡара.

«Ҡур» һүҙенең тура мәғәнәһе русса «закваска, солод» булһа, ул шулай уҡ һыуға, һыу сығанағына ҡарата «көс, ҡеүәт; көс-ҡеүәт башланғысы, энергия тупланмаһы» тигәнде белдерә. «**Ҡорғаҙаҡ** та көс, энергия биреүсе, дауалау көсөнә эйә булған йылға һыуы», – тип үҙ фекерен белдергәйне яҙыусы, филология фәндәре докторы, БДПУ профессоры, БР Хөкүмәте эргәһендәге «БР халыҡтары телдәре тураһында»ғы Законды тормошҡа ашырыу буйынса комиссияның Топонимика хеҙмәте етәксеһе Рәшит Шәкүр[39].

Башҡорт халыҡ йыры **«Ҡурташ»**тан ошо уҡ мәғәнәне тойоп була:

> Ҡурташ, Ҡурташ тигәнем,
> Иҙел башы ҡуш ташым,
> Ятһам, түшәк булған таш,
> Ҡышын түшәк булған таш.
> Дошман килһә, меналмаҫ,

[39] Топонимика һәм топонимия мираҫы // Башҡортостан. 2005. № 99–100.

Аша сабып уҙалмаҫ,
Менеп еген табалмаҫ,
Мине һаҡлар ҡушташым.
Тик мин мендем башыңа,
Һыйындым мин ташыңа,
Дошманымдан һаҡланып,
Төйәк, тинем, башыма.
Дошман килеп ҡамаған,
Тирәмде ут ялмаған,
Уҡ та булдың, Ҡурташым,
Һаҡ та булдың, Ҡурташым.
Дошман башын юймайсы,
Инде килмәм ҡашыңа,
Үс алмаһам дошмандан,
Антым етһен башыма.

Тимәк, был таш ҡышҡы һыуыҡтан ҡотҡарыуҙан тыш, һаҡлау, ҡурсалау, йылытыу тылсымына эйә булып сыға.

Әгәр «ҡарыһүҙ» төшөнсәһенең «боронғо, тәүге» мәғәнәһенә тап килеүенән **«ҡара»** һүҙенең бөтә осраҡтарҙа ла тик төҫтө генә атамай, ә боронғолоҡҡа ишара яһауын иҫәпкә алһаҡ, **кәр** – «физик һәләт; көс, ҡарыу» мәғәнәһен биреүҙе лә күҙ уңында тотһаҡ, **көр** – 1) ит-май ултырған; һимеҙ (хайуандарға ҡарата); таҙа, ябыҡ түгел (кешегә ҡарата); 2) тулы көскә эйә; ныҡлы, баҙыҡ; **күр, күреү** – «күҙ менән ҡабул итеүгә һәләтле булыу» тип ҡараһаҡ, барлыҡ **ҡур/күр, ҡор/көр, ҡар/кәр** өлөшсәләренә ниндәйҙер кимәлдә дөйөмлөк хас. **Ҡәрҙәш, ҡарындаш** һүҙҙәрен дә был урында иҫкә төшөрмәй булмай: кеше булараҡ, тәнебеҙ әсә ҡарынында Илаһтың ҡеүәтенән ярала һәм йәнебеҙ ҙә унан башланғыс ала, һәм, әлбиттә, кире уға ҡайта. Шул уҡ **сәбәп-һөҙөмтә** бәйләнеше! *Яулы көндә ят яҡшы, ҡанлы көндә ҡәрендәш яҡшы* тигән мәҡәлдән аңлауыбыҙса, туған-ара мөнәсәбәттәрҙә киҫкенләшеү осраҡтары булыуына ҡарамаҫтан, халҡыбыҙҙа ҡан-ҡәрҙәшлек ептәренең өҙөлөүе хупланмай. Юҡҡамы ни, башҡорттоң үҙ нәҫелдәштәрен ете быуынына тиклем мотлаҡ белергә тейеш булыуы йола, ҡанун рәүешендә үтәлгән һәм халыҡты туплау, бер бөтөнгә ойоштороуҙа төп шарт булып быуындан быуынға күсә килгән. Эргә-тирәбеҙҙәге кешеләргә *кендегебеҙ бәйләнгәнгә* күрә, был тормошта фәҡәт яҡындарыбыҙ,

туғандарыбыҙ ҡармалыуында тормош һабаҡтарын үтәбеҙ, яҙмышҡа яҙылғанды бурыс итеп үтәйбеҙ.

Шуға күрә ошо өләшсәләре булған ырыу-ара, зат-нәҫел атамаларының, топонимдарҙың күп ерҙә осрауына иғтибар итмәй булмай: мәҫәлән, Ҡурпысыҡ, Ҡормашты, Ҡормантау, Ҡотҡор, Ҡарыш – Белорет районы; Көргәҫ йылғаһы – Бөрйән районы; ҡурапыс, ҡөрәйеш ырыуҙары – Ейәнсура районы һ. б. Ә, бәлки, ошо ерҙәрҙән күсеп киткән ҡәбиләләр араһындағы **ҡөрәйеш** ырыуының вариҫылыр ул Ислам диненең нигеҙен тәшкил иткән **Ҡөрьән Кәрим** китабын донъя халыҡтарына ҡалдырған Мөхәммәт пәйғәмбәр? Уның кешелек донъяһына төбәп ҡалдырған мөрәжәғәтен белдергән аяттың мәғәнәһенә төшөнөү беҙгә бер ҙә ҡатмарлы түгел: *«Берләшһен Ҡөрәйеш ырыуы, уның берлеге — йәйен-ҡышын сәфәр итеүҙә. Ғибәҙәт ҡылһын ошо йорттоң Раббыһына, аслыҡтан һуң туйҙырған, хәүефтән ҡотҡарған Раббыға»* [«Сүүратүл-Ҡурайш» («Ҡөрәйеш») сүрәһе, 106:1—4]. X быуаттың 1-се яртыһында Бағдад хәлифе Ибн-Фаҙлан Ҡондорса буйҙарына тырышып-тырышып, ата-бабаларының тәүтөйәген юллап килеп сыҡманымы икән? Шуғалыр ҙа әле лә ул ҡурай моңона әсир булғандыр! Ҡурай тураһында риүәйәттән белеүебеҙсә, был үҫемлектең **ҡояшта ҡураған** көпшәһе аша ел иҫкәндә барлыҡҡа килгән наҙлы тауышын ишеткән егет ҡырҡып ала. Тәү башлап ҡолаҡҡа яғымлы был тәбиғи ауаз ата-әсәһен, тыуған ерен һағыныу хистәренән тулышҡан күңелен бушата. Ул моң күңелдә ярала, тын менән буш көпшәләге һауаның көсөн яңғыратып, тирә-йүнгә тарала. Беренсе ҡарашҡа был илаһи моң яралыу шул тиклем ябай тойола – тәбиғи үлән көпшәһен ҡырҡып ал да уйна! Ләкин бөйөклөк ябайлыҡтың үҙендә, тиҙәр. Ҡурай күңелдәге моңдо көсәйтеп, тышҡа сығарыуҙа ярҙамсы ҡорал ғынамы ни? Ҡурай тауышы – эске моңдоң тышҡы ауазы, эҙемтәһе бит. Юҡ, әлбиттә! Былай бүлеп ҡарау – илаһи моңдоң бөтөнлөгөн бүлгеләүгә тиң булыр ине, уларҙы бер-береһенән былай айырыу мөмкин түгел. Ошо күҙлектән аңлатҡанда, тар мәғәнәлә **ҡурап** кипкән үләнде атар өсөн түгел, ә киңерәк мәғәнәһендә, моң барлыҡҡа килтереү өсөн сәбәпсе (ҡур) булған көпшә — **ҡурайыбыҙҙың** исеме! Ә ул моңдо ҡурай аша тыуҙыра алыу һәләте тик иң боронғо халыҡтарҙан һаналған башҡортҡа ғына хас. Тәбиғи үләндән моң ҡоралын яһауҙы Аллаһы Тәғәлә тик уға тәғәйен иткән. Ябайлығы уның боронғолоғонда, тимәк! Боронғолоғона, тәбиғиле-

генә күрә, ошо моң бер күңелдән икенсе күңелгә тотҡарлыҡһыҙ үтеп инә ала. **Моң һәм гармония** (үҙ-ара ярашлы, килешле бәйләнеш) һүҙҙәре лә тамырҙаш булып сыға! Ҡурай моңоноң бөгөн бөтөн Ер шары халыҡтары күңеленә хуш килеүе өҫтә һаналған барса миҫалдарыбыҙға дәлил.

Шулай итеп, Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гербында һәм флагында сағылыш тапҡан ҡурайыбыҙҙың исеме лә халыҡтың үҙ атамаһы менән тамырҙаш һәм мәғәнәләш булып сыға!

Ҡурай сатыр сәскәлеләр ғаиләһенә ҡарауы һәр кемебеҙгә мәғлүм. Ҡояш яҡтылығын, йылылығын тойоп, яҙ башында шытып сығып, буй еткереп, орлоҡтарын ҡойоп, тәбиғәт алдында бурысын бар тулылығында үтәгәндән һуң, был үҫемлектең ҡураған көпшәһе моң ҡойорлоҡ булып өлгөрә. Башҡорт халҡында **ҡурай культы һәм болан культы ҡояш куль-**



ты менән бик боронғо замандарҙан бергә килеүенең сәбәбе төҫмөрләнә. Йога тәғлимәтенә табыныусылар уның иң юғары кимәле – сахасрара чакраһына иғтибарын йүнәлтеп, шунда туплар өсөн ҡулланған шартлы билдә – баш түбәһе өҫтөндә ике ҡулдың бармаҡтарын тарбайтып, болан мөгөҙөнә оҡшаш мудра ҡулланыуы менән сағыштырыуҙан аңлап була быны.

«Урал батыр» эпосында йыландар батшаһы Ҡаһҡаһәнең улы Зәрҡум, иң сибәр, иң ҡыйыу кешегә әүерелеп, Һомайға күренер өсөн уны үҙенеке итер өсөн, болан йотоп маташа. Ни өсөн кеше булырға теләгән йыланға фәҡәт боланды йоторға кәрәк булған?

Күрәһең, әүәл халыҡта, кеше ҡиәфәтенә инә алған болан был һәләтен башҡа хайуандарға ла тапшыра ала, тигән хөрәфәт йәшәгән[40]. *Болан мөгөҙө, ҡурай сәскәһе, нурлы ҡояш* – был образдар, йоганың иң бейек сахасрара кимәленә өлгәшеү символдары булараҡ, күҙ уңында тотола. Умыртҡа бағанаһы эсендәге арҡа мейеһе буйлап түбәләге баш мейеһенә, сахасрараға тиклем энергиянды күтәреү аша аң кимәлендә үҫтереү, йәнден юғарыраҡ донъяларға артылырға тырышыуына бәрәбәр был миҫал. Сөнки юғарылыҡҡа өлгәшеү мөмкинлеге тик ошо

[40] *А. Илембәтова.* Башҡорттарҙа болан культы // Йәшлек. 2006. № 35.



юл аша башҡарыла – был йога тәғлимәте. Сатыр сәскәле ҡурайҙы һәм саталы мөгөҙлө боланды изгеләштереү – йогалағы **сахасрара культы**. Сатҡыға, йәғни яҡтылыҡҡа, нур донъяһы – нирванаға ынтылыуҙың сағылышы, шул донъяға өлгәшеүҙең сараһы.

Ҡурайҙың көпшәле уйын ҡоралы булыуы ла осраҡлы түгел. Көпшә – ҡур һөйәге ҡоймостағы йоҡо хәлендәге **Кундалини** ҡеүәтенең уянып, умыртҡа бағанаһы буйлап күтәрелеүен, йәғни түбән кимәл энергияны унығ юғары, нескә формаһына әүерелеүен сағылдырған модель. Күңелдә яралған эске моң, тышҡа өргән тын аша ҡурай көпшәһе эсендә көсәйеп, һөҙөмтәлә тауыш формаһында тышҡы моңдо яралта.

Хәҙер ҡурайҙан тауыш сығыу барышына күҙәтеү яһайыҡ. Ҡурайҙың аҫҡы осонан иң түбән тауышты сығарғанда унан өҫтәге башҡа тишек уйымдары барыһы ла бармаҡтар ярҙамында ябыла. Ә сираттағы бейегерәк тауышты сығарғанда, ҡурай көпшәһенә өргән тын шул уйымдан сыҡһын өсөн, унан өҫкөләре ҡапланһа ла, түбәнерәк урынлашҡан тишектәрҙе ҡаплау хәжәте юҡ. Шулай итеп, иң юғары тауышты сығарғанда, көпшәләге бөтә тишектәр ҙә асыҡ була, ә ауыҙҙан өргән һауа тик өҫкө уйым аша тауыш сығара. Был осраҡта йогалағы чакралар теорияһының ап-асыҡ сағылышы күренә. Аңлатып үтәйек: уй-теләктәре муладхарала тупланған аңы менән бәйле ихтыяждарын үтәгән кеше өсөн башҡа чакралар кимәлендәге талаптарҙы үтәү мөмкин түгел. Шулай уҡ, аң кимәле күтәрелгән һайын, түбән инстинкттар кимәлендәге теләктәр һүрелә, уларҙы ҡәнәғәтләндереү мохтажлығы кәмеүҙән, хатта юҡҡа сығыуҙан, энергия сарыф ителеүҙән туҡтай һәм юғарыраҡ маҡсаттарға ярашлы чакраларға йүнәлтелә. Был – кешенең үҫешен, эволюцияһын тәьмин итеүсе берҙән-бер юл. Тимәк, ҡурайҙың төҙөлөшө, моң сығарыу тәртибе – башҡорттоң иң боронғо рухи ихтыяждарын үтәүҙә хеҙмәт иткән уйын ҡоралы.



Шуға күрә меңйыллыҡтар дауамында ҡурайҙа уйнау оҫталығына, көйҙәр башҡарыу тәртибенә талаптар көслө. Ябайлығы менән бөйөк ҡурайыбыҙ – боронғолоғобоҙҙо иҫбатлаусы, бөгөнгөбөҙгә ялғаусы рухи мираҫыбыҙ, ғорурлығыбыҙ.

Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Мостай Кәрим үҙенең бер хәтирәһендә[41] 1965 йылда Төркиәләге сәйәхәте ваҡытында Әхмәтзәки Вәлиди Туған менән осрашыуын һүрәтләй. Был ҡыҫҡа ғына аралашыуҙың ахырында халҡыбыҙҙың бөйөк улы шағирға: «Ҡурай моңо яҙылған граммофон пластинкаһы ебәрә алмаҫһығыҙмы?» – тигән үтенесен еткерә.

Сит-ят тарафтарҙа ярты быуатҡа яҡын ғүмер йәшәргә мәжбүр булған кешенең Тыуған илен һағыныу хистәрен баҫыу өсөн ниндәй кимәлдә ҡурай моңона зар-интизар

---

[41] *Мостай Кәрим.* Сәғәт ярым ғүмер // Башҡортостан. 2005. № 241.

булыуын фараз итергә генә ҡала беҙгә... Ләкин ошо миҫалдан һәм уға оҡшаш бихисап хәл-ваҡиғаларҙан шуны беләбеҙ: *Урал, башҡорт, ҡурай* төшөнсәләре бер-береһенән айырылғыһыҙ. Ҡурай – ысын мәғәнәһендә башҡорт өсөн тыуған ер, тәбиғәт бүләге, Урал тауҙарын йәнтөйәк иткән ата-бабаларыбыҙҙың рухи мираҫы. Ҡурай үләненең тик ошо ерҙе генә үҙ итеүе – үҙе бер мөғжизә. Ә көҙгө һалҡындарҙан һулыған үләндәр араһында ҡояштай сатыры менән ғорур баҫып торған һабаҡ үҙе – мәңгелек символы. Шул ҡыу һабаҡты ҡырҡып алып, көпшәһе аша тын өрөп, тәбиғәттең үҙе кеүек мәңгелек моң яралтыу – икенсе мөғжизә. Өсөнсө мөғжизә – сал тарихыбыҙ дауамында бер ниндәй ҙә ваҡыт һәм ара һынауҙарының башҡортомдо ҡурайынан айыра алмауы.

Был тәбиғи үҫемлектең тажында саталары күпме булһа, шунса асылмаған серҙәрен, мөмкинселектәрен һаҡлай ҡурайыбыҙ. Ҡурай көпшәһенең тейешлеһен һайлап, ҡырҡып алыу, тишектәрен дөрөҫ итеп уя белеү, улар аша моң ҡойоу алымдарын оҫталар өйрәнсектәренә быуындан быуынға тапшыра килгән. Уның тураһында әкиәттәр, риүәйәттәр телдән телгә күсеп, беҙҙең көндәргә килеп еткән. Йырсылар һәм сәсәндәр, ҡурайҙы данлап, йырҙар, ҡобайырҙар ижад иткән. Ғалимдар уны ботаника, этнография, тарих, сәнғәт күҙлегенән тәрән өйрәнеп, ғилми хеҙмәттәр, уҡыу әсбаптары яҙған. Ваҡытлы матбуғат биттәрендә лә ҡурай тураһында эленән-әле ҡыҙыҡлы һәм фәһемле мәғлүмәттәр баҫылып тороуы халыҡтың рухи мираҫыбыҙға ихтирамының һәм иғтибарының кәмемәүен күрһәтә. Борон-борондан һабантуйҙарҙа, төрлө йыйындарҙа ал бирмәгән иң оҫта ҡурайсылар нисек итеп дан яулаһа, бөгөнгө көндә лә ошо йоланың республика кимәлендә йылдан-йыл үткәрелә килеүе, яңы исемдәр асылыуы – шатлыҡлы күренеш.

Шулай итеп, ҡурай – башҡорт халҡының иң боронғо дәүерҙәрҙән килеп еткән моң ҡоралы ғына түгел, уны «Урал батыр» эпосы менән бер кимәлдә донъя мәҙәниәтенә танытҡан рухи юлдашы ла.

2.5. «Урал батыр» эпосында йога тәғлимәте

Яҡтылыҡ һәм уй-хыял кимәлендәге мәғлүмәт донъяһында ҡасандыр үҙенең тәүторош хәлендә булған йәндәр, нур булып ойошоп, бер бөтөнлөктө тәшкил иткән – был камил, тулы,

бөтөн[42] һәм бөйөк бушлыҡ – Нирвана. Ошо камил донъянан таралған, матдилашып (ауырайып), ергә «ҡолаған» йән ни тойор үҙенең тәүбулмышына тап килмәгән икенсел хәлендә? Әлбиттә, сансараның тупаҫ материяһы – физик тән эсендәге тотҡонлоҡта һанһыҙ күп тапҡырҙар ҡабат-ҡабат тыуырға мәжбүр булған йән үҙе лә тупаҫлана бара, аңы ла томалана, йәғни тәүторошона хас бөйөклөктән, рух[43] күтәренкелегенән алыҫлаша. Сөнки ул фанилыҡ сифаттарына солғана бара, матдилашыу тәжрибәһенә әүрәй һәм донъяуи белемдәргә генә эҫенә бара.

Ләкин йәндең төпкөл аңы, «үҙ-үҙәге»[44] үҙенең **саф сағын, нур саҡкыһы**[45] мәлен аң баҙында, тәрән хәтер һандығында һаҡлай. Шуға күрә һәр кешенең, аҡылы менән төшөнөп бөтмәһә лә, күңеле, ғазаптар кисереп, һәр саҡ нимәнелер юҡһына, нимәлер эҙләй, нимәгәлер ынтыла. Ә бит был хәл – беҙҙең аң кимәлендә үҙебеҙҙең тәүбулмыш хәлебеҙҙе юҡһыныу, шул

---

[42] Сағыштыр: **башҡорт телендә бөтөн** — 1) күләме, дәүмәле кәмемәгән; теүәл; кәм түгел; камил; 2) туҙған, тишелгән, зарарланған ере юҡ; туҙмаған, төҙөк; 3) мохтажлығы, кәмселеге юҡ; етеш; 4) кәсергә бүленмәгән; теүәл; 5) **бөтә – бар булған; барлыҡ, һәммә.** Санскрит телендә: **bhuta** — 1) минувший, прошедший; 2) все сущее; 3) благополучие; 4) составной элемент мира (земля, вода, огонь, воздух, эфир). Ҡушма һүҙҙәрҙә: **bhuta-kartar** – создатель, творец всего сущего; **bhuta-kala** – прошедшее, минувшее время; **bhuta-dharini** – земля; **bhu-tala** – поверхность земли:

Яу тупларлыҡ еремдә
Талай илем бар ине.
(«Урал батыр» эпосынан Уралдың әйткәне);

bhuti – 1) сила, мощь; 2) успех, счастье; 3) украшение. **Бөтөн** – боронғораҡ формаһы **«будун»** – **buddhi** – ум, разум, взгляд, мнение, дух, душа, мудрость, предположение о чем-либо, размышление; **Buddha** – пробужденный, раскрывшийся, просветленный, умудренный, мудрый, ученый, мудрец; тот, кто обладает знанием истины, освобожден от мирского и постиг путь к Нирване. «В башкордском языке – **бот** – **бод** (Будда) означает – неподвижный идол, что в целом соответствует учению буддизма о Нирване как царстве Невозмутимости» *(Галлямов С. А.* Башкордская философия. Этика. Т. 3. Уфа: Китап, 2005.).

[43] **Руах** иудаизм – дыхание, дух Господа, пронизывающий творение. В христианстве глубокая связь между Святым Духом, вносящим жизнь во все, и дыханием. В буддизме дыхание (прана) – колесница ума, так как прана обеспечивает движение нашего ума.

[44] Йогала һәм буддизмда **Атман** – «истинное эго». Физикала: атом. Башҡорт телендә: кешенең **«аты» (атамаһы)** – исеме; исеменә күрә есеме, эллин телендә: атомо – личность, индивид, имя.

[45] Санскритта **Сak** – 1) быть насыщенным; 2) быть удовлетворенным; 3) отгонять, отталкивать; 4) сопротивляться; башҡорт телендә **«саҡ»** һүҙе күсмә мәғәнәлә **«рухи теүәллекте, бөтөнлөктө»** белдергәндә ҡулланыла. Мәҫәлән: күңел **саҡ** ваҡыт.

тәүторошобоҙҙо һағыныу. Күптәр был хәлде аңлатып булмаҫ эс бошоуға һанап, шуның сәбәбенә төшөнә алмауҙан, онотолоу теләгенән эскелеккә һалыша, наркотиктар ҡуллана башлай, йә булмаһа, башҡа алдатҡыс шөғөлдәргә алмаштырырға маташып, яңылыш юл һайлай. Күңел донъяһының тышҡы ығы-зығынан бер аҙға ваз кисеп **торғоһо** килеү теләген беҙҙең ата-бабалар, тап йога өйрәткәнсә, аяҡтарҙы салып тороп ултырып, ҡурай моңо тәьҫирендә онотолоу (медитация) юлы аша үтәгән. Тап ошо ваҡытта беҙҙең төпкө аң-хәтер Йыһан менән тоташып, уның ҡеүәтен тойоп, ләззәтләнә, тынысланыу таба. Юғиһә, һәр ваҡыт ирек­лек эҙләгән, азатлыҡҡа ынтылыусан йән фани донъяның ҡуласаһынан ысҡына алмауҙан йөҙәй. Сөнки Сансара – Нирвананың кире, тиҫкәре яғы, ҡапма-ҡаршы түбән йүнәлеше, тоҙаҡлы зиндан. Шуға күрә бәндәнең йәнгенәһе тәүбулмышына хас бөтөнлөк, камиллыҡ тойғоһо етмәүҙән ыҙа кисерә. Уны шул теүәллектән айырылғанлыҡ, бүленгәнлек, өҙөлгәнлек тойғоһо яфалай. Бәндәнең тәбиғи, саф *үҙ-үҙәге* тик тормош тәжрибәһе, ғәмәли белемдәр аша *мин-минлеккә* төрөнөп, шул ситлектә төп теләген алмауҙан миктәй. Эзотерик буддизм киң таралған Тибетта йәндең, аңдың саф мәле Йыһан, тәбиғәт менән ҡушылыуын, бер бөтөн булған тәүторош сағына кире ҡайтара алыу юлын *Махамудра*[46] *(дзогчен) – бөйөк бушлыҡ, саф аң тураһында ғилем* тип атай[47].

Әҙәмдең аңын томаналыҡтан, наҙанлыҡтан арындырыусы Махамудра – өс таяуға нигеҙләнгән ғилем:

1. Буддизм доктринаһының йәҙрә өлөшө булған үлем тураһында фекер йөрөтөү;

2. Сәбәп-һөҙөмтә бәйләнешен тылҡыусы карма законын аңлатыу;

3. Кеше сифатында йәшәү – яҙмыштың иң ҡиммәтле бүләге икәнлеген танытыу.

Бына хәҙер йәнде Сансара ҡоллоғонан ҡотҡарыу тураһында белем сығанағы булған Махамудра ғилеменә мөрәжәғәт итәйек.

---

[46] Сағыштыр: **маһир** – берәй нәмәгә һәләтле; оҫта; **маһайыу** – үҙ-үҙендә ҙурға һанау, үҙендә шәпкә ҡуйыу, һауаланыу; ғорурлыҡ тойғоһо кисереү. «Ҡайын туҙына маһайыр, имән үҙенә маһайыр». Ошо һүҙҙең ыңғай мәғәнәһенә тап килеүсе Махийән, Маһира, Маһинур, Маһибәҙәр, Маһисәрүәр, Маһизәр, Маһикамал һ. б. исемдәр фарсы теленән тип ҡаралһа ла, улар беҙгә иран-арий телле ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған үҙебеҙҙең рухи байлыҡ.

[47] Эллин телендә: **софия** – **аҡыл, аң эйәһе** булыуын иҫкә алайыҡ.

Уның төп һәм беренсе өлөшө ҙур иғтибарға лайыҡлы төшөнсә – Үлем тураһында булыр. Ундағы фекерҙәр тулыһынса башҡорт халыҡ әйтем-мәҡәлдәренең йөкмәткеһенә тап килә:

Үлем – ҡотолғоһоҙ;
Үлем ҡаршында барыбыҙ ҙа бер тигеҙ;
Үлем «бай», «ярлы» тип тормай;
Үлем ҡартына, йәшенә ҡарамай;
Үлем яйыңа ҡарамай;
Үлем үкенесһеҙ булмай;
Үлем – һәр кешенең ҡунағы;
Үлемде көтмә, үҙе килер;
Үлемдән ҡурҡмаған – терек, үлемдән ҡурҡҡан – үлек;
Үлергә сәғәт бар, үлмәҫкә сәбәп бар;
Үҙәклегә үлем бар;
Үлемһеҙ донъя юҡ, үтелгеһеҙ йылға юҡ;
Үлмәктән ҡалмаҡ юҡ;
Донъя бер беҙҙән генә ҡалмаған;
Ҡунаҡ әйтеп килмәй, үлем һорап килмәй;
Күрәсәкте күрмәй, гүргә кереп булмай;
Сирлегә үлем күрше;
Әжәл етмәй, үлем юҡ.

Белеүебеҙсә, беҙҙең телдә лә Үлем[48] төшөнсәһен төрлөсә атап була: әжәл, һуңғы сәғәт, ғүмер ахыры, гүргә кереү, Ахирәткә кереү, теге донъяға китеү, ләхеткә ятыу. Башҡорт халыҡ

---

[48] **Санскрит** телендә лә Үлемдең атамалары бер нисәү:

1. **Kala-karman** – смерть – (һүҙмә-һүҙ: карма ваҡыты, яҙмыш сәғәте);
2. **Kala-dharma** – смерть – (һүҙмә-һүҙ: ҡанун сәғәте, ваҡыты);
3. **Anta** – 1) близкий, последний, прекрасный; 2) конец, край, граница; 3) последнее слово (**сағыштыр: ант** – ҡәтғи, тантаналы һүҙ менән нығытылған вәғәҙә. Антың башҡа етеү – боҙолған анттың ҡоһорон күреү); 4) смерть, гибель;
4. **Vadhya** – умерщвление, убийство, смерть;
5. **Apavarga** – 1) заключение, конец; 2) освобождение души от телесного существования;
6. **Hanana** – убийство, уничтожение;
7. **Cyuti** – падение, стекание, лишение, потеря, неудача, кончина, смерть.
8. **Jariman** – старость, смерть от старости; естественная смерть; (jara – изношенность; башҡ.: «йәреш» тигән әрләү һүҙендә һаҡланған; ja – рожденный, происходящий; башҡ.: «йән»)
9. **Mar (mr)** – умирать – мәрткә китеү.
10. **Mi (mesyate, mimye)** – умирать.

ижадында Үлем һүҙен атамай ғына, уға барыш, яҡынайыш тураһында бик йәтеш иҫкәртелеүҙәр бар:

Илле итәктән алды,
Алтмыш аяҡтан алды,
Етмеш йүгән һалды,
Һикһән һикегә һалды,
Туҡһан туңҡайтып ҡуйҙы,
Йөҙ өҙөп алды.

– Алтмыш, һиңә ни ҡылдым? Аяғыма бау, ҡолағыма шау һалдың.

– Етмеш, һиңә ни ҡылдым? Уртымдағы теште, башымдағы һушты алдың.

– Һикһән, һиңә ни ҡылдым? Маңлайҙағы күҙҙе, бурбайҙағы биҙҙе алдың.

– Туҡһан, һиңә ни ҡылдым? Ауыҙҙағы һүҙҙе алдың, илтеп ләхеткә һалдың.

Ә инде ата-бабаларыбыҙҙың рухи ҡомартҡыһы «Урал батыр» эпосында Үлем һүҙе 79 тапҡыр ҡабатланып, иҫкә алына, уның тәбиғәте, сифаттары бик ентекле итеп тасуирлана һәм әһәмиәте ҡат-ҡат һыҙыҡ өҫтөнә алына икән, был үлемһеҙ әҫәр туранан-тура Махамудраның сығанағы тип әйтә алабыҙ.

Махамудрала был донъяның тотороҡһоҙлоғо, ундағы ҡапма-ҡаршылыҡлы (дуаль булған) хәл-ваҡиғаларҙың сиратлап, алмашынып килеүе тураһындағы **хәҡиҡәт** Үлем төшөнсәһе менән бергә ҡарала. Был «Сансара» – «донъя ҡуласаһы» – «ваҡыт тәгәрмәсе» эсендәге **әүерелеш – реинкарнация** тип атала. Әлеге хәлең башҡаларҙыҡынан яҡшыраҡ булыуы менән һауаланмаҫҡа, йә киреһенсә, сағыштырмаса насарыраҡ тойолғанда, кәмселек кисереп, көнләшмәҫкә өйрәтә әҙәмде был йога һәм Будда тәғлимәтенең төп ҡануны – **карма** аша ғына хәл ителер **күсәгилешлелек, әүермәнлек.** Был хәҡиҡәтте тылҡыусы **«Калачакра[49] (Ваҡыт тәгәрмәсе) тураһында»**ғы сутралар ҙа бик фәһемле булыр. Ошо ғилем ҡушыуынса, әҙәмдең аңы үҙ-үҙен

---

[49] **Kala** – период, эпоха, время года, время принятия пищи 2 раза в день, половина дня, час, судьба, смерть; **Bhuta-kala** – прошедшее, минувшее время: бөткән, ҡалған! Аңлатмалы һүҙлектә ғәрәп һүҙе, «промышленность һәм культура үҙәге» тип бирелгән ҡала һүҙе – беҙҙең үҙебеҙҙең һүҙ: киткәнгә эйәреп китмәй, билдәле бер урында, хәлдә тороу; урын алған хәлдә булыу мәғәнәһендә.

башҡа йән эйәләре менән бер бөтөн итеп ҡабул итер һәм тиң күреп яратыр, башҡаларҙың именлеген үҙенекендәй күреп хәстәрләү кимәленә етһә генә, эволюция баҫҡысы аша ул үҙенең тәүторошона, *бөтөн – будун – Будда* хәленә керер. Был кимәлгә етер өсөн ябай талаптар үтәлергә тейеш булған. Ул беҙгә тәүбабабыҙ Урал батыр васыят итеп ҡалдырған өгөт-нәсихәт:

Ололарға кесе булып,
Кәңәш алып йөрөгөҙ.
Кеселәргә оло булып,
Кәңәш биреп йөрөгөҙ[50].

Был өгөт-нәсихәттең нигеҙендә боронғо дини тәғлимәтебеҙ – йога талаптары ята. Ваҡыт тәгәрмәсе «калачакра» шартлы рәүештә өскә бүленә: үткәнең, бөгөнгөң, киләсәгең. Кеселәргә оло булыу, мәрхәмәт күрһәтеү, юл биреү – ул үҙ үткәнебеҙ, тәжрибәбеҙ нигеҙендә йәшерәк быуындың хәлен тойоп, аңлап, яҡшы өлгө биреү өсөн кәрәк. Ололарға, ҡарттарға ҡарата үҙебеҙ кеселекле булып, уларҙың тормош тәжрибәһенән һабаҡ алырға, уларҙан нимәгәлер өйрәнергә тейешлегебеҙ ваҡыт тәгәрмәсенең киләсәгенә бәйле, сөнки ҡартлыҡ – беҙҙең алдағы көнөбөҙ. Ҡайғы, ауыртыныу кисергәндең хәленә кереү, шатлығы ҙур булғандың шатлығын уртаҡлаша белеү ҙә – йога талап иткән эске мәҙәниәт, сөнки һин, үҙеңде ысын мәғәнәһендә кемдеңдер урынына ҡуйып ҡарап ҡына, үҙеңде уның менән бер бөтөн итеп тоя алаһың. Ауырыу, меҫкен, фәҡир, бахыр хәлендәгеләрҙе күреүҙән һауаланып, йөҙ сырыштырырға түгел, киреһенсә, Сансарала ҡасандыр үткәнеңдә йә киләсәгеңдә ошондай хәлдең һинең менән булыу ихтималлығы һине һағалауын онотмай, башҡаның хәлен тоя белеү зарур. Ябайлаштырып әйткәндә, ямандан ғибрәт алыр, яҡшынан фәһем алыр өсөн үтәбеҙ беҙ тормош юлын. Махамудраның өсөнсө таяуы – карма буйынса, Сансара ҡуласаһының кешелек донъяһында тыуыу бәхетенә лайыҡлы булғас ҡына, кеше ҡиәфәтендә тейешле кимәлдә рухи ғәмәл үтеүгә өлгәшеп, ҡайтанан йәндәрҙең тәүторошона, йәғни Нирвана һәм Маха Нирванаға күтәрелеү мөмкинселеге тураһында һабаҡ булыр. Һан һәм сифат күҙлегенән

---

[50] Халыҡ әйтемдәрендәге башҡа варианттары: «Кесегә мәрхәмәт, олоға итәғәт (ит)», «Кесегә шәфҡәт итеп юл бир, олоға хөрмәт итеп ҡул бир».

тикшергәндә, кеше булып тыуыу ихтималлығы шул тиклем һирәктәр өләшөнә төшә, шуға күрә бындай ғүмерҙең баһаһы тураһында Саҡтар ырыуының аҡыл эйәһе Гаутама: «Бер көнөң – бер ғүмергә тиң», – тигән. Кешелекте түбән тәгәрәүҙән туҡтатыу һәм уларҙың аң кимәле күтәрелешен хәстәрләү ниәтенән, Нирванаға өлгәшкән ҡайһы бер йәндәр[51] был донъяға кире ҡайтыр булғандар. Төрлө дәүерҙәрҙә тыуған пәйғәмбәрҙәр – Алланың ерҙәге илселәре, шулар араһынан булыр. Уларҙың тыуыры күк есемдәре тарафынан алдан иҫкәртелеп килгән:

Анау саҡта, ай, батшам,
Бер йәш бала тыуғанда,
Шуның тауышы килгәндә,
Күктә осҡан дейеүҙәр
Бары ҡолап төшкәйне.
Баланы урлап алырға,
Үлтереп юҡ ҡылырға
Барған дейеү, ендәрҙең,
Бала текләп ҡарағас,
Тоторға тип уҡталғас,
Барған бере ҡурҡыуҙан
Йөрәге ҡубып үлгәйне.

Кешелек донъяһын ғына түгел, ә бөтә йән эйәләренең именлеген хәстәрләр бындай бөйөк шәхестәр ерҙәге бурыстарын үтәп, йәндәре кире күккә олғашҡанда, был ваҡиға шулай уҡ тәбиғәт күренештәре менән оҙатыла:

Урал батыр үлгән, ти.
Ҡайғырышып, барыһы
Башын түбән эйгән, ти;
Күктән йондоҙ атылып,
Һомайға оран биргән, ти...

Уралдың ябай ер кешеһе түгел, ә пәйғәмбәр затлы әҙәм булыуын һүрәтләүсе тағы бер күренеш бар эпоста:

Урал батыр үлгән һуң,
Гүрендә ерһеп бөткән һуң,

---

[51] Йогала һәм буддизмда ундайҙарҙы «бодхисаттва»лар тип атайҙар, башҡортса һүҙмә-һүҙ: «бөтөндөң саҫҡылары».

Гүре балҡып торған, ти,
Быны күргән кешеләр
Йыйылышып барған, ти,
Бер ус тупраҡ алған, ти,
Бары данлап һалған, ти,
Бара-бара ул ерҙә
Алтын булып киткән, ти...

Тимәк, Уралдың был донъяға килеүе һәм китеүе күк йөҙө тарафынан ошондай күренештәр аша белдерелә икән, ул – Аллаһы Тәғәләнең ерҙәге илсеһе булыуына шик ҡалмай. Ә ундай бөйөк заттарҙың аңы тик бер тарафҡа йүнәлтелгән – донъяны һәләкәттән ҡотҡарыу. Был аныҡ маҡсат мәғлүмәт кимәлендә уларҙың аң баҙында ныҡлы булғанлыҡтан, тыумыштан тура юлдан тайпылыуһыҙ алға, юғарыға барған ундай шәхестәр. Алланың тәғәйен заты булмаһа, Уралдың, әле донъя күреп тә өлгөрмәгән үҫмер генә көйө, үҙ бурысын аныҡ белеүе ҡайҙан булыр ине:

Мин күренмәҫ Үлемде
Юҡ итергә сыҡҡанмын;
Ҡан ҡойоусы батшанан,
Кеше ашар дейеүҙән
Бар кешене ҡотҡарыу,
Йәншишмәнән һыу алып,
Үлгәндәрҙе терелтеү
Өсөн тыуған батырмын!

Был берҙән-бер юл – кеше ҡиәфәтендәге физик **тән**[52] эсендә тыуған бөйөк **йәндең**[53] (бодхисаттва) үҙаңы ярҙамында ҡыҫҡа

---

[52] Санскрит: **Tanu** – тело, лицо, особа; **tanu-ja** – сын, **tanu-ja** – дочь; башҡ.: Тәнәй – сабый бала, бәпәй, бәпес; **tanaya, tana** – потомство, дитя; башҡ.: тана – бер йәштән ике йәшкә тиклемге һыйыр малы: тана һыйыр, тана үгеҙ, тана һөтө.

[53] Санскрит: **Jan** – родиться, рождаться; **jana** – 1) человек, лицо; 2) род, поколение; 3) племя; **janaka** – 1) порождающий, производящий; 2) а) родитель, отец; б) творец, создатель; **janata** – 1) человечество, люди; 2) общество; башҡ.: Йәнбирҙе, Йәнбикә, йәнлек, йәнтөйәк, йәншишмә, йәннәт һүҙҙәренең мәғәнәһенә тап килеп тора.

janana – 1) зарождающий; 2) рождение, происхождение; 3) воспроизведение, размножение; 4) жизнь; **janani** – родительница, мать. Ҡара: башҡ.: **ана, инә, инәй, әни.**

ғына ғүмер эсендә йога баҫҡыстары – рухи үҙәктәр (чакралар) аша күтәрелеп, үҫешә, һәм ошо һәләте ярҙамында башҡаларҙы рухи һәләкәттән ҡурсалау, үргә юл күрһәтеү өсөн үтелә.

Бына шул тәбиғи аңы нигеҙендә Урал бәләкәйҙән үк тыйыу-киҫәтеүҙәргә ихтирамлы, йолаға буйһоноусан, ата-әсәнең ҡушҡанын бурыс-васыят итеп тота белә. Олоно тыңлау, ихтирам итеү менән бер үк ваҡытта үҙенән кеселәргә мәрхәмәтле булыуы уның ҡанында:

Тилберлектә, тиҙлектә,
Көслөлөктә, ҙурлыкта,
Түҙемлектә, һаҡлыкта,
Һиҙгерлектә – көндәҙҙә,
Төндә йоҡлап ятҡанда –
Арыҫлан, болан, ҡапланы,
Айыуы, тағы бүтәне –
Улар беҙҙән кәмме ни?

Йога тәғлимәтендәгесә, кеше булып тыуыу осрағы үҙе бер һирәк өлөш булһа, унан да һирәгерәге – шулар араһында тыумыштан уҡ мәрхәмәтлелек, шәфҡәтлелек сифаттарына эйә, яҡшыға ғына ынтылышы булған, карма законын нескә тойоп, тәбиғи һәләттәрен тик йола (ҡанун) өйрәнеүгә йүнәлтер, мөмкинселектәрен тик йола ҡағиҙәләрен үтәүгә ҡорор изге йәндәр булыуы бик ҙур мөғжизәгә тиң. Ундайҙарға тыумыштан (ҡанына һалынған тибеҙ) Махаяна-Йогаға[54] килеү, йәғни үҙ-үҙеңде үҫтереп, аңыңды күтәреп, кире тәүбулмыш хәленә, Нирвана һәм Маха Нирванаға ашыу мөмкинселеге бирелһә лә, улар, үҙ артынан юл күрһәтеп, ғүмерҙәрен кешелек донъяһын ҡотҡарыу маҡсатына бағышлай. Эпоста ағалы-ҡустылы Шүлгән менән Уралдың, ҡанды эсеү-эсмәү тураһында бәхәсләшеп, ҡараштары тап килмәү ваҡиғаһын һүрәтләү – Шүлгәндең Хинаяна-Йога[55], Уралдың Махаяна-Йога юлын һайлауҙарының башы; ҡан – аң-хәтер символы. Эпостың буйынан буйына улар үҙҙәре һайлаған юлдан яҙлыҡмай барасаҡтарын иҫбат итәсәктәр: береһе тереһыуҙы үҙен ҡотҡарыу өсөн, икенсеһе – тәбиғәт

---

[54] Санскрит: **Maha-jana** – 1) большой человек; 2) множество людей; башҡорт телендә Махийән исемендә һаҡланған: «бөйөк йән» тигәнде аңлата.

[55] Йогала үҙеңде үҙең матди донъя – Сансара ҡоллоғонан азат итеү; йәмғиәттән айырылып, яңғыҙың үтеү юлы.

менән кешелекте мәңгеләштереү маҡсатынан әҙләр. Йогала был ике юл да хаҡ тип ҡабул ителгән, тик үҫеш-артылыш юлына баҫыр әҙәмдең уның ҡайһыһынан китергә һайлау хоҡуғы ла бар. Сөнки был донъя дуаль: уның ағы һәм ҡараһы, дөрөҫө һәм ялғаны, үре һәм түбәне, яҡшыһы һәм яманы, мөхәббәте һәм нәфрәте кеүек ҡапма-ҡаршылыҡтары бар. Ошо бөтөндөң ике яртыһы булып, мәңге ярышып барасаҡ Шүлгән менән Урал башлаған ике юл – **уң** һәм **һул**, уңыу һәм һулыу.

Был йога тәғлимәтендә нескә кимәлдәге ҡеүәттең өс каналы – пингала (уң), ида (һул), сушумна (урта юл – умыртҡалағы арҡа мейеһе) тураһындағы ғилем. Ошо ҡыл-юлдар буйлап (уларҙы нади тип атайҙар), ҡур һөйәге – ҡоймостан тереклек итеүҙе тәьмин итеүсе Кундалини ҡеүәте хәрәкәт итә. Әгәр ҙә төрлө сәбәптәр менән каналдар бысранып, хәрәкәтсән ҡеүәт тонсоҡһа, был кешенең ваҡытһыҙ, иртә ҡартайыуына һәм үлеменә килтерә. Ида каналы ҡоймостоң һул яғынан, пингала уң яғынан башланып, икеһе лә бөтә чакралар аша үтеп сыға һәм тәүгеһе ҡаш араһындағы аджня-чакраның һул яғына килеп етә, икенсеһе – уң яғында тамамлана. Был каналдарҙың үҙ-ара киҫешкән кимәлдәре рухи үҙәктәр – чакраларҙы барлыҡҡа килтерә; йогала ошо нескә каналдарҙың дөйөм һаны 72 мең тип әйтелһә лә, үрҙә аталған өсәүһе – иң әһәмиәтлеләре, шуға күрә махсус әҙәбиәттә тик шулары тураһында бәйән ителә:

B – ида нади (ай ҡеүәтенә тәғәйен һул юлаҡ), аңдың үткәне тураһындағы хәтер, донъяуи тәжрибә өсөн яуаплы (аң баҙы). Тура мәғәнәлә – кешенең эске донъяһы, күңеле, хистойғоһо, теләктәре. Мейенең уң ярымшарына күсеп, суперэгоны (F) барлыҡҡа килтерә. Ҡатын-ҡыҙға яраҡлы йәлләү, йомшаҡ күңеллелек, эске һиҙгерлек, тойомлау, ярҙамсыллыҡ, хәстәрлелек, пассивлыҡ сифаттары хас;

C – сушумна нади (урта юлаҡ) – әлеге хәл-торошта, хәҙерге мәлдә кешенең ҡур һөйәгендәге ҡеүәттең күтәрелеп, бөтә тереклек аңына тоташыуына, берләшеүгә яуаплы;

D – пингала нади (ҡояш әүҙемлегенә тәғәйен уң юлаҡ), ир-атҡа хас аҡыл эшмәкәрлеге, ярыш, көрәш сәме кеүек сифаттар булдыра. Мейенең һул ярымшарына күсеп (G), кеше-



неӊ эгоһын тәшкил итә, киләсәкте күҙаллау, планлаштырыу, анализ өсөн тәғәйенләнгән;

А — ҡур һөйәгендә йоҡо хәлендә уралып ятҡан йылан рәүешендәге кундалини ҡеүәте;

Е — үлемһеҙ рух;

1 — муладһара (ер элементы), 2 — свадистана (һыу элементы), 3 — манипура (ут элементы), 4 — анахата (ел-һауа элементы), 5 — вишудда (бушлыҡ элементы), 6 — аджня (аджняна, агия), 7 — сахасрара.

Ә чакралар шул 72 мең ҡыл-каналдарҙың киҫешеүенән яралғанға күрә, уларҙың һәр береһе ҡыл-нурҙарҙың бер бәйләме, суғы кеүек ҡабул ителә. Йоганың маҡсаты – махсус күнекмәләр ярҙамында, өс каналды ла таҙартып, Кундалини ҡеүәтен юғары чакраларға күтәреү.

Шулай итеп, Урал, бер ниндәй ҡотҡоға бирелмәйсә, баштан уҡ үҫеш-күтәрелеш юлына төшә: ҡабырсаҡтағы ҡанды эсеүҙән баш тартып, беренсенән, үҙен ошо кире мәғлүмәтле, ярамаған, насар карма туплауҙан азат итһә, йәғни **яма** кимәлен үтһә, икенсенән, атаһы һәм ағаһы Шүлгәнде кейек-йәнлектәрҙе аулауҙан, һунар итеүҙән, уларҙың йәнен ҡыйыуҙан тыйып, был шөғөлдөң ғәҙелһеҙлек икәнлегенә төшөндөрөп, **нияма** баҫҡысына күтәрелә. Атаһы Шүлгәнде туҡмағанда, ағаһын йәлләп яҡлашҡан Урал атаһының асыуын баҫа алырлыҡ аҡыллы кәңәштәр биреүе – унның аңы **муладһара** чакраһынан ашыуын иҫбатлаусы ваҡиға. Урал, тыуып үҫкән илем, тип атаясаҡ **беренсе ил ер элементына тап килгән кимәлдән артылыу**, азат булыу ошо күренеш менән тамамлана, сөнки ул атаһын ышандырырлыҡ аҡылы менән егет ҡорона инеүен иҫбат итте. Был хәлдән һуң Урал, барса йәнлек, ҡош-ҡортто йыйып, кәңәш-ҡор үткәргәндә, тиңлек, ғәҙеллек тураһында һәм тағы ла йыртҡыслыҡты бөтөрөү, яңғыҙ ҡалыр Үлемде табып, уның үҙен үлтереү тураһында фекер әйтеп ҡараһа ла, хайуандар быға риза булмай. Сөнки был кимәлдә тереклек итеүселәргә хас хәл-торош – көслө көсһеҙҙе ейер йолаға буйһоноп көн итеү. Был һыу элементы өҫтөнлөк иткән (иҫләгеҙ: «дүрт яғын диңгеҙ уратҡан булған, ти, бер урын») **икенсе аҫкы донъя** – **свадистана** иленән ысҡыныу ҡулға килеп эләккән Һомайҙы ирекә ебәреү һәм аҡҡош-ҡыҙ мәғлүмәт итеп биргән Йәншишмәне эҙләргә сығыу ваҡиғаһы менән тамамлана. Эпоста уның ҡабат

Бүтән кеше күрмәйсә,
Тик йәшәгән дүртәүһе.
Донъя-маҙар йыймаған,
Ҡашыҡ-аяҡ тотмаған,
Ҡаҙан аҫып, ут яғып,
Алар донъя көтмәгән.
Ауырыу-һыҙлау күрмәгән,
Үлем барын белмәгән

был ерҙәргә, ата-әсәһе янына кире әйләнеп ҡайтыуы тураһында мәғлүмәт булмауы ошо фекерҙе раҫлай. Ер-һыу элементынан торған ике чакранан шулай күтәрелде Шүлгән менән Урал.

Артабан ике улдың, Үлемде еңер сара эҙләп, юлға сығыуы һәм уларҙың ике йүнәлешкә айырылып китеүҙәре символик рәүештә муладһаранан сыҡҡан аңдың саталаныуын – уң яҡтағы пингала (асыу-һарыуҙы ҡайнатыусы хәрәкәт ҡеүәте – *раджас – ҡояш*) һәм һул яҡтағы ида (томаналыҡ, һиллек ҡеүәте – *тамас – ай*) каналдарына бүленеүен һүрәтләй:

Һулға китһәң, юл буйы –
Уйын-көлкө төн буйы,
Ҡайғы-этлек күрмәйенсә,
Барлығын да белмәйенсә,
Рәхәт йәшәй байманда...
Уңға китһәң, юл буйы –
Илау-һыҡтау йыл буйы;
Яуызлыҡта дан алған,
Батшаһынан, башҡаһынан
Ҡайғы, этлек күреүсе,
Ҡанлы йәшен түгеүсе
Ҡатил батша иле бар;
Тау-тау кеше һөйәге,
Ҡанға батҡан ере бар...

Ни өсөн тыныс холоҡло, изге күңелле, мәрхәмәтле Урал яуыз Ҡатил батшаның илау-һыҡтау, зарға тулы иленә килеп юлыға, ә асыулы, ярһыулы Шүлгән һиллек, муллыҡта көн күргән илдә бер ыҙа-хәсрәтһеҙ донъя ҡыҙырып йөрөй? Һәр кем үҙенә тейешле ҡеүәт төрөн үҫтерә, шуға бәйле тормош тәжрибәһе туплай, үҙе лә хәл-ваҡиғаларға йоғонто яһар заруратынан була.

Хәҙер инде **йоганың өсөнсө кимәлендәге манипура илендә — ут элементына тап килгән донъяла** Урал ниҙәр кисереүенә байҡау яһайыҡ. Белемгә, донъяны танып белеүгә ынтылыш манипураның ыңғай сифаты булһа, самаһыҙ ҡомһоҙлоҡ, һаранлыҡ артыу ихтималы уның насар яғынан һанала. Ҡатил батша йыл да

Ауырыу-һыҙлау күрмәйенсә,
Үлем башҡа килмәйенсә,
Ҡатын-ҡыҙҙы, ир-атты,
Айырмаҫтан йәш-ҡартты,
Ҡул-аяғын бәйләтеп,
Арыуҙарын һайлатып,
Йыл да бер ҡат йыйҙыра,
Һарайына алдыра;
Ҡыҙы һайлай егетен,
Үҙе һайлай ҡыҙ-ҡырҡын,
Ҡалғандарын тағы ла
Ярандары ҡарайҙар,
Үҙҙәренә һайлайҙар;
Бүтәндәрен аямай,
Ҡанлы йәшкә ҡарамай,
Терелә тә, һау көйгә
Ҡыҙын күлгә һалдыра,
Ирен утҡа яндыра;
Атаһы өсөн, үҙе өсөн,
Йыл да бер ҡат Тәңре өсөн
Ҡанлы ҡорбан уҙҙыра.

Уралдың был илгә килеп етеү ваҡыты ошо йоланы башҡарыу мәленә тап килеүе осраҡлы хәл түгел:

Батша ҡыҙы, аралап,
Бар егетте һайлаған,
Араһынан оҡшарҙай
Бер егет тә тапмаған.
Аҙаҡ сиктә, яҡынлап,
Уралға килеп еткән, ти;
Ҡулына алып бер алма,
Уға бүләк иткән, ти.
Батша ҡыҙы майҙанда
Башҡа һайлап тормаған,
Уралды алып барырға
Бер яранға ымлаған.
Ҡыҙ тәхеткә ултырып,
Тағы ҡолдан күтәртеп,
Һарайына юлланған,
«Батша ҡыҙы һөйҙө бит,

Батша кейәүе булды бит!» –
Тип, барыһы шау килеп,
Ярандары геү килеп,
Халыҡты ситкә тарҡатып,
«Әйҙә һарайға, егет,
Батша ҡыҙы көтә», – тип,
Уралға йола аңлатып,
Бер яраны шул саҡта
Юл башларға булған, ти.
«Кейәү булдың беҙгә», – тип,
Арҡаһынан һөйгән, ти.
Урал быға күнмәгән,
Һарайға ул китмәгән.
«Мин йоланы белмәйем,
Эш аҙағын күрәйем,
Аҙаҡ барһам, барырмын,
Ҡыҙҙы эҙләп табырмын», –
Тиеп Урал әйткән, ти...

Был ваҡиғаны һүрәтләүҙән беҙ Уралдың егет ҡоронда нығыныуын күрәбеҙ. Әле үҫмер булыуына ҡарамаҫтан, уның ғәйрәте, свадистана кимәленән ашыуы сәбәпле, батша ҡыҙын ылыҡтыра. Бер үк ваҡытта, ул свадистананың тәьҫиренә бирелмәй, шуға күрә ҡыҙҙың саҡырыуы артынан эйәреп китмәй, әҙәп һаҡлай. Әммә тәҡдимде кире ҡағыуын йола белмәүгә һылтап, ҡыҙҙың да йөҙөн йыртмай һәм халыҡ алдында абруйын төшөрмәй. Бының менән ул **үҙ фекере** барлығын, **үҙ аҡылы** менән ҡарар ҡабул итеүгә өлгәшкән **батыр егет** дәрәжәһен раҫланы. Ҡатилдың үгеҙе менән көрәшер алдынан да ул:

Мин дә әрәм итергә,
Үгеҙ, һине тырышмам,
Яфаланып, көс түгеп,
Һинең менән сайҡашмам.
Донъяла һин кешенән
Көслө юғын таныһың,
Үҙең түгел, тоҡомоң менән
Кешегә ҡол булырһың, –

тип кешелек һәм хайуанлыҡ кимәлдәренең айырмаһын ҡәтғи бүлеп ҡуя. Ҡатил үгеҙе, шулай уҡ дүрт бәһлеүәндең бер юлы

алышта Уралдың алдына сыға алмауын тик йогалағы нескә кимәлдәге ҡеүәттең тупаҫ, физик көстән өҫтөн булыуы менән генә аңлатып була:

> Дүртегеҙ ҙә килегеҙ,
> Үлем эҙләп йөрөгән
> Батыр көсөн белегеҙ;
> Ҡулығыҙҙа йән бирһәм,
> Арыҫланыма бирегеҙ;
> Көсөгөҙ етһә ташларға,
> Йәншишмәгә сөйөгөҙ...

Ни өсөн Урал Үлемдән ҡурҡмай? Сөнки бындай көрәш арҡылы аңдары юғары кимәлдәге шәхестәр (батырҙар) ғәҙәти бер һынау ғына үтә: улар өсөн был тере саҡта «үлем тәжрибәһе» үтеү, йәғни «рухи үлем кисереү» һәм «рухтың ҡайтанан тыуыуын кисереү» тип аталған ғәмәл генә. Ә ни өсөн батырҙар бындай һынау тота? Сөнки тап ошо ғәмәл аша донъяуи теләктәрҙе булдырыусы, нәфсене үҫтереүсе «мин-минлек»[56] юҡҡа сығыр, үлер; уның урынына яңы аң – рухи күтәрелеш кисергән бөйөк шәхес әүәләнер был йәндә. Шулай итеп, Урал манипура кимәлендә лә һынауҙы тотҡарлыҡһыҙ йырып сыҡты – был **өсөнсө илдең** батшаһы ҡыҙын **ғоманлы** итеп ҡалдырыуы шуға ишара. Инде кешелек донъяһының да тик ғазап-яфаларҙан ғына яралғанын нескә тойоп, «үҙ-үҙәген»[57] тапҡан яңы йән бар яңы булмышын кешелекте ошо яфаларҙан арындырыуға бағышлай.

Артабанғы ваҡиғалар Уралдың йылан батшаһы Ҡәһҡәһә иленә аяҡ баҫыуына, уның улы Зәрҡумдың ун ике тарбаҡ мөгөҙлө боланды йоторға маташыуына осрау менән башланып китә. Йыландың тамағына торған боландың мөгөҙөн һындырышып, Урал, Зәрҡумды Үлемдән ҡотҡара. Боланды йотоуға булышлыҡ иткәс, тегеһе шунда уҡ сибәр бер егеткә әйләнә.

Был осраҡта боландың ун ике тарбаҡлы мөгөҙө нимәнең символы тиһегеҙ? Ун ике өлөштән тороусы «Ваҡыт тәгәрмәсе» эсендә Сансараның аҫҡы донъяһында тереклек итеүҙән ялҡҡан йәндең өҫкө донъяларға артылырға тырышыуын һүрәтләү булыр был. Тарбаҡ мөгөҙлө болан үҙе – йогалағы иң юғары

---

[56] «Я – эго», эгоизм.
[57] Санскрит: **атман** – «истинное эго».

баҫҡыс һаналған сахасрара символы: был кимәлгә еткән йән кәүҙәһен үҙ теләге менән ҙурайта-бәләкәйләтә, ауырлығын арттыра-кәметә ала һәм теләгән бер алыҫлыҡтағы арауыҡты үтә алыу, йәне теләгән әйбергә хужа булыу һәләтенә, бөтә донъя менән идара итеү мөмкинселегенә эйә була, тиҙәр. Ул кимәлгә яҡынлашыр өсөн, йәндең «кеше булыу» хәлендә булыуы мотлаҡ. Бының өсөн манипураның «ҡомһоҙлоҡ» сифатына эйә Зәрҡум үҙен үлемдән ҡотҡарған Уралға хатта атаһының ынйы башлы таяғын бүләк итергә вәғәҙә бирә:

Ул таяҡтың даны шул:
Һыуға төшһәң, батмаҫһың,
Утҡа инһәң, янмаҫһың;
Күренмәҫкә теләһәң,
Һис бер йән дә күралмаҫ,
Дошман һине эҙләһә,
Бер ҡасан да табалмаҫ...

Урал был ваҡытта үҙенең сихри һәләте – юғары кимәлдәге аңы ярҙамында Зәрҡумдың мәкерле уйын үтәнән-үтә уҡый:

«Йылан илең күрәйем,
Бар серене беләйем,
Яҡшылыҡҡа яманлыҡ
Була икән донъяла,
Бергә барып күрәйем.
Егет һүҙе бер булыр,
Алға алған уй булыр,
Тартынмайса барайым.
Үлем еңер йөрәктең,
Уны йығыр беләктең
Батырлығын һынайым», –
Тиеп Урал уйлаған,
Барыу юлын һайлаған.

Тәүәкәллек уны алдағы ваҡиғаларҙа үҙ-үҙен һынауға этәрә, сөнки аң үҫеше дауам итә, маҡсатҡа ынтылыш һәр саҡ аңды аныҡ тота. Был анахата – ярайһы уҡ юғары кимәлдәге донъя булыр, һаҡсы йыландарҙың Уралды кем ашарға лайыҡлыраҡ икәнен асыҡлау өсөн бәхәсләшеүҙәренән күренә. Шуға ла улар, дөрөҫ һиҙенеп, Уралдың да ҡеүәт кимәлен баһалайҙар:

«Юҡ, юҡ, тәңрем түгел һин –
Кеше еҫе аңҡыны –
Ысын кеше икәнһең!
Батша улын һөйләтеп,
Бөтә серҙе белгәнһең,
Серҙе аңлап килгәнһең...»

Йылан батшаның бар серен һаҡлап тороусы туғыҙ башлы йыландың бер башын сабып өҙгәс, ергә асҡыс ҡойолған, ҡалған һигеҙенән һигеҙ батыр бар булған, ти. **Йыландың йөрәген** ярыуға унан **алтын асҡыс** табылып, сер һарайын асыу, ә ул һарайҙан һылыу ҡыҙ Гөлостан сығып, ынйы таяҡты Уралға тоттороуы – былар барыһы ла һис шикһеҙ **анахата** – ер кешеһе донъяһына тап килгән **дүртенсе кимәлдәге ил** булып сыға. Йоғанан билдәле булыуынса, был кимәлгә артылғанда даншөһрәт килер. Әгәр ҙә ул шуларға әүрәп, ирәйеп китһә, артабан үҫешкә юл ябыласаҡ. Иреккә сыҡҡан халыҡ, ысынлап та, шуны тәҡдим итә лә Уралға:

Тәңре бирмәҫ ярҙамды
Беҙгә, егет, атҡарҙың,
Ил ҡаплаған яуыҙдың
Утлы яуын аҡтарҙың.
Инде, егет, нишләйек,
Ниндәй бүләк бирәйек,
Ни тип әйтеп ҙурлайыҡ?

Бөйөк маҡсатына барыуҙан һис тайпылмаҫ Урал дандан, ҡәҙер-хөрмәттән баш тарта:

Һис бер ҙурлыҡ кәрәкмәй;
Ил батыры шул булыр –
Һеҙҙең шатлыҡ – минеке,
Минең шатлыҡ – һеҙҙеке.
Илдең барын йыяйыҡ,
Күмәкләп туй ҡылайыҡ,
Арағыҙҙан берәүҙе
Башлыҡ итеп ҡуяйыҡ.

Был яуабы менән ул һауаланыуға, батырлығы менән ғорурланыуға юл ҡуймай, халыҡты ҙурлап, үҙен кеселекле күрһәтә.

Ә икенсе тапҡыр туй ҡылыуы – халыҡ исеменән һүҙ тотҡан, донъяны күп күргән аҡһаҡалдың һүҙен йыҡмауҙан:

Һәр йыл ғүмер бер батыр
Иле өсөн яратыр.
Быуын-быуын үтер ул,
Киләсәк быуын етер ул,
Һинең даның ҡалһа ла,
Ҡулда ғәйрәт бөтөр ул.
Ир бөтһә лә, ил бөтмәҫ,
Ил батыры – батырҙан,
Батыр ирҙән тыуыр ул;
Атанан күреп, уҡ юнып,
Өлкәндән күреп яу ҡыуып,
Ил эсендә үҫер ул,
Утын-һыуын кисер ул.
Батырҙан батыр тыуғанда,
Бер быуын тип һаналған
Илдә ғүмер итер ул.
Батыр атанан ҡот йәйгән,
Матур әсәнән һөт имгән, –
Һиңә тиңдәш булыр ҡыҙ,
Батырға әсә булыр ҡыҙ, –
Тигәс, Урал тыңлаған:
Гөлостанды алған, ти,
Бер оло туй ҡылған, ти,
Бергә ҡунаҡ булған, ти.

Исеме үк әйтеп тороуынса, Уралдың был ҡатыны яҡты донъя, ер өҫтө менән бәйле. Уның атаһы Алғыр ҙа ер кешеһе[58]. Шулай итеп, халыҡ тарафынан инде батыр дәрәжәһендә танылған Урал, был донъяла бар нәмәнең ваҡытлыса, шул иҫәптән ваҡиғаларҙың да, алмашыныусанлығы тураһында аҡһаҡалдың һабағын отто, үҙләштерҙе, һәм, киләсәктә үҙенә ярҙамға килер ул яралтып, артылыш юлын артабан дауам итте.

Быныһы булыр **бишенсе ил** – күктәге тәхет өсөн көрәшалыш, ярыш-сәм менән тулы **вишудда** кимәле. Йәншишмәгә юлланыуҙың һул сиген һайлаған Шүлгән дә күтәрелеп еткән

[58] *Закирйән Әминев.* Башҡорт һәм скиф мифологияһындағы ҡайһы бер оҡшашлыҡтар тыуҙырған уйҙар // Йәшлек. 2004. № 145.

был үрҙәргә! Урал туғанын ошонда тап итәсәк, сөнки өҫкә күтәрелгән һайын, донъя киңәйә барһа ла, йән эйәләренең һаны күрәләтә кәмей, бындай юғарылыҡҡа артылыу һирәктәр өлөшөнә генә тәтер. Бына шул һирәктәр араһындағы көрәш тә бик ҡаты булыр, сөнки улар араһынан кемдер берәү генә тағы ла үрҙәрәк торған күк тәхетенә урынлашыр бит. Шуға күрә дейеү батша Әзрәҡә һәр береһе үҙ юлы менән күтәрелгән ағалы-ҡустылының береһен, үҙенә ҡулайлыһын, тиңен ваҡытлыса мәкерле ниәттән, дуҫ ҡылырға мәжбүр. Дейеү, уларҙың көс-ҡеүәтен бер-береһенә ҡаршы йүнәлтеп, бәрелештереп, үҙе, шул көрәштән ситтә ҡалып, отмаҡсы. Ошо юл менән ул, күк батшаһы Самрауҙы ҡолатып, уның урынын алыу өсөн сәмләнә. Был ниәтте тормошҡа ашырыу юлын да улар аныҡ белә. Уларға әҙәм ҡиәфәтендәге берәү кәрәк:

Батшам, сара эҙләйек,
Ҡул ҡаушырып тормайыҡ;
Берәй кеше табайыҡ,
Самрау ҡоштоң Аҡбуҙын
Кеше аша алайыҡ,
Һис булмаһа – урлайыҡ.
Әзрәҡә: «Аҡбуҙатты алырға,
Уға эйәр һалырға,
Йә булмаһа, ул атты
Был донъянан юйырға
Ете дейеү ебәрҙем.
Күктә торған буҙ аттың
Урынын үҙем күргәҙҙем.
Улар барып баҫтырҙы,
Тота алмаған яҡшылап,
Ат уларға килмәне,
Дейеүҙәрем ғәрлектән
Кире илемә инмәне:
Күктә ҡалды хур булып,
«Етегән» тигән исемдә
Мәңге ҡалды ут булып.
«Һис булмаһа һары атын
Алайым», – тип уйланым.
Айҙан тыуған ҡыҙы бар, –
Шуны уйлап ҡараным.

Ҡыҙы тотҡон булһа ла,
Аты бүләк булһа ла,
Ул ат һаман килмәне,
Һис теләгем булманы.
Хәҙер беҙгә шул кәрәк:
Кеше булған ир кәрәк,
Ҡояш ҡыҙы Һомайҙы
Арбай алыр ир булһын,
Был донъяла бер булһын.
Ҡыҙ, яратып егетте,
Аҡбуҙ менән булатты
Бүләк итерҙәй булһын.
Буҙ ат менер ир тапһаҡ,
Ҡыҙ теләһә, ҡыҙ биреп[59],
Мал теләһә, мал биреп[60],
Баш булам, тип ымһынһа,
Берәй илгә баш ҡылып[61],
Ул егетте арбаһаҡ, –
Беҙ Уралды еңербеҙ,
Ер өҫтөндә кешенән
Тарлыҡ-маҙар күрмәбеҙ,
Теләгәнебеҙ итербеҙ,
Барын ҡулда тоторбоҙ[62]».

Күк батшалары Әзрәҡә менән Ҡәһҡәһә ни өсөн кешенән үтә алмай? Хикмәт ниҙә һуң? Тик рәхәтлектә, ҡәнәғәтләнеү тойғоһона сорналып, көн күреүсе аллалар ни өсөн кешенән көсһөҙөрәк? Сөнки, йога өйрәткәнсә, әҙәм балаһына ғына рухи кимәлде үҫтереү теләге хас.

Сансара ҡуласаһының уртаһына тап килгәнгә күрә, кешелек донъяһына уның ләззәте һәм ыҙа-яфаһы бер самала тиң бирелгән. Кеше, шуның алтын уртаһын тойоп, өҫкә ынтылыр көс таба ала. Ә уның аҫҡы ҡаттары булған ғазап ситлектәрендә – тамуҡ, хайуандар һәм мәңге ас ендәр донъяларында йән аҫрау ҡайғыһынан башҡа хәстәр юҡ, ә кешелектән юғарыраҡ баҫҡыстарҙа тороусы асурҙар һәм күк аллалары өсөн, байманлыҡта йәшәп, ҡайғы-хәсрәт барлығын онотоуға дусар

---

[59] Свадистана кимәле.
[60] Манипура кимәле.
[61] Анахата кимәле.
[62] Вишудда кимәле.

булғанлыҡтан, рухи ғәмәлдәр алып барыу мохтажлығы юҡ. Шуға күрә улар рух бөйөклөгөнә ынтылыуҙан мәхрүм һәм, нәтижәлә, кешенән көсһеҙерәк булып ҡала. Эпоста һүҙ барған көрәш бына шул сәбәптән бара ла инде. Күк батшалары кешенең аң кимәлен, үҫешен матди донъяның төрлө алдатҡыстарына ымһындырып, туҡтатырға маташа. Үҙҙәре иһә, вишудда (бишенсе элемент – бөйөк бушлыҡ батшалығында) – аджня (аждаһа) кимәлдәрендә азатлыҡта, иркенлектә мәңге хужа булып ҡалырға теләйҙәр.

Был кимәлгә еткән Шүлгән менән Урал Күк батшаларының көндәштәре, сөнки уларҙың алтынсы ил аджняға күтәрелеү мөмкинселеге дейеүҙәрҙекенән артыҡ. Урал менән Шүлгән кеше атлы әҙәм затынан. Был тәңгәлдә пәйҙә булған Ай ҡыҙы Айһылыу, Ҡояш ҡыҙы Һомайҙың ролдәре нимәлә? Уларҙың образына йога тәғлимәтенең ниндәй сере һалынған?

Йогала ҡур һөйәгендә йоҡо хәлендәге йылан рәүешендә һаҡланыусы ҡеүәтте уятып, хәрәкәткә килтереү, чакралар аша юғарыға күтәреү өсөн бер рухи ғәмәл башҡарылыуы мотлаҡ: ида һәм пингала ҡыл-каналдарын унда йыйыла килгән карма ҡалдыҡтарынан, иҫке ҡеүәттән бушатып, таҙартыу маҡсатында **һыу һәм ут тәьҫирендә** һабаҡ алыу. Һул яҡ каналды таҙартыу йогала *«һыу менән таҙарыныу»*[63] тип атала һәм физик тәндең ҡайһы бер үҙгәреш кисереүе менән оҙатыла: Кундалини ҡеүәте күтәрелеү ваҡытында оҙайлы ғына ваҡыт өшөүҙән ҡалтыраныу тойғоһо биләп ала, кеше һүрәнләнеп ҡала, баш ойой. Бер ниндәй йылы кейем һәм тышҡы йылылыҡ ҡотҡара алмай был хәлдән: астраль тәндәге был ҡеүәт төрөн **Айҙың магнит тәьҫире** хәрәкәткә килтерә иҡән.

Пингала юлағын таҙартыу *«ут менән һынау»* («крещение огнем») тип атала, сөнки Кундалини ҡеүәте күтәрелеү тәндең йылылығын самаһыҙ арттыра, кеше сәбәпһеҙгә асыулы, ярһыулыға әйләнә – был күренеш **Ҡояш әүҙемлеге** менән бәйле.

Хәҙер инде ошо «ойоғанлыҡ» һәм «әүҙемлек» хәлдәренә килтергән ике төр ҡеүәтте юғары сифатҡа әүерелдереү бурысы килеп тыуа: һәр береһен, үҙ юлағы буйлап, аджня чакраһына – уларҙың һуңғы нөктәһенә тиклем күтәреү, бергә ҡушылыу

---

[63] Был күренеш – «крещение водой» Христиан динендә һаҡланған: 1) Христианский обряд, совершаемый над младенцами или взрослыми для включения их в число членов церкви; 2) Крещение – один из главных праздников у православных христиан.

мәленә еткерергә кәрәк. Ошо саҡта уларҙы урта юлаҡҡа – сушумна каналына юллатып, уларҙы ҡушылыуынан барлыҡҡа килгән Кундалини ҡеүәтенә эйә булыу. Бындай әҙәмдең тәне, бер ниндәй сирҙәргә бирешмәҫ, ауыртыныуҙар белмәҫ, ә йәне аллалар кимәленә хас һәләттәргә эйә булыр. Был кимәлдәге ҡеүәт ярҙамында кеше күҙенә яҡтылыҡ сатҡылары күренер, йәғни көндөҙ йондоҙҙар күрер ул.

Шулай итеп, эпостағы артабанғы хәл-ваҡиғаларҙы күҙәтәйек.

Һул яҡтан киткән һәм шуға күрә йогалағы *«һыу менән бәйле һынау»* тотҡан Шүлгәндең яңынан пәйҙә булған мәле, ысынлап та, шулай һүрәтләнә:

Ай киткән, ти, йыл киткән,
Күп йылға, тауҙар үткән,
Ҡайҙа уға төн булһа,
Шунда ятып йоҡлаған.
Барып сыҡҡан бер ергә
Осраған, ти, *бер күлгә,*
Ситен ҡуға ураҡҡан,
Томбойоҡтар япрайып,
Тик ағастай, сәскә атҡан;
Һаҙмыт түгел, ҡырсын төп,
Өйрәк, аҡҡош, ҡыр ҡаҙы
Йөҙөп йөрөй – шундай күп.
Күлдә ятҡан балығы,
Ялтуш, сабаҡ, суртаны
Бергә йөҙөп уйнайҙар,
Бер-беренә теймәйҙәр.

Был күлдең эргә-тирәһендә лә шул уҡ хәл:

Ҡуй-һарыҡ та, бүре лә,
Әтәс-тауыҡ, төлкө лә
Бер тирәгә йыйылған...

Ожмах тигәндең үҙе инде бына! Был һүрәтләүҙән күреүебеҙсә, донъя ҡапма-ҡаршылыҡлы, бер-береһе менән айҡашып-көрәшеп йәшәгән ике яҡҡа бүленмәгән. Ошо урында ул Зәрҡумға осрап, атаһының дуҫы Әзрәкәгә алып килә. Бында улар

тарафынан урланып тотҡонда йәшәгән **Айһылыуҙы**[64] күрә һәм, әлбиттә, шул тәьҫирҙән уны ойоу ала:

Күмәк ҡыҙ уртаһында:
Буҙ таштар араһында
Айырым бөртөк ынйылай,
Күктә балҡып йәмләнгән
Йондоҙҙарҙың айындай;
Һылыуҙарҙың битендә
Айырым торған миңендәй –
Һылыуҙарҙың-һылыуы
Айһылыуҙы күргәс тә,
Шүлгән күҙен текләгән.

Шүлгән был матур һәм һил донъя рәхәтлектәрен татып, ни маҡсаттан йөрөүен дә онотоп китә:

Данлы туйын ҡорған һуң,
Ҡыҙ ҙа һылыу булғанға,
Егетте лә һөйгәнгә,
Шүлгән шуға мауығып,
Был һарайҙа йотолған,
Бөтә эше онотолған.

Ләкин был кимәл йоғаның маҡсатына ярашлы булмағанға күрә, Шүлгәнде был «ойоуҙан» сығарырлыҡ тышҡы сәбәп табыла:

Берҙән-бер көн Әзрәҡә
Зәрҡум менән Шүлгәнгә
Самрау батшаның ҡыҙын,
Булат ҡылыс, Аҡбуҙын
Ала торған юлыны,
«Аҡбуҙатҡа менгән ир,
Булат ҡылыс тотҡар ир –
Бөтә донъя йөҙөндә
Иң ҙур батыр булыуҙы,
Барын баш эйҙереүҙе
Теҙеп һөйләп аңлатҡан», –

---

[64] Иҫләгеҙ: Айҙың магнит тәьҫиренән хәрәкәткә килгән ҡеүәт.

Төрлө яҡлап самалап
Ҡул тамырыны тартҡан.
Һомайҙы ил маҡтағас,
Яуға ҡалһа, аҙағы
Дейеү ҙә бирәм тигәс,
Шүлгән бармаҡ булған, ти,
Һомайҙы алмаҡ булған, ти.
Зәрҡум, Шүлгән икәүһе
Үҙ-араһы һөйләшеп,
Бер дейеүгә менгәшеп,
Самрау батша иленә
Икәү бергә киткән, ти,
Күҙ асып, күҙ йомғансы
Барыр ергә еткән, ти.

Быныһы инде йогалағы телепортация күренеше: уй-буй кимәлендә генә өлгәшерлек теләһә ниндәй алыҫлыҡтағы араүыҡты үтә алыу, теләгән бер донъяға сәйәхәт итеү һәләте асылыуы, сөнки йән, аджня аша физик тәндән айырылып сығып, ирекле хәлгә килә. Шүлгән, шулай итеп, дейеүҙәр һәм Зәрҡум ярҙамында Сансараның ҡулсаһынан ысҡынды булды. Шул уҡ ваҡытта, был кире ниәтле яуыздарҙың яйына төшөп, ул изгелеккә хеҙмәт итер туғаны Уралға ҡаршы була. Әммә был да – Юғары көстәр тарафынан тәүҙән үк икеһен ике яҡҡа аймылыш иткән ике юл – Махаяна һәм Хинаяна аша үҫеш. Үҙ үҫешен генә хәстәрләр Шүлгәндең «үҙен башҡаларҙан айырым тойоу» аңы ла шулай үҫешә. Мин-минлек идеяһы быңдай аңдың хужаһын «бөтөн, камил, тулы» сифатындағы нурҙан ғына туҡылыр бөйөк бушлыҡ – Нирванаға һәм Маха Нирванаға күтәрмәйәсәк; киреһенсә, ҡапма-ҡаршы йүнәлешкә, түбәнгә ҡолауға борасаҡ, сөнки ул донъяуи *нәфсе-теләктәрҙән* арына алмауҙан «ауыраясаҡ». Шуға күрә үҙе нурҙан яралған Һомай был икәүҙең мәкерле ҡара уй-хәсрәттән килеүҙәрен шунда уҡ төшөнөп ала, шул яуыз теләктәрен ҡуйҙырыу, ваз кистереү ниәтенән уларға бер һынау ҙа үткәрә. Икеһен ямдағы һыуға ҡолатып, «йөҙҙөрөп» ала. Был һабағынан һуң, кәңәш итеп, ошондай киҫәтеү һүҙҙәрен әйтә:

Ҡан көҫәгән, йәш түккән,
Күптәр башына еткән,
Ҡан эсергә уҡталған

Уҫал йөрәгең бөтһөн,
Бәғерле йөрәк үҫһен.
Йөрәк майың иреһен,
Бөтә йәнде үҙеңдәй
Һөйөр бер күңел тыуһын;
Ҡыҙғаныусан йәш йөрәк
Уйыңа башсы булһын.
Шуға саҡлы был ерҙә,
Тере көйө шул гүрҙә
Башың ҡаңғырып ятһын.
Үҙеңә юлдаш һайларлыҡ,
Яҡшы юлды табырлыҡ,
Илдә даны ҡалырлыҡ
Яңы кеше булырһың;
Яҡшыға юлдаш булырһың;
Йыландарҙан ҡасырһың,
Уны дошман белерһең.

Һомайҙың, Күк батшаһы Самрауҙың Ҡояштан тыуған ҡыҙы булараҡ, аң кимәле кешелек донъяһыныҡыларҙан күпкә өҫтөн. Шуға күрә ул үҙенән түбәнерәктәргә ҡарата мөнәсәбәттәрҙә шәфҡәтле, ярҙамсыл, изгелекле – был күктәгеләрҙең булмышына, асылына тап килгән күркәм сифаттар. Һомай, күрәҙәлек ҡылып, вишудда кимәлен үтеп, инде аджняға еткән, бер ынтылһа, Йыһан ҡапҡаһы сахасрараға етер Шүлгәндең, яңылыш юлға баҫҡанын тоя. Күк ҡыҙының ошо ҡылығы аша талапсанлыҡ күрһәтә – егеттең кирегә тәгәрәү ихтималлығын алдан һиҙгәнгә күрә, уны иҫкәртә. Ләкин, көнсөллөк һәм нәфсе ҡолона әйләнгән Шүлгәндең аңы томаланып өлгөргән инде.

Инде Һомайҙың өмөтө, юлында осраған барлыҡ һынауҙарҙы имен-аман үтеп, был тәңгәлгә килеп етер Уралда булыр. Шуға күрә ул, ҡунаҡсыллыҡ йолаһы күрһәтеп, әлегә үҙен танытмай, килеүсе менән әңгәмә ҡора, ниәттәрен аңлап алырға тырыша. Уй-теләктәре аныҡлыҡтан, алсаҡ һәм ябай Урал, һәр ваҡыттағыса, дөрөҫ мәғлүмәтле яуап бирә:

Үҙем йәп-йәш булһам да,
Биш ил барын белдем мин:
Береһендә үҙем тыуҙым,
Икеһен йөрөп күрҙем мин,

Ҡалған тағы икеһен
Күрергә тип сыҡтым мин.
Ҡайҙа ғына барһаң да,
Кемде генә күрһәң дә,
Береһе үҙен баш тиә,
Икенсеһе баш эйә,
Көслө көсһөҙҙө ейә,
Теләгәнсә ҡан ҡоя...

Ул, шулай итеп, үҙе үтеп сыҡҡан чакраға хас донъяларға баһа бирә: былар фани донъя ҡуласаһы Сансараның ыҙалы, яфалы михнәттәргә тулы биш өлөшө муладһара, свадистана, манипура, анахата, вишудда ине. Уралға насип үҫеш юлы – уң юлаҡ (пингала нади) свадистанан уҡ өҫкә йүнәлеш ала, сөнки егет ата-әсәһе аша бирелгән йоланы теүәл башҡарыу сәбәпле, насар карманан баштан уҡ азат була һәм уның башланғыс рухи ҡеүәте гонаһлыларға тәғәйен муладһараға ҡоламай.

Маҡсатына яҡынлашҡанын да яҡшы тоя Урал – Сансараның алтынсы ҡатында осратырға тейеш ул Үлем тигән күҙгә күренмәҫ яуыҙды:

Үлемде табып үлтереп,
Ил ҡотҡарыр уйым бар.
Һунарлаған сағымда
Ҡулға төшкән бер ҡоштан:
Һеҙҙең илдә Үлемдән
Ҡотолорға юл бар, тип,
Ишеткәйнем мин йәштән.

Бындай осрашыуға, аңлашыуға әҙер Һомайҙың да, Йәншишмәне күрһәтерҙән алда, әйтер һүҙе, бирер баһаһы бар Уралға:

Минең һиңә шартым бар.
Ҡайҙа булһа барырһың,
Үҙең уйлап бағырһың;
Йылан илен үткән ир,
Уңдан һулға сыҡҡан ир,
Үҙең юлын табырһың.

Был урында һүҙ, әлбиттә, алтынсы чакра аджня тураһында бара. Аҡҡош-ҡыҙҙың егеткә былай тип мөрәжәғәт итеүе баяғы шул кеше тәнендәге астраль каналдарға ишара, сөнки Урал,

үҙенә тәғәйен булған уң юл – ҡояш юлағы пингаланы лайыҡлы үтеп сыҡты. Был ҡыл-каналды дөрөҫ ғәмәлдәр ҡылыуы нигеҙендә таҙартыуға өлгәшкән ябай кеше түгел, ә көс-кәре, ҡеүәте ташып торған батыр ул хәҙер. Ләкин уға, һул каналын да таҙартып, аҡыл эйәһе дәрәжәһенә етеү мотлаҡ, шунһыҙ – Йыһан ҡапҡаһы ябыҡ. Тағы бер ғәмәл – батырға һыу менән һынауҙы үтеп, Айҙың магнитлы тәьҫиренән арынырға, ошоноң менән ида каналынан да ҡеүәтен күтәрергә һәм был ике төр ҡеүәтте умыртҡа буйлаған урта юлда ҡушырға кәрәк. Ҡеүәттең ошо төрөн сахасрараға күтәрә алғандар эске тойғоһо менән баш түбәһенән, мейенән ысын ләззәт тойғоһона сумдырыр, тамсылар (йогала бинду тип атала) тамыуын тойор. Шул саҡта ғына әҙәм, барлыҡ нәфсе теләктәренән бушанып, ысын азатлыҡ тойғоһон кисерер: был хәл – йоганың иң юғары баҫҡысы, иң аҙаҡҡы маҡсаты.

Эпоста был һынау нисек һүрәтләнә икән, шуны күҙәтәйек артабан. Һомайҙың:

Бөтә донъя ҡош төҫөн
Үҙ өҫтөндә биҙәгән
Бер ҡош эҙләп тапһаң һин,
Минән ярҙам күрерһең,
Шишмәнән һыу алырһың,
Теләгәнеңде табырһың, –

тигән йомошона ҡаршы, алдағы һынауҙың ҡатмарлы булырын күҙаллаған Уралдың, үҙенә тиң юлдаш, яуҙа ҡорҙаш булырҙай бүләк һорауы була, ҡыҙ ҙа үҙенең һүҙен әйтә:

Утҡа төшһә, янмаҫтай,
Һыуға төшһә, батмаҫтай,
Ел дә ҡыуып етмәҫтәй,
Тауҙан-таштан өркмәҫтәй,
Ир-егеттән бүтәнде
Үҙенә тиң күрмәҫтәй;
Типһә, тау-таш сорғотоп,
Сапһа, диңгеҙ ярырҙай,
Ауырлыҡта, тарлыҡта
Һиңә юлдаш булырҙай,
Күктә тыуып, күктә үҫкән,
Ерҙә тоҡом йәймәгән,

Әзрәҡәнең дейеүе
Мең йыл ҡыуып тотмаған,
Әсәйемдән бирелгән,
Үҙем һөйгән егеткә
Бирә торған бүләгем –
Аҡбуҙ толпар бирәйем.
Йөҙөн һис тут алмаҫтай,
Утҡа ҡаршы – ут булыр,
Һыуға ҡаршы – һыу булыр,
Ен-дейеүҙең барыһын
Үлемендәй өркөтөр
Булат ҡылыс бирәйем.

Был юлдарҙан аңлауыбыҙса, Һомай, үҙенә тиң булырҙай йәрен алдағы һынауҙарҙа биш кимәлгә яңынан тәгәрәтмәү сараһын күрә. Йогала ер, һыу, ут, ел-һауа, бушлыҡ элементтарына тап килгән чакралар ҡапҡанына эләкмәҫ мәңгелек рух символы Аҡбуҙатын һәм шуларға хас донъяуи нәфсе-теләктәрҙе аҙҙырыусы ен-дейеүҙәрҙең (йогала: мара – дьявол) ау-тоҙағын өҙә сабыр символ – булат ҡылысын вәғәҙә итә. Алдан белеүебеҙсә, һанап үтелгән биш элемент Ерҙә, йәғни был донъялағына, матди хәлдәләр. Ә теге донъяла, нескә кимәлдәге рухи төшөнсәләр; шуға күрә ябай ер кешеһе уларҙы ғәҙәти һиҙеү тойоу ағзалары аша түгел, ә үҫешкән аң кимәлендә генә ҡабул итә ала.

Урал батыр, юғары кимәлдәге ҡеүәтен ҡулланып, телепортация ярҙамында («таяғын ат иткән, ти») ҙур ара юл үтеп:

Бара торғас, бер саҡта
Тау ураҡкан бер яҡта:
Һайыҫҡан да, ҡоҙғон да
Йән барлығын һиҙмәгән,
Һис бер кеше булмаған,
Дейеү-ен дә ул ергә
Килеп аяҡ баҫмаған,
Үркәс-үркәс ҡаяһы,
Башына күҙең һалһаң,
Юғары торор болоттан,
Бөтә йәмде үҙендә
Һаҡлар элек-электән –
Шундай бер тау күргән, ти;

Болот ярып, үрмәләп,
Тау башына менгән, ти.

(Был тауҙың һүрәтләнеше йога тәғлимәтендәге ер үҙәге булыр изге Меру тауына тап килә.)

Тирә-яҡҡа күҙ һалып,
Оҙаҡ ҡарап торған, ти:
Алыҫтан күҙгә салынған,
Йондоҙҙай булып сағылған
Бер яҡтылыҡ күргән, ти,
Шуға тоҫҡап киткән, ти.
Барып етеп ҡараһа,
Әйләндереп күҙ һалһа:
Таш урынына көмөштән
Сите, төбө биҙәлгән,
Буйындағы сәскә лә
Ҡаты елгә борсолмай,
Шаҙраланып өҫтәре,
Күҙ сағылыр төҫтәре,
Ел дә тейеп тулҡынмай,
Ҡояш нуры төшкәндә,
Ем-ем иткән ынйылай
Бер һылыу күл күргән, ти.
Ошо күлдең өҫтөндә
Тирәләй ҡош йыйналған,
Бөтә төҫкә биҙәлгән
Бер һылыу ҡош йөҙгәнен
Урал айыра күргән, ти...

Әлбиттә, был тамаша, өҫтә иҫкәрткәнсә, Уралда ида каналын таҙартыусы ғәмәлдең барышын һүрәтләй: *күл һыуы* (һул яҡтағы каналды һыу менән таҙартыу — «крещение водой») һәм шунда йөҙөүсе ҡоштоң *Айһылыу* булып сығыуы, шулай уҡ ай *символы — көмөш* тураһында мәғлүмәт – барыһы ла тап килә. Урал нисек шулай тиҙ эҙләгәнен таба һуң? Был хәл, йогалағы карма законы буйынса, «тиң тиңен таба» принцибы менән аңлатыла. Шулай уҡ улар икеһе лә нескә һиҙгерлек, аң кимәлендә бер-береһенең изге күңелле булыуҙарын яҡшы тойһалар ҙа, Самрау иленә ҡайтып ингәнсе, серҙе лә асып бөтмәйҙәр, сөнки танышлыҡ әле хәл-ваҡиғаларҙа һыналмаған.

һарайға ҡайтып еткәс, улар һәр береһе ни күргәнен «барын теҙеп һөйләгән».

Һомай быны ишеткәс,
Уралдан сер тартмаған:
Үҙе Һомай икәнен,
Уралды яҡшы белгәнен —
Барын теҙеп аңлатҡан,
Һомай шунда атаһын
Бүлмәһенә саҡыртҡан.

Инде хәҙер асыҡтан-асыҡ һөйләшеп аңлашыр сәғәт тә һуҡты. Тәүҙә улар кәңәшләшеп, дейеүҙәрҙең бында тағы килеү ихтималлығын асыҡлағас, Айһылыуҙы Айға, әсәһе янына, ебәреп тороуҙы хуп күрәләр. Һомай тәүҙә, Уралдың уй-ниәттәренең һаман да бер йүнәлештә икәнен тағы бер ҡат асыҡлар өсөн, һый-хөрмәттә ҡунаҡсыллыҡ ҡағиҙәләрен үтәй. Тәрбиәлелек, сама белеү Уралдың ҡанында булғанлыҡтан, бәҫле ҡунаҡ булып ятыуҙың артабан мәғәнәһе юҡлығын бер нисә көн үткәс тә, Һомайҙы саҡырып, белдерә. Артабан маҡсатына ярашлы юлын дауам итергә сығырын әйтә, уның биргән вәғәҙәһен иҫенә төшөрә:

Мин эҙләгән Үлемдән,
Һин әйткәйнең, телеңдән
Ҡотолорға юл табып
Мин бирермен, тигәйнең,
Аҙаҡ һүҙең әйт, һылыу,
Ни әйтерһең, — көтәйем,
Мин ишетеп китәйем.

Һомай, үҙенең күңелен яулаған батырҙы юлға сығарыр алдынан, атаһына был серен асып, уның ризалығын ала. Алда буласаҡ данлы оло туй хаҡына Шүлгән дә тотҡондан сығарыла.

Шүлгән, Урал икәүһе,
Берен-бере табышҡас,
Көтмәгәндә осрашҡас,
Ике туған шатлығын,

Юлда күргән барыһын
Урал теҙеп һөйләгән.
Шүлгән тыңлап ултырған,
Барын уйлап уҙҙырған;
«Урал былай дан алһа,
Атама данлы ҡайтһа,
Батыр булып маҡталыр,
Бар эштә лә оҫ булыр,
Минең һүҙҙәр аҫ ҡалыр», –
Тип, эсенән көнләшкән.
Шуға күрә Уралға
Бар серене сисмәгән,
Әзрәҡәлә булғанын,
Бында ниңә килгәнен, –
Береһен дә әйтмәгән.
Ул Уралды үлтереп,
Үҙе данлы ир булып,
Һомайҙы ла үҙе алып;
Аҡбуҙатҡа атланып,
Булат ҡылыс ҡулланып,
Дан алыуҙы уйлаған.

Әлегә ике туғандың хәл-тороштары бер самала, тиң күренә, сөнки улар икеһе лә был аджня кимәленә күтәрелеп еттеләр бит. Әммә был күренеш тышҡы ҡарамаҡҡа ғына шулай тойола. Шүлгәндең эске үҫешкә йүнәлеш биреүсе ниәттәре башҡаса. Йыһандың иң гәҙел, шуға күрә унан ҡотолор йән булмаҫ **карма – ҡармаҡ** эләктеререн, **ҡармап** алырын күҙ уңынан ысҡындыра шул көнсөллөктән аңы томаланған Шүлгән! Шул саҡ былар араһында аң кимәлендә аңлашыу, киҫәтеү ҙә була:

...Батыр булған ир-егет
Еңмәҫ нәмә булырмы?
Батырмын тигән ир-егет
Яуызға юл ҡуйырмы?
Утҡа ҡаршы һыу булыр ул,
Яуға ҡаршы тау булыр;
Үҙенә түгел, барына
Ауырлыҡта юл булыр
Батырҙан ир тарыҡмаҫ;

Батыр һис бер зарыҡмаҫ,
Яҡшылыҡтан ялыҡмаҫ,
Яуҙан да һис талыҡмаҫ.
Күккә менер баҫҡысһыҙ,
Ерҙе асыр асҡысһыҙ,
Яҡшынан эскәне – һыу булыр,
Ямандан эскәне – ыу булыр.

Доғаға тиң быңдай кәңәште отоп, ҡустыһының киҫәтеүенә ҡолаҡ һалһа, Шүлгәндең артабанғы ҡылыҡтары яҡшыға үҙгәрер, юлы юғарыға, Йыһан ҡапҡаһына килтерер ине уны. Ләкин яуыздарҙың ҡотҡоһона бирелгән («Ишәй ишен таба, Ҡушай ҡушын таба») Шүлгәндең нәфсеһе арта бара, хатта ул туғанына ошондай сара ҡылырға ла тәҡдим итеүгә барып етә:

Барыһына мат ҡурып,
Көслө батша булайыҡ,
Һин таяғың бир миңә, –
Ошо илде ҡырайым,
Самрау ҡоштоң ҡыҙыны
Үҙемә тартып алайым,
Аҡбуҙатын менәйем;
Мин бит туған ағайың,
Мин дә данлы булайым!

Ағаһының яңылышыуының хаттин ашҡанын күргәндә лә, Урал асыуланмай, тыныслыҡ һаҡлай, уның асыу көсөн ысын дошмандарға йүнәлтеп ҡарай:

Беҙ икәүләп барайыҡ,
Дейеү илен алайыҡ,
Унда тотҡон булғандың
Барына юл асайыҡ.
Ҡыҙы һөйһә, ҡыҙын ал,
Бүләк итһә, Буҙын ал.
Ҡыҙ алам, тип яу асып,
Үлемгә беҙ юл ҡуйып,
Бер ҙә юҡҡа ҡан ҡойоп,
Яуыз исем таҡмайыҡ;
Ҡан ҡойоусы даны алып,
Илгә яман ҡайтмайыҡ.

Әзрәкәне еңәйек,
Шишмәнән һыу алайыҡ,
Үлгәнгә йән бирәйек,
Кешеләрҙе донъяла
Үлмәҫ йәндәр ҡылайыҡ.

Ошондай һөйләшеүҙән һуң да Шүлгән, аҫтыртын рәүештә мораҙына етмәк булып, Һомайға үҙ ниәтен еткергәс, мәрхәмәтле һәм хуш күңелле Ҡояш ҡыҙы ла егеткә асыуланмай, уның тойғоларын кәмһетмәй, килеп тыуған көсөргәнешле хәлдән сығыуҙың гәҙел сиселешен тәҡдим итә:

Егет, һүҙең тыңланым,
Эс сереңде аңланым,
Шулайҙыр, тип уйланым;
Мин бер батша ҡыҙымын,
Ҡыҙҙарының ҙурымын.
Егет, уйың уй булһын,
Бер ҙур майҙан ҡорайым,
Батырлығың һынайым,
Шунда даның күрәйем.
Буҙ атым бар йыраҡта,
Эсәм биргән бүләккә,
Майҙаныма шул килер,
Батыр булһаң, ул белер.
Майҙанымда буҙ атты
Ҡулыңа алып меналһаң,
Эйәренең ҡашынан
Булат ҡылысын алалһаң,
Шундай батыр булалһаң, —
Буҙым бүләк ҡылайым;
Атама әйтеп туй яһап,
Үҙеңә йәр булайым.

Һомай буласаҡ йәре Уралға вәғәҙә иткән бүләктәрен Шүлгәнгә лә ҡабатлап әйтеүе, уның был ярыштың кем файҙаһына тамамланыуын асыҡ күҙаллауынан, әлбиттә. Ләкин былай итеп Шүлгәнде ышандырыуы – киҫәтеүҙәрҙе аң һәм һүҙ кимәлендә төшөнөүҙән ваз кискән ир ишараһына һуңғы тапҡыр һабаҡ биреүе. Был ярышты гәҙел баһалауҙы бар халыҡҡа күрһәтеү өсөн, ул Аҡбуҙатын саҡырта.

Һөйөп алғас Аҡбуҙын,
Һомай әйткән хаҡ һүҙен:
«Күктә торҙоң йондоҙҙай,
Батыр көтөп, зарығып.
Кеше ҡаны булмаған
Батырҙы алып ырғытып;
Мин һайлаған батырҙың
Береһен һанға алманың,
Үҙең һайлап бирмәнең.
Бына килде батырҙар,
Һине көтөп ятырҙар.
Батырлығын һайлапмы,
Матурлығын һайлапмы,
Береһен үҙең алаһың,
Үҙеңә юлдаш ҡылаһың, –
Һиңә иптәш ир булыр,
Миңә һөйгән йәр булыр».

Һомайҙың Аҡбуҙатынан ошондай ғәҙел хөкөм, айныҡ ҡарар ҡабул итеүҙә ярҙам һорап мөрәжәғәт итеүе, уның Йыһан кимәлендәге карма законына буйһоноуын аңлата: хәл-ваҡиғаларҙың сиселеше **өлгөрөп еткән ваҡыт хәле, урын хәле, шарт хәле кеүек** өс нәмәнең тап килгән осрағында ғына, билдәле бер мәлдә хәрәкәткә килә. Майҙан тотоу күренеше шул «сәғәттең һуғыуына» ишара. Был һәр кем, үҙе сәбәп ҡылған эш-ҡылыҡтары буйынса, карма законы бойомға ашырған лайыҡлы һөҙөмтәһен күрер мәл. Шулай итеп, Урал үҙе һайлаған уң юлды уңышлы тамамлауын бар ғәм алдында раҫлай. Етмеш батман ауырлыҡ ҙур бер ташты ерҙән ҡуптарып алып, өс бармағы осонда күтәреп кенә ҡалмай, уны, хурлыҡҡа ҡалған ағаһы өсөн беренсе тапҡыр (!) асыуланып, «алып атҡан һауаға, Әҙрәкәнең иленә». Был ваҡиға йогала һәр бармаҡ осона бер чакра тап килеү менән аңлатыла: урта бармаҡ – манипура, сығанаҡ бармаҡ – вишудда, һуҡ бармаҡ – аджня чакраһы. Чакралары таҙа булыу сәбәпле, Урал өс бармаҡ осонда көс-ҡеүәтен туплап, был һынауҙы үтә ала. Таштың күктә ут сығарыуына сәбәпсе булыуы уң каналдағы ут-энергияһынан азат булыуҙы аңлатһа, еңелгән Шүлгәнде ҡыҙғаныуҙан, Айһылыуҙы кире төшөртөүҙәре – һулдағы ида каналындағы ҡеүәтте бушатыу. «Аллаһы Тәғәләнең ғәфү итеүсене, кисереүсене һөйәрен» күктәгеләр яҡшы белә. Шулай итеп, Самрау илендә бер юлы ике туй

ҡылыуҙарынан беҙ Шүлгәндең дә нескә ҡеүәт (Кундалини) күтәрелешен Урал менән бергә аджня кимәлендә таныуҙарын, ҡабул итеүҙәрен тағы ла бер ҡат күрҙек. Улар барыһы ла динҡәрҙәштәренә сырай һытып ҡарамаҫ бөйөк йәндәр – бодхисаттвалар икәнлеген ысын мәғәнәһендә аңланылар.

Йога тәғлимәтенең һынауҙары быны менән генә тамамланмауын артабанғы хәл-ваҡиғаларҙан күҙәтербеҙ. Шүлгән менән Уралдың икеһенә лә бергә булып, бер һынау – урта юлды быуып торған, фани донъяға бәйләп тотҡан, ысҡынырға һис бирмәгән һәм ғәҙәткә ингән, күнегелгән өсөнсө тойғо – шул донъяға эҫенеүҙән, эйәләшеүҙән азат булырға кәрәк.

Шүлгән:

> Мин дә бер дан табайым,
> Әзрәҡәгә барайым, илен баҫып алайым, —

тигән ниәтенә Уралды көндәреп, серле таяҡты ҡулына төшөрөү менән, яңылыш юлын ҡыуа, яуыз эштәрен ҡыла башлай. Иң беренсе ул «таяғы менән ергә һуҡҡан да, барыһын һыуҙан баҫтырып, һәләкәткә ҡалдырған». Шул арала әүермәнлек сифатына эйә булыр Зәрҡум, ҙур бер балыҡҡа әйләнеп, Һомайҙы ҡарпығас, күктә ҡояш тотолоуы, Аҡбуҙаттың ҡыҙҙы ҡотҡарып, серҙе Урал белеүе – берләшкән ҡеүәттең ут һәм һыу кеүек ике төргә яңынан бүленеүен, Урал менән Шүлгәндең юлдары киренән саталаныуын, йәғни Махаяна һәм Хинаянала дауам итәсәген күрһәтә. Ә был күренеш үҙе донъяның ысын мәғәнәлә дуалләшеүен төҫмөрләтә: хәҙер инде бер-береһенә ҡаршы булыр көстәр тамам бүленде.

Зәрҡум менән Шүлгән, таяҡҡа хужа булып, Әзрәҡәгә килгәс, уныһы «ерҙе һыу менән ҡапларға, күкте ут менән ялмарға» бойорған. Был хәлгә түҙерлек әмәле ҡалмаған кешеләр, Уралдан ярҙам һорап, ялбарыуына батыр сыҙамай, дошмандарға ҡаршы яу аса. Был тамашалар барыһы ла Урал менән Шүлгәндең ҡатнашлығында барыуынан беҙ *ике ҡапма-ҡаршы көстәрҙең үҙ-ара көрәш аша, ләкин бергә (ысын донъяның бер сифаты)* сушумна каналындағы түбән чакраларҙың һәр береһенә хас **ер, һыу, ут, ел-һауа, бушлыҡ-арауыҡ** элементтарынан арыныуын күҙәтәбеҙ.

Шуларҙың иң өҫкөһө – дейеү батша Әзрәҡә илен Урал Аҡбуҙатында бер үҙе тар-мар иткән, Әзрәҡәнең үҙен булат ҡылысы менән тураҡлап, кәүҙәһенән Ямантау барлыҡҡа кил-

гән өйөм өйгән, халыҡ иркенләп йәшәһен өсөн, диңгеҙ һыуын сигендергән (һуңынан был сюжет иудаизм диненең юлбашсыһы Муса пәйғәмбәр миҫалында ҡабатлана).

Киләһе ваҡиғалар ошо ваҡыт арауығында унан яралған улдарының тыуып үҫеп, буй еткереп, уға ярҙамға килеп бергәләшеүҙәре менән бәйле. Ҡатил батшаның ейәне, Уралдың **беренсе улы Яйыҡ**, был илдең халҡының, Уралды тәңрегә тиңләп, хөрмәтләүен, әсәһенең дә уны һағынып көтөүе тураһында ентекләп бәйән итә. Бигерәк тә уның Урал батыр тарафынан үлтерелгән дүрт батырҙың ҡаны бығаса ергә һеңмәй, һыуынмай ятҡанының сәбәбен әсәһенән төпсөнөп белеп, уның ярҙамы менән ерҙәге барса хәл-ваҡиғаларҙың шаһиты – ҡарт ҡоҙғондо саҡыртып, шул ҡандарҙан дүрт батырҙы терелтеүе иғтибарға лайыҡлы күренеш. Был хәлдең булыуы мөғжизәүи тойолһа ла, йога тәғлимәте өйрәткәнсә, изге кеше алдында ҡылған яуыз эштәреңдең яңылыш икәнен аңлап, ысын үкенес кисереү, изгеләрҙән ғәфү һорап, тәүбәгә килеү, хаҡ юлға баҫыу – яңынан тыуыуға тиң һаналыр ғәмәл:

Оло бабаң Ҡатилдың
Ҡоллап алған дүрт батыр,
Бабаң ҡушҡас, яу астыҡ,
Яуыз ҡанға олғаштыҡ;
Ер ҙә эсмәй ҡаныбыҙ,
Көн киптермәй ҡаныбыҙ,
Ҡоҙғондарҙан һорайбыҙ,
Улар ҙа эсмәй ҡаныбыҙ,
Өҙгөләнә йәнебеҙ.
Урал атаңа бар әле,
Беҙҙең зарҙы әйт әле:
Сара тапһын, терелтһен,
Үҙенә юлдаш булырлыҡ
Яуға сабыр ир итһен.

Икенсе ул йылан илендә ҡалған Гөлостандан тыуған Нөгөштөң дә батырҙан батыр тыуыуын эш менән иҫбатлап өлгөргән:

...Дейеүен дә, Зәрҡумды ла,
Быуын-быуын тураным.
Хәлһеҙләнгән көйө тороп,
Әсәм килеп ҡул һалды,

Йәшләндереп күҙҙәрен
Былай тиеп һөйләнде:
«Атаң – Урал батырым,
Унан тыуған Нөгөшөм,
Батыр булып тыуғанһың,
Атаңа ҡулдаш булғанһың.
Мен толпарға һин, балам,
Атаңа юлдаш бул, балам!» –
Тиеп әсәм һөйҙө лә,
Толпар тотоп бирҙе лә
Миңә юлды өйрәтте,
Мине яуға оҙатты.

Был юлдарҙан, батыр иреңә тоғролоҡ һаҡлауыңдың билгеһе итеп, унан тыуҙырған балаңдан батыр ул тәрбиәләп, алмаш быуын ҡалдырыу – кешелек донъяһында әлмисаҡтан ҡатын-ҡыҙға тәғәйен иң изге бурыс, «доға ҡабатлаған һайын яңырыр» кеүек мәңгелек хаҡлыҡ икәненә тағы бер төшөнәһең. Был хәҡиҡәт йога серҙәрен һаҡлаған эпосыбыҙҙа асыҡтан-асыҡ дүрт улдың әсәләре миҫалында ярылып ята.

Бала ысын мөхәббәт, лайыҡлы һөйөү, ата-әсә генә түгел, халыҡ фатихаһы менән яралырға тейеш был донъяға. Шул сағында ғына, Аллаһы Тәғәләнең ризалығы менән, тыуасаҡ баланың тәненә юғары кимәлдәрҙән килгән йән керер. Уралдың өс улының да, тоғро ҡатындарҙан тыуып тәрбиә алыуҙары, атайҙы күрмәйенсә лә, үҙе кеүек, изгелекле булып балиғ булыуҙары – карма законының асылына тап килә: «Ағас тамырына ҡарап үҫә». Үҙҙәрен бағып үҫтергән әсәләрен яҡлаусы, ихтирам итеүсән булыуҙары менән сауаплы улдарҙың да, ҡылыҡтары менән тик аталарының батырлығын ҡабатлауҙары – уларҙың тыумыштан аңлы, рухлы йәндәр икәнен күрһәтә.

Шулай итеп, **Урал менән Һомайҙың мәңгелек мөхәббәте емеше Иҙелгә** лә оло һынау – әсәһен яҡлап, дейеү менән алышыу насип булған икән, ул беренсе еңеүе тураһында тәү күргәндә атаһына ғорурланып һөйләй:

Дейеү ятып йән бирҙе
Һарай эсе ҡан булды;
Әсәм билдән ҡан кисеп,
Һыуһаның, тип, һыу бирҙе,
Йөҙөнә шатлыҡ тулды.

«Батырҙан батыр тыуғанһың,
Атаңдай батыр булғанһың;
Кәүҙәң бала булһа ла,
Йөрәгең йәш булһа ла,
Инде үҫеп еткәнһең,
Атаң яңғыҙ тилмерә,
Ауыр көндәр кисерә,
Атаң яңғыҙ булмаһын,
Дошман яуы еңмәһен,
Бар, атаңа юлдаш бул», —
Тиеп әсәм димләгән,
Атаһыны эҙләгән
Иҙел тигән улың мин,
Һиңә төбәп килдем мин.

Бының менән халыҡсан һәм мәңгелек әҫәр – быуындарҙы быуынға, үткәнде киләсәккә бәйләүсе ябай төшөнсәләрҙе һаҡлаусы һәм бөгөнгө көн өсөн ысын мәғәнәһендә «халыҡ тәрбиәһе мәктәбе». Сөнки был әҫәрҙә кешелек донъяһы тарихында, ваҡыт даръяһының бер осоронда йәмғиәт, тормош тәжрибәһен туплау маҡсатынан «кире сифатлы һабаҡ алыу» һынауын үтер замандарҙа, түбән ҡолауҙың һуңғы кимәленә еткәндә лә, хәтергә алырлыҡ тура мәғәнәһендә аҡыл-кәңәштәр ҙә, уратып әйткән тыйыу-иҫкәртеүҙәр ҙә етерлек. Шуларҙың береһе – **Айһылыуҙың яуызлыҡ юлынан киткән Шүлгәндән яралған улы Һаҡмарҙы,** кейәүенә тигән бүләге – Һары толпарға атландырып, Иҙел менән оҙатҡанда:

«Урал атаң юлынан,
Балам, яуға сап, тине,
Атаңды эҙләп тап», – тине.

Әсәнең балаһын үҙ атаһынан ваз кистерер өгөт-нәсихәтенә ниндәй мәғәнә һалынған икән? Әлбиттә, был һүҙҙәр йога тәғлимәтендәгесә, Сансараның аҫтан дүртенсе кимәленә – кеше булып тыуыуға сәбәп ҡылыусы ата-әсә булыу – әле бик «бөйөк эш» һаналмаҫ, әммә ләкин һиңә был донъянан юғарыларына күтәрелергә, аң үҫешенә булышлыҡ итеүсе, «донъя ҡулсаһынан» ҡотҡарыр *рухи остаз – рухи ата* тураһында. Был осраҡта Күк ҡыҙҙары Һомай менән Айһылыу тарафынан Урал батырға шундай юғары йөкмәткеле бурыс, ышаныс күрһәтелде.

Ошо ваҡиғаны һүрәтләүҙең тағы ла бик әһәмиәтле йәшерен сере бар. Айһылыуҙың улын үҙенеке тип ҡабул итеүен Уралдың аң ҡеүәтенең һул ярымшарға күсеп тамамланыуы тип ҡабул итергә кәрәк.

Балалары үҫкәнен,
Батыр булып еткәнен
Үҙ күҙе менән күргәс,
Урал батыр ҡыуанған,
Ғәйрәте тағы артып,
Аҡбуҙатҡа атланған,
[Аталы-уллы биш батыр,
Бер-беренә иш батыр,
Йәнә баяғы дүрт батыр]
Дейеүгә яу башлаған,
Ҡыйратып ташлаған,
Ай һуғышҡан, ти, былар,
Йыл һуғышҡан, ти, былар.
Ҡаты яуҙарҙың берендә
Ҡәһҡәһәне ҡолатҡан –
Диңгеҙ ярып, дулатҡан,
Асы тауыш сығартҡан,
Күк күкрәтеп, олотҡан,
Кәүҙәһен өйөп, диңгеҙҙе
Тағы бер тау яһатҡан.
Тылсымлы Шүлгән диңгеҙе
Ҡап урталай быуылған,
Һыуҙа йөҙгән дейеүҙәр
Ике яҡҡа бүленгән.
Шүлгән йүнгә килмәгән.

Был юлдарҙа яуыз заттан булған Ҡәһҡәһәнең иң түбән кимәл муладһараға ҡолауын кәүҙәһенең ер элементы тауға әүерелеүенән, ә Шүлгәндең свадистанала һыу элементы диңгеҙгә хужа булыуынан беләбеҙ. Хәҙер инде хәл-ваҡиғалар бер урында төйнәлде, һәм төйөндөң сиселеше булырға тейештер? Изгелек менән яуызлыҡ көрәшенең тамамланыуға барышында:

...Урал тотҡан Шүлгәнде,
Аҡбуҙаты, улдары
Ҡырған дейеү, бүтәнде.

Көсө менән Шүлгән дә
Уралға кәр ҡылмаған,
Алышһа ла, түҙәлмай,
Шунда ергә ҡолаған.
Һаҡмар килеп Шүлгәнгә,
Ҡылыс менән уҡталған;
Урал тыйғас, Һаҡмар ҙа
Сапмайынса туҡталған.
Урал, халыҡты йыйған,
Шүлгәнде уртаға ҡуйған.

Был күренештән юғары кимәлдәге боронғо тәғлимәткә хас «үс алыу теләгенән хөкөм ҡылыу» йолаһының ҡабул ителеүе генә түгел, тыйылған булыуын төҫмөрләйбеҙ. Ысынлап та, бындай йола карма законына ҡаршы килә, сөнки «сәбәп-һөҙөмтә» сылбырында насар ниәттән ҡылған ҡылыҡ кире һөҙөмтәгә килтерә, киләһе яуызлыҡтарға сәбәп булдыра – әммә ләкин сылбырҙың аҙағы булмаҫ. Аҡыл эйәһе Урал уландарына ошондай һабаҡ биреү ниәтенән, Шүлгәнде халыҡ алдына ҡуйып, ғәйептәрен һанап, тәүбәһенә килтерергә теләй; сөнки, иң кешелекле боронғо тәғлимәт өйрәткәнсә, аҡылға ултырыу өсөн бер ҡасан да һуң түгел, тик үҙ ғәйебеңде үҙеңдеке тип таны ғына!

«Ғәйеплемен», – тимәһәң,
Башың сарҙай[65] сорғотоп,
Он-талҡандай итермен;
Күбәләктәй йәнеңде
Төңгө томан ҡылырмын;
Ҡаныңа буяп кәүҙәңде,
Әзрәкәнән бар булған
Ямантау тип аталған
Тауға илтеп күмермен.
Башына йән килмәҫтәй,
Килеп хәлең белмәҫтәй,
Яҡшылап телгә алмаҫтай,
Бер үлән-зат үҫмәҫтәй,
Бите көнгә ярылған,
Ҡасҡан-боҫҡан йыланға,

[65] Сансара — «ваҡыт тәгәрмәсе» — ысын сар тураһында һүҙ барғанын онотмайыҡ..

Яуыз уйлы бөркөткә,
Ҡан көҫәгән ҡоҙғонға
Ҡуныл, йәнлек аңдырға
Яуыз тағы булырҙай
Ҡара ҡая итермен», –
Тигән һүҙен Уралдың
Шүлгән тыңлап торған да
Урал ҡуймаҫ, үлтерер,
Тип йөрәге ҡурыҡҡан,
Һүҙ бирергә тотонған...

Алдағы ваҡиғаларҙан белеүебеҙсә, яуызлығы йөрәгендә булған Шүлгәндең хаталары өсөн үкенес белдереп аҡланыуы буш һүҙ, төҙәлергә биргән вәғәҙәһе тағы ла бер ҡыуыҡ анты булып сыҡты. Сөнки был сифат – ул ҡолаған «хайуандар донъяһында» хөкөм һөргән «көслө көсһөҙҙө ейер» йолаһына ярашлы йән эйәләренә хас ҡурҡаҡлыҡ. Ә мәрхәмәтле Уралдың өсөнсө тапҡыр уны һынамаҡҡа ебәреүе – туғанлыҡ ептәренең әле өҙөлмәүенән, йәғни урта юл – сушумналағы төрлө рәүештәге бәйлелек, эҫенгәнлек тойғоһонан арынып бөтмәүен күрһәтә:

Атамдың хаҡы өсөн,
Әсәмдең хәтере өсөн,
Тағы ла бер һынайым,
Теләгеңде бирәйем.

Йогала танылған «өс ағыуҙың» иң ҡатыһы булыр был хистән ҡотолоу.

Урал инде кешелек өсөн яҡшылыҡ ҡылыуҙа һуңғы бурысын башҡарырға әҙер:

Йәншишмәнең бар һыуын
Һоҫоп алып киләйек,
Бар кешегә бирәйек.
Күҙгә күренмәҫ Үлемдән,
Килер ауырыу-сырхауҙан,
Ауыртыныу-һыҙлауҙан,
Кешеләрҙе ҡотҡарып,
Барыһыны шат ҡылып,
Мәңге үлмәҫ ҡылайыҡ.

Әммә Уралдың үҙенең аңы әле Йыһан ҡапҡаһы тәңгәленә күтәрелеп етмәгәнлектән, уның был кимәлдә изге тойолор маҡсатын тормошҡа ашырыу яңылыш аҙым булыр ине. Ер йөҙөндә быңдай байманлыҡта көн күреү Илаһ тыуҙырған, бар иткән тәүторош хәлгә кире ынтылыуҙан, үҫеш юлынан ваз кистерер ине бәндәне. Сөнки әле бар яҡтан камил булыр шәхес булып өлгөрмәгән әҙәм балаһы хата-маҙарҙан, етешһеҙлектәрҙән азат түгел. Ләкин Күктәр тарафынан һәр аҙымы ҡурсалауҙа, күҙ уңында булғанлыҡтан, әлбиттә, улар тарафынан Уралды хаҡ юлға төшөрөү сараһы күрелә. Бының өсөн күктең үҙенән туранан-тура күрһәтмә, тоҫҡау булыр тип өмөтләнеү дөрөҫкә тап килмәүен ябай әҙәм төшөнөп бөтмәһә лә, ошо урында иғтибарға лайыҡ ниндәйҙер бер ваҡиғаны, осрашыуҙы, күренешме – аңлыға билдә булыр. Был турала йога тәғлимәте нигеҙендә барлыҡҡа килгән Будда диненең «Девадатта-сутра»һында күрәҙәлеккә ишаралаусы хәл-ваҡиғаларҙың иң иғтибарға лайыҡлыларынан тип, Күктәгеләр тарафынан ебәрелгән *биш илсе-хәбәрсенең пәйҙә* булыуы һанала. Уларға ҡарата вайымһыҙлыҡ күрһәтеү, йә иғтибар бүлмәү – иң ҙур ахмаҡлыҡ:

– был донъяға тыуыу ғазаптарын кисереүҙән илаусы сабый;

– кеше ярҙамына мохтаж килеш түшәктә ятҡан ауырыу, сырхау әҙәм;

– ҡалтыранған ҡулдары менән таяҡҡа таянып, бөкөрәйгән арҡаһын яҙа алмай, бәлтерәгән аяҡтарына саҡ-саҡ күтәрелгән, тештәре һәм сәстәре ҡойолоп алйыраған ҡарт-ҡортҡа;

– хаҡ юлдан тайпылып йөрөү сәбәпле, һәр төрлө язаға тарыған тотҡон;

– фани донъяның мәңгелек түгеллеген үҙ миҫалында иҫбатлап, алдыбыҙҙа ятҡан өнһөҙ үлек.

Тәнебеҙ, телебеҙ, уйыбыҙ кимәлендә ҡылған ҡылыҡтарыбыҙ өсөн һорау-яуаптар тотоп, ҡәбер ғазаптары кисерребеҙҙе онотоп йәшәүҙең мәғәнәһеҙ булыуына ишаралап, даими иҫкәртеп тороусылар – эргә-тирәбеҙҙәге был биш «ҡунаҡ».

Йога тәғлимәтенең үҙәген меңәр йыл сер итеп һаҡлаусы эпоста ла был фекер килеп сыҡмай булмаҫтыр бит? Әлбиттә, Урал батырҙың аң кимәлен артабан үҫеш-күтәрелеш йүнәлешенә бороусы быңдай персонаж да мәле еткәс пәйҙә буласаҡ:

Үлем саҡырып-ялбарып,
Бар һөйәге ҡаҡшаған,
Тәнендә ит ҡалмаған,

Ата-әсә, берен дә
Кем булғанын белмәгән
Бер ҡарт килеп еткән, ти...

Бик күп быуындар алмашыныуына, һәр быуындың үҙенә хас заман үҙгәрештәренә үҙе шаһит булған аҡһаҡал бик борон бер дәүерҙә «үлемгә йән бирмәҫкә, туйҙан тороп ҡалмаҫҡа, тип, Йәншишмәнән һыу эскән», имеш. Бына шул күпте күргән, кешелек донъяһының сал тарихын үҙе аша үткәргән бәндәнең батырға әйтер һүҙҙәре ысын тормош тәжрибәһенең төйнәлеше була һәм кешелектең барына ла мөрәжәғәтнамә булып ҡала:

Илгә йола булырҙай,
Һынап белгән заңым бар,
Донъяла мәңге ҡалам, тип,
Үлемгә буй бирмәҫкә,
Уны бер заң итмәҫкә
Йәншишмәнән эсмәгеҙ,
Миндәй хурлыҡ күрмәгеҙ.
Донъя ул бер баҕ икән,
Йән эйәһе шул баҕта
Донъя быуынын һанаған,
Ҡайһы быуын аҡлаған,
Ҡайһы уны таплаған,
Төрлө төҫкә биҙәгән,
Бары – үҫемлек, гөл икән;
Беҙ Үлем тип һанаған,
Яуыз ул тип ҡараған –
Баҕтың туҙған үҫмерен
Йәки көнө тулғанын
Сүпләп, баҕты бушатҡан,
Унан донъя ташлатҡан
Бөтмәй торған йола икән.
Мәңге ҡалам, тимәгеҙ,
Йәншишмәнән эсмәгеҙ.
Донъяла мәңге ҡалыр эш –
Донъяны матур төҙөгән,
Баҕты мәңге биҙәгән –
Ул да булһа **яҡшылыҡ.**
Күккә лә осор – **яҡшылыҡ,**

Һыуға ла батмаç – **яҡшылыҡ,**
Утҡа ла янмаç – **яҡшылыҡ,**
Телдән төшмәç – **яҡшылыҡ.**
Бары эшкә баш булыр...

Был васыятнамәлә боронғо динде иң төп һәм үҙәк таяуҙарынан һаналған фекерҙәре һалынған: «был донъяның бөтә нәмәһе, хәл-ваҡиғалары – тотороҡһоҙ, алмашыныусан». Шуға күрә беҙ үҙебеҙ ҙә – был донъяның ҡунағы ғына. Уның һәр көнөн, бер ғүмергә торош итеп, файҙалы эштәр менән үткәреү беҙҙең бында көн итеүебеҙҙе аҡлай: был һүҙҙәр яҡшы ниәт, яҡшы һүҙ, яҡшы ҡылыҡ менән кеше ғүмеренең һәр осоронда бер күтәрелеш кисереп, Йыһан ҡапҡаһына яҡынайыу өсөн кәңәш. Аҡһаҡал шул эштәрҙең нигеҙендә ятыусы «яҡшылыҡ ҡылыу» идеяһы йогала үçеш юлының беренсе баçҡыстары булған яма-нияма – кереш, инеш кимәлдәрен иçкә төшөрөп, ошо ғәмәл ярҙамында уның юғары булған баçҡыстарында ла, тик шуларға таяныл, эш итергә кәрәклеген ҡабатлай. Ҡобайырҙың буйынан-буйына ҡабатланып килгән төшөнсәләр – тәүэлементтар ни өсөн бында ла иçкә алына? Халыҡ ижадында хатта уларҙы *Ер Тәңре, Һыу Тәңре, Ут Тәңре, Күк Тәңре* тип ололау бар. **Ер** (был урында – баҒ) – мулаДһара, **һыу** – свадистана, ут – манипура, **күк-һауа** – анахата булһа, вишудда кимәле – **тел** төшөнсәһе аша атала. Бөтә кимәлдәге чакраларҙы ла таҙа тотоу юлы тик бер генә ғәмәл, йәғни яҡшылыҡ ҡылыу юлы ярҙамында атҡарылыуына әҙәм балаһы тағы бер ҡат иçкәртелә. Онотмайыҡ, йогала бер үк төшөнсәләрҙе күп тапҡыр ҡабатлау – төплө үҙләштереү, йәғни аң баҙына индереүҙең отошло һәм аҡланған алымы.

Шулай итеп, аҡыллының кәңәше менән Урал батыр,

Бөтә серҙе аңлағас,
Бар халыҡты эйәртеп,
Йәншишмәгә барған, ти,
Һыуын уртлап алған, ти;
Үҙе сапҡан юлына,
Дейеүҙәр өйгән тауына
Һыуҙы шунда бөркҡән, ти.

Ошо урында һорау тыуа: ни өсөн халыҡ менән бергә булһа ла, һыуҙы тик бер Урал ғына уртлай? Кешелек донъяһына үçеш юлын уҙ үрнәгендә күрһәтергә бурыслы булып килгән

Күк илсеһе Урал халыҡ араһында ҡәҙимге кеше сүрәтендә йөрөһә лә, уның булмышы башҡа ғәмдән, сөнки ул бөйөк заттан. Йоганың һуңғы баҫҡысында сахасраранан ошо тереһыу тамсылары тамғанын тойоу – ул тик эске донъяңда, күңел киңлегендә кисерелер күренеш булғанға, шулай һүрәтләнә был тамаша. Ләкин пәйғәмбәрҙең бөйөк бурысы – шул кешелек донъяһындағы һәр әҙәмдең ошондай үҫеш юлы аша үҙенең тәүбулмышына яҙған камиллыҡ сифаттарына өлгәшеү, саф һәм тулы аң эйәһенә әүерелеүгә хаҡы һәм мөмкинселеге барлығына ышандырыу, шуның юлын өйрәтеү. Батырыбыҙ хаҡ яҙмышы ҡушҡан ошо бурысын аҙағына тиклем нисек алып барып еткерер?

Йәншишмәнең тере һыуын бөрккәндән һуң, мәңге йәшел булып ҡалған был баҡта «байман табып, тын алып, рәхәтләнеп» көн күргән халыҡҡа өсөнсө тапҡыр антын боҙған Шүлгәндең, ҡалдыҡ-боҫтоҡ дейеү-йыландарҙы туплап, яңынан зыян күрһәтә башлауын йога күҙлегенән нисек аңларға? «Бар һәм Бер» булған саф, камил, бөтөн тәүбулмыш – Нирвананың ҡапма-ҡаршыһы. Ул донъяның дуаль булыуынан: көндөң төнө, яҡтының ҡараңғыһы, татлының әсеһе, рәхәттең ҡыйыны, мөхәббәттең нәфрәте булғандай, яҡшылыҡ менән яманлыҡҡа ла мәңге бергә булыу насип. Йыһан ҡанунына бер кем дә ҡаршы тора алмаҫ был «ике ярты – бер бөтөн» фанилыҡта. Унан ҡотолоу, йәғни Сансараның алты ҡатынан ашып, етенсеһендә – сахасрара чакраһындағы Йыһан ҡапҡаһынан аңын сығарыуға Урал батыр өлгәшерме? Йәндең «рух арбаһы» рәүешен генә үтеүсе есмани тәнде ошо юғары идея өсөн ҡорбан итеп, Үлем менән күҙгә-күҙ осрашыуға әҙер булыу – рух азатлығына килеүҙең берҙән-бер юлы, кешелек тарихында башҡа донъяуи диндәрҙә лә Аллаһы Тәғәләнең ерҙәге илселәренең барыһына ла хас сифат булып ҡабатланасаҡ әле был юғары дәрәжәләге батырлыҡ. Был ҡорбан камил булмаған кешелек донъяһының хата-кәмселектәрҙән йыйылған насар кармаһы өсөн яуап тотоу, таҙартыу һәм ярлыҡау һорау өсөн булыр. Сөнки Урал пәйғәмбәр был тормошонда ағаһы Шүлгәнгә ҡат-ҡат ышаныс күрһәтеп, уның йөҙөндә кеше-ара мөнәсәбәттәргә, ниндәй кимәлде генә алма (туғанлыҡ, дуҫлыҡ, ғаилә һ. б.), юғарыларға хас ысын тоғролоҡ юҡлығын иҫбатланы. Ялғанлыҡ, хыянатсылыҡ, тәүбәне тиҙ онотоу кеүек кәмселектәр кешелекте

ғүмер баҡый әҙәрләрен тоçмаллаған Урал һуңғы батырлыҡ ҡылырға мәжбүр:

«Кешегә тынлыҡ бирмәгән
Ҡалған-боçҡан дейеүҙән,
Яу булыусы Шүлгәндән
Бар халыҡты ҡотолтам!» –
Тиеп, күлде уртлаған.
Күл һыуы ҡайнай башлаған,
Дейеүҙәр ҡурҡып шаулаған,
Шүлгән барын туплаған.
Урал күлде һура, ти, –
Дейеүҙәр эскә тула, ти,
Берәм-берәм Уралдың
Йөрәк-бауырын телә, ти.
Дейеү бик күп тулған һуң,
Йөрәгене телгән һуң,
Урал күлде бөрккән, ти,
Ҡырға сыҡҡан дейеүҙе
Батырҙары тотҡан, ти.
Аяғына баçалмай,
Ҡабат яуын асалмай;
Урал шунда йығылған,
Бөтә кеше йыйылған,
«Ил бәхете ине», – тип,
Бары һыҡтап илаған.

Был батырлыҡтың анахата кимәлендә барғанын һәм фәҡәт кешелек өсөн тәғәйен ҡорбан икәнен өçтәге һүҙбәйләнештәрҙән күрҙек. Артабан уның аңы, вишудда кимәленә күтәрелеп, бар ҡәүемдәр һәм замандар күңеленә хуш килерлек **хаҡ һүҙҙәр — өгөт-нәсихәттәрен** әйтер көс бирәсәк:

Улдарым, тыңлаң, һеҙгә әйтәм,
Тыңла, илем, һиңә әйтәм:
Ир-арыçлан булһаң да,
Батыр беләкле тыуһаң да,
Илдә йөрөп, ил күрмәй,
Тубығыңдан ҡан кисмәй,
Йөрәгең батыр булалмаç.

Яуызға юлдаш булмағыҙ,
Кәңәшһеҙ эш ҡылмағыҙ.
Уландарым, һеҙгә әйтәм:
Мин әрсегән ерҙәрҙә
Кешегә байман табығыҙ;
Яуҙа булһа, баш булып,
Кешегә ил ҡороғоҙ;
Данлы батыр булығыҙ.
Олоно оло итегеҙ –
Кәңәш алып йөрөгөҙ;
Кесене кесе итегеҙ –
Кәңәш биреп йөрөгөҙ.
Күҙенә сүп төшөрҙәй,
Күҙһеҙ булып ҡалырҙай
Еҫерҙәрҙең алдында
Күҙенә керпек булығыҙ.
Аҡбуҙатым, булатым
Илдә тороп ҡалыр ул, –
Өҫтөнә менеп сабырҙай,
Яуҙа ҡылыс һелтәрҙәй
Батырға менер ат булыр.
Әсәгеҙгә әйтегеҙ:
Минән риза булһындар,
«Ирем, хуш бул!» – тиһендәр.
Барығыҙға шуны әйтәм:
Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,
Кеше булһын затығыҙ;
Яманға юл ҡуймағыҙ,
Яҡшынан баш тартмағыҙ!

Уралдың Күктәгеләр тарафынан уның батырлығын (аң кимәленең юғарылығын, бөйөклөгөн) таныуының шаһиты һәм тиң күреүҙәренең билдәһе булыр бүләктәре – Аҡбуҙатын һәм булат ҡылысын васыят һүҙҙәренә ҡушып, ерҙәгеләргә аманат итеп ҡалдырыуында ниндәй мәғәнә һуң?

«Рух» символы булған Аҡбуҙаты һәм әҙәмдең аңын түбән һөйрәүсе «нәфсе-теләктәргә ҡаршы тороу» символы тип һаналған булат ҡылысы – ошо ике төшөнсәнең кешелеккә юлдаш булыр мәңгелек рухи ҡиммәттәр икәнлеген иҫкәртеүе булыр уның. Ә *Һыуғояр* был ҡиммәттәрҙең баһаһы тағы ла артасаҡ заманды ла күҙаллаған. Әҙәмдәргә төбәп әйткән һуңғы мөрәжә-

ғәтендә уның үҙенең дә кеше кимәленә хас хата-кәмселектәрҙән азат булмағанлығын күрһәткән һүҙҙәр бар:

Дейеүҙәргә яу асып,
Диңгеҙҙе дейеүҙән әрсеп,
Ерҙә торлаҡ табыштым,
Кешеләрҙе яуыздан
Ҡотҡарырға тырыштым.
Менһәм, буҙ ат бар ине,
Ҡулда булат бар ине;
Яу тупларлыҡ еремдә
Талай илем бар ине;
Ҡулдаш булыр илемдә
Батыр ирҙәр бар ине.
Шулар ҡәҙерен белмәнем,
Батырлыҡҡа маһайып,
Кәңәш ҡороп торманым,
Яңғыҙ башым уйланым,
Уңмаҫ юлды һайланым.

Был һүҙҙәрҙә ул эске донъяңдағы сикләнгәнлек, үҙ-үҙеңде генә таныу кеүек сифаттарҙың һауаланыуға, маһайыуға килтереүен үҙ тәжрибәһендә таныуын белгертеп, үкенес кисерә. Был юлды уңмаҫ юл тип атап, тәүбәһен бар ғәмгә еткерә. Ошоноң менән ул, бәндәләргә хас хата-кәмселегенән арынып, Аллаһы Тәғәләнең ризалығына өлгәшеренә ышандыра. Сөнки башҡаларҙы, өгөт-нәсихәт менән генә тәрбиәләп, үҙгәртеп булмай; «әйләнә-тирәңдә бөтәһе лә һинең аңыңдың сағылышы», ти был турала йога тәғлимәте. Урал батыр был һүҙҙәр аша беҙгә иң алда үҙ аңыңды үҙгәртеп, кәмселектәреңдән арынып, камиллыҡҡа килгәс кенә, башҡаларҙы үҙгәртеп була, тигән һабаҡ бирҙе. «Ул донъяла бар нәмә үҙгәреүсән, алмашыныусан» тигән таяуға таянып, шул иҫәптән, үҙ аңыңды башҡаларҙыҡы менән бер бөтөн итеп тойоу, шул хәлде ысын мәғәнәһендә, мөмкин тиклем күберәк һанда бергәләп кисереүгә өлгәшкәндә генә, кешелек ойошоп, бер үҫеш баҫҡысына күтәрелерен төшөндөрә. Бына ошо эске донъябыҙ – «мин-минлек, минүҙем» (микрокосм) һәм тышҡы донъя – «башҡалар менән бер бөтөнлөк» хәленең (макрокосм) ҡушылыуын иң юғары маҡсат итеп ҡуйған йога тәғлимәтенең һабаҡтары эпоста әле бөтмәгән. Даими үҙгәреүсәнлек хәлендәге алдаҡ ҡына булыр был

донъянан, Сансараның ҡатлы-ҡатлы ҡоллоғонан азатлыҡҡа илтеүсе юлдың ҡапҡаһы аша сығарыусы үлем батырыбыҙҙың йәнен мәңгелеккә, тәүбулмыш донъяһы бөйөк нур иле Нирванаға атҡанын «күктән йондоҙ атылып, Һомайға оран биреүенән» таныйбыҙ. Уй һәм яҡтылыҡ тиҙлегендә хәрәкәт итеүсе бөйөк Күк ҡыҙы Һомайҙың һөйгәне менән бәхилләшкәндә әйткән сабыр һәм ышаныслы һүҙҙәренә ҡолаҡ һалмау мөмкинме?

Илгә затлы булырҙай,
Кешегә татлы булырҙай,
Йәндәй һанап йөрөрҙәй
Тағы ла затлы булырһың,
Юғалмаҫ алтын булырҙай,
Кешегә данлы һаналып,
Донъяға батыр булырһың.

Был Уралдың исеме донъя кимәлендә танылыр, дан-шөһрәт яулар көн тыуыуына ғына түгел, ә дөйөм кешелеккә һәләкәт янағанда ҡотҡарыр тәғлимәттең серҙәре асылырынамы, әллә батырҙың ҡайтанан тыуыуына ишарамы? Ҡалай ғына булмаһын, Ҡояш ҡыҙы Һомайҙың тоғролоҡ символы аҡҡошҡа әүерелеп, еребеҙҙе йыл һайын ҡышҡы тәрән йоҡо хәленән сығарыр ҡот килтереүсе изге ҡош икәнлеген онотмауыбыҙ быға шаһит.

Әйткәндәй, йогала һәм уның нигеҙендә барлыҡҡа килгән Будда динен тотҡан көнсығыш илдәрҙә йәндең бер кәүҙәнән икенсеһенә күсеп яңынан тыуыуы **реинкарнация** тип атала. Эпоста артабан Һомай артынан эркелеп, Уралда үрсеп киткән ҡош-ҡорт һәм башҡа йәнлектәр тураһындағы мәғлүмәт биреләү, шулар араһында Ҡатил үгеҙенең дә кешегә буй биреүе, Аҡбуҙаттан йылҡы тоҡомо түлләп китеүе, «шул йәнлектәр, ҡош-ҡорттар килеү көнө кешегә ай, йыл һанап белеүгә исем булып китеүе» – барыһы ла һуңынан Будда динен тотоусылар даирәһендә ҡулланыласаҡ өлгө, көнсығыш фәлсәфәһендә киң тараласаҡ миҫалдар. Айһылыуҙың хәл-ваҡиғалар үҫешендә әсәһе Ай янына күккә оҙатылып, күҙ уңынан ысҡыныуында ла хикмәт бар. Сөнки Будда динендәге «Сансара – донъя тәгәрмәсе» тураһындағы ғилем буйынса, Ай фани донъя ғазаптарын туҡтата алыу, юҡҡа сығарыу ихтималлығын белдереүсе символды аңлата.

Ошо мәлдән кешелек донъяһының, ысын хәҡиҡәттән алыҫлашып, донъяуи белемдәргә генә мауығып, матдилашып китер һәм кали юга тип аталыр ҡараңғылыҡ дәүеренә инеүен тояһың – был осор мәңгелекте ваҡыт төшөнсәһенә бүлгелеүҙән танылыр. Сөнки үткәнен онотор һәм киләсәген күҙалламаҫ бәндә, бөгөнгөһө менән генә йәшәүҙе ысын һанап, ошо яңылышыуҙан аҙашып китеп, тормош мәғәнәһен юғалтыр. Әммә йога өйрәткәнсә, бер нәмә лә сәбәпһеҙ булмай: был кире тәжрибә әҙәмгә яман менән яҡшыны танытыр өсөн кәрәк.

Ошо урында **«Саҡ менән Суҡ»** бәйетендәге мифологик ике ҡошто иҫкә төшөрәйек. Үҙ-ара тынышмаған өсөн әсә ҡарғышын алған ике меҫкен бала, ҡошҡа әүерелеп, осоп китәләр, башҡаса табыша һәм күрешә алмай, айырым йәшәп, бер-береһен һағынып, ошо сәбәпле ғүмер буйына зарығалар. (Йогалағы карма ҡанунына ярашлы реинкарнация күренеше) Бөтөндөң ике яртыға бүленеүенә лә миҫал был. Исемдәр ҙә мәғәнәле бит: **саҡ** – 1. Ғүмерҙең бер өҙөгөнә тура килгән ваҡыт (мәҫәлән, *бала саҡ, йәш саҡ, ҡарт саҡ*); 2. Рухи теүәллекте, бөтөнлөктө белдергәндә ҡулланыла (мәҫәлән, *күңелдең саҡ мәле;* йә булмаһа, *саҡматаштың* ҡаты, бүленмәҫ сифатҡа эйә булыуын иҫләйек); **суҡ** – 1. Күп, өйкөм, бергә булыуҙы атай *(муйыл суғы, ҡул суғы, ептән суҡ яһау* һ. б.). 2. Урын-арауыҡтың билдәле бер өлөшө *(арғы суҡ, урта суҡ* һ. б.) Иғтибарлыраҡ булһаң, ошо ике һүҙ менән бер үк ваҡытта *бөтөнлөктө* лә, *бөтөндөң өлөшөн* дә атап була, имеш. Был үҙе үк тормоштоң төп һәм берҙән-бер ҡанунына яраҡлы күренеш – донъяла бер ни ҙә мәңгелек түгел! Ҡасандыр тарих төпкөлөндә бик көслө дәүләттә йәшәгән **саҡ, ҡыпсаҡ** ырыуҙарының атамаларынан да ошо мәғәнә төҫмөрләнә. Уларҙың, бөтөндән бүленеп, тарҡалып, юҡҡа сығыуын да «Саҡ менән Суҡ» бәйете миҫалында аңлап була. Мәҡәл теле менән әйткәндә, *айырылғанды айыу ашар, бүленгәнде бүре быуыр.*

Ә матди донъяла икегә бүленгән **бөтөндөң** һәр яртыһының ярышлап ҡына түгел, сиратлап, берен-бере алмаштырып торған хәлендә, кешегә уларҙы айырып таныуҙары, ай-һай, ҡатмарлы булыр. Халҡының киләсәген хәстәрләгән Урал батыр был осраҡты ла күҙ уңында тотҡан – уның рухын дауам итер аңлылар, миһырбанлылар изге эштәрен дә дауам итер:

Ҡош-ҡорт, йәнлек күбәйгәс,
Шишмә һыуы етмәгәс,

Күлдән ҡурҡып эсмәгәс,
Иҙел батыр, Яйыҡҡа,
Халыҡ йыйылып килгән, ти,
«Нишләйбеҙ?» – тип, барыһы
Аптырашып әйткән, ти.

Иҙел был хәлдән ҡотолоу юлын, яңынан Шүлгәнгә яу асыуҙа күреп, шуға әҙер булғанда, ер ҡотон һаҡлаусы Һомай килеп етеп, улын был ниәтенән туҡтатыуы, аҡыл менән башҡа сара табырға кәңәш итеүенән дә өҫтәге фекерҙең үҫтерелеүен күрәбеҙ: яҡшылыҡ менән яманлыҡ артабан да бергә ҡаласаҡ. Шуға күрә әҙәм затына, был хәҡиҡәтте иҫтә тотоп, аңлы рәүештә яҡшылыҡты үҫтерер эш-ғәмәлдәр ҡылыу юлын эҙләргә кәрәк:

«Атайымдың ҡулында
Булат дейеү тураны;
Уралдан тыуған ул булып,
Халыҡты һыуһыҙ ҡаңғыртып,
Батыр исеме күтәреп,
Һыу табалмай тилмереп
Тороу ирлек буламы?» –
Тигән дә Иҙел ирәйеп,
Тауҙы яра сапҡан, ти,
Көмөштәй бер аҡ йылға
Шылтырап шундуҡ аҡҡан, ти;
Тауҙы буйлап киткән, ти,
Әзрәҡәнән бар булған
Ямантауға еткән, ти.
Иҙел килеп уҡталып,
Билен өҙә сапҡан, ти, –
Йылға ары аҡҡан, ти;
Иҙел баҫып торған тау –
Ирәмәл[66] булып ҡалған, ти.
Йылға быуған ҙур тауы,
Ҡырҡа сапҡан урыны –
Ҡырыҡты[67] булып ҡалған, ти.

---

[66] Грек телендә: **«ирема»** – тихо, спокойно; **«иремия»** – тишина, спокойствие.

[67] Санскрит: **krakaca** – пила; башҡортса – бысҡы, «ҡырҡҡыс» мәғәнәһендә. Ул тарафтарға бындай һүҙҙәрҙе Уралдан киткән халыҡтар алып бармағанмы ни?

Иҙел батыр тапҡан һыу
Иҙел булып ҡалған, ти.

Күктәгеләрҙең фатихаһынан сығып эш итеүсән Урал батыр ошо изге урындарҙы Йәнтөйәк итеп беҙгә ҡалдырған, шул турала бәйән итер бөйөк йөкмәткеле тәғлимәтен аманат итеп беҙгә төбәгән икән, уның уландары Иҙел, Яйыҡ, Нөгөш, Һаҡмарҙар тағы бер ҡат халыҡ булып ойошоп, ерегеп китергә сәбәп ҡылған икән, беҙ бының һөҙөмтәһен дә шул кимәлдә раҫларға тейеш.

2.6. «Урал батыр» эпосы сюжеттары Ҡөрьән аяттарында

Йәмғиәттең бөтә ҡатламдарына үтеп ингән рухи сирҙең иң аҙған осоронда йәшәп маташабыҙ бөгөн. Уның һөҙөмтәләре менән көрәшеүҙән мәғәнә юҡлығын да беләбеҙ. Шуға күрә, тәүҙә ошо сиргә килтереүсе сәбәпте асыҡлап, ил, йәмғиәт кимәлендә шуны юҡ итеү сараларын күреү кәрәк! Сиргә дусар булған кешенең йәнен дауалар өсөн уның рухын күтәрергә булышлыҡ итер әмәле бар беҙҙең халыҡтың. Тәү сиратта, бындай көнгә ҡалып, юҡҡа сығыу алдында тороробоҙҙо алдан күҙаллап, ҡотолоу юлдарын теҙеп кенә һалған рухи мираҫыбыҙ, сикһеҙ байлығыбыҙ «Урал батыр» эпосын быуындан быуынға түкмәй-сәсмәй тапшыра килгән аңлы шәхестәребеҙгә рәхмәтле булайыҡ. Ата-бабаларыбыҙ рухи сирҙән арыныуҙың дауаһын шул сер һандығында йәшереп һаҡлаған беҙҙең өсөн! Тик ул һандыҡты асыр асҡысын табып, үҙебеҙгә кәрәкте унан ала белергә генә кәрәк. Икенсенән, эпосыбыҙҙың кешелек донъяһы өсөн уртаҡ рухи байлыҡ икәнлеген үҙебеҙ генә таныу аҙ, уны башҡаларға танытыу ҙа мотлаҡ. Иң боронғоларҙан һаналған даосизм, Будда диненең нигеҙ ташын тәшкил иткән йога тәғлимәте тураһында мәғлүмәт туплаған, башҡа донъяуи диндәр өсөн изге һаналған Әт-Тәүрат, Әз-Зәбүр, Әл-Инжил, Изге Ҡөрьән китаптарына инәсәк һүрәтләүҙәрҙе үҙ эсенә алған әҫәрҙең, ысынлап та, тамырҙары бик тәрән һәм Ер йөҙөндәге барса халыҡтар өсөн уртаҡ! Был эҙләнеүебеҙҙә халҡыбыҙҙың иң боронғо рухи ҡомартҡыһындағы һүрәтләүҙәрҙе һуңғараҡ ситтән үҙләштергән Ислам диненең Изге китабы Ҡөрьән Кәримдәге аяттар менән уртаҡлыҡтарын табыуҙы маҡсат итеп ҡуй-

ҙыҡ, сөнки кешелектең башланғысы бер төптән булыуын дин һәм фән бөгөн берҙәй таный. Тәүҙә ошоға дәлил аяттарҙы Ҡөрьәндән килтерәбеҙ:

«Әгәр Алла теләһә, Ул һеҙҙе бер өммәт яһаған булыр ине...» [«Әш-Шура» («Кәңәш») сүрәһе, 8-се аят].

Кешеләр бер генә өммәт ине, әммә бүленделәр... [«Йунус» («Юныс») сүрәһе, 19-сы аят].

«Һәр өммәт өсөн Беҙ улар тотҡан ғибәҙәт ҡылыу йолаһы яһаныҡ...» [«Әл-Хадж» («Хаж») сүрәһе, 67—68-се аяттар].

«Беҙ үҙебеҙҙең аяттарыбыҙҙы уның хаҡ икәнлеге уларға аңлашылғанға тиклем илдәрҙә һәм уларҙың үҙҙәрендә күрһәтәсәкбеҙ...» [«Фуссыиләт» («Асыҡ аңлатыуҙар») сүрәһе, 53-сө аят].

Ер шарында миллиардлап йылдар йәшәү дәүерендә унда әллә күпме цивилизациялар булыуы һәм юҡҡа сығыуы тураһында мәғлүмәтте Ҡөрьән Кәрим түбәндәге аят аша аңлата:

«Беҙ уларҙың барыһын да гонаһтары өсөн тоттоҡ. Уларҙың ҡайһыларына өйөрмә ебәрҙек, һәм ҡайһы берҙәрен көсләү тауыш алды, һәм уларҙың ҡайһы берҙәрен ерҙән йотторҙоҡ, ҡайһыларын һыуға батырҙыҡ. Алла уларҙы йәберләүсе булманы, улар үҙ-үҙҙәренә золом ҡылдылар» [«Әл-Ғәнкәбут» («Үрмәксе») сүрәһе, 40-сы аят].

«Беҙ үҙ рәсүлдәребеҙҙе береһе артынан икенсеһен ебәрҙек. Өммәткә рәсүле килгән һайын, улар уны алдаҡсыға һананылар, һәм Беҙ уларҙы бер-бер артлы ебәрҙек һәм уларҙы хикәйәләр иттек. Дөмөкһөн иманға килмәгән ҡәүем!» [«Әл-Мөьминүүн» («Мөьминдәр») сүрәһе, 44-се аят].

Ҡобайырҙың башында уҡ ошондай донъяуи ваҡиғаларҙың сираттағы береһенән һуң Ер йөҙөндә тормош өр-яңынан башланыуы тураһында бәйән ителә. Был осраҡта кешелек хәтеренән унан алдағы цивилизация тураһында мәғлүмәт юйҙырылған:

Был ҡарт менән был ҡарсыҡ
Ҡайҙан бында килеүен,
Ата-әсә, ер-һыуы
Ҡайҙа тороп ҡалғанын
Үҙҙәре лә оноткан.
Икәүҙән-икәү шул ерҙә
Башлап ғүмер һөргәндәр...

Алдағы цивилизация үҙләштергән кире тормош тәжрибәһе заман ахырында кешелек хәтеренән юйҙырылғанға күрә, һәр яңыһы Аллаһы Тәғәләнең ижадынан – кешене бар ҡылыуҙан башланыр:

«Һәм уның аяттарынан: ул һеҙҙе тупраҡтан барлыҡҡа килтерҙе, шунан һеҙ, кеше булғас, таралыштығыҙ.

Һәм уның аяттарынан: күктәрҙе һәм Ерҙе барлыҡҡа килтереү, һеҙҙең телдәрегеҙҙең һәм төҫтәрегеҙҙең төрлө булыуы. Ысынлап та, белгән кешеләргә бында аят бар!» [«Әр-Рум» («Румиҙар») сүрәһе, 20–21-се аяттар].

Кешелектең уртаҡ йорто – Ер йөҙөндә илдәрҙең, йолаларҙың күп төрлө буласағы тураһында ап-асыҡ мәғлүмәтле боронғо әҫәр был айырымлыҡтың мәңге түгеллегенә лә ишара яһай. Ҡасандыр халыҡтар уларҙы шомландырыр, үҙ-ара дошманлаштырыр, һәләкәткә алып барыр сәбәптәрҙең айышына төшөнөр, бер иманға килер, хаҡ диндә берләшер көндәр буласағына ла ышандыра уҡыусыһын. Ә Изге Ҡөрьән ошо турала түбәндәге аяттары менән инандырыр әҙәмдәрҙе:

«Эй һеҙ, рәсүлдәр! Хәләл нәмәләрҙе ашағыҙ, изге эштәр эшләгеҙ, ысынлап та һеҙ эшләгән нәмәләрҙе Мин белеп торам! Һәм, ысынлап та, был өммәтегеҙ – бер өммәт, һәм Мин – һеҙҙең Раббығыҙ, минән ҡурҡығыҙ! Улар үҙ дин эштәрен ваҡ-ваҡ итеп киҫәктәргә айырҙылар, һәр фирҡә үҙендә булған нәмәгә шатлана. Уларҙы ваҡытына тиклем аҙашыуҙарында ҡалдыр» [«Әл-Мөьминүүн» («Мөьминдәр») сүрәһе, 51–54-се аяттар].

«Беҙ һине хаҡлыҡ менән һөйөнсөләүсе һәм өгөтләүсе итеп ебәрҙек. Үҙенә өгөтләүсе-иҫкәртеүсе ебәрелмәгән бер халыҡ юҡ!» [«Фатир» («Барлыҡҡа килтереүсе») сүрәһе, 24-се сүрә].

Эпостан күҙаллауыбыҙса, Йәнбирҙе һәм Йәнбикә Илаһ бар ҡылған тәбиғәттең үҙе менән бөтөн берлектә, тәбиғи шарттарға ысын мәғәнәлә яраҡлашып, ғүмер итәләр. Эпостағы тәүкешеләр Таҡ менән Йоптоң исемдәре бер үк тамырҙан: «йән» – донъяны бар иткән Илаһтың матдәләргә өргән һәм йәшәргә һәләтлелек биргән ҡеүәт көсө:

«Һеҙҙе Ул бер йәндән барлыҡҡа килтерҙе, шунан уға унан ҡатынын яһаны, һәм һеҙгә һигеҙ ишле мал төшөрҙө. Ул һеҙҙе әсәләрегеҙҙең ҡарынында бер-бер артлы барлыҡҡа килтереү менән өс ҡараңғылыҡта барлыҡҡа килтерә. Ошо – Алла, һеҙҙең Раббығыҙ. Батшалыҡ Уныҡы. Унан башҡа Илаһ юҡ! Ҡайҙа боролаһығыҙ һеҙ?» [«Әз-Зумар» («Төркөмдәр») сүрәһе, 6-сы аят].

«Эй һеҙ, кешеләр! Беҙ һеҙҙе бер ир менән ҡатындан барлыҡҡа килтерҙек. Бер-берегеҙҙе белер өсөн һеҙҙе халыҡтар һәм ҡәбиләләр яһаныҡ. Арағыҙҙан Алла ҡаршыһында иң хөрмәтле – иң тәҡүәлегеҙ. Алла, ысынлап та, белә, хәбәрҙар!» [«Әл-Худжурат» («Бүлмәләр») сүрәһе, 9—13-сө аяттар].

«Һәм уның аяттарынан: ул һеҙҙең өсөн, һеҙгә бергә тороу өсөн, үҙегеҙҙән ҡатындар барлыҡҡа килтерҙе, арағыҙҙа мөхәббәт һәм рәхмәт яһаны. Ысынлап та, фекерләп ҡараған кешеләргә бында аят бар!» [«Әр-Рум» («Румиҙар») сүрәһе, 21-се аят].

Аллаһы Тәғәләнең ризалығына күрә, был икәү «ауырыуһыҙлау күрмәй, үлем барлығын белмәй», тәбиғәттә башҡа йән эйәләре менән бергә бик килешеп, бер бөтөндө тәшкил итеп, йәшәй бирәләр:

Ҡошҡа шоңҡар сөйөргә,
Суртан арбап балыҡҡа,
Эт өскөтөп йәнлеккә
Ыҙалау ни — күрмәгән;
Шоңҡар, эткә, арыҫланға,
Өмөт бәйләп суртанға,
Һунарында интекмәй —
Теш-тырнағы — ҡоралы,
Үҙ ҡулында теләге,
Һис тә талмай беләге,
Һис аҙамай йөрәге...

Был һигеҙ ишле мал тураһында мәғлүмәт эпоста ҡат-ҡат ҡабатлана, улар – тәүкешеләр Йәнбирҙе һәм Йәнбикәгә хеҙмәт итеүсе йән эйәләре (йәнлек, януарҙар):

Менәренә — **арыҫланды,**
Балығына — **суртанды,**
Ҡошҡа сөйгән **шоңҡарҙы,**
Эте тотҡан йәнлекте,
Ҡан һурырға **һөлөктө**
Үҙ иштәре яһаған.

Эпостың аҙағында кешегә хеҙмәт итеүсе йән эйәләренең һаны арта төшә:

...**Һомай** түҙмәй осҡан, ти,
Бер килгән, ти, киткән, ти;

Тыныс ил, тип, бермләп,
Ҡош-ҡорттарҙы эйәртеп,
Үҙ артынан эркелтеп,
Тағы Уралға килгән, ти;
Шуға эйәреп Уралда
Ҡош-ҡорт йәнлек тулған, ти.
Ҡоштар киткәнен белгәс,
Тыныс ил тип ишеткәс,
Ҡатил үгеҙе, тоҡомон
Үҙе башлап эйәртеп,
Данлы Урал буйында,
Йәмле Урал ҡуйынында
Бергә ғүмер һөрәм тип,
Урал буйына килгән, ти,
Кешегә буй биргән, ти.
Аҡбуҙат та ил гиҙеп,
Йылҡы тоҡомон йыйып,
Бар йылҡыға баш булып,
Барып алып килгән, ти.
Кешеләргә ылығып,
Менәренә ат булып,
Йылҡы түлләп киткән, ти.

Билдәле булыуынса, тәбиғәттә ярашып йәшәүсе үҫемлектәргә, йәнлектәргә һәм кешегә бирелгән йәшәүгә һәләтлелек өс таяуға нигеҙләнгән:
– үҙ-үҙеңде һаҡлай алыу;
– үҙ-үҙеңде тәьмин итеү;
– тоҡомоңдо, киләсәк быуыныңды, нәҫелеңде дауам итеү.

Ошо өс һәләтте үҙенә буйһондороп ҡулланһын өсөн, барса тере есемдәргә лә, уларҙың үҫеш кимәленә ҡарап, Илаһ тарафынан өҫтәп, аң да бирелгән. Мәҫәлән, үҫемлектәргә йәшәү рәүешен тәьмин итер өсөн бер урындан икенсе урынға күсеп йөрөү хәжәте юҡ. Шуға күрә уларҙың аңы бер нөктәгә тупланмай, киреһенсә, үҫемлекте уратып алған арауыҡ ҡабында, киңлектә тигеҙ таралып, тамыр – олон – ботаҡ – япраҡ-сәскәнең үҙ-ара бәйләнешен тәьмин итеүгә һәм бер үк ваҡытта уларға күрше булған башҡа үҫемлектәр менән ярашып көн күреүгә сарыф ителә.

Хайуандар донъяһында йәшәүгә һәләтлелек ҡатмарлыраҡ шарттарға ҡулайлашҡанға күрә, аң юғарыраҡ кимәлгә күтәрелеп, баш мейеһендә туплана. Уның был осраҡтағы тәғәйен-

ләнеше – йән эйәләренә хас тәбиғи һиҙгерлек, тойомлау аша уларҙы уратып алған мөхит тураһындағы мәғлүмәтте үҙләштереү һәм уларға яраҡлашыу һәләтен тәьмин итеү.

Кешенең дә есеме, тән ҡоролошо хайуандыҡынан әллә ни айырылмай, ләкин уға тейешле аң кимәле – Илаһтың мөғжизәүи бүләге. Донъя яралтылғанда **ир енесе беренсел** булғанға күрә, зиһен, аң кимәле уларҙа нығыраҡ үҫеш кисергән. «Ҡәмәрҙең һиммәте – ҡашында, ирҙең ҡиммәте – башында», – ти халыҡ мәҡәле. Шуға күрә, Йәнбирҙе һәм Йәнбикә хайуандың баш мейеһен ашап, үҙҙәрендә тәбиғи уй-фекергә һәләтлелекте үҫтереп, аң кимәлен юғары тотоуҙы маҡсат итеп ҡуйған.

Билдәле булыуынса, кешелек донъяһы ғаләмдә аң кимәленең үҫеше буйынса алға киткән берҙән-бер донъя түгел. Был баҫҡыста аң кимәле буйынса кешенән үрҙәрәк торған йән эйәләре бар, тиҙәр:

«Ул кешене сүлмәк яһай торған балсыҡ кеүек яңғырауыҡлы мәтенән яралтты һәм ендәрҙе саф ут ялҡынынан яралтты» [«Әр-Рәхман» («Шәфҡәтле») сүрәһе, 14–15-се аяттар].

Йога тәғлимәте өйрәткәнсә, кимәле буйынса ер элементы (тупраҡ, балсыҡ, ҡом) һыу һәм уттан түбәнерәк икәнлеге билдәле. Эпостан күҙаллауыбыҙса ла, ошо йән эйәләренең бар булмышы ут менән бәйле, шуның менән улар кешенән көслөрәк:

Күккә олғашҡан ҙур тауҙай
Ҡара күргән алдында,
Нәжәғәйҙәй ялтыраған
Ут уйнай, ти, янында.
Күк томандар ҡаплаған,
Ут һөрөмө бөркөлгән
Нәмә күргәс юлында,
Урал: «Ни?» – тип һораған.
Һарайҙарҙы һаҡлаған,
Тау түгел ул, йылан, тип,
Зәрҡум уны аңлатҡан.

Юғары аңға тоташҡан һәм бик күп төрлө кимәлдәге башҡа Йыһан вәкилдәре кешегә ҡарата ыңғай мөнәсәбәттә түгел. Был турала һуңғараҡ Изге китап – Ҡөрьәндә лә мәғлүмәт буласаҡ:

«Һәм беҙ кешене яңғырап торғандан, һүрәткә килтерелгән балсыҡтан яралттыҡ! Һәм Беҙ элек ендәрҙе эҫе елдең

утынан бар иткәйнек. Бына Раббың фәрештәләргә әйтте: «Мин яңғырап торғандан, һүрәткә килтерелгән балсыктан кеше яһайым, һәм Мин уны тигеҙләгәс, һәм ***Үҙемдең рухымдан өргәс,*** *уға сәждә ҡылып, йөҙтүбән йығылығыҙ!» Һәм фәрештәләр барыһы ла сәждә ҡылды, Иблистән башҡа. Ул сәждә ҡылыусылар менән бергә булыуҙан баш тартты. Ул: «Эй, Иблис! Нимә булды һиңә, сәждә ҡылыусылар менән бергә булманың?» – тине. Ул: «Яңғырап торғандан, һүрәткә килтергән балсыктан яралтҡан кешегә мин сәждә ҡылыусы булмаясаҡмын», – тине. Ул әйтте: «Бынан сығып кит! Һин – таштар менән атылған. Һәм, ысынлап та, ҡиәмәт көнөнә ҡәҙәр һиңә ләғнәт!» Ул: «Раббым! Кешеләр ҡәберҙәренән ҡуптарыласаҡ көнгә тиклем мине кисектер», – тине. Ул әйтте: «Ысынлап та, һин – кисектерелгәндәрҙән – мәғлүм ваҡыттың көнөнә ҡәҙәр».*

Ул әйтте: «Раббым! Мине ҡыуған өсөн мин уларға Ер йөҙөндәге булған нәмәләрҙе зиннәтләп күрһәтермен һәм барыһын да юлдан яҙҙырырмын, ҡолдарыңдан ихлас күңеллеләренән башҡаһын».

Ул әйтте: «Минең өсөн хаҡ юл был. Ысынлап та, Минең ҡолдарҙың, һиңә эйәреп, юлдан яҙғанынан башҡаһына һинең хөкөм юҡ» [«Әл Хиджр» («Әл-Хижер») сүрәһе, 15:26–42].

«Иҫтәренә төшөр, иҫкә төшөрөү ул иман килтергән кешеләргә файҙа итә! Мин ендәрҙе һәм кешеләрҙе Үҙемә ғибәҙәт ҡылһындар өсөн барлыҡҡа килтерҙем. Мин уларҙан һис бер ризыҡ теләмәйем, һәм Мине туйҙырыуҙарын да теләмәйем» [«Әҙ-Ҙәрийәт» («Елгәреүселәр») сүрәһе, 51:55–57].

Эпостың башында уҡ әле, ағалы-ҡустылы үҫмер балалар, Шүлгән менән Уралдың тәүге һүҙгә килешеүенән шундай мәғлүмәт алаһың. Шүлгән, ағайлығынан файҙаланып, үҙенән йәшерәк туғанын ярамаған эшкә ҡотортоуына ҡарамаҫтан, уныһы был ҡотҡоға бирелмәй, дөрөҫ юлды һайлай һәм, әлбиттә, Аллаһы Тәғәләнең яратҡан бәндәһенән була:

Аталары киҫәтеп:
«Ҡан эсмәгеҙ!» — тиһә лә,
Шүлгән, Уралды димләп,
Былай тиеп әйткән, ти:
Йәнде ҡыйып һунарлау
Ҡомарлы эш булмаһа,
Һыуһағанда ҡан эсеү

Тағы тәмле булмаһа,
Атамдар йоҡо ҡалдырып,
Аяҡ-ҡулын талдырып,
Һәр көн икәү ҡаңғырып,
Беҙҙе өйҙә ҡалдырып,
Йөрөмәҫ ине һунар, тип.
Урал, әйҙә, булмаһа,
Ҡабырсаҡты асайыҡ,
Һәр беренән аҙ-аҙлап
Берәр тамсы эсәйек,
Ҡандың тәмен беләйек.
Урал: «Атам һүҙен тотамын –
Миң ҡан эсмәй түҙәмен,
Егет булып үҫмәйсә,
Төп йоланы белмәйсә,
Бер ил гиҙеп йөрөмәйсә,
Ысынлап та донъяла
Үлем юғын күрмәйсә,
Суҡмар алып ҡулыма,
Һис бер йәнде һуҡмамын,
Һөлөк һурған ҡанды мин
Ҡабырсаҡтан эсмәмен».

Шулай итеп, был ике бер туғандың булмыштарына баштан уҡ ҡапма-ҡаршылыҡлы ике төрлө тәҡдир һалынғанын күрәбеҙ. Киләһе хәл-ваҡиғалар үҫешендә был тәғәйенләнеш раҫлана ғына бара:

Ҡарт уйланып торған да,
Былар уйын белгән дә,
Һаҡалыны һыпырып,
Быларға күҙ йүгертеп,
Ике юлды күрһәтеп,
Былай тиеп әйткән, ти:
– Бына һеҙгә ике юл:
Һулға китһәң, юл буйы –
Уйын-көлкө көн буйы,
Ҡайғы, этлек күрмәйсе,
Барлығын да белмәйсе,
Рәхәт йәшәп баймандa,
Бүре, һарыҡ – яланда,

Төлкө, тауыҡ – урманда
Бергә йәшәп, дуҫ булып,
Самрау ҡошҡа[68] баш эйеп,
Ҡан да эсмәй, ит еймәй,
Һис үлемгә юл ҡуймай,
Йәшәп килгән бер ил[69] бар.
Яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ
Ҡыла торған йола бар.

Һиллектә йәшәүсе был ил тураһындағы һүрәтләү алдағы хәл-ваҡиғалар үҫешендә тағы ла ҡабатланасаҡ әле. Шүлгән шул тарафтарға барып еткәс,

Ос(о)раған бер күлгә...
Күлдә ятҡан балығы,
Ялтуш, сабаҡ, суртаны
Бергә йөҙөп уйнайҙар,
Бер-беренә теймәйҙәр.
Талда һайрап ултырған
Һандуғасты ҡушарлап,
Әберсендәр теҙелгән;
Ярылбай ҙа ҡарсыға,
Тағы турғай күренгән.
Тау битенә күҙ һалһа, –
Ҡуй-һарыҡ та, бүре лә,
Әтәс, тауыҡ, төлкө лә
Бер тирәгә йыйылған...

---

[68] 1110–1220 йылдарҙа йәшәгән суфыйсы ғалим Фаридуддин Аттарҙың «Мантик-ут-Тайюр» («Ҡоштар парламенты») әҫәрендә һөҙһөт (удод), барса ҡоштарҙы йыйып алып, Ҡаф тауында йәшәүсе серле Симург (фарсы телендә: «утыҙ ҡош») исемле ҡоштар батшаһын эҙләргә сығыуҙы тәҡдим итә. Был маҡсатҡа ирешеү юлында уларға *ете үҙән* үтергә тура килә.

[69] Ошоға оҡшаш һүрәтләү «Изге яҙма»ла бар: «Волк временами будет жить рядом с ягненком, леопард будет лежать с козленком. Теленок, молодой гривастый лев и откормленное животное будут вместе, и маленький мальчик будет водить их. Корова будет пастись с медведицей, и их детеныши будут лежать вместе. Лев будет питаться соломой, как бык. Грудной младенец будет играть над норой кобры, и ребенок, отнятый от груди, протянет руку к норе ядовитой змеи. Не будут причинять вреда и не будут ничего разрушать на всей моей святой горе, потому что земля будет наполнена знаниями об Иегове, как воды наполняют море». [«Священное Писание – Перевод нового мира». Издание 2008 г.: ИСАИЯ 11:6–9]

Ә Уралдың «өләшенә төшкән көмөшө» – бөтөнләй икенсе төрлө:

Уңға китһәң, юл буйы –
Илау-һыҡтау төн буйы;
Яуызлыҡта дан алған,
Аҡһаҡалдан, батшанан
Ҡайғы-этлек күреүсе,
Ҡанлы йәшен түгеүсе
Ҡатил батша иле[70] бар;
Тау-тау кеше һөйәге,
Ҡанға батҡан ере бар.

Был ҡапма-ҡаршылыҡҡа төшөнөр өсөн түбәндәге аятҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк:

«...Беҙ уға ике юлды күрһәттек. Һәм беҙ уны ике бейеклеккә алып барҙыҡ. Ә ул текәлектән ҡыйыу ынтылманы. Һәм ул текәлектең ни икәнен һиңә нимә белдерер? Ҡолдо ирекә ебәреү, йәки аслыҡ көнөндә туйҙырыу яҡындарҙан булған етемде, йәки бер нәмәһе булмаған ярлыны. Шунан һуң ул иман килтереп, сабырлыҡҡа, мәрхәмәткә өндәр. Былар – ***уң яҡ*** *эйәләре. Ә Минең аяттарыма иман килтермәгәндәр –* ***һул яҡ*** *эйәләре. Улар өҫтөндә ут көмбәҙ кеүек булыр»* [«Әл-Бәләд» («Ҡала») сүрәһе, 90:3–20].

Эпостың ошо юлдарында һәм Ҡөрьән аяттарында һүрәтләнгән ике юл тураһындағы мәғлүмәт ике донъяуи диндең айырмаһын күрһәтә лә инде: уларҙың береһе – кешелек донъяһын ҡурсалаусы һәм рух күндереүсе Күк Атаһына табындырыусы Христиан дине, икенсеһе – барса тереклек донъяһына йән өрөүсе юғары аң эйәһе, ғаләмдәрҙең Раббыһы булған Аллаға иман килтереүсе Ислам дине[71].

Эпоста хәл-ваҡиғаларҙың үҫеше тап ошо йүнәлештә һүрәтләнә. Урал, Шүлгән ағаһы менән сығып китеп, юлдары аймылышҡаны бирле, төп маҡсатынан һис тайпылмай, донъя

---

[70] Кешелек донъяһы һайлаған ауыр юл.

[71] Путь Иисуса был путем борьбы с одиночеством и преодолением вожделений, а путь Мухаммеда требовал жить среди обычных людей. «Иди путем Мухаммеда, а если не можешь – стань на путь Христианства». (Маулана Джалалуддин Руми). Таким образом Руми указывает на методы, с помощью которых Искатели могут достичь завершенности, которая приходит через понимание того, что представляют собой пути Иисуса и Мухаммеда.

буйлап йөрөп, күп илдәр күрә, төрлө халыҡтарҙың йолаларын танып белә:

Мин киләмен йыраҡтан,
Үҙем торған торлаҡтан,
Бала инем киткәндә,
Күп илдәрҙе үткәндә,
Мин кешегә теймәймен,
Уның ҡанын ҡоймаймын –
Үлем тигән яуызды
Үлтерергә уйлаймын.

Хәрәкәтсән ғаләмдә аңға эйә сит донъя вәкилдәренең дә ғүмерҙәренең, ниндәй генә оҙонлоҡта булмаһын, ахыры була. Был сәғәт һуҡҡанда, йәшәү дәүерендә шәхсән тупланған донъяуи мәғлүмәт уның эйәһенең аңынан планетар аңға күсерелә һәм, юйылып, юҡҡа сыға. Бер үк ваҡытта Йыһан аңына тоташыусы йән эйәләренең араһында тик кешегә генә хас булған һәм тик уға ғына Ер йөҙөндә ҡабат-ҡабат тыуыу мөмкинселеген биргән **үлемһеҙ рух** барлығы тураһында ла хәбәрҙар икән ул заттар.

Шуға күрә, юғары кимәлдәге аңға эйә булып та, рухһыҙлыҡтары сәбәпле, кеше алдында үҙҙәренең көсһөҙлөгөн тойған башҡа донъя вәкилдәре Ҡаһҡаһә, Әзрәҡә, Зәрҡумдың төп маҡсаты – бына шул иң нескә кимәлдә туҡылған ҡеүәт – рухты кешенән тартып алып, үҙенеке итеү:

Шаһым, сара эҙләйек,
Самрау ҡоштоң Аҡбуҙын
Кеше аша алайыҡ,
Һис булмаһа – урлайыҡ, –
Тигәс, батша уйланған,
Былай тиеп һөйләнгән:
Аҡбуҙатты алырға,
Уға эйә булырға,
Йә булмаһа, ул атты
Был донъянан юйырға
Ете дейеү ебәрҙем...

Ерҙән тыш йәшәүсе цивилизациялар кешелек донъяһын хәстәрләүсе һәм уның үҫешенә булышлыҡ итеүсе, кешегә генә

хас күңел донъяһы өсөн нескә кимәлдәге рух өрөүсе **кемдер** барлығын да беләләр, әммә ләкин уның үҙе менән туранан-тура мөнәсәбәткә кереү мөмкинселегенән улар мәхрүм:

«Улар һинән рух тураһында һорайҙар. Рух – Раббымдың бойороғонан, һәм һеҙгә белем бик аҙ бирелде бит, – тип әйт» [«Әл-Исра» («Төндә күсереү») доғаһы, 17:85].

«Ул бойороғо менән ҡолдарынан теләгән берәүгә фәрештәләр менән рух индерә» [«Ән-Нәхл» («Бал ҡорттары») сүрәһе, 16:2].

Эпоста рух төшөнсәһе Аҡбуҙат образы аша ап-асыҡ һүрәтләнә, һәм ул Күк батшаһы Самрауҙан бирелеп Ҡыҙы Һомай аша тик саф һәм изге **йөрәклеләргә** генә күндерелер:

Күктә тыуып, күктә үҫкән,
Ерҙә тоҡом йәймәгән,
Әзрәҡәнең дейеүе
Мең йыл ҡыуып тотмаған.
Әсәйемдән бирелгән,
Донъялағы **йөрәгем** —
Үҙем һөйгән егеткә
Бирә торған бүләгем.

Ир затының үҙенән (Әҙәмдең ҡабырғаһынан) булдырылған, шуға күрә **икенсел** тип ҡабул ителгән, ләкин әһәмиәте буйынса уның үҙенән һис кенә лә ҡалышмаған **ҡатын-ҡыҙ, инә, ана затына** хас һиҙгерлек, зауыҡлыҡ, тоғролоҡ, яуаплылыҡ кеүек хистәр менән һуғарылған ул рух тойғоһо. Тимәк, эпоста һүрәтләнгәнсә, үҙҙәрендә тәбиғи һиҙгерлек үҫтереү һәм хис-тойғоларының нескәреүенә, рух күтәренкелегенә өлгәшеү ниәтенән, Йәнбирҙе һәм Йәнбикә, һунарҙа орғасы йәнлек тотоп, уның **йөрәген** ярып ашаған булып сыға. Әҫәрҙең башында Йәнбирҙе ҡатыны һәм улдары менән һунарҙа аулап алған ҡоштарҙың араһында бер аҡҡош, башын ҡырҡып ташларға бысаҡ ҡайрағанда телгә килеп, үҙенең ябай ҡош түгеллеген ошолай аңғарта:

Ебәрегеҙ һеҙ мине,
Үҙ илемә ҡайтайым.
Мине һуйып ашап та,
Сәйнәп мине йотоп та
Барыбер аш булмамын,
Һис аш булып һеңмәмен.

Ысынлап та, Һомай һунарлап алған матди аҙыҡ түгел. Киреһенсә, бында ниндәйҙер юғары донъянан, билдәле бер ниәт менән ергә осоп килеүсе рухи зат төҫмөрләнә. Изге Ҡөрьән был турала ошолай тип тә әйтәсәк:

«Алла кеше менән һөйләшә торған булманы, тик үәхи (төшөндөрөү, күңелгә һалыу, илһамландырыу) аша йәки ҡорма аша ғына, йәки рәсүл ебәрә, һәм үҙ рөхсәте менән уға теләгән нәмәне үәхи ҡыла. Ул, ысынлап та, оло, хикмәтле!» [«Әш-Шура» («Кәңәш») сүрәһе, 42:51].

Бындай заттың һунарсы ауына эләгеүе лә осраҡлы хәл түгеллегенә инанабыҙ. Был сәбәп-һөҙөмтә сылбырында бер-бер артлы теҙелеп, үрелеп барасаҡ хәл-ваҡиғаларҙың башы ғына әле. Ябай булмаған ҡоштоң юғары донъянан икәнлеген үҙе лә тыумыштан зирәк булмышлы, һиҙгер Урал ғына нескә тоя ала һәм уны ебәреү әмәлен күрә. Уның был яҡшылығының әжере лә шул кимәлдә буласағы һис кенә лә шик тыуҙырмай. Ысынлап та, ҡасандыр аҡҡош рәүешенән ҡыҙға әүерелер Һомайҙың бүләге тап шундай буласаҡ:

Осраған бер кешене
Хайран итер, уйлатыр, –
Бына ошондай Аҡбуҙ ул,
Күҙ күрмәгән ят буҙ ул.

Аҡбуҙат образына ниндәй йөкмәтке һалынған һуң? Әлбиттә, **Аҡбуҙ** – Күк тәхетендәге Самрау батшанан бирелер **рух образы.** Ә Самрауҙың үҙен Һомайғош ошо юлдар аша тулы мәғәнәһендә ҡылыҡһырлай:

Ерҙә һис кем тыумаҫтан,
Берәү аяҡ баҫмаҫтан,
Ҡуш булырға йәр эҙләп,
Ерҙә һис кем тапмағас,
Бүтән йәндән һайларға
Берәүһен тиң күрмәгәс, –
Күккә осоп йәр эҙләп,
Айҙы, Ҡояшты күҙләп,
Үҙенә йәр һайлаған,
Икеһен дә арбаған,
Бар ҡоштарға баш булған,
Самрау атлы атам бар.

Ике балаһы булған,
Балаһы ла, үҙе лә
Һис ауырыу күрмәгән,
Һис берәүһе үлмәгән.
Әле лә батша атайым...

Ошо юлдарҙан Самрау образы ғаләмдәрҙең хужаһы бөйөк абсолют аң түгел икәнлеген, йәғни барса тереклек донъяһына йән өрөүсе Аллаһы Тәғәлә образына тап килмәүен күрәбеҙ. Уның барлығын Ҡөрьән Кәрим былай һүрәтләй:

«Әйт: «Аллаһ – Ул берәү, Аллаһ – мәңге, Ул бер кемде лә тыуҙырмаған һәм Үҙе лә тыуҙырылмаған, һәм бер кем дә Уға тиң түгел!» [«Әл-Ихлас» («Ихласлыҡ») сүрәһе].

Христиандар табынған Күк Атаһы (Отец Небесный) һәм унан да элегерәк булған донъяуи Будда динендә асыҡ һүрәтләнгән Изге Күк (Святые Небеса) донъяһы тураһында бара был һүрәтләү. Фәҡәт ул Ер йөҙөнә изге рухты (Аҡбуҙатты) Ҡояштан тыуған ҡыҙы Һомай ярҙамында күндерәсәк. Был образдар һуңынан Ҡөрьәндә аяттар аша аңлатыласаҡ:

«Һәм Ул һеҙгә төн менән көндө, Ҡояш менән Айҙы буйһондорҙо, һәм Уның әмере менән йондоҙҙар буйһондоролдо. Ысынлап та, бында аҡыллы халыҡтарға аят бар!» [«Ән-Нәхл» («Бал ҡорттары») сүрәһе, 16:12].

«Ул Ҡояшты балҡып тороусы итте, ә Айҙы нурланыусы итте, һәм һеҙгә йыл һандарын иҫәпләп белеү өсөн һәм хисаплау өсөн уның урындарын билдәләне. Белгән халыҡтарға аяттарҙы аңлатып, быны Алла тик хаҡлыҡ менән генә барлыҡҡа килтерҙе» [«Йунус» («Юныс») сүрәһе, 10:5].

Рухтың теләгән берәүгә түгел, һайлап алынған йәндәргә генә индерелеүе тураһында Һомай үҙе былай тип иҫкәртә:

Буҙ атым бар йыраҡта,
Әсәм биргән бүләккә,
Майҙаныма шул килер,
Батыр булһаң, ул белер.

Аң кимәле буйынса беҙҙән көслөрәк булған башҡа Йыһан вәкилдәре, фәҡәт шуның менән өҫтөнлөк ҡулланып, кешеләр араһынан рух күтәренкелегенә эйә булмағандарын ҡурҡытып, буйһондороп, үҙҙәренә «баш үҫтереү» маҡсатынан йотоп тороу-

ҙары тураһында эпос тулы мәғлүмәт бирә. Тап улар өсөн яралтылған да инде күктең уларға тәғәйен бер ҡаты – Әзрәҡә, Ҡәһҡәһәләр донъяһы:

Күктә торған буҙ аттың
Урынын үҙем күргәҙҙем.
Улар барып баҫтырҙы,
Тота алмағас, яҡшылап,
Яндарына саҡырҙы.
Ат уларға килмәне –
Дейеүҙәрем, ғәрлектән,
Кире илемә ҡайтманы:
Күктә ҡалды хур булып,
«Етегән» тигән исемдә
Мәңге ҡалды ут булып.

Ә хәҙер был ваҡиғаны раҫлаусы Ҡөрьән аятын ҡарайыҡ:

«Беҙ түбәнге Күк көмбәҙен йондоҙҙар менән зиннәтләнек, һәр бер баш күтәргән шайтандан һаҡлау өсөн. Улар юғары кәңәшмәгә ҡолаҡ һала алмай һәм улар һәр яҡтан (таш йәки йондоҙҙан бер киҫәк менән) атыла, ҡыуып ебәрелеү өсөн, һәм уларға бөтмәҫ-төкәнмәҫ ғазап» [«Ас-Саффат» («Сафтарҙа тороусылар») сүрәһе, 37:6–8].

Кеше ашап ятыусы,
Баш үҫтереп йөрөүсе,
Ҡәһҡәһәнең бар серен,
Башын һаҡлап тороусы

дейеүҙәрҙән йотолоп юҡҡа сыҡҡан халыҡтарҙы ҡотҡарыр Урал кеүек илаһи заттар, батырҙар һәр дәүерҙәрҙә тыуа – был инде Йыһандағы эволюция хаҡына кешелектең бар гонаһтарын ғәфү ҡылыусы мәрхәмәтле Раббыбыҙ тарафынан. Рәсүлдәр һәм пәйғәмбәрҙәр ни дәүерҙәрҙә, ни маҡсаттан Ер йөҙөнә килтерелгән – был турала аяттар түбәндәгеләрҙән ғибәрәт:

«Һәр бер өммәткә үҙ рәсүле; һәм, рәсүл килгәс, улар араһындағы эш ғәҙеллек менән хәл ителгән булыр, һәм улар йәберләнмәҫ тә» [«Йунус» («Юныс») сүрәһе, 10:47].

«Беҙ Рәсүлдәрҙе үҙ халҡының теле менән генә – уларға аңлаһындар өсөн – ебәрҙек...» [«Ибраһим» сүрәһе, 10:4]

«Алла рәсүлдәрҙе фәрештәләрҙән һәм кешенән һайлай...» [«Әл-Хадж» («Хаж») сүрәһе, 22:75–76].

Эпостың төп геройы Урал батырҙың булмышына *пәйғәмбәрлек* бурысы һалынғанына һис шик юҡ. Шуларҙың икәүһе Күктәр тарафынан уның тыуыуы һәм үлеме менән бәйле рәүештә һүрәтләнеүен алда атап үткәйнек инде.

Ер йөҙөнә килеп киткән пәйғәмбәрҙәрҙең һәр ҡайһыһына, уларҙың пәйғәмбәрлеген дәлилләү өсөн, Аллаһы Тәғәләнең ихтыяры һәм теләге буйынса, мөғжизә күрһәтә алыу һәләттәре бирелгән. Урал батырҙың да бындай мөғжизәүи һәләттәре бер-бер артлы асыла бара. Бына шуларҙың береһенә генә миҫал:

Урал алға сапҡан, ти,
Аты диңгеҙ ярған, ти;
Аты барған урында
Һыу алмаҫлыҡ юл булып
Ҙур тау ҡалҡа барған, ти;
Һыу эсенән бар халыҡ
Шунда сыға барған, ти.

Бөтә донъяны һыуҙан баҫтырыу, шулай уҡ кемделер ҡотҡарып алып ҡалыу – Аллаһы Тәғәләнең ихтыярынан. Был турала мәғлүмәт Ҡөрьәндә лә бар:

«Һәм Беҙ Мусаға: Таяғың менән диңгеҙгә һуҡ! – тип үәхи ҡылдыҡ, һәм ул ярылып китте һәм һәр киҫәге бейек тау кеүек булды. Унан һуң беҙ икенселәрҙе яҡынайттыҡ. Һәм Беҙ Мусаны һәм уның менән булған кешеләрҙе ҡотҡарҙыҡ» [«Әш-Шуъара» («Шағирҙар») сүрәһе, 26:63–65].

Уралдың – һайланған кеше, Аллаһы Тәғәләнең белемен кешеләргә еткереүсе икәненә өҫтәмә дәлилдәргә лә миҫалдар етерлек эпоста, һәм беҙ уларҙан пәйғәмбәрлектең башҡа күркәм сифаттарын һанап китә алабыҙ:

- үҙ заманы өсөн бөтә илдәрҙә, бөтә халыҡтарға ҡарата мөнәсәбәттәрҙә иң юғары кимәлдәге дөрөҫлөк яҡлы һәм ғәҙел булыуы;
- бар мөнәсәбәттәрҙә лә тоғро булыуы;
- Аллаһы Тәғәләнән ебәрелгән саҡырыу һәм йолаларҙы тулы кимәлдә кешеләргә таратыуы;
- асыҡ зиһенле һәм ныҡ үҫешкән аңлы булыуы;
- гонаһ ҡылмауы.

Ҡасандыр Йәншишмәнең һыуын эсеп, үлемгә бирешмәгән меңйәшәр ҡарт Уралдың ни заттан икәненә былай тип баһа бирә:

Егетем, батыр икәнһең,
Күҙ ҡарамдай һаналған
Илгә ҡашҡа икәнһең;
Быуын-быуын буйына
Маҡталырлыҡ икәнһең.
Быуын-быуын әсәңдән
Тыуыуыңды көттөрҙөң;
Ил ырыҫын табырға
Атаң һиңә ҡот биргән,
Әсәң һиңә һөт биргән;
Тәү арыҫланға атланған,
Яҡшылыҡҡа ынтылған...

Был мәңгелек рухи ҡиммәт тураһында Ҡөрьән былай ти: *«Кеше яҡшылыҡты теләүҙән ялыҡмай, ә инде уға яманлыҡ тейһә, ул бойоға һәм өмөтһөҙләнә»* [«Фуссыиләт» («Асыҡ аңлатыуҙар») сүрәһе, 41:49, 51].

Ә хәҙер эпоста ҡат-ҡат һыҙыҡ өҫтөнә алынып ошо төшөнсәгә туҡталайыҡ:

Күккә лә осор — яҡшылыҡ,
Һыуға ла батмаҫ — яҡшылыҡ,
Утта ла янмаҫ — яҡшылыҡ,
Телдән төшмәҫ — яҡшылыҡ.
Бары эшкә баш булыр,
Үҙеңә лә, кешегә лә
Мәңге ейер аш булыр, —
Тигән һүҙен ишеткәс,
Бөтә серҙе аңлағас,
Бар халыҡты эйәртеп,
Урал юлға сыҡҡан, ти;
Йәншишмәгә барған, ти,
Һыуын уртлап алған, ти;
Үҙе сапҡан юлына,
Дейеүҙән өйгән тауына
Һыуҙы алып һипкән, ти.

Урал меңйәшәр ҡарттың алдағы кәңәшенән ниндәй серҙе аңлаған һуң? Ошонан алда ғына уның фекере һәм маҡсаты башҡа ине бит:

Үҙем мин йәш булһам да,
Биш ил барын белдем мин:

Береһендә үҙем тыуҙым мин,
Икеһен йөрөп күрҙем мин,
Ҡалған тағы икәүһен
Күрергә тип сыҡтым мин.
Ҡайҙа ғына барһаң да,
Береһе үҙен шаһ тиә,
Икенсеһе баш эйә,
Көслө көсһөҙҙө ейә,
Теләгәнсә ҡан ҡоя.

...Үлем тигән яуыз бар,
Шунан алыр ҡоном бар;
Шуны табып үлтереп,
Ил ҡотҡарыр уйым бар.

Биш өлөшсәнән торған Ер йөҙөн урап сыҡҡан Урал батыр кешелек донъяһының үҫеше әлмисаҡтан яңылыш юлдан киткәнен йөрөп, күреп, сәбәбенә төшөнә, әммә ошоғаса уның сәбәпсеһе – Үлем тип уйлай. Ә аҡһаҡалдың ишараһынан ул был яңылышты төҙәтә алыу ихтималлығын тойоп ала: Ер йөҙөндәге тормошто ожмахҡа тиң итеү өсөн тәүҙә үҙең өсөн түгел, **ә башҡалар өсөн яҡшылыҡ эшләүгә ынтылыш булдыр!** *«Яуабына ҙурҙы теләп, изгелек күрһәтмә!»* – тип әйтелә был турала [«Әл-Мүдәҫҫир» («Кейеменә бөркәнгән») сүрәһе, 74:6 аят].

Эпоста ерҙәге тормоштоң башланғыс осоронда ошондай йәмғиәт ҡоролошоноң барлығына һүрәтләү бар. Шүлгән ҡустыһы Урал менән юл сатында осраған ҡарттың һөйләүе буйынса, үҙе һулды һайлап, туғаны уңға китеп, айырылышҡас, шул ҡарттың ағаһын тап итә. Уныһы иһә баяғы был икәүгә осраған ҡустыһына ҡарағанда йәшерәк ҡиәфәттә булыуының сәбәбен төшөндөрөп бирә. Баҡһаң, ул шундай илдә, шундай рәхәтлектә ғүмер итә, имеш:

Беҙҙең илдә йолала
Барыһы ла туғандай,
Бер әсәнән тыуғандай...

Был илдә йолалар бөтөнләй башҡа ҡуйылған һәм мотлаҡ шулай үтәлгән:

Илде талап йөрөмәҫкә,
Илдән ҡан да ҡоймаҫҡа;
Артыҡ ҡалта (кеҫә!) текмәҫкә

Ил әнйеһен йәшереп,
Ерғә күмеп ҡуймаҫҡа;
Тапҡан-таянған бары
Һис айырым булмаҫҡа;
Көслөнөкө — байман, тип,
Еҫерҙе (етемде) сит күрмәҫкә;
Ҡыҙға әсә булғанды
Хур әсә, тип, кәмһетеп,
Балаһыны һыуға атып,
Андай йола ҡылмаҫҡа,
Тигән илдең анты бар.

(Ер йөҙөндә коммунистик йәмғиәт төҙөү идеяһына тап килеп тора инде был һүрәтләү). Әммә бәндә үҙенең камил булмаған аңы менән ошондай тормоштоң тиҫкәреһен һайлай. Һөҙөмтәлә ерҙәге ожмахҡа тейешле тормош башҡа йүнәлеш ала, һәм был ошо көнгәсә шулай дауам итә:

Ҡустым шуны тотманы,
Көсө еткән йәндәрҙең
Барын ҡырҙы, ашаны,
Үлем тигән яуызға
Дуҫ, дошманын табырға,
Илдә күп ҡан ҡойорға
Йола таба башланы.

Әлбиттә, юғары аң тарафынан бирелгән йоланы боҙоп, тура-нан тайпылған, яңылыш юл һайлаған әҙәм унның ҡөһөрөн дә үҙ елкәһендә татый:

Шуға аны был илдән,
Тыуып үҫкән еренән
Бөтәһе лә берлектә
Ситкә ҡыуып ташланы.
Хәҙер илдән йыраҡта
Үҙе йәшәй тарлыҡта,
Ғүмере үтә зарлыҡта;
Шуға уның төҫ-башын
Үлем, ҡартлыҡ ҡапланы...

Шулай итеп, Йыһандың бөйөк ҡанундарына ярашлы, ысынбарлыҡ ҡапма-ҡаршылыҡлы ике остан, ике яҡтан яралтылған.

Аллаһы Тәғәлә – берҙән-бер барлыҡҡа килтереүсе, һәм ул *яҡшылыҡ* менән *яуызлыҡты* бар ҡылған. Яуызлыҡтың булыуы ни тиклем яҡшылыҡ ҡиммәт икәнен күрһәтә. Донъялыҡта шуға күрә ваҡыты-ваҡыты менән уның тиҫкәре, кире яғы еңеп китеүе тәбиғи хәл. Был осраҡта карма законының береһе буйынса, ҡара көстәр бер-береһенә тартылып, ойошоп, күплекте тәшкил итә һәм, әлбиттә, ыңғай сифаттарға эйә яҡты, аҙ һанлы ҡалыуынан файҙаланып, [illegible]п, еңеп китә. Был ҡанунды яҡшы белгән яуыз ниәтле [illegible] Ҡәһҡәһә, Зәрҡум, Әзрәҡәләр хәйлә менән үҙҙәрен[illegible] ына кеше затлы булыуына ҡарамаҫтан, бөтә кире си[illegible]рға эйә Шүлгәнде ауҙарып ала ла инде. Әммә улар бер[illegible]әне күҙ уңынан ысҡындыралар:

«Алланың күктәрҙә [illegible]л Ерҙә булғандарҙы белеп торғанын күрмәйһеңме ни һин? [illegible]с кеше араһында йәшерен һөйләшеү булһа, дүртенсеһе – Ул, биш кеше араһында булһа, алтынсыһы – Ул. Бынан аҙыраҡ йәки күберәк булғанда ла, улар ҡайҙа булһалар ҙа – Ул улар менән бергә. Бының һуңында, ҡиәмәт көнөндә, Ул уларға нимә эшләгәндәрен хәбәр итер. Алла һәр нәмәне белә!» [«Әл-Мүджәдәлә» («Һүҙ көрәштереү») сүрәһе, 58:7].

Шүлгән ҡомһоҙлоғо, көнсөллөгө арҡаһында аҫтыртын башланған хөсөтлөгөн кешелекте ҡотҡарыу өсөн көрәшкә сыҡҡан үҙ туғаны Уралға ҡаршы асыҡтан-асыҡ көрәш-һуғышҡа тиклем килтереп еткерә. Эпоста һүрәтләнгән изгелеккә ҡаршы яуызлыҡтың көрәше кешелеккә биреләсәк һуңғы донъяуи дин өсөн төшөрөлгән Изге китапта ла осраясаҡ:

«Һәм Беҙ рәсүлдәрҙе өгөтләүсе-иҫкәртеүсе һәм һөйөнсөләүсе итеп кенә ебәрәбеҙ. Иман килтермәгән кешеләр ялғанлыҡ менән бәхәсләшәләр, уның менән хаҡлыҡты юҡҡа сығарыр өсөн. Һәм улар Беҙҙең аяттарыбыҙҙы һәм уларҙы өгөтләгән нәмәне мыҫҡыллайҙар» [«Әл-Кәһф» («Мәмерйә») сүрәһе, 18:56].

Эпостағы хәл-ваҡиғалар эсендә ҡайнаусыларҙың ошо ҡапма-ҡаршы яҡтың ҡайһыһын үҙ итеүе, юл сатында торғанда ҡайһыһын һайлауы – уның үҙ булмышынан, үҙ иркенән икәнлегенә асыҡтан-асыҡ миҫалдар ярылып ята. Улар – уҡығандан фәһем алырлыҡ һәләте булғандарға зиһенен зирәкләндерер ишара, һиҙемләү һәләте булмаҫтайына тере һабаҡ. Башбирмәҫ, эскерле, көнсөл, ҡомһоҙ Шүлгән ҡустыһының эштәренә күпмегенә хаслыҡ ҡылһа ла, Урал кешелек хаҡына тура юлдан ситкә тайпылмай. Бөтә замандарҙа ла кеше өсөн әһәмиәтле

буласаҡ һабаҡ бирә Шүлгән менән Урал. Тура юлдан барыу һәм аҙашыу – кешенең үҙ ихтыярында:

«Һәр кем үҙенә оҡшағанды эшләй, Раббың кемдең тура юлдараҡ икәнен яҡшыраҡ белә, – тип әйт» [«Әл-Исра» («Төндә күсереү») сүрәһе, 17:84].

Ошондай донъяуи миҫалдар нигеҙендә Ҡөрьән Кәримдең түбәндәге аяттары еңел аңлашыла:

«Уны (йәнде) сафлаған кеше уңышҡа иреште, ә уны мәкерләгән кеше уңышһыҙлыҡҡа тарыны» [«Әш-Шәмс» («Ҡояш») сүрәһе, 91:9–10].

Ә хәҙер эпостың башынан аҙағына тиклем оҙата килеүсе һыу образына күҙәтеү яһайыҡ. Ерҙең үҙе кеүек, барса тереклек өсөн йәшәү сығанағы булған **һыу – мәғлүмәт символы ла.** Уның тураһында Ҡөрьән ни ти?

Эпоста дейеүҙәр, үҙҙәре хужа булып алып, кешенән йәшереп тотҡан Йәншишмә – кешелекте рухһыҙлыҡтан ҡотолдорор тәғлимәт символы. Ундағы ғилемдең серҙәре асылып, Ер йөҙөнә таратылыр көн етеренә ишара. Бының өсөн кешелек донъяһының, ҡасандыр бер кешенән яралып, бер өммәттән булып таралыуын иҫенә төшөрөү кәрәк. *«Иҫтәренә төшөр, иҫкә төшөрөү ул иман килтергән кешеләргә файҙа итә!»* [«Әҙ-Ҙәрийәт» («Елгәреүселәр») сүрәһе, 51:55].

Уны беҙ меңйәшәр ҡарттың Уралға әйткәненән тойомлайбыҙ:

Илгә йола булырҙай,
Һынап белгән заңым бар:
Донъяла мәңге ҡалам тип,
Донъялай ғүмер һөрәм тип,
Үлемгә буй бирмәҫкә,
Уны бер заң итмәҫкә
Йәншишмәнән эсмәгеҙ,
Миндәй хурлыҡ күрмәгеҙ.

Ғилемгә бер үҙең генә эйә булған осраҡта уның тик файҙаһыҙ ғәмәл, мәғәнәһеҙ ауырлыҡ буласағын үҙ елкәһендә татып ялҡҡан кеше, үкенес кисереп, быны бүтәндәргә ҡабатламаҫҡа киҫәтә. Урал батыр, иҫкәртеүҙе йәһәт кенә төшөнөп алып, дөрөҫ ҡарарға килә:

Бар халыҡты эйәртеп,
Урал юлға сыҡҡан, ти;

Йәншишмәгә барған, ти,
Һыуын уртлап алған, ти;
Үҙе сапҡан юлына,
Дейеүҙән өйгән тауына
Һыуҙы алып һипкән, ти:
«Тау-урмандар йәшәрһен,
Мәңге үлмәҫ төҫ алһын,
Ҡошо һайрап маҡтаһын,
Халҡы йырлап хуплаһын,
Ерҙән ҡасып дошмандар
Бары күреп һоҡланһын,
Илһөйәргә ил булып,
Ер һөйөргә баҡ булып,
Дошман күҙен ҡыҙҙырып
Балҡып торор ер булһын!» –
Тигән һүҙҙе әйткән, ти.
Һыу күп һипкән еренән
Ҡарағай, шыршы үҫкән, ти,
Һыуыҡҡа төҫ ҡоймаҫлыҡ,
Эҫегә лә кипмәҫлек,
Ҡорт, мыр-маҙар төшмәҫлек,
Япрағы төрөлөп,
Беҙәнәктәй булған, ти,
Мәңге йәшел ҡалған, ти.

Йәшел төҫ – мәңгелек тереклек, хаҡ Ислам дине төҫө. Йәншишмәне уртлағанда, Урал уның һыуына үҙенең изге ниәтен, теләгең мәғлүмәт итеп һала. Бөркөлгән һыуҙы һеңдереп үҫкән һәм батырҙың исемен мәңгеләштерер Уралтауҙа киң тараласаҡ ҡарағай, шыршы шул мәғлүмәтте һаҡлаусы изге ағастар. Шул ағастарҙы һаҡлау – беҙҙең изге бурысыбыҙ түгелме ни? Бөркөп өшкөрөү – башҡорттоң дауалау маҡсатынан ҡуллана торған боронғо йолаһы. Һыу дауалаусының ауыҙында саҡта уның теләгән теләген үҙләштерә һәм бөрккән ваҡытта шул мәғлүмәтте дауаланыусыға күсерә. Был осраҡта Урал тыуған төйәгебеҙҙе киләсәк быуындар өсөн һыу менән имләгән булып сыға.

Эпостан ҡапма-ҡаршылыҡлы был фани донъяла һыуҙың да ике төрө булыуы тураһында беләбеҙ. Йәншишмәнең тере һыуына ҡаршы тӧрғон һыу – күлдең үле һыуы. Бына шул кире мәғлүмәтле һыу аша киләсәккә янаусы ҡурҡыныс афәт була-

сағы тураһында батырыбыҙ беҙҙе бик ҡаты иҫкәрткән. Уның заман ахырына бәйле киҫәтеүҙәре бик фәһемле бөгөн:

Халҡым, һеҙгә шуны әйтәм,
Уландарым, һеҙгә әйтәм:
Уйым-уйым күлдәрҙең
Барында дейеү буласаҡ,
Уҫаллығын ҡыласаҡ,
Эсегеҙгә керәсәк.
Дейеүҙәрҙең ҡоһоро
Барығыҙға тейәсәк,
Шунан барың үләсәк.
Күлдең һыуын эсмәгеҙ,
Хараплыҡҡа төшмәгеҙ,
Ҡул ҡаушырып тормағыҙ!

Был урында Урал батыр беҙгә ниндәй һыу тураһында әйтеп ҡалдырған һуң?

Күл һыуы – бер урынға йыйылған торғон һыу, йәғни үле һыу. Әлбиттә, бөгөнгө көндә матур-матур һауыттарға тултырылып, күпселек әҙәм балаларын теҙләндергән, кешелек дәрәжәһен юйҙырған араҡы, шарап, һыра кеүек эсемлектәр булыр уныһы! Аллаһы Тәғәләнең биргән тәбиғи саф һыуына мөрҡәтһенмәй, шайтан ҡотҡоһона төшкән әҙәмдәр үҙҙәре уйлап сығарған, шуға күрә кешелек бөгөнгө көндә был эсемлектәрҙән язаһын да күрә. Ә хәҙер Ҡөрьән аяттарынан ошо турала уҡыйыҡ:

«Был донъя күктән беҙ биргән һыуға оҡшай: ул һыу менән Ерҙәге үҫемлектәр ҡатнашҡан, ул үҫемлектәр менән кешеләр һәм хайуандар туҡлана. Инде Ер үҙ биҙәктәрен алып гүзәлләнгәс, унда йәшәүселәр үҙҙәрен уның өҫтөнән хакимлыҡ итәләр тип уйланылар, һәм төндә йәки көндөҙ уға Беҙҙең бойороғобоҙ килде. Беҙ уны, әйтерһең дә ул кисәнән бай булмаған кеүек итеп, урылған иттек. Уйлаған кешеләргә шулай аңлатабыҙ Беҙ аяттарҙы!

Алла тыныслыҡ йортона саҡыра һәм теләгән кешене тура юлға күндерә!

Изгелек ҡылғандарға – изгелек һәм өҫтәмә, уларҙың йөҙөн туҙан да, хурлыҡ та ҡапламаҫ. Былар – ожмах әһелдәре, улар унда мәңге ҡалыр.

Насар эштәр ҡаҙанғандарға – насар эштәренең язаһы шул эштәренә оҡшай: уларҙы хурлыҡ баҫыр, уларҙы Алланан

һис кем һаҡламаҫ! Уларҙың йөҙө ҡараңғы төндөң киҫәктәре менән ҡапланған кеүек булыр. Был кешеләр – тамуҡ киҫәүҙәре, улар унда мәңге ҡалыр» [«Йунус» («Юныс») сүрәһе, 10:24–27].

Ә бит Урал батыр күрһәткән мөғжизәләр араһында дөйөм кешелек өсөн иң әһәмиәтлеһе һәм файҙалыһы – үҙе тапҡан Йәншишмәнең тереһыуын уртлап, тамсыһын да йотмайынса, Ер йөҙөнә бөрккәне:

> ...**Ил һөйөргә** ил булып,
> **Ер һөйөргә** баҒ булып,
> Дошман күҙен ҡыҙҙырып
> Балҡып торған ер булһын!

Ошо өгөт-нәсихәт арҡылы Урал батыр, юлбашсы булараҡ, үҙе ҡотҡарған халыҡтың булмышына *ил һөйәр, ер һөйәр* тигән сифаттарҙы ла ҡушып, тереклек итер өсөн Ер-Әсәнең арҡа үҙәген тәшкил иткән был урынды инселәгән. Шуға күрә ата-бабаларыбыҙ үҙенә тәғәйенләгән Йәнтөйәкте батырҙың исеме менән атаған һәм был ерҙәрҙе ғүмер баҡый үҙ йәненән артыҡ күреп һаҡлаған:

> Күгәрепкәй ятҡан Урал тауы –
> Ата-олатайҙарҙың да төйәге.
> Ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булған
> Шунда ята батырҙар һөйәге.
> Ай, Уралым, һинән ҡырҡып алһам
> Ат ҡыуырҙай яңғыҙ талдарың,
> Тамып та ғына ҡала, ҡырҡҡан саҡта,
> Яуҙа үлгән батыр ҙа ҡандары.
> Уралдан ғына бейек, ай, тау булмаҫ,
> Уралҡайҙы һөймәҫ тә йән булмаҫ.
> Үҙ илкәйе өсөн ҡорбан булған
> Ир-егеттең ғүмере йәл булмаҫ.
> Урал да ғына Урал, ай, тиһегеҙ,
> Урал ғына буйы ҡыҙырым сауҡа икән.
> Уралҡайҙы маҡтап бер йырлаһаң,
> Күңелдәргә үҙе лә зауҡы икән.
> Яҡшы атҡа менеп, ҡулына алған
> Уҡ-һаҙаҡҡай тигән ҡоралын,

Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын.

«Урал»

Бынан да оҫтараҡ әйтеп булырмы тарихи ватаныбыҙҙың ҡәҙере тураһында? Күпме быуын ниндәй сихри көс, ниндәй аҡыл ҡеүәте менән ошо төйәкте үҙенеке итеп һаҡлап тотоуға өлгәшкән? Ҡайҙа, ҡасан, ҡайһы дәүерҙә һәм ни сәбәптән ошо илһөйәрлек сифатыбыҙҙан яҙҙыҡ һуң беҙ? Ошо йырҙың мәғәнәһенә төшөнөрлөк быуындар тәрбиәләнмәһен өсөн тыуған телдең һүҙ ҡеүәтен юғалттырыр мәкерле сәйәсәткә ниңә ҡаршы тора алмаҫ булдыҡ һуң? Үҙебеҙгә тәғәйен урын-еребеҙҙең ҡәҙерен, баһаһын онотторор гонаһлы эштәр ҡылған өсөн ғәҙел яза күргәнебеҙҙе таныйыҡсы, халҡым!

Ерҙе туйындырған йылға һыуҙарын бысратыу, ағастарын ҡырып, эсәр һыуыбыҙҙан яҙыу – барыһы ла пәйғәмбәребеҙҙең әйтеп ҡалдырған киҫәтеүҙәрен тотмауҙан!

Һәр төрлө ниғмәттәренән ҡулланып йәшәй-йәшәй, Ер-Әсәнең үҙенең дә тере һәм йәнле икәнлеген онотток, уның алдындағы изге бурыстарыбыҙҙы ла үтәмәйбеҙ бит, кешеләр!

Донъя ул бер баҡ икән,
Йән эйәһе шул бағта
Донъя быуынын һанаған,
Ҡайһы быуын аҡлаған,
Ҡайһы уны таплаған...

Ошо сәбәптән юҡҡа сыҡҡан халыҡтар рәтенә инмәҫ элек, түбәндәге аяттарҙың мәғәнәһенә төшөнәйек:

«Һәм Ул Ерҙе йән эйәләре өсөн ҡуйҙы. Уның өҫтөндә емешеләктәр һәм емешәнле хөрмә ағастары, һәм башаҡлы орлоктар һәм хуш еҫле сәскәләр» [«Әр-Рәхман» («Шәфҡәтле») сүрәһе, 55:10–12].

«Ер йөҙөн Ул төҙөкләндергәндән һуң боҙмағыҙ. Уға ҡурҡыу һәм өмөт менән доға ҡылығыҙ. Ысынлап та, Аллаһының рәхмәте изге эштәр эшләгән кешеләргә яҡын!

Яҡшы ил булһа, Раббыһының рөхсәте менән уның үҫемлектәре сығыр, насар ил булһа, уның үҫемлектәре етер-етмәҫ кенә булып ҡалыр. Шөкөр иткән халыҡтарға бына шулай аңлатабыҙ Беҙ аяттарҙы!» [«Әл-Әғраф» («Кәртәләр») сүрәһе, 7:56, 58].

«Һинең Раббың ҡалаларҙың олоһона Беҙҙең аяттарыбыҙҙы уларға уҡый торған рәсүл ебәрмәҫ борон уларҙы һәләк итеүсе булманы. Беҙ халҡы залим булған ҡалаларҙы ғына һәләк ҡылдыҡ! Һеҙгә бирелгән нәмәләр донъя тереклегенең кәрәк-яраҡтары һәм биҙәге генә. Ә Аллаһы ҡаршыһындағы нәмәләр яҡшыраҡ та һәм дауамлыраҡ та. Уйлап ҡарамаҫһығыҙмы һеҙ?» [«Әл-Ҡасас» («Хикәйә») сүрәһе, 28:59–60].

Ә батырыбыҙ бит беҙҙе ошо хәлгә ҡалдырмаҫ тыйыу-кәңәштәрен мотлаҡ үтәлһен өсөн әйткән:

Улдарым, тыңлаң, һеҙгә әйтәм,
Тыңла, илем, һиңә әйтәм:
Ир-арыҫлан булһаң да,
Батыр беләкле тыуһаң да,
Илдә йөрөп, ил күрмәй,
Тубығыңдан ҡан кисмәй,
Йөрәгең батыр булалмаҫ.
Яуызға юлдаш булмағыҙ,
Кәңәшһеҙ эш ҡылмағыҙ.

Ошо өгөт-нәсихәттәрҙе тотмай, баяғы матур-матур шешә эсендәге үле һыуҙы һеҙ башлап эскәнһегеҙ, донъяның ауырлыҡтарын ҡатын-ҡыҙ елкәһенә ауҙарып, көс-кәрҙе, ватансылыҡ тойғоһон юғалтҡанһығыҙ, ошоноң менән башҡалар алдында кешелек дәрәжәгеҙҙе төшөргәнһегеҙ түгелме һуң, Урал батыр тоҡомдары!

Ҡорт балы балынан һәм ҡымыҙҙан ғына гәйрәтләнгән батырҙарыбыҙ һаҡлап килмәгәнме ни милләттең көсөн?!

Ҡортсолоҡ, солоҡсолоҡ – ата-бабаларыбыҙҙың иң боронғо шөғөлдәренең береһе булыуына ла танытма бар ҡобайырҙа. Һомайҙың буй-һынын, ҡиәфәтен һүрәтләгән юлдарҙа ул:

Аның усма шәлкемдәй,
Енсегене ҡапларҙай,
Кәйтәндәр мән биҙәлгән
Сәс толомо һалынған;
Оҙон керпеге үтә
Ҡара күҙе текәлгән;
Уйнап торған ҡыйғас ҡаш
Күҙ өҫтөндә йылмайған;
Тертәйешкән ҡалҡыу түш

Күҙ алдында тулҡынған;
Бал кортондай[1] нәҙек бил
Борғаланып уйнаған;
Гүйә, күптәнге таныш ы,
Көмөштәй саф тауышлы;
Уйнап-көлөп һүҙ ҡушҡан
Бер ҡыҙ күргәс, Урал да
Ни әйтергә белмәгән;
Үҙе күргән – Һомай, тип
Уйына ла алмаған.

Солоҡсолоҡ һөнәренең Көньяҡ Уралда, Бөрйән районындағы Шүлгәнташ ҡурсаулығында һаҡланыуы быға бер дәлил булһа, ике атаманың да санскрит һүҙлегендә осрауы – икенсе дәлил. Эпостағы Күк ҡыҙының сибәрлеген, һомғоллоғон бал ҡорто менән сағыштырып һүрәтләү бер ҙә тиген түгел. *Бал ҡорто* һәм *башҡорт* этнонимының бер тамырҙан булыуы уҡ – уларҙың Ер йөҙөндә кешелек донъяһы барлыҡҡа килеү осоро менән бәйле булыуынан! Аллаһы Тәғәлә кешене донъяға яралтҡанда уҡ был бөжәкте кешегә хеҙмәт итергә тәғәйенләгән:

«Алла бал ҡортона вәхи ҡылды, төшөндөрҙө: «Тауҙа, ағаста[2]*, улар һалған биналарҙа*[3] *оя яһа, шунан төрлө емеш менән туҡланып, тыйнаҡ ҡына Раббыңдың юлынан йөрө! – тине. Уларҙың эсенән төрлө төҫтәге* **шифалы эсемлек**[4] *сыға. Ысынлап та, уйлаған кешегә бында аят бар».* [«Эн-Нәхл», («Бал ҡорттары» сүрәһе), 16:68–69]

Пәйғәмбәрҙең әйтеүе буйынса, баллы булған һәр өйҙө фәрештәләр үҙҙәре һаҡлап торалар икән. Был ризыҡты тәғәмләгән кешенең эсенә мең төрлө дауа керһә, тағы ла мең тапҡырға артыҡ сир сыға, ти. Вафаты алдынан берәү бал йоторға өлгөрөп, ашҡаҙанында бал булһа, ул тамуҡ утынан ҡотола, имеш! Шуға күрә бал ризыҡтарҙың да ризығы, эсемлектәрҙең дә эсемлеге, дауаларҙың да дауаһы һаналған. Бына

---

[1] Санскрит: **Khard** — кусать, клевать, жалить.

[2] Солоҡ ағасы – ике тамырҙан яһалған һүҙ тип алайыҡ. Санскрит: ISu – выжимать, выдавливать; IISu – 1) побуждать, подстрекать; 2) обладать силой или властью; IIISu – хороший, прекрасный.

[3] Loka – 1) место; 2) край, страна; 3) простор; 4) Вселенная; 5) земля; 6) жизнь; 7) люди, народ; 8) человечество; 9) сборище, скопление чего-либо.

[4] Умарталарҙа.

ошондай дәрт-дарман, көс-ғәйрәт биреүсе бал балы, буҙа, ҡымыҙ кеүек милли эсемлектәр урынына сит-яттарҙан килгән ыу-ағыуҙарҙы ҡулланғанға беҙ матур сифаттарыбыҙҙы юғалтҡанбыҙҙыр!

Был дәһшәттең сәбәбе беҙҙең үҙебеҙҙә – бына уны аңлатыусы хаҡ һүҙ:

«Улар бүләләрме ни Раббыңдың рәхмәтен? Донъя тереклегендә кәрәк була торған нәмәләрҙе улар араһында Беҙ бүлдек, һәм бәғзеләре икенселәрен хеҙмәткә алһын өсөн береһенең дәрәжәһен икенсеһенән юғары ҡылдыҡ. Ә Раббыңдың рәхмәте улар йыйған нәмәгә ҡарағанда яҡшыраҡ!» [«Әз-Зухруф» («Биҙәктәр») сүрәһе, 43:32].

Ата-бабаларыбыҙ һаҡлап килеп, беҙгә аманат итеп тапшырған тыуған еребеҙҙең байлыҡтарына бөгөн үҙебеҙ хужа була алмауҙың сәбәбе ошо аятта асыҡлана:

«Донъя тереклеген генә теләп, Беҙҙе иҫкә алыуҙан баш тартҡан кешеләрҙән йөҙ сөйөр һин!

Ваҡ-төйәк кәмселектәрҙән башҡа оло гонаһтарҙан һәм фәхишәлектән һаҡланыусыларға, ысынлап та, Раббыңдың ярлыҡауы киң. Ул һеҙҙе ерҙән яралтҡанда ла һәм әсәләрегеҙ ҡарынында яралғы булған сағығыҙҙа ла һеҙҙе иң яҡшы белеүсе ине. Үҙегеҙҙе үҙегеҙ маҡтамағыҙ. Ул кемдең тәҡүәле икәнен яҡшыраҡ белә» [«Ән-Нәджм» («Йондоҙ») сүрәһе, 53:29, 32].

Ауыр хәлдән сығыу юлы булған ғәйебеңде таныуҙан башлана! Аҡланырға сәбәп эҙләп, яңылышты танымай үрһәләнмәгәндәргә һәр саҡ боҙоҡто төҙәтергә мөмкинселек бирелә. Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында тәүбәгә килеү осрағында – «хәлдәрҙе ауыштырыусы Улдыр». Ошо ерҙең ҡотон, бәрәкәтен һаҡлау – һәр беребеҙгә төбәп ҡалдырылған васыят икәнен иҫебеҙҙән, аңыбыҙҙан юйырға хаҡыбыҙ юҡ:

Уландарым, һеҙгә әйтәм:
Мин әрсегән ерҙәрҙә
Кешегә байман табығыҙ;
Яуҙа булһа, баш булып,
Кешегә ил ҡороғоҙ;
Данлы батыр булығыҙ!

Ете ҡат ерҙе, ете ҡат күкте, тау-урмандарҙы, йылға-күлдәрҙе һаҡлашыуҙа ярҙам һорап, Урал батырыбыҙ рухына йышы-

раҡ бөтә ғәм менән доғалар бағышлаһаҡ, иншалла, донъябыҙҙың яҡшыға үҙгәреүенә үҙебеҙ ҙә сәбәп ҡылыр инек! Был осраҡта «кҮмәкләгән – яу ҡайтарған» тигән аҡыллы һүҙ шуны раҫлай. Ә был кимәлгә үҙ-ара ойошҡанлыҡ, берҙәмлек менән генә өлгәшеп була. Эпостың йөкмәткеһендә ярылып ятҡан **кеше-ара мөнәсәбәттәрҙе көйлә тотоу** зарураты көн ҡаҙағында торор иң киҫкен хәл буласағын да аныҡ күҙаллағанға күрә, батырыбыҙ өгөт-нәсихәтен киләсәккә төбәп, фәҡәт беҙгә өндәшә:

Олоно оло итегеҙ, –
Кәңәш алып йөрөгөҙ;
Кесене кесе итегеҙ, –
Кәңәш биреп йөрөгөҙ.
Күҙенә сүп төшөрҙәй,
Күҙһеҙ булып ҡалырҙай
Еҫерҙәрҙең алдында
Күҙенә керпек булығыҙ!

Барса ошо яуаплы бурыстарҙың маҡсатлы рәүештә фәҡәт ир-ат иңенә һалынғанлығына иғтибар итмәй буламы һуң был мөрәжәғәттәрҙә, атайҙар, ағайҙар, уландар? Кеше-ара мөнәсәбәттәрҙең һәр замандарҙа ла киҫкен торасағын күҙаллағанға күрә, Урал батыр ошо ябай ғына талаптарҙы үтәргә саҡырған. Был хәл Аллаһынан алыҫлашҡан һайын, әҙәмдең үҙ-үҙен генә яратыуынан килеп тыуар:

«Кеше, ысынлап та, ҡурҡаҡ һәм икеләнеүсән итеп яралтылды. Уға яманлыҡ ҡағылһа, ҡайғыра, яҡшылыҡ килһә, һаранлана, намаҙ уҡығандарҙан башҡа» [«Әл-Мәғәриҙж» («Баҫҡыстар») сүрәһе, 59:19–22].

«Уларҙың үҙ араларындағы ғәйрәттәре көслө һәм һин уларҙы көслө тип уйлайһың, ә уларҙың йөрәктәре айырым. Был – улар аңламай торған халыҡ булғанлыҡтан!» [«Әл-Хәшр» («Ҡыуып сығарыу») сүрәһе, 59:14].

Уралдың өгөт-нәсихәтенә кеше-ара мөнәсәбәттәрҙе көйләүгә саҡырыусы түбәндәге аяттар ҙа бик тап килә:

«Әгәр иман килтергән кешеләрҙән ике төркөм һуғышһа, уларҙың араларын килештерегеҙ, әгәр береһе икенсеһенә йәберләүсе булһа, ул Аллаһының бойороғона буйһонғанға тиклем йәберләүсе менән һуғышығыҙ. Әгәр ул Аллаһының бойороғона буйһонһа, ғәҙел рәүештә уларҙың араһын дөрөҫ хөкөм менән килештерегеҙ. Аллаһы, ысынлап та, ғәҙелдәрҙе ярата! Иман

килтергән кешеләр, ысынлап та, туғандар, ике туғанығыҙҙы ла килештерегеҙ һәм Аллаһынан ҡурҡығыҙ, – бәлки ғәфү ителерһегеҙ. Эй һеҙ, Иман килтергән кешеләр! Бер халыҡ икенсе халыҡты мәсхәрә итмәһен, ихтимал, тегеләр быларҙан яҡшыраҡтыр, ихтимал, ул ҡатындар быларҙан яҡшыраҡтыр. Үҙ-үҙегеҙҙе хурламағыҙ, ҡушамат исем аташмағыҙ, ә иман килтергәндән һуң «боҙоҡлоҡ» исеме бик насар бит. Һәм тәүбә ҡылмаған кешеләр – залимдар.

Эй һеҙ, Иман килтергән кешеләр! Күп уйҙарҙан һаҡланығыҙ, сөнки ҡайһы бер уйҙар гонаһ, һәм шымсылыҡ ҡылмағыҙ, һәм бәғзеләрегеҙ икенселәрегеҙ тураһында күҙ артында ғәйбәт һөйләмәһен. Һеҙҙең берәрегеҙ үлгән ҡәрҙәшенең итен ашарға теләрме ни, һеҙ унан ерәнәһегеҙ бит. Аллаһынан ҡурҡығыҙ, Аллаһы, ысынлап та, тәүбәләрҙе ҡабул итә, рәхимле!

Ул һине етем хәлдә табып, һыйыныр урын бирмәнеме ни? Ул һине аҙашҡан хәлдә тапты һәм тура юлға һалды. Ул һине ярлы хәлдә тапты һәм байытты.

Һәм һин етемде йәберләмә, һәм теләнсене ҡыуып ебәрмә» [«Ад-Духа» («Иртә») сүрәһе, 93:6–10].

«Бәлки һеҙ үҙегеҙ етемде хөрмәт итмәйһегеҙ, һәм ярлыны туйҙырырға өндәмәйһегеҙ. Һәм мираҫты ашап бөтөрәһегеҙ, һәм байлыҡты сиктән тыш яратаһығыҙ» [«Әл-Фәджр» («Таң») сүрәһе, 89:17–20].

Бер туған ағаһының үҙенә ҡылған хаслыҡтарын өс тапҡыр кисереүе, ул ғына ла түгел, шул хаталарын төҙәтергә булышлыҡ итеүе – Уралдың миһырбанлыҡта, хуш күңеллелектә ысын өлгө күрһәтеүе. Быны менән ул ҡан-ҡәрҙәшлек ептәрен өҙмәүҙе, ата-әсәне хөрмәтләүҙе үҙе өсөн ни тиклем яуаплы икәнен күрһәтә:

Атамдың хаҡы өсөн,
Әсәмдең хәтере өсөн,
Тағы ла бер һынайым,
Теләгеңде бирәйем.

Уралдың әлеге ҡылығы ла уның Аллаһы Тәғәләнең яратҡан бәндәһе, Ерҙәге илсеһе булыуына бер миҫал:

«Эй һеҙ, иман килтергән кешеләр! Ҡатындарығыҙ һәм балаларығыҙ араһында, ысынлап та, дошмандарығыҙ бар, уларҙан һаҡланығыҙ! Әммә ғәфү итһәгеҙ, асыҡ йөҙлө булһағыҙ, һәм кисерһәгеҙ, ул саҡта Аллаһы – ярлыҡаусы, шәфҡәт-

ле! Һеҙҙең малдарығыҙ һәм балаларығыҙ – фетнә-һынау ғына. Ә Аллаһы ҡаршыһында оло әжер» [«Әт-Тәғабун» («Үҙ-ара алдашыу») сүрәһе, 64:14–15].

Шулай итеп, был донъяға килеүебеҙ өсөн ата-әсәгә бурыслы икәнебеҙҙе белеү генә аҙ. Шул бурысты үтәүҙең әһәмиәте бөтә замандарҙа ла бөтә халыҡтар өсөн дә берҙәй булырына эпоста ла, Изге китапта ла киҫәтеүҙәр бер төрлө. Доға ҡабатлаған һайын яңыра:

«Раббым, миңә һәм минең ата-әсәмә Һинең күрһәткән ниғмәтең өсөн шөкөр итеүҙе һәм Һин риза булған изгелекте ҡылыуҙы күңелемә һал, минең өсөн тоҡомомдо төҙөк ҡыл. Мин Һиңә ҡайттым, һәм мин, ысынлап та, мосолмандарҙан» [«Әл-Әхҡаф» («Ҡомдар») сүрәһе, 46:15].

Өсөнсө тапҡыр ғәфү ителеп тә, тәүбәгә килмәгән Шүлгән, ниһайәт, туғаны Урал батыр тарафынан язаһын таба — уның тарафынан йотола. Уралтауҙың ҡуйынында төпһөҙ күле булған Шүлгән мәмерйәһе хасил булыуы — эпостың буш ерлектә уйлап сығарылмауына туранан-тура дәлил. Ҡат-ҡат һыналғандан һуң да ипкә килмәгән бәндәгә яза ҡулланыу — Изге китаптарҙа ҡабул ителгән бер алым, сара:

«Ә кемгә йәберләү ҡағылһа, улар үҙҙәрен яҡлайҙар. Һәм яуызлыҡтың түләүе – шул яуызлыҡ кеүек яуызлыҡ. Әгәр берәй кеше ғәфү итһә һәм килешһә, уның әжере Аллаһы ҡаршыһында. Сөнки Аллаһы залимдарҙы яратмай! Әгәр берәй кеше йәберләнгәндән һуң үҙен яҡлаһа, уға ҡаршы юл (шелтә) юҡ. Кешеләргә золом ҡылыусыларға, наҡаҡҡа Ер йөҙөндә яуызлыҡ эшләүселәргә генә ҡаршы юл – улар өсөн интектергес ғазап! Әммә берәү сабырлы булһа һәм кисерһә, ысынлап та, был эштәрҙә ҡыйыу булыуҙан» [«Әш-Шура» («Кәңәш») сүрәһе, 43:39–43].

Эпоста туған-ара мөнәсәбәттең киҫкенләшеүе Шүлгән тарафынан ахырғы сиккә барып еткәс, Ҡөрьән Кәримдә Уралдың да ғәҙел сара табыу осрағына оҡшаш аяттар бар икән:

«Һин уларға дөрөҫ итеп Әҙәмдең ике улы хаҡындағы хәбәрҙе уҡы. Улар икеһе лә ҡорбан салған. Шул ҡорбан береһенән ҡабул ителгән, икенсеһенән ҡабул ителмәгән. Икенсеһе: «Үлтерәм мин һине!» – тигән. Тегеһенеһе: «Аллаһы тәҡүәлеләрҙән генә (ҡорбан) ҡабул итә. Һин үлтермәк булып, миңә ҡул һуҙһаң да, мин һиңә ҡул һуҙмам. Мин бит ғаләм Раббыһы Аллаһынан ҡурҡам. Миңә ҡарата ҡылған гонаһыңды ла, үҙ гонаһыңды ла бергә йыйып, тамуҡҡа төшөүеңде теләйем

мин. Залимдарҙың язаһы – шул», – тигән» [«Әл-Маидә» («Аш табыны») сүрәһе: 5:27–29].

Ташөң (Шүлгәнташ мәмерйәһенең икенсе исеме) алдында бер юлы тере һыу ағыҙып сығарыусы Зәңгәр күл һәм торғон һыулы Үле күл барлығы – тағы ла бер мөғжизәүи күренеш! Улар ҙа Урал менән Шүлгәндең ысынбарлыҡҡа тап килеүенә шаһиттар.

Хәҙер Уралдың үлеме алдынан әйткән бәхилләшеү һүҙенең айышына төшөнәйек:

Дейеүҙәргә яу асып,
Диңгеҙҙе дейеүҙән әрсеп,
Ерҙә торлаҡ табыштым,
Кешеләрҙе яуыздан
Ҡотҡарырға тырыштым...

Ни өсөн ошо юлдарҙан батырҙың үкенес кисереүе төҫмөрләнә? Билдәле булыуынса, төрлө дәүерҙәрҙә кешелекте, уның кеүек, һәләкәттән ҡотҡарырға килеүселәр күп буласаҡ. Әммә эш ниҙә һуң? Ни өсөн бер үк хәл-ваҡиғалар ҡабатлана тора? Изге китапта был һорауға яуап бар:

«Әгәр Беҙ теләһәк, һәр бер йәнгә тура юлын бирер инек. Әммә Минең: «Тамуҡты бергә ендәр һәм кешеләр менән тултырырмын!» – тигән һүҙем раҫ булды бит. Үҙегеҙҙең ошо көнгә осраясағығыҙҙы онотҡанығыҙ өсөн [ғазапты] татығыҙ! Беҙ һеҙҙе онотток. Һәм ҡылған эшегеҙгә күрә мәңгелек ғазап татығыҙ инде!» [«Әс-Сәждәһ» («Сәждә») сүрәһе, 32:13–14].

«Әллә Беҙ уға яһамағанмы ике күҙ, тел менән ике ирен? Беҙ уға ике юлды күрһәттек. Ә ул бер ҙә текәгә тырышып ынтылманы» [«Әл-Бәләд» («Ҡала») сүрәһе, 90:10–11].

Әлбиттә, Уралдың барса кешелеккә бағышланған һуңғы мөрәжәғәтендәге үкенес кисереүенән беҙгә шуны аңларға кәрәк: **һәр әҙәм үҙе түбәнгә тәгәрәүҙән ҡотолоуҙы һәм бейек бөйөклөккә үрләүҙе теләргә тейеш!** Был ниәтте тормошҡа ашырыр **юл бер генә**. Урал атабыҙ шуны беҙгә васыят иткән:

Күккә лә осор – яҡшылыҡ,
Һыуға ла батмаҫ – яҡшылыҡ,
Утта ла янмаҫ – яҡшылыҡ,
Телдән төшмәҫ – яҡшылыҡ.

Был юлдарҙан тағы ла бер ҡат боронғо тәғлимәт – йоганың талабын иҫкә төшөрәйек (һәр беребеҙ, аңдың ҡайһы чакрала тупланыуына ҡарап, үҫеш баҫҡысында төрлө кимәлдәбеҙ: һыу – свадистана, ут – манипура, күк-һауа – анахата, тел – вишудда кимәле). Әммә барыбыҙ өсөн дә кешелек йәмғиәтендә үҙебеҙҙе башҡалар менән яраштырыр һәм шул нигеҙҙә донъяны бер самала көйләп тотор төп шарт – тәүҙә *үҙеңдән башҡаға яҡшылыҡ ҡылыу*. Фәҡәт ошо идея менән генә тарҡаулыҡтан арынып, берләшер бер милләт вәкилдәре, ә унан һуң донъяуи халыҡтар. Шунан һуң ғына яуап көнөндә яҡты булыр йөҙөбөҙ:

«Һәр кемдең тотҡан йүнәлеше бар. ***Изге эш менән бер-берегеҙҙе уҙырға тырышығыҙ.*** *Ҡайҙа ғына булһағыҙ ҙа, Аллаһы һеҙҙең барығыҙҙы ла (ҡаршыһына) килтерер»* [«Әл-Бәҡара» («Һыйыр») сүрәһе, 2:148].

«Һис кемде, һис бер нәмәне үҙенә тиңдәш тотмаған хәлдә Аллаһҡа ғына ғибәҙәттә булығыҙ. Ата-әсәләрегеҙгә, ҡәрҙәштәрегеҙгә, етемдәргә, фәҡир-меҫкендәргә, ҡәрҙәштәрегеҙҙән булған, йәки ҡәрҙәштәрегеҙҙән булмаған күршеләрегеҙгә, сәфәрҙә бергә йөрөгән юлдаштарығыҙға, мосафирҙарға, үҙегеҙгә буйһонған ҡолдарығыҙға ҡарата игелекле булығыҙ. Тәкәбберләнеп, осоноп һәм шапырынып йөрөгәндәрҙе Аллаһ һөймәй» [«Ән-Ниса» («Ҡатындар») сүрәһе, 4:36].

Шулай итеп, рухи мираҫыбыҙ «Урал батыр» эпосты кеше-ара мөнәсәбәттәрҙең бөтә төрҙәрен (ир-ҡатын, ата-бала, әсә-бала, туған-ара, халыҡ-ара) һүрәтләү менән генә сикләнмәгән, ә кешенең үҙ-үҙен тотошо өлгөһөн дә беҙгә ҡалдырған! Үҙ заманында бәндәләрҙе яҡшылыҡҡа өйрәтер өсөн ебәрелгән Урал батырҙың өлгөлө тәртибе һәм беҙгә төбәлгән өгөт-нәсихәттәре донъяуи диндәрҙең талаптары менән тап килә, сөнки изге белемдәрҙең сығанағы уртаҡ.

Дин менән нәфрәт бер ваҡытта ла бергә була алмай. Аллаһтан ҡурҡа белгән пак күңелдә гонаһтың да, уҫаллыҡтың да, күралмаусанлыҡ менән көнсөллөк тигән нәмәләрҙең дә булыуы мөмкин түгел. Күңелдә көнсөллөк тыуа ҡалһа ла, ике төрлө кешегә генә көнләшеп ҡарарға мөмкин: береһе – Аллаһ биргән малдан фәҡирҙәргә һәм мохтаждарға өлөш сығарып торған кеше, икенсеһе – алған ғилеме менән хөкөм йөрөтә белгән һәм бәндәләргә ғилем өйрәтә белгән кеше. «Ҡиәмәт көнөндә иң бәхетһеҙ кеше – донъяла ваҡытта үҙенең теленән дә, ҡулҡонан да кешеләр ҡурҡып торған бәндә».

«Бер ваҡыт пәйғәмбәребеҙ алдында ике кеше ыҙғыш ҡуптара. Ике аралағы был ыҙғыш тына төшкәс тә әле берећенең йөҙөндә асыу эҙҙәре бөтмәгәнен күргән пәйғәмбәр:

– Мин, – ти, – уҡыған сақта асыуҙы ла, үпкәләшеү кеүек нәмәләрҙе тиҙ генә бөтөрә торған һүҙҙәр беләм. Улар «Әғүҙү билләһи минәш-шайтанир-ражим!» тигән һүҙҙәр! – ти. – Асыу шайтандан килә, ә шайтан уттан яралтылған. Утты һыу менән генә һүндереп була. Һеҙҙең арағыҙҙан кемдер берәү асыулана башлаһа, ситкәрәк китеп тәһәрәт алһын, – тигән ул».

Бәндәләр кемдәргәлер бирергә тейешле бурыстары хаҡында ла онота күрмәһен, кеше хаҡына ингән булһа, уларҙы түләһен. Ғаиләһе, ҡәрҙәштәре, күршеләре, дуҫ-иштәре, таныш-белештәре, донъя көткәндә аралашып йәшәгән башҡа бик күптәр менән ике арала булған төрлө хәл-әхүәлдәрҙе яйға һалып, үткән ғүмерҙәрҙә ҡалған хәтерҙәрҙе төҙәтеүгә юл ярып өлгөргән әҙәм Аллаһтың мәрхәмәтенә өмөт итә ала, – тип өйрәтә Ислам әҙәбе.

Үрҙә килтерелгән дәлилдәр нигеҙендә шундай һығымтаға килергә була: бөтә диндәрҙең маҡсаты бер – тормошто һәм кешелекте тәрбиә, тәртип ҡыҫаларында тотоу, игелек нигеҙендә ҡоролған әхлаҡи ҡиммәттәрҙең йәшәүсәнлеген тәьмин итеү. Төрлө дин әһелдәрен ҡара-ҡаршы ултырып һөйләшә, аңлаша белергә өйрәтә, татыулыҡҡа, теләктәшлеккә, кешелек донъяһында боронғоларҙан-боронғо һаналыусы эпос бер-береңде хөрмәт итергә саҡыра.

2.7. Халыҡ әйтһә, хата әйтмәҫ, хаҡ әйтер

Ҡулдаш булыр илемдә
Батыр ирҙәр бар ине,
Шулар ҡәҙерен белмәнем.
Батырлыҡҡа маһайып,
Кәңәш ҡороп торманым,
Яңғыҙ башым уйланым...

«Урал батыр»

Батырҙың ошо тәүбәһе – шәхес менән халыҡ, кеше менән йәмғиәт араһындағы хәл-ваҡиғаларҙа үҙ-ара бәйләнештең әһәмиәтен иҫәпкә алыу йәһәтенән бик мөһим һабаҡ.

Был һүҙҙәрҙә ул «күмәктән айырылыу – яңылыш юл» икәнен асыҡ күрһәтә. Уның тәғлиматенең нигеҙендә халыҡ менән шәхес араһында, кеше-ара мөнәсәбәттәрҙә берҙәмлек, ойошҡанлыҡ, татыулыҡ идеяһы ята. Халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадында был идея быуаттар буйы үҫтерелә килгән.

Эпоста һүрәтләнгән кеше-ара мөнәсәбәттәрҙе ике төркөмгә бүлергә мөмкин: ҡан-ҡәрҙәшлек нигеҙенә бәйләләре һәм үҙ-ара танышлыҡҡа, йәғни бер-береңде таныш-белеүгә ҡоролғандары. Уларҙың икеһенең дә эсендә ыңғай, тимәк, яҡшыға көйләнгәндәре, шул уҡ ваҡытта кире, йәғни бер-береңә насар ҡарашта булыу ихтималлығы ла асыҡ бирелә. Уралдың ошо мөрәжәғәтендә күмәкте – *ҡулдаш булыр ил* тип атауы бик мәғәнәле һүҙбәйләнеш. Телебеҙҙәге ошоға ауаздаш кеше-ара мөнәсәбәттәрҙе атаусы терминдарҙың тормошта күҙәтелгән һәр осраҡҡа ҡарата ҡулланылышы, уларҙың күп төрлөлөгө – айырым бер фәлсәфәүи күренеш.

Тәүҙә туған-ара мөнәсәбәттәрҙең төрҙәрен барлап ҡарайыҡ. Уларының иң яҡын бәйләнешлеләренә ата-әсә һәм бала мөнәсәбәттәре керә, йәғни аталы-уллы, аталы-ҡыҙлы, әсәле-ҡыҙлы, әсәле-уллы булыу осраҡтары. Ә шуларҙың араһында әсә кешенең балаһына ҡарата мөнәсәбәте – тормоштоң иң ҡаты һынауҙарына ла бирешмәҫе. Был турала халыҡ ижадындағы бихисап өлгөләр тормошсанлығы менән мәңгелек:

Ҡаҙ бәпкәләре һары икән,
Теҙелеп кенә һыуҙан ҡайта икән.
Йөрәк башҡайына һары һалған
Йөрәк ярып сыҡҡан бала икән.
Әүеш кенә күлен йәмләндергән —
Ҡара ла ҡаҙҙың һары бәпкәһе.
Кем балаһы өсөн кем һарғайһын?
Ҡайғыра ла тапҡан әнкәһе.

«Әүеш»

Унан һуңғы *апалы-һеңлеле, ағалы-ҡустылы, ағалы-һеңлеле, апалы-ҡустылы* кимәлендәгеләренә халыҡ телендә бик мәғәнәле *имсәктәш, ҡарындаш/ҡәрендәш*[72] тигән һүҙҙәр ҡулланыла. Кеше-ара мөнәсәбәттәрҙең был төрҙәре тормош тирмәнендә тартылып, иләгендә иләнеп ныгына, үҙ-ара өҙөлмәҫ

[72] Санскрит: **karya-karana** – особая причина, причина-следствие.

сылбырҙарға бәйләнә. Ағас тамырҙары ергә беркелеп үҫешкән кеүек, шәжәрә тамырҙары ла тарала, быуаттар буйына ҡеүәтле туғанлыҡ нигеҙендә *ҡәрҙәш*[73], *нәҫелдәш* бәйләнештәре барлыҡҡа килә. Төрлө ырыуҙар үҙ-ара ҡатнашып, егет – ҡыҙ, кейәү – кәләш, ир – ҡатын, ҡайны (ҡәйнә) – килен, ҡайны (ҡәйнә) – кейәү, ҡоҙа – ҡоҙағый, еҙнә – ҡәйнеш, еңгә – бикәс, еҙнә – балдыҙ, еңгә – ҡәйнеш кеүек төрҙәре лә барлыҡҡа килә. Ошоларға өҫтәп, үгәй ата-әсә һәм бала араһындағы бәйләнеште лә иҫкә алырға тура килә, сөнки был бөтә замандарҙа ла булған күренеш. Ғаилә-ара, ырыу-ара мөнәсәбәттәрҙең ҡылдай нескәлектән арҡандай ныҡ рәүешкә әйләнеүе фарыз. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, уларҙың төрлө сәбәптәр арҡаһында таралып китеүе, шаурап тирелеүе лә мөмкин:

Ҡарағасҡай тауҙың көн битенән, туғанай, йөрәккәйгенәм,
Ҡар һыуҙары аға күпереп.
Туғанды ла туған үлтерә икән, туғанай, йөрәккәйгенәм,
Эт үлтергән кеүек үкереп.

«Шоғайып», «Туғанай»

Был ерҙә йөрәк һүҙен ҡушып ебәреү кешелек донъяһына тап килгән анахата (йөрәк) кимәле менән бәйле хәл-ваҡиғаның хайуандар донъяһына оҡшашлығы күҙ уңында тотола.

Бындай осраҡта халыҡ аҡылы быуаттар буйы *ҡәрҙәштәр, нәҫелдәштәр* тураһында бихисап күп мәҡәл-әйтемдәр һәм тапҡыр һүҙҙәр аша киҫәтеүҙәр йыйнаған:

Ҡәрҙәш:

Ата-инәһен һөймәгән ҡыҙ яман, *ҡәрҙәш*-ҡәүемен һөймәгән ул яман;
Баш *ҡәрҙәш* булһа ла, мал *ҡәрҙәш* түгел;
Дуҫ – иш менән, *ҡәрҙәш* – ырыу менән;
Ете ауылда ете *ҡәрҙәшең* булһын;
Кәзәнең – маллығы, бажаның – *ҡәрҙәшлеге*;
Ҡан *ҡәрҙәште* мал ҡәрҙәше айырған;

Ҡәрендәш:

Ауырыу – аштан, дау – *ҡәрендәштән*,
Таҙ – таныштан, ҡутыр – ҡамыштан;
Ашап-эскәндә дуҫ яҡшы, ҡанлы көндә *ҡәрендәш* яҡшы;
Ҡатын ҡәрендәш ҡаҙан янында, ир *ҡәрендәш* ишек төбөндә;

---

[73] Ҡар-/кәр-, ҡор-/көр-, ҡур-/күр- тамырлы һүҙҙәр тураһында бүлекте ҡара.

Ҡәрендәшең юҡ булһа, далала ҡалыр яңғыҙ баш;
Ҡәҙер белмәгән *кәрендәштән* ҡәҙер белгән эт яҡшы;
Ҡәрендәшең үлһә лә, ҡәҙерләүсең үлмәһен;
Ҡәрендәштең байы яҡшы, ҡатындың һауы яҡшы;
Йән *ҡәрендәште* мал *ҡәрендәш* айырған;
Тауҙа булыр тарғыл таш, тарыҡһаң, сыға күҙҙән йәш;
Тар ҡултыҡтан уҡ тейһә, тартып алыр *ҡәрендәш*;
Яҙ ҡышынан билдәле, ҡыҙ – *ҡәрендәшенән*;
Яҡын дуҫ йыраҡ *ҡәрендәштән* яҡшыраҡ;
Яулы көндә ят яҡшы, ҡанлы көндә *ҡәрендәш* яҡшы.

Был мәҡәл-әйтемдәрҙән күреүебеҙсә, туған-ара мөнәсәбәттәрҙә киҫкенләшеү осраҡтары булыуына ҡарамаҫтан, ҡан-ҡәрҙәшлек ептәренең өҙөлөүе хупланмай. Юҡҡамы ни, башҡорттоң үҙ нәҫелдәштәрен ете быуынына тиклем мотлаҡ белергә тейеш булыуы йола, ҡанун рәүешендә үтәлгән һәм халыҡты туплау, бер бөтөнгә ойоштороуҙа төп шарт булып быуындан быуынға күсә килгән. Халыҡ был идеяны йырға һалып, быуындан быуынға күсергән:

Бәләкәй генә бүртә аҡрын юрта,
Йыраҡ еркәйҙәргә лә тиҙ етә.
Ашаған да бөтә, кейгән үк туҙа,
Татыулыҡҡайҙарға ни етә?

«Мәжлес» йырҙарынан

Йога күҙлегенән ҡарағанда ла, ҡәрҙәшлек — карма законы буйынса бирелгән сылбыр, уны өҙөү йоланы үтәмәүгә, буйһонмауға һанала.

Ошо урында башҡорт телендә ҡулланылған туғанлыҡ терминдарының күбеһенә хас булған тағы ла бер үҙенсәлеккә, уларҙың һүҙьяһалышына иғтибар итәйек:

бабай — инәй (әбей)
олатай — өләсәй
атай (әтей) — әсәй (әней, әңкәй, инәй)
ағай — еңгәй
апай — еҙнәй
малай, бәбәй (бәпәй), тәнәй

Ошо һүҙҙәрҙең барыһына ла уртаҡ булған **-ай/-әй/-эй** компоненттарын ялғау тип айырып торһаҡ, уларҙың тамырҙа-

рына ниндәй мәғәнәүи йөкләмә һалынған? Боронғо санскрит теленән уларҙың әйтелешенә яҡын килгән һүҙҙәрҙе эҙләгәндә сер бер аҙ асылмаҫмы?

baba – ир кешегә өндәш һүҙ;

tata – ата, атай; **tata maha** – олатай; **mata maha** – өләсәй;

as – бар булыу, барлыҡҡа килеү; кемдекелер булыу, нимәгәлер сәбәпсе булыу;

agra – алдағы, тәүге; **agra-ja** – беренсе булып тыуған; ағай кеше;

angana – ҡатын-ҡыҙ, инә;

abala – ҡатын-ҡыҙ, апай кеше;

anuja – һуңыраҡ тыуған, йәшерәк; эне кеше (энекәш); һеңле кеше (һеңлекәш);

tanu – тело (1. еҫем; 2. кәүҙә, тән), лицо (бит, йөҙ; сырай, ҡиәфәт), особа (бер кеше); **tanu-ja** – сын (ул кеше, малай), **ttnu-ja** – дочь (ҡыҙ бала); **tanaya, tana** – потомство, дитя (тоҡом, нәҫел, бала);

jan – родиться, рождаться (тыуыу, барлыҡҡа килеү); **jana** – 1) человек, лицо (кеше) 2) род, поколение (ырыу, нәҫел) 3) племя (ырыу, ҡәбилә); **janaka** – 1. порождающий, производящий (тыуҙырыусы, барлыҡҡа килтереүсе) 2. 1) родитель, отец (ата, атай) 2) творец, создатель (Аллаһ); **janata** – 1) человечество, люди (кешелек, кешеләр) 2) общество (йәмғиәт). **Йәнбирҙе, Йәнбикә, йәншишмә, йәнлек, йәнкәй-йәнеш, Йәнтөйәк, йәннәт** һүҙҙәренең мәғәнәһенә тап килеп тора;

janana – 1) зарождающий 2) рождение, происхождение 3) воспроизведение, размножение 4) жизнь; **janani** – родительница, мать **(ана, инә, инәй, әней).**

Иғтибарлы булһаҡ, әлеге һаналған һүҙҙәр аша туғанлыҡ терминдарының тамырҙарына ниндәй мәғәнә һалынғанына төшөнөргә була. Ә уларға уртаҡ булған **-ай/-әй/-эй** ялғауҙарына санскритта **a'ya'** – кемгәлер яҡын килеү, етеү; эйә булыу; **a'yu** – 1. *хәрәкәтсән, тере;* 2. *йән эйәһе, кеше;* 3. *йәшәү* төшөнсәләре тап килеп тора түгелме?

Бер **ҡарын**дан тыуған, йәки бер әсә балаларына ҡарата ҡулланылған **ҡарындаш/ҡәрендәш** һүҙҙәренең дә тамырҙарын эҙләп түбәндәге асыштарға юлығаһың: ғәрәп телендәге **ҡәриб** (яҡын, ҡәрҙәш, туған), **ҡәрйә** (ауыл) һәм санскрит телендәге **kәra** (барлыҡҡа килтереүсе, яралтыусы, бар итеүсе, Аллаһ) һүҙҙәренең мәғәнәһе башҡорт телендәге **ҡарын** (ашҡаҙан;

кәүҙәнең күкрәк аҫтынан саткҡа тиклемгә өлөшө, ҡорһаҡ; аналыҡ) һүҙенең эстәлегенә яҡын килеп тора.

Халҡыбыҙ меңйыллыҡтар дәүерендә үҫешкән кеше-ара мөнәсәбәттәрҙең ***танышлыҡка*** ҡоролған икенсе төрөнә лә бик һиҙгер, иғтибарлы булған. Шуға күрә был осраҡта ла уның төрҙәре һанап бөткөһөҙ күп, тормоштоң бөтә өлкәләренә, тармаҡтарына ҡағыла. Урын, ваҡыт, шарт хәлдәре күҙ уңында тотолоп төҙөлгән был терминдарҙан айырым һүҙлек төҙөргә мөмкин. Уларҙың араһында бик боронғолары ла, һуңғараҡ барлыҡҡа килгәндәре лә бар:

Аҙаш — бер исем йөрөткән ике йәки бер нисә кеше; исемдәш;

Арҡалаш — беренә-бере терәк булырҙай кеше;

Ауаздаш (фарсы) — оҡшаш тауышлы, оҡшаш тәбиғәтле, оҡшаш йөкмәткеле;

Ауылдаш — бер ауылдан булған кешеләр;

Аһәңдәш (фарсы) — үҙ-ара ярашлы, килешле (өн-ауазға ҡарата);

Быуындаш — бер осорҙа йәшәп, йәш араһы яҡын булған кешеләр;

Ватандаш (ғәр.) — бер илдә тыуып үҫкән һәм йәшәгән кешеләр;

Ғәмдәш (ғәр.) — бөтә халыҡ эсендә берен-бере хәстәрләүсе кешеләр;

Замандаш (ғәр.) — бер тарихи осорҙа йәшәүселәр;

Зауыҡташ (ғәр.) — матурлыҡтан, күркәмлектән йәм табышып, үҙ-ара уртаҡлашыусылар;

Заңдаш (ғәр.) — башта йөрөгән уй-фекерҙе, фаразды уртаҡлашыусылар;

Диндәш (ғәр.) — бер диндә тороусылар;

Ижадташ (ғәр.) — фән һәм мәҙәниәт байлыҡтарын тыуҙырыуҙа хеҙмәттәшлек итеүселәр;

Иптәш — бер ерҙә йәки бер эштә булып, аралашып йәшәгән кешеләр; бер-береһен ипләүсе;

Иңдәш — иңде иңгә терәп, ауырлыҡты уртаҡлашыусы кеше;

Йәштәш — бер йылғы кешеләр;

Йәндәш — эске донъяһы, хис-тойғолары, кисерештәре уртаҡ кешеләр;

Йүндәш — тейешле тәртипкә, кәрәкле сифатҡа, ярашлы хәлгә килтерешеүсе;

Килендәш — бер туған ағай-эненең ҡатындары; апһын;

Класташ (рус < лат.) — бер класта белем алған, бергә уҡыған һабаҡташ;

Көндәш — күп ҡатынлы ирҙең бер ҡатыны; мөхәббәте кем менәндер уртаҡ ҡатын-ҡыҙ;

Көрәштәш — көрәштә бергә ҡатнашҡан кеше;

Ҡәберҙәш — бер ҡәберҙә ерләнеүселәр;

Ҡораҡташ — аралашып, серләшеп йәшәгән бер йәштәге бер быуын кешеләре;

Ҡоралдаш — ҡорал тотоп бергә һуғышҡан иптәш;

Ҡорҙаш — ҡатнашып йәшәгән, йәш яғынан яҡын булған замандаш кеше; бер табында, ҡорҙа булған кеше; табындаш, ултырҙаш;

Ҡулдаш — ярҙам итер, таяныр кеше; Батыр булып тыуғанһың, атаңа ҡулдаш булғанһың («Урал батыр» ҡобайыры);

Ҡәләмдәш — бер үк яҙма ижад өлкәһендә эшләгән кеше;

Милләттәш (ғәр.) — бер дәүләт, ил, милләт кешеһе;

Моңдаш — моңо, ҡайғыһы уртаҡ булған кеше йәки бер нәмә;

Мәктәптәш (ғәр.) — бер мәктәптә уҡыусылар;

Өйҙәш — бер өйҙә йәшәгән төрлө ғаилә кешеләре; үҙ иткән яҡын нәмә;

Серҙәш — уртаҡ серҙәре булып, шуны башҡаларҙан йәшереп һаҡлаусылар;

Сиктәш — сиктәре уртаҡ; эргәләш;

Синыфташ (ғәр.) — бер синыф вәкилдәре (бер-береһенә ҡарата); бер синыфта уҡыусы; класташ;

Сәхнәләш (ғәр.) — бер сәхнәлә сығыш яһаусылар (бер-береһенә ҡарата), ижадташ;

Табындаш — аш тирәләп ултырған төркөмдәге кешеләр; бер табында ултырыусылар;

Тиңдәш — йәш, эш, сифат, дәрәжә яғынан бер-береһенә бәрәбәр кеше йәки нәмәләр;

Туғандаш — дуҫлыҡ, яҡынлыҡ хисе менән бәйле, мәнфәғәттәре уртаҡ булған;

Түшәктәш — бер ҡаралдыны уртаҡлашыусы, бер түшәктә йоҡлаусы;

Урамдаш — бер урамда йәшәгән кеше;

Фекерҙәш — бер үк фекерҙе яҡлаған, уртаҡ фекерҙәге кешеләр;

Хеҙмәттәш — бер эштә эшләгән, армияла бергә хеҙмәт иткән кеше;

Һабаҡташ — бергә һабаҡ алыусы, синыфташ, класташ;

Һабандаш — бергәләшеп һабан һөргән кеше;

Ырыуҙаш — кем менәндер бер ырыуға ҡараған кеше; нәҫел, зат;

Әшнәләш (фарсы) — иптәш, дуҫ; танышлыҡҡа, туғанлыҡҡа ҡоролған мөнәсәбәттәгеләр;

Юлдаш, юлауҙаш — юлда бергә барған кеше; бер рух һәм бер теләкле кеше;

Яҡташ — бер яҡтан, бер өлкәнән булған кеше;

Яндаш — дуҫ; эргәләш ултырыусы;

Яуҙаш — яуҙа бергә ҡатнашҡан, бергә һуғышҡан кеше; фронтташ.

Үрҙә һаналған бөтә кеше-ара бәйләнештәрҙе атаусы һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә халыҡ аҡылы тарафынан бер идея һалынған: үҙ-ара тиңлеккә, татыулыҡҡа, ихтирамлылыҡҡа, ярҙамсыллыҡҡа ынтылыу. Ошо һүҙҙәр аша ғына ла һәр беребеҙ үҙ янындағыларға күңел йылыһын ҡушып мөрәжәғәт итә, уны үҙ кешеһе итеп таныуын, тиң һәм яҡын күреүен аңғарта ала. Ә бит халҡыбыҙҙа кешегә туранан-тура исеме менән өндәшеү әҙәпһеҙлек билдәһе тип кенә танылмаған, хатта тыйылған күренеш булған. Билдәле бер ваҡыт-арауыҡ эсендә бергә булырға тейеш ике йәки бер-нисә кеше араһында мөнәсәбәттәрҙең көйлө, үҙ-ара ышаныслы булыуына ифрат та ҡытлыҡ кисерелгән заманда был терминдар телмәрҙә йышыраҡ ҡулланылһа, милләт эсендәге тарҡаулыҡ, үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙәге һалҡынлыҡ, тәкәбберлек кәмер ине. Һәр кем үҙе эргәһендәгеләр өсөн хәстәрлекле, мәрхәмәтле, шәфҡәтле булһа, кешелек донъяһында уларҙы тарҡатыусы, дошманлаштырыусы хәл-ваҡиғалар үҙенән-үҙе юҡҡа сығыр ине. Бөтә осраҡтарҙа ла кешеләрҙең бер-береһенә таяныс булыуы бик мөһим.

Кеше-ара мөнәсәбәтте атаусы ошондай терминдарҙың береһе **юлдаш** — «Урал батыр» эпосында иң йыш ҡулланылғаны. Кемдең кемде юлдаш итеп һайлары персонаждар миҫалында асыҡ һүрәтләнә. Был — тормош хәҡиҡәте.

Зәрҡумдың Шүлгәнгә әйткәндәре:

...Зәрҡум тигән егетмен,
Ярҙамыңа ҡарыуға
Мин дә ярҙам итермен.
Юлымда *юлдаш* бул, тиһәң,
Юлыңа бергә китермен.

...Шүлгән быға аптырап,
Юлдашынан һорай, ти.
[*Юлдашы* булған Зәрҡум]:
— Ул күренгән ҡарасҡы —
Һарайҙы һаҡлап тороусы,
Беҙҙе күреп килеүсе
Ҙур дейеүҙең берӗһе.

...Шүлгән менән килһә лә,
Серҙәш булып йөрөһә лә,
— Һомайҙы Шүлгән алыр ҙа,
Аҡбуҙатҡа менер ҙә,
Ҡулға булат тотор ҙа,
Беҙҙән өҫтөн булыр, тип
Зәрҡум эстән көнләшкән.

Һомайҙың Шүлгәнгә әйткәне:

Үҙенә *юлдаш* һайларлыҡ,
Яҡшы юлды табарлыҡ,
Илдә даны булырлыҡ
Яңы кеше ҡалырһың,
Яҡшыға *юлдаш* булырһың,
Йыландарҙан ҡасырһың,
Аны дошман белерһең.

Уралдың Һомайға әйткәне:

Арыҫлан менеп һунарҙа
Үҙе йәнлек юлламаҫ,
Үҙ теләген табырға
Үҙе *юлдаш* эҙләмәҫ —
Үлем тигән яуыз бар,
Шунан алыр ҡоном бар.

Миңә *юлдаш* булырҙай,
Яуҙа *ҡорҙаш* булырҙай
Бүләк бир, тип һорайым.
Ул бүләгең ни булыр —
Әйтсе, белеп китәйем.

Һомайҙың әйткәне:

Ауырлыҡта-тарлыҡта
Һиңә *юлдаш* булырҙай,
Күктә тыуып, күктә үҫкән,
Ерҙә тоҡом йәймәгән
Аҡбуҙ толпар бирәйем.

Айһылыуҙың Уралға әйткәне:

Һарысай тигән атым бар, –
Һыу теләһәң, һыу табыр,
Яуҙа *юлдашың* булыр...

Һомайҙың Аҡбуҙатҡа әйткәне:

Батырлығын һынапмы,
Матурлығын һайлапмы,
Береһен үҙең алаһың,
Үҙеңә *юлдаш* ҡылаһың –
Һиңә *иптәш* ир булыр,
Миңә һөйгән йәр булыр.

Аҡбуҙҙың Уралға әйткәне:

Етмеш батман ауырлыҡ
Күтәреп күккә сөймәгән,
Өс бармағы осонда
Төшөрмәйсе тотмаған
Кеше – батыр ир булмаҫ,
Шундай батыр булмаһа,
Миңә *юлдаш* булалмаҫ.

Уралдың йылан илендә әйткәне:

Бөтә йылан йыйылһын,
Кеше ейгән баштары
Бары ергә әйелһен, –
Барын турап бөтәрмен,
Кире кеше итәрмен.
Яуыз Үлем *юлдашы*,
Кешегә дошман *ҡулдашы*
Бөтә йылан-яуызды, –
Барын тар-мар итәрмен!

Ҡарттың Уралға әйткәне:

Был ҡыҙ батырҙан ҡот йәйгән,
Батыр ҡыҙҙан һөт имгән, –
Һиңә *тиңдәш* булыр ул,
Батырға әсә булыр ул, –
Тигәс, Урал тыңлаған,
Гөлостанды алған, ти,
Бер ҙур туй ҡылған, ти.

Дүрт батырҙың Яйыҡҡа әйткәне:

Урал атаңа бар әле,
Беҙҙең сәләм әйт әле:
Сара тапһын, терелтһен,
Үҙенә *юлдаш* булырлыҡ
Яуға сабыр ир итһен.

Гөлостандың Нөгөш улына әйткәне:

Атаң – Урал батырым,
Унан тыуған Нөгөшөм,
Батыр булып тыуғанһың,
Атаңа *ҡулдаш* булғанһың.
Мен толпарға һин, балам,
Атаңа *юлдаш* бул, балам!

Иҙелдең Уралға әйткәне:

«Атаң яңғыҙ булмаһын,
Дошман яуы еңмәһен,
Бар, атаңа *юлдаш* бул,
Яуға сабыр *ҡулдаш* бул», –
Тиеп әсәм димләгән,
Атаһыны эҙләгән
Иҙел тигән улың мин.

Айһылыуҙың Һаҡмар улына әйткәне:

Ҡараңғы төн яҡтыртҡан
Айҙан тыуған бала инем,
Әсәм һөйгән дана инем;
Шүлгәнгә дейеү биргәнгә,
Әсәм бер яҡ ҡапланы;
Шүлгәнгә атам биргәнгә,
Әсәм бер яҡ ҡапланы;
Ҡайғы баҫты йөҙөнө,
Миңдәр баҫты битене.
Көн дә йөҙө үҙгәрә,
Нуры кәмеп хурлана;
Элек *көндәш* булһа ла,
Ҡояштан ул нурлана.

Уралдың Шүлгәнгә әйткәне:

Бергә *юлдаш* булдым мин,
Яуҙа *ҡулдаш* тинем мин;
Ҡыҙ һайланың – буй ҡуйҙым,
Ат һайланың – яй ҡуйҙым,
Дан эҙләргә теләнең –
Теләгеңә буй бирҙем.

Уралдың уландарына әйткәне:

Яуызға *юлдаш* булмағыҙ,
Кәңәшһеҙ эш ҡылмағыҙ.

Эпостағы был һүрәтләүҙәр — тормошта һәр беребеҙгә төрлө осраҡтарҙа *юлдаш* һайлауҙа һабаҡ булырлыҡ миҫалдар. Шуға күрә был төшөнсәгә ҡарата мәҡәлдәр һәм әйтемдәр ҙә ифрат күп икән телебеҙҙә, уларҙы һанап сығыу уҡыусының иғтибарына хуш килер.

Юлдаш:
Аҡылдың *юлдашы* — бәхет;
Алйот *юлдаш* булмаҫ, ишәк *моңдаш* булмаҫ;
Арбалыға *юлдаш* булма, юрғалыға *юлдаш* бул;
Ат — егеттең *юлдашы*;
Атлы *юлдаш* арбалыға иш түгел;
Атлы йәйәүлегә *юлдаш* түгел;
Ауға барһаң зирәк бул, *юлдашыңа* терәк бул;
Ашты һеңгәс, маҡта, *юлдашты* белгәс, маҡта;
Берәү йәнгә *юлдаш*, берәү малыңа *юлдаш*;
Бүре һарыҡҡа, бай ярлыға *юлдаш* булмаҫ;
Ир үҙенән күрер, ирлекһеҙ *юлдашынан* күрер;
Ирҙең *юлдашы* ла ат, *моңдашы* ла ат;
Ир-егетте *юлдашына* ҡарап беләләр;
Ир-егеттең ике *юлдашы* бар: батырлыҡ һәм тәүәккәллек;
Йүнһеҙгә юлһыҙ *юлдаш*;
Йыланға *юлдаш* булһаң, ҡулың сағыр;
Йыр — кешенең *юлдашы*;
Кешене юл боҙмай, яман *юлдаш* боҙа;
Күңеле һуҡырға *юлдаш* булма, күҙе һуҡырға *юлдаш* бул;
Ҡараҡ менән *юлдаш* булма, ғәйбәтсе менән *серҙәш* булма;
Ҡатының — ғүмерлек юлдашың;
Ҡурҡаҡ менән *юлдаш* булма, көйһөҙ менән *моңдаш* булма;
Ҡурҡаҡты *юлдаш* итмә;
Һуҡыр күңелле әҙәмде *юлдаш* итмә, *юлдаш* итһәң, хаҡ юлыңда уңыш көтмә;
Тиле менән *тиңдәш* тә, *юлдаш* та булма;
Тыштан йыуаш, эстән шайтанға *юлдаш*;
Уғры менән *юлдаш* булма, ҡатын-ҡыҙ менән *серҙәш* булма;
Үҙ башыңды дауға бирһәң дә, *юлдашыңды* яуға бирмә;
Үҙеңдән *юлдашың* батыр булһын;
Һуҡырҙың күҙе — бармаҡ, *юлдашы* — таяҡ;
Юл *юлдашһыҙ* булмай;
Юлдашланмайынса кешене белеп булмай;
Юлдашлының юлы киң;

Юлға сыҡһаң, юлдашың үҙеңдән артыҡ булһын;
Юлға сыҡһаң, янып сыҡ, юлдашыңды танып сыҡ;
Юлға *юлдаш* алып сыҡ;
Юлда юлыҡҡан *юлдаш* булмаҫ;
Юлдан ҡал, *юлдаштан* ҡалма;
Юлдаш тапмаған юлынан яҙыр;
Юлдашы яманды яу алыр;
Юлдашың яман булһа, йыраҡ йөрөп төн ҡатма,
Ҡатының яман булһа, кеше алдында һүҙ ҡатма;
Юлы уңыр егеттең *юлдашы* сығыр алдынан;
Юрға менгән *юлдашынан* айырылыр,
Күп йәшәгән *ҡорҙашынан* айырылыр,
Күп һөйләгән дуҫынан айырылыр;
Юрғалы менән *юлдаш* булма, наҙан менән *серҙәш* булма;
Юрғалы менән *юлдаш* булһаң, юлда ҡалырһың;
Яҡшы йәнеңә *юлдаш*, яман малыңа *юлдаш*;
Яҡшы менән *юлдаш* булһаң — ирешерһең моратҡа,
Яман менән *юлдаш* булһаң — ҡалырһың һин оятҡа;
Яҡшы менән *юлдаш* булһаң — уңырһың,
Яман менән *юлдаш* булһаң — туңырһың;
Яҡшы менән *юлдаш* булһаң — шатланырһың,
Яман менән *юлдаш* булһаң — ҡартайырһың;
Яҡшы менән *юлдаш* булһаң — эшең бөтөр,
Яман менән *юлдаш* булһаң — башың китер;
Яҡшы *юлдаш* юлға күндерер;
Яман *юлдаш* юлдан дүндерер;
Яман айғыр өйөрөн яуға алдырыр,
Яман егет *юлдашын* дауға ҡалдырыр;
Яман менән *юлдаш* булһаң — ярға йығылырһың,
Яҡшы менән *юлдаш* булһаң — малға юлығырһың;
Яман *юлдаш* яу булыр, бөтә эше дау булыр;
Яман *юлдаш* яуға ҡалдырыр, яман бей дауға ҡалдырыр;
Яман *юлдаштан* яман таяҡ яҡшы;
Яман *юлдаштан* яңғыҙлыҡ яҡшы;
Яман *юлдашты* ярты көн һаҡла;
Яманға баш булғансы, яҡшыға *юлдаш* бул.

Кеше-ара мөнәсәбәтте атаусы башҡа терминдар осраған мәҡәлдәр һәм әйтемдәр ҙә бик фәһемле. Уларҙың да йөкмәткеһен һәм мәғәнәһен иҫәпкә алайыҡ.

Иптәш:

Аҡыллы үҙен ғәйепләр, алйот *иптәшен* ғәйепләр;

Алтау ала булһа — аулағаны китер,
Икәү *иптәш* булһа — аңдығаны китер;
Выжданлыға выжданһыҙ *иптәш* түгел;
Иплегә *иптәш* күп;
Иптәшең һуҡыр булһа, күҙең ҡыҫ;
Үҙең һәләк бул — *иптәшеңде* ҡотҡар;
Яҡын *иптәшем* киткәс, ҡанатым һынды.
Көндәш:
Ағай-энең бар ерҙә, «дошманым юҡ» тимә,
Апһының бар ерҙә «*көндәшем* юҡ» тимә;
Бер ҡатындың ире үлһә, ҡырҡ ҡатынға *көндәш* була, ти;
Көндәш күргәндең ҡыҙын алма;
Көндәшле өйҙә көн дә көйөнөс;
Көндәшлегә төн оҙон, көнләксегә көн оҙон;
Көндәштең көлө лә көндәш;
Көткәнгә көн оҙон, *көндәшлегә* төн оҙон;
Өйҙәш булғансы, *көндәш* бул.
Өйҙәш:
Аптыраш менән *йөҙәш* икәүһе кергән *өйҙәш*;
Өйҙәш — көндәш;
Өйҙәш көндәштән яман;
Өйҙәш менән торғансы, *көндәш* менән тор;
Өйҙәш өс көн торһа, өй минеке тиер;
Өйҙәш аҫырағаң — һүҙ сығыр, тауыҡ аҫырағаң — сүп сығыр;
Өйҙәш тә бер, *көндәш* тә бер: ҡысҡырыш та талаш;
Эт менән ҡоҙа булһаң, һөйәк менән туй итерһең,
Яман менән *өйҙәш* булһаң, яу менән көн итерһең.
Килендәш:
Ағай-эне татыу булһа, менергә ат етә,
Килендәштәр татыу булһа, ашарға аш етә;
Килен — *килендәшкә көндәш.*
Ҡорҙаш:
Атаһы *ҡорҙаштың* балаһы ҡорҙаш;
Дуҫты айырған — дау, *ҡорҙашты* айырған — яу;
Ҡорҙашыңа — түр башың.
Ауылдаш:
Ағай-эненең аты уҙғансы, *ауылдашыңдың* тайы уҙһын.
Күршеләш:
Күршеләш байың булһын, аҡһаҡ тайың булһын;
Ятҡа ҡол булғансы, *ерҙәшең, һыуҙашың* менән бергә бул.

Эргәндәге кешең ғүмерлек юлдашыңмы, йә булмаһа, ҡыҫҡа ваҡытҡа тәғәйенме – һәр осраҡта ла унының ыңғай тәьҫир, яҡшы өлгө бирерҙәйе хуплана. Ошондай кәңәш-ишара йыр һүҙҙәре менән аңға һеңдерелгән:

Ер еләккәйҙәре беште инде,
Муйылымды ҡайҙа ҡуяйым?
Аҫыл дуҫтар менән *ултырҙаш* булһаң,
Аҫыл аҫбат һүҙгә туяһың.

«Татыу йәшәүҙәр»

Ә инде киләһе йырҙа йырланғанса, дуҫ-иште баһалай белеү – һәр заманға ла яраҡлы ҡанун:

Ағиҙелкәй буйы, ай, һары тал,
Аҡ тирмәләр ҡороп йәйләргә.
Был донъяла яҡын дуҫың булһын,
Ҡаршы сығып атың бәйләргә.
Етегәнкәй етәү, илкәр бишәү,
Һарат менән Буҙат икәү.
Һарат менән Буҙат икәү кеүек,
Беҙ туғаным менән, ай, икәү.

«Һарат менән Буҙат»

Шулай итеп, халҡыбыҙ меңйыллыҡтар дәүерендә бөртөкләп йыйған тәжрибә-белемдәрен был осраҡта ла, йыйнаҡлап, һүҙҙәрҙә, мәҡәл-әйтемдәрҙә һәм йырҙарҙа төйнәп, һаҡлаған. Улар – ысын мәғәнәһендә һәр кемдең тормошона ҡағылышлы иҫкәртеү-киҫәтеүҙәр, тәрбиә ҡанундары. Өҫтә килтерелгән бөтә дәлилдәрҙе йомғаҡлап, тағы бер фекер өҫтәйек: туғанлыҡ һәм дуҫлыҡ-танышлыҡ терминдарына хас -даш/-дәш, -ҙаш/-ҙәш, -лаш/-ләш, -таш/-тәш ялғауҙарының нигеҙендә ятҡан **as** компонентының санскрит мәғәнәһе *(бар булыу, барлыҡҡа килеү; кемдекелер булыу, нимәгәлер сәбәпсе булыу)* берләшеүгә өндәүсе код итеп һалынған. Халҡыбыҙҙың тел байлығындағы был аҫыл һүҙҙәр, йышыраҡ ҡулланылып, берберебеҙҙе ҡәҙерләр, хөрмәтләр сара булып хеҙмәт итһен, кеше-ара мөнәсәбәттәрҙә һығылмалылыҡ, йомшаҡлыҡ, ихтирамлылыҡ билдәһе булып ҡалһын ине!

3. ЙОМҒАҠЛАУ ҺҮҘЕ

«Ысынлап та, Раббыңдың ҡеүәте ҡаты. Ул бит башлай һәм кире ҡайтара».

«Әл-Буруудж» («Әл-Бөрөж») сүрәһе, 85:12–13

Кешелек донъяһы тарихтың *инволюция* (матдилашыу, аң кимәленең түбән төшә барыу этабы), революция (бер хәлдән икенсеһенә күсеш-ҡыйралыш) кеүек осорҙарын тәжрибә өсөн кисерергә мәжбүр булған. Бына шул донъяның ғазаптары, алдаҡтары эсендә буталыуҙарҙан алйыған, миктәгән йән, хыялдарҙың буш ҡыуыҡҡа тиңлеген төшөнгәндән һуң, рухи ғәмәлдәргә тотонасаҡ, тормош мәғәнәһен ваҡытлыса оноттотор алдатҡыстар түгел, ә мәңгелек ҡиммәттәрҙе эҙләүгә тотонасаҡ. Тимәк, уның *эволюция* (аң күтәрелеше нигеҙендәге үҫеш) юлынан үтергә тейешлеге — тәбиғи хәл. Алтын быуат — Һыуғояр дәүеренә аяҡ баҫырға торғанда, Ер йөҙөндәге ҡайһы бер халыҡтар, булмаған ерлектә, буш урында мифтар тыуҙырып, йә булмаһа, башҡаныҡына ҡулын һуҙып, талаша-бүлешә ятҡанда, үҙебеҙгә яҙған рухи байлыҡтарыбыҙҙы барлап, уларҙың тәғәйенләнешен дөрөҫ ҡулланһаҡ, беҙҙең киләсәгебеҙ өмөтлө. Ә ул ҡиммәттәр ошондай көн тыуырын алдан хәстәрләгән аҡыл эйәләре тарафынан, түкмәй-сәсмәй һаҡланып, халыҡ ижадында: ҡобайырҙарҙа, мәҡәл-әйтемдәрҙә, әкиәттәрҙә, ҡурай моңонда, исемдәрҙә, ер-һыу атамаларында бөгөнгө көнгә килтереп еткерелгән!

Белеүебеҙсә, төрлө замандарҙа кешелек рухи һәләкәт алдында торғанда, шул афәттән алып сығыусы донъяуи диндәр береһе лә, унан алдағыһының үҙенсәлектәрен иҫәпкә алмай, буш урында барлыҡҡа килмәгән. Иң йәш һәм һуңғы дин тип һаналған Исламдағы Изге Ҡөрьән Кәримдә унан алдағылары Христиан һәм Иудаизмдағы пәйғәмбәрҙәр телгә алынһа, шул диндең башында торған Ғайса пәйғәмбәрҙең дә үҙ ваҡытында Һиндостанға барып, йога серҙәрен өйрәнеүе тураһында фараздар бар. Аҡыл эйәһе Гаутама ла, йога тәғлимәтен, төбөнә тиклем төшөнөп, бөтә баҫҡыстарын үтеп сыҡҡас, шул белемдәрен Будда диненең нигеҙенә башланғыс итеп һалған.

Әгәр шул донъяуи диндәрҙең сығанағы — йога тәғлимәте үҙебеҙҙең халыҡ ижадында ярылып ята икән, бына ҡайҙа ул

рухи байлыҡ! Дини ғилем өйрәткәнсә, ғүмер иткән кеше *тән* барын да беләә, *йән* барлығын да аңлай. Беренсеһе уның тупраҡтан яралтып бар ителгән, ғүмер итеп, донъя көтөп бөткәндән һуң йәнә тупраҡҡа әйләнә. Йән генә — мәңгелек. Ул бәндәгә Аллаһтың үҙ әмере менән уның үҙ *рух*ынан бер өлөш итеп бирелгән. Ошо тиклем рухи байлығыбыҙ була тороп, был һүҙҙе тиҫкәрегә уҡығанда килеп сыҡҡан «хур», «хурлыҡҡа ҡалыу», «хур булыу» кимәленә ҡалмайыҡ гәм алдында.

Кешелек цивилизацияһының башланғысында ижад ителгән эпостың төп геройы Урал исеменең мәғәнәһенә туҡталайыҡ хәҙер. *Донъя тәгәрмәсе* беҙҙе үҙ түңәрәге эсендә, фани донъя ҡуласаһы *Сансарала*, ҡат-ҡат уралтып, әйләндерер, уның сарында йәнебеҙҙе таҙартыр, рухыбыҙҙы сарлар, унан һуң ғына шул ҡоллоҡтан азат итер, тәүбулмыш хәлебеҙгә — Нур иленә ҡайтарыр, яҡтылыҡҡа сығарыр. «Урал батыр» эпосының маҡсаты һәм йөкмәткеһе — бына ошо юлды үтеү тураһындағы мәғлүмәтте һаҡлау. Был бөйөк әҫәр — кешенең аңына йоғарлыҡ, уның рухын юғарыға көйләр изге һүҙ. Йоға, йога — тимәк, аңыбыҙҙы Бөйөк Яҡтылыҡтың сығанағы менән тоташтырыу юлы. Был тәғлимәттең Күктәр тарафынан иң тәүҙә Урал батыр аша ата-бабаларыбыҙға күндерелгәнен танырға батырсылыҡ итәйек! Шунан һуң ғына йога тәғлимәте Уралдан күсеп китеүсе арийҙар аша Яҡын Көнсығыш илдәрендә таралып, донъяуи диндәргә сығанаҡ булып хеҙмәт иткән, аҙаҡҡы сиратта Һиндостан дәүләтенә алып барып еткерелгән. Беҙҙең өсөн гәзиздәрҙән-гәзиз *башҡорт (башҡурт, ҡурт), ҡурай, ҡор, ҡорҙаш, ҡәрҙәш* төшөнсәләре, шулай итеп, гәрәп телендәге ҡөрәйеш, Ҡөрьән, грек (эллин) телендәге *сакрум (ҡур һөйәге),* санскрит телендәге *куру* һүҙҙәре менән бер тамырҙан. Уларға, дөйөм алғанда, бер мәғәнәүи уртаҡлыҡ хас — Илаһтың ҡеүәтенән яралғанһың, шунан башланғыс алғанһың һәм шуға кире ҡайтырһың. *Ҡур-/кур-, ҡар-/кәр-, ҡор-/көр-, ҡыр-/кир-* өлөшсәләренә уртаҡ булған ҠР тартынҡыларын гәрәп алфавитына хас бер үҙенсәлек менән бәйләһәк, барыһы ла үҙ урынына тора. Мәғлүм булыуынса, унда һәр бер хәреф кешелек донъяһының төрлө кимәлдәге илаһи сфералар менән бәйләнешенә тап килә. Беҙҙе ҡыҙыҡһындырған ошо ике тартынҡыға тап килгән баҫҡыстарының әһәмиәттәре түбәндәгесә:

[ҡ] — донъяла бар булғандың, йәғни Аллаһтың ниәтенән барлыҡҡа килтерелгән бөтә нәмәләрҙең үҙ-ара бәйле булыуы;

[р] — берләшеү; йәғни бөтә бар булған нәмәләрҙең, мәхлүктәрҙең бер сығанаҡҡа, Илаһҡа — Бар һәм Бер Аллаһҡа ҡайтарылыуы.

Билдәле булыуынса, рухи ғәмәлдәре һөҙөмтәһендә бик күп ғәҙәти булмаған һәләттәргә эйә булған Ғабдулла Сәйеди, Зәйнулла Рәсүлев, Мөжәүир Сиражетдинов кеүек үҙ шәхестәребеҙ суфыйсылыҡ юлында аң күтәрелеше буйынса ошондай баҫҡыстар үткән тип фаразларға ҡала:

Үҫеш баҫҡыстары	Мәҡәмдең атамаһы[74]	Аңдың күтәрелешенең кимәле
6.	«әл-висаал»	Күктәрҙән Юғары донъяла Илаһ менән ҡушылыу, бер бөтөнгә әйләнеү, Яратыусы менән яратылыусының ҡушылыуы, тоташыуы
5.	«әл-ҡурб»	Аллаһы Тәғәләгә яҡынлыҡ (ҡурб — яҡынайыу; эргәгә килеү, күрше булыу, үҙ-ара мөнәсәбәткә кереү мәғәнәһендә)
4.	«әс-сирр»	Илаһи серлелек
3.	«әр-руух»	Саф рух
2.	«әл-ҡәлеб»	Йөрәк
1.	«ән-нәфес»	«Үҙ-үҙәк» (эго), «мин-минлек»

Ошо таблицанан аң күтәрелешенең бишенсе баҫҡысына тап килгән **«әл-ҡурб»** атамаһының мәғәнәһенә туҡталайыҡ. Был кимәлдә кеше аңы энергия — ҡеүәт (ҡур!) кимәлендә генә илаһи аңға яҡынайыуы, мөнәсәбәткә инә алыуы мөмкин икәнлеген аңлатып тороу кәрәкмәйҙер. Шулай булмаһа, алтай телендә лә мәғәнәһе ошоға тап килгән Ҡурбостан[75] һүҙе

---

[74] Рухи үҫеш барышындағы бер баҫҡыс, аңдың билдәле бер кимәлдә тотороҡло тороу урыны.

[75] Иноязычную лексику в алтайском языке, время ее появления и пути проникновения впервые отмечает Н. А. Баскаков и пишет в Приложении к Ойротско-русскому словарю, что высоко развитая культура древних уйгуров, связанная с культурой Индии, Китая, Ирана, оставила в уйгурском языке следы древних заимствований из санскритской, древнеиранской и китайской лексики, которая позже проникла через уйгурский язык в монгольский и алтайские языки. Ойрот: Курбустан — бог-небожитель равнозначен монг. Кормуста < ир. Ahura-mazda (Ормузд).

ҡайҙан килеп сыҡҡан? *Ҡур – кеүәт, бостан – баҡса* (был урында ожмах баҡсаһы, тип аңларға кәрәк) тип алһаҡ, *ҡурбостан, әл-ҡурб* һүҙҙәренең дә тамырҙары шул уҡ *ҡур* (сәбәп һәм эҙемтә, башлау һәм бөтөрөү, тамамлау).

Был һығымтаға килер өсөн бер генә таныҡлыҡ кәрәк: меңйыллыҡтар дауамында Ер йөҙөнә килеп киткән кешелек цивилизацияларына бирелгән барса донъяуи диндәрҙең дә сығанағы – Бар һәм Бер Аллаһ. Беҙ унан килгәнбеҙ һәм үҙебеҙгә тәғәйен юлды урап, ошо уралыш эсендә рухыбыҙ үҫешеп, **кире**[76] әйләнеп, уға ҡайтасаҡбыҙ. Был үҙе йогалағы *сәбәп-һөҙөмтә* бәйләнешенә тап килгән **донъя ҡуласаһы, донъя тәгәрмәсе, Сансара, карма, уралыш, әйләнеш, түңәрәк** төшөнсәләре менән бәйле юл. Йыһандың үҙеме, Ҡояш системаһындағы планеталармы, Ерҙең үҙ күсәре тирәләй әйләнешеме, молекулалар эсендә атом тирәләй хәрәкәтме – барыһы ла ошо ҡанунға буйһонған!

Урал батырҙың беҙгә ҡалдырған тәғлимәте – ошо юлды күрһәтеү, һәм ул кеше-ара, милләт-ара, дин-ара мөнәсәбәттәрҙә юғары кимәлдәге өлгө. Бынан тыш, Урал батыр, шәхес булараҡ, кем ул? Ошо һорауға яуап итеп, әйҙәгеҙ, уның төрлө кешелек сифаттарын ғүмер миҙгелдәренә ярашлы һанап үтәйек:

– үҙен уратып алған һәр объектҡа, күренешкә үҙ фекере, ҡарашы булған *үҫәрмән*;

– донъяны танып-белеүҙә кәрәкле мәғлүмәтте үҙ аллы табыуға һәләтле *эҙәрмән*;

– үҙе эйә булған белемде тормош шарттарында файҙаланыусы, бигерәк тә сетерекле хәл-ваҡиғаларҙа, ҡуллана белеүсе *беләрмән*;

– ҡалыплашмаған ижади фекерләү һәләтенә эйә *һөнәрмән*;

– кеше-ара мөнәсәбәттәрҙә мәҙәниәтле аралашыу оҫталығына эйә булып, һөйләшеү маҡсатын күҙ уңынан ысҡындырмай, башҡаларҙы иғтибар менән тыңлай һәм ҡабул итә

---

[7] Эллин телендә гиро – кире әйләнеп килеү, түңәрәк буйлап уралыу. Рус телендә круг һүҙенә тап килә. Башҡорт телендә был һүҙгә тамырҙаш *ҡороҡ* (синонимы элмәк) – иректәге малды тотоу өсөн ҡулланылған мәскәүле ҡолға; шул уҡ ҡармаҡтың, ҡармауҙың бер төрө.

Яңы ҡороҡ менән аттар тотоп,
Китә микән егет бер ҡайҙа? *(Халыҡ йыры)*

белгән, шул уҡ ваҡытта үҙ фекерен аныҡ итеп еткерә белгән *еңәрмән*;

– хаталаныуҙан ҡурҡмайса, маҡсатлы йүнәлештә ышаныслы эш иткән; яңылышҡан осраҡта хаталарҙың сығанағын асыҡлай, тикшерә һәм уларҙан фәһем ала белгән; артабан уларҙы булдырмау юлдарын таба алған *тиҙәмән*;

– ғәҙеллек өсөн көрәшеүсе *ҡаһарман*;

– социаль-әхлаҡи нормаларҙы үҙләштергән, яҡындарының һәм эргәһендәгеләрҙең ҡайғы һәм шатлыҡтарын уртаҡлашырға һәр саҡ әҙер булған, халҡының киләсәген ҡайғыртып йәшәүсе *көйәрмән*;

– башҡа милләттәрҙең ғөрөф-ғәҙәттәренә, мәҙәниәтенә ихтирамлы булған *уҙаман*;

– хис-тойғоһо тотороҡло, эске зауыҡлы, алдынғы ҡарашлы, күтәренке рухлы *иләймән*.

Шулай итеп, батырыбыҙ беҙҙең һәр беребеҙгә кеше һәм шәхес булып үҫеүҙең өлгөлө вариантын ҡалдырған түгелме?

Хеҙмәттә килтергән миҫалдар, дәлилдәр ярҙамында халҡыбыҙҙың донъяға ҡарашын, тарихи хәтерен телдән телгә, быуындан быуынға түкмәй-сәсмәй тапшырыу серен ваҡыт һынауҙарына бирешмәҫлек төрлө алымдар аша ғәмәлгә ашыра килгәненә тағы бер ҡат инанаһың. Ысын мәғәнәһендә, «боронғолар әйткән һүҙ китаптың эсендә лә түгел, тышында ла түгел»! Тел байлығы – беҙҙең иң ҙур байлығыбыҙ, милләтебеҙҙең тормош фәлсәфәһен, донъяға ҡарашын ҡәҙерләп һаҡлаусы аң-хәтер һандығы, ундағы ынйы-мәрйендәрҙе әле епкә теҙәһе лә теҙәһе!

Хөрмәтле милләттәштәрем! Ғүмерҙең ҡәҙерен белеп, донъя матурлығына һоҡланып, Раббының биргән ниғмәттәрен ҡулланып йәшәр өсөн генә тыумай кеше, тормошҡа үҙенән бер йәм өҫтәү өсөн дә тыуа. Эпоста Йәншишмә тип кодҡа һалынған уртаҡ рухи байлығыбыҙ булған, тик әлегәсә йәшенеп, быуылып ҡына ятҡан шул инештең саф тере һыуын йырып, ағыҙышып ебәреүҙә, йәғни бөйөк тәғлимәттең әле беҙ аңлап бөтмәгән мәғәнәһенә, асылмаған серҙәренә төшөнөү өсөн, бәләкәй генә өлөшөбөҙҙө керетә алһаҡ, алған белемдәребеҙ, туплаған тормош тәжрибәбеҙ, кеше булып йәшәүебеҙ аҡланыр ине тигән өмөттәмен.

ҠУЛЛАНЫЛҒАН ӘҘӘБИӘТ

1. *Аҙнабаев Р. Т. һ. б.* Тамырҙарыңды беләһеңме? Шәжәрә байрамдарын үткәреү буйынса ҡулланма. Өфө: Белая река, 2006. 64 бит.

2. *Алкин М.* Башҡорттоң йөҙ йыры. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1992. 272 бит.

3. *Байышев Ф.* Ҡөрьән Кәрим. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1992. 960 бит.

4. *Бейешев Ә. Ғ., Ишмөхәмәтов З.К. һ. б.* Башҡорт теленең һүҙлеге. 2 томлыҡ. М.: «Русский язык», 1993. 1-се том. 861 бит.

5. *Бейешев Ә.Ғ., Сөйәрғолов Н. Ә., Хисамов Ғ.А.* Ҡөрьән Кәрим. Өфө: Китап, 2009. 960 бит.

6. *Боцман Я.* Буддизм. Четыре благородных истины. М.: Изд-во ЭКСМО-Пресс; Харьков: Изд-во Фолио, 2001. 992 с.

7. *Виссарион.* Последний Завет. Повествование от Вадима. СПб: Изд-во Общества Ведической культуры, 1997. 294 с.

8. *Галлямов С.А.* Санскритско-башкирский словарь. М.-СПб., 2003. 308 с.

9. *Галлямов С.А.* Башкорды от Гильгамеша до Заратуштры. Уфа: Китап, 2005. 248 с.

10. *Галин С.* Тел асҡысы халыҡта. Башҡорт фольклоры: аңлатмалы һүҙлек. Уҡыу ҡулланмаһы. Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1993. 224 бит.

11. *Ғималова М.Ғ., Хөсәйенов Ғ.Б.* Туған әҙәбиәт // Урта мәктәптең 8 класс уҡыусылары өсөн дәреслек-хрестоматия. Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1993. 352 бит.

12. *Ғәләүетдинов И.Ғ.* Уйнайыҡ, дуҫтар, бергәләп. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1987. 128 бит.

13. *Дилмөхәмәтов М.И., Ишбирҙин Э.Ф., Мәксүтова Н.Х.* Башҡорт теленең диалекттары һүҙлеге. Рәсәй фәндәр академияһы Өфө Ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәте институты. Өфө: «Китап», 2002. 432 бит.

14. Древнетюркский словарь. Л.: Наука, 1969. 676 с.

15. *Камалов А.А., Камалова Ф.У.* Атайсал. Уфа: Башкирское издательство «Китап», 2001. 544 с.

16. *Камалов А.А., Шакуров Р.З., Ураксин З.Г., Хисматов М.Ф.* Словарь топонимов Башкирской АССР. Уфа: Башкирское книжное издательство, 1980. 200 с.

17. *Кирәй Мәргән һ. б.* Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1980. 416 бит.

18. *Кочергина В.А.* Санскритско-русский словарь. М., 1996. 895 с.

19. *Кочергина В.А.* Санскрит: учебник для высших учебных заведений. М.: Академический проект, 2007. 335 с.

20. *Күсимова Т. Х., Бикҡолова С.Ә.* Башҡорт исемдәре. Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 2005. 224 бит.

21. *Маршалл А.* Научно-популярное издание, том 2, Гиннес. Большая книга знаний. Тверь: ООО Издательство АСТ, 1997.

22. *Мюллер В.К.* Англо-русский словарь. 53000 слов. Изд. 17-е, испр. и доп. М.: Русский язык, 1978. 888 с.

23. *Петросян А.А.* и др. Башкирский народный эпос. Главная редакция восточной литературы. М., 1977. 518 с.

24. *Севортян Э.В.* Этимологический словарь тюркских языков (Общетюркские и межтюркские основы на гласные). М.: Наука, 1974. 767 с.

25. *Сергеева Т.* Будда, или Легенда о Разбуженном принце. М.: Русское энциклопедическое товарищество, 2002. 254 с.

26. *Нәҙершина Ф.* Башҡорт халыҡ ижады. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1980. 472 бит.

27. *Новиков М.П.* Атеистический словарь. М.: Политиздат, 1985. 512 с.

28. *Нафиков Ш.В.* А корни наши древние...: Избранное в 3-х томах. Т. I. Уфа: Ваӷант, 2009. 420 с.

29. *Нуриахметов А.М., Хизбулдина Д.И.* Башкирские, русские и английские пословицы и поговорки. Уфа: Китап, 2002. 96 с.

30. *Патрул Римпоче.* Слова моего несравненного Учителя (С предисловиями Далай-Ламы и Дилго Кхенце Ринпоче). Изд-е А. Терентьева. СПб., 2007. 608 с.

31. Священное Писание – Перевод нового мира. Издательство Broorlyn, New Qorr, U. S. A., 2008. 1787 с.

32. *Төпәев С.Х.* Башҡорт фамилиялары. Өфө: Китап, 2008. 512 бит.

33. Урал-Батыр. Башкирский народный эпос. Уфа: Китап, 2005. 296 с.

34. *Шакурова Ш.Р.* Башкирский народный эпос «Урал-батыр»: архивный первоисточник и его текстологический анализ. Уфа: Гилем, 2007. 386 с.

35. *Шах Идрис*. Суфизм. М.: Клышников, Комаров и К°, 1994. 446 с.

36. *Шәкүр Рәшит*. Исемдәрҙә — ил тарихы. Тикшеренеүҙәр, мәҡәләләр. Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1993. 256 бит.

37. Флор Десье. Свет Корана. Самопознание через Сахаджа-йогу. М.: Известия, 2010. 380 с.

38. *Әхтәмов М.Х.* Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре һүҙлеге. Өфө, 2008. 776 бит.

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Асыла барған серҙәр донъяһы 3

1. Инеш һүҙ. Рух – милләттең йәшәү көсө 7

2. Төп өлөш 10
   2.1. Буй етмәгән ергә – уй, ҡорал етмәгән ергә хыял етә 10
   2.2. Йыһанға өлгәштереүсе ете ҡапҡа 15
   2.3. Донъя – йоҙаҡ, асҡысы – белем 34
   2.4. Ҡурайы юҡтың өнө юҡ, өнө юҡтың көнө юҡ . . . 63
   2.5. «Урал батыр» эпосында йога тәғлимәте 74
   2.6. «Урал батыр» эпосы сюжеттары Ҡөрьән аяттарында 126
2.7. Халыҡ әйтһә, хата әйтмәҫ, хаҡ әйтер 159

3. Йомғаҡлау һүҙе 175

Ҡулланылған әҙәбиәт 180

Научно-популярное издание

ГИЗАТУЛЛИНА Рашида Хаевна

**ОТКУДА НАЧИНАЕТСЯ
РОДНИК ДУХОВНОСТИ?**

Фәнни-популяр баҫма

ҒИЗӘТУЛЛИНА Рәшиҙә Хәй ҡыҙы

**ЙӘНШИШМӘ ҠАЙҘАН
БАШЛАНА?**

Мөхәррире А. Р. Ғәлимова
Биҙәлеш мөхәррире А. Р. Мөхтәруллин
Техник мөхәррире Г. Р. Исхаҡова
Корректорҙары З. М. Камалова, А. Р. Исҡужина

Баҫырға ҡул ҡуйылды 07.10.13. Форматы 60×84 $^1/_{16}$. Офсет ҡағыҙы.
Мәктәп гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма таб. 10,69. Шартлы буяу отт. 11,16.
Иҫәп-баҫма таб. 7,66. Тиражы 1500 дана. Заказ 130508.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

Әҙер файлдарҙан баҫылды.

Башҡортостан Республикаһының «Белая река» нәшриәте
дәүләт унитар предприятиеһы.
450078, Өфө, Салауат Юлаев проспекты, 55.

Рәшиҙә Ғизәтуллинаның бала сағы Бөрйән районы Аҫҡар ауылы менән бәйле. Иҫке Собханғол мәктәбендә һигеҙ класты тамамлағас, 1972–1976 йылдарҙа Белорет педагогия училищеһында уҡый. 1977–1981 йылдарҙа Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтында белем ала. Хеҙмәт юлын Стәрлетамаҡ ҡалаһында башлай. Башҡорт халыҡ ижады, тарих һәм тел ғилеме, кеше исемдәре, ҡурай феномены һәм топонимика өлкәләрендәге эҙләнеүҙәре авторҙы иң бөйөк рухи байлығыбыҙ – «Урал батыр» эпосының серенә төшөнөрлөк тел асҡысына юлыҡтырҙы.

Откуда начинается родник духовности? Гизатуллина Р. Х.
9 785295 058806
Цена: 75.00 RUR за шт